# Ағиҙел

Өфө,
октябрь
2011

10(1062)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил ҠҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире),*
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаçары),
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 07.10. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 267 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0175.11.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баçма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятиеһында баçылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии
Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (10,1062)**

# БЫЛ ҺАНДА:


ШИҒРИӘТ

**Әхмәҙин Әфтәх.** Асыҡ ҡапҡа. Ш и ғ ы р ҙ а р. ..................................5
**Римма Ғәлимова.** “Мөхәббәттә үткән заман юҡ ул...”
Ш и ғ ы р ҙ а р. ..................................................................................12

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Шәүрә Шәкүрова.** Өфө вокзалы. П о в е с т ь. ..............................23
**Дилбәр Булатова.** Ҡунаҡ мунсаһы. Х и к ә й ә. ..............................47

*Ж. Ғ. Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл*

**Әнүр Вахитов.** Тос йөкмәткеле роман. ..........................................57
**Рәмзиә Бикәнәсова.** Ғалимдың шәхси фонды хаҡында. ...............70
**Зөһрә Кейекбаева.** Ебәрелгән һәм алынған хаттар. *Дауамы.* ......88

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

**Фәниә Ғәбиҙуллина**. Йырлы ғүмер *(Р. Ханнановҡа 80 йәш)*. .....115

ҠӘЛӘМДӘШТӘР ТӨҪӨ

**Ғайса Хөсәйенов**. Мостай Кәрим менән әңгәмәләрҙән. ..............119
**Мостай Кәрим.** К ө н д ә л е к т ә р. *Дауамы.* ................................128

ПУБЛИЦИСТИКА

*2011 – Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Эскерһеҙлек һәм мәкер. .....................................147
**Дамир Шәрәфетдинов.** Туйҙар әле үтмәгән... ............................165

РУХЫБЫҘ ТАМЫРҘАРЫ

**Ғәбделхаҡ Ҡашҡаров.** Ҡалмыҡ нәҫелдәре. ................................170
**Ишғәле Нурғәлиев.** Кеше булғың килһә, китап уҡы! .................177

ШАҢДАУ

**Рауил Бикбаев.** Аңлатма биреү кәрәк. ........................................181

МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨҺӨ

**Илдус Тимерханов.** „Уҙғандарҙан башҡа киләсәк юҡ“. ...............188

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПОЭЗИЯ

**Ахмадин Афтах, Р. Галимова**. *Стихи.*

ПРОЗА

**Ш. Шакурова.** Уфимский вокзал. *Повесть.*
**Д. Булатова.** В гостях. *Рассказ.*

*100 лет со дня рождения Ж.Г.Киекбаева*

**А. Вахитов.** Достойный роман.
**Р. Биканачева.** О личном фонде ученого.
**З. Киекбаева.** Отправленные и полученные письма. *Продолжение.*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**Ф. Габидуллина.** С песней по жизни *(80 лет Р. Ханнанову)*.

ЛИЦА ДРУЗЕЙ

**Г. Хусаинов.** Из бесед с Мустаем Каримом.
**Мустай Карим.** Дневники. *Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

*2011 – Год укрепления межнационального согласия*

**М. Хужин.** Бескорыстие и подлость.
**Д. Шарафутдинов.** Еще не пожар.

КОРНИ ДУХОВНОСТИ

**Г. Кашкаров.** Наследники калмыков среди нас.
**И. Нургалиев.** Книги формируют личность.

ЭХО

**Р. Бикбаев.** Требуется пояснение.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**И. Тимерханов.** Прошлое – это окно в будущее.

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА…

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Әхмәҙин
ӘФТӘХ

## Асыҡ ҡапҡа

*Бөрө менән Мишкә сиге,*
*Бирелә урман, ялан,*
*Алдарында асыҡ ҡапҡа,*
*Һәйкәл ул — хайран ҡалам!*

*Күпме һәйкәл күргәнем бар —*
*Батшаларға, батырға,*
*Ленин бабай хаттар яҙа*
*Фин ҡултығы — сатырҙа.*

*Күпме тапҡыр асҡаным бар*
*«Ҡапҡалар»ын* Нәжмиҙең.*
*Асыҡ ҡапҡа, онотолған*
*Бала сағым һин минең.*

*Ауылымда һәр бер ишек,*
*Асыҡ ине ҡапҡалар.*
*Үҙ итмәне, әгәр берәү*
*Ҡапҡаларын япһалар.*

*Тулҡынланып был минутта*
*Хәтер ептәрен һүтәм.*
*Һәйкәл-Ҡапҡа аша атлап*
*Мишкә еренә үтәм.*

---

*«Ҡапҡалар» — Назар Нәжми поэмаһы.

---

*Әхмәҙин Әфтәх (1947) Белорет районының Абҙаҡ ауылында тыуған. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Байтаҡ шиғри китаптар авторы.*

## *Аҡҡоштар киткән тимә*

Светланаға

*— Ҡисә генә бында ине, — тиеп*
*Ҡуҙәтәһең Шаҙы быуаһын,*
*Ҡараштарың берсә күҙгә күктең*
*Байҡап сыға йонсоу һауаһын.*

*Һылыу һеңлем,*
*Күрәм, был аҡҡоштар*
*Беҙҙе көтөп көтөк булғандыр,*
*Шағир халҡы аҡҡош табыр, тиеп*
*Көньяҡтарға юлдар алғандыр.*

*Борсолмасы юҡҡа, быңа ҡаурый,*
*Киткәндәргә сәләм юллайым.*
*Ниндәй аҡҡош янда тирбәлгәндә,*
*Шөкөр әйтеп риза булайым.*

## *Уралда ҡабынырмын*

*Бәргеләндем, һуҡҡыландым,*
*Туҙып та бөттөм инде.*
*Йөҙ йәшемдә үтер юлды*
*Мин күптән үттем инде.*

*Был донъяның бар серҙәрен*
*Үҙемә астым кеүек.*
*Булмаһам да, сит ярҙарға*
*Колумбтай баҫтым кеүек.*

*Хыял менән мендем күккә,*
*Төштөм диңгеҙ төбөнә.*
*Өмөт менән күпме баҡтым*
*Ил башлығы күҙенә.*

*Бер ни ерҙә үҙгәрмәне,*
*Күктә ҡояш, шул уҡ ай.*
*Бөтәһе лә фани бында,*
*Ярһып һандуғас һайрай.*

*Йәшәлгәне йәшәлгәндер,*
*Бер таңда абынырмын.*
*Башҡорт метеориты булып*
*Уралда ҡабынырмын.*

## Йөрәк

*Был йөрәкте әйтәм, һуңғы ваҡыт*
*Йыш-йыш ҡына сәнсеп ала.*
*— Ҡыкрәгеңдә мин дә бар бит, — тиеп*
*Көтмәгәндә һөрән һала.*

*Рәхмәт инде һиңә, быға тиклем*
*Ҡындәм генә ҡынгәнеңә.*
*Башбаштаҡлығымды ҡүрә тороп*
*Тиҫтә йылдар түҙгәнеңә.*

*Бына тағын ҡапыл сәпсеп алдың,*
*Иҫкәртеү тип һуңғы тапҡыр.*
*Унан бер кем кире ҡайта алмай,*
*Булһа ла бит юлдар таҡыр.*

*Һиҙәм бөгөн, йөрәк, әҙер тораң*
*«Теге яҡ»ҡа ҡайырырға.*
*Ҡырылмаһа ҡырҡ эштәрем ята,*
*Таптың ваҡыт шаярырға!*

* * *

*Талхина Динә Азат ҡыҙының яҡты иҫтәлегенә*

*Телефоным ҡуптән ойоп тора,*
*Ойоп тора сапсан йөрәгем.*
*Бәйгеләрҙән ҡалған арғымаҡтай,*
*Бер кемгә лә юҡ шул кәрәгем.*

*Һин генә бит, ижадташым минең,*
*Йөрәгемә һәр саҡ сәм һалдың.*
*Өмөт өҙөп башты эйер саҡта,*
*Һүҙҙәреңдән илһам, ғәм алдым.*

*Телефоным ҡуптән ойоп тора,*
*Оҙаҡҡараҡ китте көтөүҙәр.*
*Ете ғаләм арттарынан әллә*
*Юҡ микән ни ҡайтыр кисеүҙәр?*

*Ә мин көтәм һаман, телефоным*
*Уятыр ҙа бер көн шылтырап:*
*— Һөйөү тураһында шиғыр яҙ! — тип*
*Һин көлөрһөң кеүек сылтырап.*

## *Үтә тормош*

*Үтә тормош, үтә барыбыҙҙан,*
*Дуҫтарымды йолҡоп арабыҙҙан.*
*Ҡисә генә шаулы урман инек,*
*Ел-дауылға ҡаршы торған инек.*

*Бөгөн бына ҡалдыҡ һирәк-һаяҡ,*
*Уларҙа ла инде таяу-таяҡ.*
*Ҡоро ағас кеүек шығырлайбыҙ,*
*Белер-белмәҫ доға шыбырлайбыҙ.*

*Ауылыма ҡайтам, тиҫтерҙәрем,*
*Һеҙҙе уйлап яна бәғерҙәрем.*
*Юнир, Мәсғүт, Ҡадир, Ғәзиз, Хәйбулла,*
*Эх, көтһәгеҙсе мине ни була...*

*Текмә алдарында ҡараҫҡылай,*
*Япа-яңғыҙ хәҙер мин, бер малай.*
*Үтә тормош, үтә барыбыҙҙан,*
*Дуҫтарымды йолҡоп арабыҙҙан.*

* * *

*Тыныс ҡына йәшәп булмай,*
*Йәшәтмәйҙәр был илдә.*
*«Өҫтәгеләр» үҙ хатаһын*
*Өйәләр арыҡ иңгә.*

*— Демократия,— имеш,— беҙҙә,*
*Барыбыҙ ҙа азат! — ти.—*
*СССР-ҙа үткән ғүмер*
*Булған икән ғазап, — ти.*

*Ана, хәҙер ял итергә*
*Саҡыра Төрөк яры.*
*Кеҫә яғың ҡалын булһа,*
*Сығып кит, абзый, ары.*

*Спекулянт... Фу... Бизнесмендар*
*Бер аҙ ғына шаяра.*
*Уңай мәле сығыу менән,*
*Хаҡты унға ҡайыра.*

*Хөкүмәт тә ятып ҡалмай,*
*Һалымдар өҫтәп тора.*
*Буржуйҙарҙы түйҙырырға*
*Башҡаса, ти, юҡ сара.*

*Зәңгәр экран, гәзиттәрҙә*
*Күпме вәғәз, өгөттәр...*
*Бер үк миңә, пенсионерға,*
*Теймәгеҙсе, егеттәр!*

## Усаҡ яҡтым

*Көн йонсоуы тейҙе тәкәттәргә,*
*Усағыма утын өҫтәйем.*
*Бындай төндә йоҡо алмаҫ инде,*
*Өҫтәлемдә торһон аш-сәйем.*

*Әҙме илдә башын ташҡа ороп,*
*Маяҡ итеп хыял-өмөтөн,*
*Аяу-түнә юлдан атлағандар,*
*Булһа ла бит ерҙә ете төн.*

*Мин ҡабыҙған усаҡ яҡтыһына*
*Йә береһе шәйләп тартылыр.*
*Осҡон алып төнгө усағымдан,*
*Хыял-маҡсатына артылыр.*

*Ситтә йөрөгәндә булғаны бар*
*Үҙемдең дә ундай мәлдәрем.*
*Көндәре лә, ана, йонсоп тора,*
*Юлдағының беләм хәлдәрен.*

## Ҡыҫтылар

*Ғүмер буйы ҡыҫтылар...*
*Ҡатын ҡыҫты, эсмә, тартма, тиеп,*
*Һуңға ҡалма, «һул»ға йүгермә.*
*Теле әсе: «Эт тә үҙ хужаһын*
*Тешләй,— тине,— артыҡ һимерһә».*

*Ғүмер буйы ҡыҫтылар...*
*Эштә хужа, «өҫтән» төшкән нужа,*
*Һәр бер елгә өрҙө «һайт-һайтлап».*
*Аҡ йорттарҙың сыбар күрһәтмәһен*
*Баштар ҡата ине гел ятлап.*

*Ғүмер үтте шулай башты эйеп,*
*Япраҡтарҙай йылдар остолар.*
*Беҙҙе, ахры, онотмаһын, тиеп,*
*Пенсияһын, ҡәһәр, ҡыҫтылар*
*Елкәләге шилма ҡустылар.*

## Юғалған туҡталыш

Биттәремә бәреп юлдар еҫен,
Юл ғазабын, юлдар шатлығын,
Етеҙ ҡарлуғастай күк вагондар
Яндарымдан үтә атлығып.

Нисәнсе йыл инде ҡаңғырамын
Таба алмай кәрәк туҡталыш.
Диңгеҙ арттарына берәү бара,
Булһа ла бит юлы бик алыҫ.

Мин эҙләгән бөйөк туҡталыштың
Исемдәре ябай — СССР.
Карталарҙан йолҡоп ташланған ул,
Беҙҙең йәшлек иле, был осор.

Биттәремә бәреп юлдар еҫен,
Юл ғазабын, юлдар шатлығын,
Минһеҙ генә, ана, күк вагондар
Яндарымдан үтә атлығып.

* * *

Көс-ғәйрәтте бушҡа сарыф итеп,
Юҡҡа-барға ҡыҙып ҡабынма.
Шытыр орлоҡ бураҙнаға төшһөн,
Тос фекерең төшһөн ҡағыҙға.

* * *

Яңы йылдың ап-аҡ кисендә,
Иҫемдә, тип, әле иҫемдә,
Йәшлек дуҫтарымды барлайым,
Һеҙгә, тиеп, йырҙар йырлайым.

* * *

Дан-шөһрәткә ҡабынып,
Ерҙән осто айырылып.
Күктә шып-шым. Төштө кире
Ҡанаттары ҡайырылып.

* * *

Яраҡлашып инде йәшәп булмаҫ
Уңға-һулға сабып, ел ҡыуып.
Был илемдән миңә барлыҡ мираҫ —
Ҡулдарымда шартлар буш ҡыуыҡ.

* * *

*Донъяларын баҫкас күрсөк,*
*Уңъа-һулъа өрмәй көсөк.*

* * *

*Отолмайса ҡайҙа баш төртөргә—*
*Берәүҙәргә ауыр мәсьәлә.*
*Ә мин ҡалам ябай кешеләргә*
*Һөйөү тигән бөйөк фирҡәлә.*

* * *

*— Шиғырҙарың иллә тос! — тиһең,—*
*Күтәрәйек быға тост! — тиһең.*
*Йыш күтәреп дуҫтың тостарын,*
*Өркөтөлдө шиғыр тостарын.*

* * *

*Әй йәш саҡтар, донъя үҙгәртәм тип,*
*Уңъа-һулъа алйып сабабыҙ.*
*Донъя ниндәй, шулай ҡалды, тиеп*
*Әйтер хәҙер Әфтәх ағағыҙ.*

* * *

*Ямғыр үтте, йылы май ямғыры,*
*Морон төртә етеҙ ҡыяҡтар.*
*Ҡара ергә баҫып бабай бейей,*
*Өйҙә тороп ҡалған таяҡтар.*

***

*Йыл да шулай: яҙҙың һәр көнөнә*
*Ғашиҡ булып ах та ух киләм.*
*Был яҙым да, хыялдағы ҡыҙҙай,*
*Ымһындырып үтер, мин беләм.*

* * *

*Яҙғы күктең ҡупыр болоттарын*
*Ҡарап ятһаң инде, әй мәҙәк!*
*Минутына меңгә үҙгәрәләр,*
*Ҡыҙҙар кеүек еңел, елбәҙәк.*

* * *

*Үтте! Үтте сәскә ҡойондары,*
*Яҙ һылыуҙың байрам уйындары.*
*Бөгөн, киләсәккә төбәп күҙҙе,*
*Хәйерлегә юрап көтәм көҙҙө.*



**Римма**
**ҒӘЛИМОВА**

**Мөхәббәттә үткән заман юҡ ул,**
**Мин ышанам шуға, кешеләр!**

## *Социаль статус*

*Ҡарынымда ята балам,*
*Күңелем шуға балҡый:*
*Мин тағы ла бер кешегә*
*Арттырам һине, халҡым!*
*Тулы ғаиләлә балалар*
*Бер-икенән артманы,*
*Армияны ла тултырҙы*
*Яңғыҙ әсә ҡалҡаны.*
*Донъя йөгөн улар тартты*
*Бөтә замандарҙа ла.*
*Алғы һыҙыҡта булдылар*
*Яу яландарында ла...*
*Эх, замана! Заман йөгөн*
*Үҙемсә тартып киләм,*
*Атай хәстәрлектәрен дә*
*Елкәмә тейәп еләм.*
*Ситтән генә ҡарап йөрөр*
*Балаһының үҫкәнен.*
*Быныһын да үҫтерермен,*
*Етер әле көс-кәрем.*
*Ғаиләһендә өлгө бит ул*
*Баламдың атаһы ла.*
*Бер үк күктең аҫтарында*
*Таңдарҙың атаһы бар...*

---

*Римма Ғәлимова (1963) Ишембай районының Йәнырыҫ ауылынан. Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлай. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*
*Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй.*

*Ҡояштың батаһы бар.*
*Тик һөйөү генә мәңгелек,*
*Һәр кемдең ҡартайғанда*
*Йәшлеккә ҡайтаһы бар,*
*Үкенеп ятаһы бар...*

## Ҡыҙым монологы

*Әтей! Һине үлеп яратҡанға*
*Ер йөҙөндә яңғыҙ әнейем...*
*Ул илаған саҡта мин дә бергә*
*Һинең юҡлығыңа әрнейем.*
*Донъя булғас, барҙыр ауырлыҡтар,*
*Яҙҙар етһә, ирей ҡарҙары.*
*Әнейемде һөйһәң-һөймәһәң дә,*
*Һин онотма Ерҙә мин барын!*

## Миҙгелдәрҙән миҙгел

*Мөхәббәткә тулы йөрәгемдән*
*Нәфрәттәре ҡайҙан сығалыр?*
*Вулкан һымаҡ йәнем ҡабарғанда,*
*Һинең һалҡынлығың йығалыр.*
*Һыуыҡ ҡыштан, әллә йән өшөүҙән*
*Туңған йөрәгеңде йылытам,*
*Мөхәббәттән нәфрәт көслөрәкме?*
*Аҙаҡ үкенестән ҡыл йотам.*
*Ымһындырған көслө ҡосағыңа*
*Донъя бушлығынан йәшенәм,*
*Миҙгелдәрҙән миҙгелдәргә күсеп,*
*Һинең менән генә йәшәнем.*
*Тормош менән йәшәү араһында*
*Айырмалыҡ бар шул белгәнгә.*
*Йөрәгеңә ике донъя һыя —*
*Елдән етеҙерәк елгәнгә...*
*Ир намыҫы — ил намыҫы булып*
*Атҡа атланғанда яу сапҡан.*
*Әлмисаҡтан бирле яңғыҙ ҡатын*
*Муйынына уның бау таҡҡан.*
*Шунан бирле ике донъя йөгөн*
*Иңдәрендә тарта бер үҙе.*
*Никахлыһы эсен бошорғанда,*
*Хуп күрә ул һулға йөрөүҙе.*
*Һуңлап ҡына һулға килгән йәрем,*
*Һин ҡалдырып киткән йылы ут*
*Яҙы-наҙы менән донъя йәмләй,*
*Һинең төҫөң, һинең силуэт.*
*Беҙҙе иң шаңҡытҡан ысынбарлыҡ*
*Ҡалған ғүмеремә етерлек,*
*Ҡосағымда уртаҡ сәскә — ҡыҙым,*
*Миҙгелдәрҙән миҙгел көтөрлөк!*

## *Әсәйемә*

*Балаларын үстергән ул,*
*Ирен дә тота белә –*
*Кәрәктә кәйеф күтәреп,*
*Асыуын йота белә.*
*Һәләт бит ул донъя көтөү*
*Әлеге замандарҙа,*
*Үҙе тырыш, үҙе маһир*
*Йөрәге – балаларҙа.*
*Яңынан өләсәй булғас,*
*Хәстәрлектәре арта.*
*Ҡулдарына күҙ эйәрмәй,*
*Донъя йөктәрен тарта.*
*Көтөп алған ейәнсәре*
*Өйө түрҙәрен биҙәй,*
*Әсәйем йүгереп йөрөй,*
*Ҡартлыҡ килгәнен һиҙмәй.*
*Минең мөҡәддәс бурысты*
*Үҙ иңдәренә алды,*
*Бөтәбеҙҙе таң ҡалдырып,*
*Әсәйгә һәйкәл һалдым.*
*Әсәкәйем бөтөрөлөп*
*Йән-фарман түгә көсөн,*
*Ҡайырылған яҙмышымды*
*Ҡабат үҙгәртер өсөн.*

## *Ғүмер көҙө*

*Сыңрау торна зары ҡолағымда–*
*Үткән ғүмерҙәрҙең шаңдауы,*
*Ирек көсәп осҡан бөркөттөң дә*
*Ҡаяларҙа ҡалды саңҡыуы.*
*Күлдә йөҙгән яңғыҙ аҡҡоштоң да*
*Һыуһын ҡандырырға хәле юҡ.*
*Баш юғалтып ғашиҡ булыр инем,*
*Әмәлем бар, әммә мәле юҡ.*
*Күңел төпкөлөндә ятҡан йәрем*
*Аҙашып та Себер киткән бит.*
*Донъя малын әрһеҙ ҡыуа торғас,*
*Ғүмеркәйе ситтә үткән бит.*
*Үҙ йәренән артҡан бәндә булғас,*
*Иҫтәренә мине төшөрә.*
*Сит тарафтың ажғыр әсе еле*
*Форсат бирәлер шул өшөргә...*
*Үткән ғүмер онотолған инде,*
*Яңы һулыш алып йәшәйем.*

*Тормошомдоң тап-тар юлдарына*
*Сәскәләрҙән һуҡмаҡ түшәйем.*
*Таҡыр һуҡмаҡ буйлап сәфәр сығам,*
*Һүҙҙәр менән һүрәт төшөрәм,*
*Мөхәббәттә үткән заман юҡ ул,*
*Мин ышанам шуға, кешеләр!*
*Яҙы-наҙы менән килгән һөйөү*
*Ҡабатланып тора йыл һайын,*
*Ғүмеремдең көҙө еткәндә лә,*
*Шатлыҡ йәштәренән илайым.*

## *Донъя буталыштары*

*Бөтә донъя буталғанмы?*
*Алланан да ҡурҡмайҙар.*
*Ҡыҙҙарҙы көсләп китәләр,*
*Малайҙарҙы туҡмайҙар.*
*Хөкөм дә юҡ, яза ла юҡ —*
*Вәхшиҙәр йөрөй бирә,*
*Яуап тотоп, төрмәләргә*
*Ултырғандары һирәк.*
*Аҡса заманы боҙҙо бит:*
*Намыҫтар ҙа һатыла.*
*Мәңге юйылмаҫ гонаһтар*
*Бәғерҙәрҙе ҡатыра.*
*Ышаныс юғала бара*
*Хөкөм, хакимдарға ла,*
*Донъя буталыштарынан*
*Бөйөк илдәр тарҡала.*

## *Таң ата*

*Балконымды асып ҡуям,—*
*Ҡояш керһен донъяма.*
*Билдәһеҙлек ҡараңғы шул:*
*Йөрәгемдә ут яна.*
*Юҡлығына күнегелде*
*Өҙөлөп һөйгән йәремдең.*
*Өҫтәмә көстәр алырмын*
*Тупрағынан еремдең.*
*Тыуған ерҙең ҡәҙере арта —*
*Ол(о)ғайыуым ошолор.*
*Күктәрҙә аҙашып йөрөй*
*Кемдең бәхет ҡошолор.*
*Шул ҡош һымаҡ, яңғыҙ янам,*
*Һынды тағы ҡанатым.*
*Шәфәҡ һүнде, ҡояш батты,*
*Тулғаҡ тотоп таң ата.*

## Үкендерә

*Әйтерһең дә, ваҡыт туҡтап ҡалды*
*Һин ҡускәндән бирле баҡыйлыҡҡа...*
*Ғүмер кире ҡайтмаҕанын беләм,*
*Юҡһынамдыр, ахыры, аҡыл юҡҡа.*
*Булмаһаң да янда, ситтән генә*
*Сәм биргәнһең, өмөт саткыһылай,*
*Һин китерҙе генә көткән һымаҡ,*
*Дуҫы, дошманы ла шат ҡайһылай.*
*Ҡәҙерҙәрең артты үлгәс кенә,*
*Инәлткәнем өсөн үкендерә.*
*Мәңгелеккә күстең көмөш түйҙа —*
*Шул көндермәй мине, һүгендерә.*
*Кемдең кем икәне иңдәреңә*
*Ҡайҕы төшкәс кенә беленә шул.*
*Офоҡтаҕы шәфәҡ нурҙары ла*
*Таңдар атҡас ҡына күренә шул.*

## Ил инәһе

Шағирә Зөбәржәт Йәнбирҙинаға 62 йәш тулғанда

*Ил инәһе булдың күптәргә һин, —*
*Әллә күпме зарҙы тыңланың.*
*Иңдәремә ҡайҕы төшкән саҡта,*
*Мин дә һиңә килеп иланым.*
*Остоҡ хәтлем генә шатлыҡтарҙы*
*Онотҡансы ҡат-ҡат һөйләнек.*
*Һинең аҡылыңды тота торҕас,*
*Инде яҙмышты ла көйләнек.*
*Ярҙамыңды тойоп йәшәгәндәр*
*Йыйылҕанбыҙ һине ҡотларҕа,*
*Упҡындарҙан тартып сыҕарҕан һин,*
*Һалыусы ла ҡабат уттарҕа.*
*Дөрләп янҕан өйгә инеүсе лә*
*Өйөрҙәргә ҡаршы барыусы.*
*Һин булдың бит үҙеңдән дә алда*
*Башҡаларҕа юлдар ярыусы.*
*Шул юлдарҕа күпме аҡ сәстәрең,*
*Беҙҙе уйлап, илап ҡойолдо.*
*Яуҕан ямҕыр тәбиҕәттең әйтер*
*Рәхмәттәре булып тойолдо.*
*Тыуҕан көнөң һиңә рәхмәт яуа:*
*Ҡалҕан ғүмереңә етерлек.*
*Һин ҡабыҙҕан уттар ер йөҙөндә*
*Килер быуындарҕа етерлек.*

## *Көҙ*

*Көҙгө елдәр, ямғыр теләгәндәй,*
*Һыҙғыра ла ярһып һыҙғыра,*
*Дауыл һымаҡ, зәһәр асыуланып,*
*Меҫкен талдың сәсен туҙҙыра.*
*Иламасы, талҡай, ҡоймасы һин*
*Ҡыҙ йәштәрең — һары япраҡты,*
*Ямғыр яуып еүешләнгән япраҡ*
*Дымландырып бөткән тупраҡты.*

## *Балаҡайым*

*Һөйөүемдең үлсәмдәрен*
*Үҙең үлсә белгәнеңсә,*
*Мин күтәрмәм һине, йәнем,*
*Ғүмер буйы, үлгәнемсә.*
*Һинһеҙ генә таңдар атыр —*
*Ҡуйыныңда кемдәр ятыр,*
*Мин белмәмен: иртәләрен*
*Һине үбеп кем уятыр?*
*Ләкин беләм бөгөндән үк:*
*Ҡарынымда һинең балаң —*
*Мөхәббәттән яралған ул,*
*— Ташлама, — тип мин ялбарам.*
*Балам хаҡы — Тәңре хаҡы,*
*Мәңгелеккә күтәрермен.*
*Ауырлыҡты, яңғыҙлыҡты*
*Һинһеҙ генә үткәрермен.*
*Үпкәләмәм, үкенмәм дә,*
*Балаҡайым — һинең дауам,*
*Сабый ҡосҡан әсә булып,*
*Мин донъяға ҡабат бағам.*

## *Һөйөү дауамы*

*Ят ерҙәргә ишән йөрө, йәнем,*
*Беҙҙең барлыҡты ла онотма.*
*Минән артыҡ бер кем һөймәҫ һине,*
*Яңы мөхәббәткә юлыҡма!*
*Өрөп ҡап һин бөтә нәмәне лә,*
*Керер алда уйла сығырҙы,*
*Яҙмыштар бит көсләп сыныҡтырҙы,*
*Ысынбарлыҡ беҙҙе һындырҙы.*
*Юғалтҡылар килмәй, тик нишләйем?*
*Иларға ла миңә ярамай.*
*Ҡарынымда йәне кергән балам*
*Йөрәгемде генә яралай.*
*Ҡиткәнеңдә үкһеп ҡалғым килмәй —*
*Йәйге ямғыр шулай яуамы?*
*Һин ҡалдырған бүләк — тыуыр ҡыҙым —*
*Ҡабатланмаҫ һөйөү дауамы.*

## Күнегәм

Кеше бәхетен тартып ала күрмә,
Бәхетһеҙлек шунан башлана...
(Йырҙан)

*Ҡыҙғанам кемдеңдер бәхетен,*
*Алырға етмәҫтер баҙнатым,*
*Сәскәләй ҡыҙыбыҙ тыуһа ла,*
*Мин һиңә бары тик наҙ-ҡатын.*
*Тынғы юҡ йәнемә һин юҡта —*
*Бер йондоҙ алыҫтан күҙ ҡыҫа,*
*Яҙмыштар буталған донъяла*
*Илаһи бәхеткә күҙ ҡыҙа.*
*Күҙ ҡыҙа, тик ҡулдар үрелмәй*
*Буй етмәҫ тауҙарҙың үренә...*
*Ҡыҙымды ҡосаҡлап йәшәргә*
*Мин яйлап күнегәм, күнегәм.*

## Хирург

*Ышанысты арттыраһың*
*Тәүәккәл һөйләшкәндә,*
*Күпме ҡөҙрәткә эйәһең*
*Шәфҡәтлек өләшкәндә.*
*Өмөтләнеп ҡарай күккә*
*Күҙҙәре асылғандар.*
*Тән йәрәхәттәре менән*
*Йәне лә баҫылғандар.*
*Ҡулдарыңдың шифалығы,*
*Тылсымы һирәктәрҙә;*
*Һин терелткән кешеләрҙең*
*Рәхмәте йөрәктәрҙә.*

## Мәңгелеккә

*Ихласлығым менән алдырҙыммы?*
*Тоғролоғом хайран иттеме?*
*Үҙең генә белгән тормошоңдо*
*Минең булмыш байрам иттеме?*
*Уртаҡлыҡ юҡ беҙҙең яҙмыштарҙа,*
*Йәндәр ике ярҙан тартылды.*
*Язғы ташҡын һымаҡ ярһып һөйөү*
*Йылғаларҙы йырып артылды.*
*Артылды ла, ҡабат кире ағып,*
*Тарихтарға инеп юғалды.*
*Тыуған сабыйыбыҙ менән бергә*
*Киләсәккә табан юл алды.*

## Бәхетле беҙ

*Сал тарихтар төпкөлөнән килә*
*Яҙмыштары халыҡ, милләттең,*
*Ил башлығы йөктө үҙе тартҡас,*
*Бәҫе арта рухи ҡиммәттең.*
*Хеҙмәт тырышлығы берләштерә —*
*Ваҡыт һынауында сыныҡтыҡ.*
*Беҙҙең хеҙмәттә лә күренәләр*
*Сағылышы ватансылыҡтың...*
*Иркен һулап, ғорур һөйләшәбеҙ*
*Тыуған илдә башҡорт телендә,*
*Сикһеҙ бәхетле беҙ йәшәгәнгә*
*Бәрәкәтле башҡорт ерендә.*
*Күктәр аяҙ, күңел күтәренке —*
*Һәммәбеҙҙе ҡояш иркәләр.*
*Башҡортостан тигән илем барҙа,*
*Ышанıслы тыуа иртәләр!*

## Былай ҙа аңлашыла

*Донъя малын бүлешә алмай*
*Батшалар алмашына,*
*Ярлы халыҡ ярлы инде —*
*Былай ҙа аңлашыла.*
*Күңел күктәргә олғаша*
*Байрамдар еткән һайын,*
*Быйыл да үлмәй ҡалырға*
*Табырбыҙ әле яйын.*
*Коммунизм еткерә алмай,*
*Киттек АҠШ юлынан,*
*Дөрөҫ йәшәлмәгән, тиеп*
*Үкенмәйек һуңынан.*
*Терһәкте тешләп булмай бит,*
*Аҡланмаһа көткәндәр:*
*Нисә быуат фәҡир халыҡ*
*Байҙарға бил бөккәндәр.*
*Һаман шулай ҡабатлана:*
*Батшалар алмашына,*
*Халыҡ иҫәп өсөн генә —*
*Былай ҙа аңлашыла.*

## Егерме йыл

*Һуңғы егерме йыл ирешкәндәр*
*Яулап алған азат тормошмо?*
*Беҙ йәшәгән алтын осорҙарҙың*
*Даны быуаттарға торошло.*

*Күңел күҙе барыһын да күрә —*
*Нисек илдең сәскә атҡанын,*
*Шәжәрәләр менән нағышланып*
*Кешеләргә иман ҡайтҡанын.*
*Асфальт юлдар биҙәй тыуған яҡты,*
*Икмәк еҫе йылы өйҙәрҙә...*
*Ҡурай моңдарына бейей ҡыҙым*
*Йөрәктәрҙән сыҡҡан көйҙәргә.*
*Тағы егерме йыл мул тормошта*
*Йәшәремә камил иманым.*
*Башҡортостан — күркәм Ер шарында*
*Ер кендеге һымаҡ донъяның.*

## Өмөт

*Өйөм ҡаршыһына йорт һалына,*
*Ымһынып та ҡарап торамын.*
*Машиналар тулған ихатала*
*Тығыҙлана бара урамым.*
*Кемдер бәхетенә яҙғандыр, тим,*
*Йылдар буйы көткән фатирҙар?*
*Миңә тейеш сиратымды боҙоп,*
*Бушлай юҡ бит, кемгә һатырҙар?*
*Хаҡын түләр өсөн ғүмер етмәй,*
*Баш тартамын иркен фатирҙан.*
*Мөхәббәттән сатыр ҡороп булмай —*
*Фатирымды ҡорам сатырҙан.*
*Ни саранан бисараға ҡалдыҡ?*
*Эшләмәгән эштәр ҡалманы.*
*Ил терәге булыр саҡтарымда*
*Хәйерселек уты ялманы.*
*Халҡымды ҡол иткән, бөлгән илдә*
*Урман урлаған бар — бүре юҡ.*
*Күктән көтөп, ерҙән алырҙар бар,*
*Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ.*
*Өйөм ҡаршыһына йорт һалалар,*
*Өмөтләнеп ҡарап торамын:*
*Бер бүлмәһе миңә яҙһа икән*
*Таштан нигеҙләнгән бураның.*
*Фатирҙарға кемдәр хужа булыр,*
*Аҡсалылар йәки ҡасаҡтар?*
*Илде, ерҙе килмешәктәр баҫа —*
*Башҡорт менән тулған ятаҡтар,*
*Йәштәр менән тулған ятаҡтар.*

## *Мин табынам*

Я пью за разоренный дом,
За злую жизнь мою...
**А.Ахматова**

*Көнөл асам күз йәштәрен йотоп,*
*Байрам көндә иҫкә төшкәндә,*
*Мин йырлайым тубығымдан батып*
*Тормош һаҙлыҡтарын кискәндә.*
*Һыйынамын ярһыу ҡаяларға,*
*Саҡырғанда яҙғы шаңдауҙар.*
*Эх, ғүмерҙең изге минуттары —*
*Үҙ-үҙеңде һуңлап аңлауҙар...*
*Абындырған тормош юлдарымда*
*Һинле таңдарыма табынам...*
*Үткәндәрҙән һине эҙләп алып,*
*Донъя көтөр булам яңынан,*
*Хыялыма күптән ҡарҙар яуған —*
*Ә мин — иҫәр һине һағынам.*

## *Һуңғы һөйөү*

*Миңә яҙған йәр түгелһең, беләм,*
*Юғалтаһым килмәй һис ҡасан;*
*Һин булғанға Ерҙә яңғыҙ түгел,*
*Мин дә парлыларға тиң баҫам.*
*Ике утта яныуҙары һиңә*
*Миңә ҡарағанда ҡыйындыр...*
*Һин уны ла, минән биҙгән саҡта,*
*Иркә наҙҙарыңа ҡойондор.*
*Икебеҙ ҙә тигеҙләштек инде:*
*Мин дә һинең балаң әсәһе.*
*Һин тултырған бәхет бәллүренең*
*Миңә төбөн генә эсәһе...*
*Һинән ҡалмаҫ өсөн башҡаларға*
*Көтөүҙәрем, яныып-көйөүем —*
*Һин бит минең серле донъяларҙа*
*Керһеҙ генә һуңғы һөйөүем.*

## *Йәшәлмәгән ғүмер*

*Әйләнәм дә һиңә кире ҡайтам,*
*Яңғыҙлығым мине арытҡас.*
*Таныш-белеш беҙҙе танымаһын,*
*Сит яҡтарға мине алып ҡас!*
*Кинолағы кеүек ҡултыҡлашып,*
*Көнләштереп яп-ят урамды,*
*Офоҡтарға табан атларбыҙ тип,*
*Әкиәт тиреһенә урандым.*
*...Иблис ҡаны миңә кемдән күскән?*
*Хәтәр өйрәнелде алдарға.*
*Имеш-мимештәрҙән иплән ҡорған*
*Бәхет түңкәрелде алдарға.*
*Бөртөкләп тә уны йыйыр инем —*

*Шыуып төшә еүеш ҡулымдан,*
*Сөнки, Хоҙай бәхет өләшкәндә,*
*Ҡара бесәй үткән юлымдан.*
*Гәлсәр бәллүремә бер тултырып,*
*Алйыҡансы шарап эсәйем.*
*Яңы йылға фәҡәт һинең менән*
*Етәкләшеп бергә күсәйем.*
*Сөнки ҡаурый һәйкәл һалып ҡуйҙым*
*Һине урлап үткән быуаттан.*
*Яңғыҙлыҡтан тамам туйҙым, туйҙым –*
*Унда һине кемдер юғалтҡан.*
*Көндәшемме, әллә мин үҙемме –*
*Бына йомаҡ, йәгеҙ, кем сисә?*
*Ир иткән дә ҡатын, ер иткән дә,*
*Тимәк, ер кендеге – ул бисә.*
*Улай тиһәм, ауылсараҡ инде,*
*Ҡисермәҫтер мине бер сәсән.*
*Ауыл һөйләшендә мәғәнә бар –*
*Гонаһтарға тулған Ер-Әсә.*
*Набат ҡағам, ҡолаҡтарҙа – дауыл,*
*Ажарланып буран ажғыра.*
*Ҡабат тыуам, аҡ биләүҙә ятам –*
*Бәхет бирегеҙсе аҙ ғына?!*
*Мин Хоҙайҙан тәхет баҙнат итмәм*
*Йәшәгәнем өсөн кисә генә.*
*Мин Алланан бәхет талап итәм*
*Йәшәлмәгән ғүмер иҫәбенә.*

## Яҙмыш

*Меҫкенләнеп, мөшкөлләнеп*
*Ҡартая бара ирҙәр,*
*Өҫтө-башы йолҡошланған,*
*Бар яҡлап та фәҡирҙәр...*

*Йәш саҡта беҙҙе илатҡан*
*Егеттәр хәҙер ҡайҙа?*
*Ҡителгән бәғеркәйҙәрен*
*Йәлләүҙән ниндәй файҙа?*

*Донъя баҫҡандыр, күрәһең,*
*Һайлаған яҙмыштарын,*
*Мине һанға һуҡмағандың*
*Ҡисерәм «ялғыш»тарын.*

*Күңел бөтөнлөгө менән*
*Донъяны күтәп ҡара,*
*Таяҡ таянған бер бабай*
*Урамдан үтеп бара...*



**Шәүрә ШӘКҮРОВА**

# ӨФӨ ВОКЗАЛЫ

## ПОВЕСТЬ

1

Поезд һелкенеп ҡуйҙы, шунан, ҡуҙғалырғамы-юҡмы тип икеләнгәндәй тора бирҙе лә, ниһайәт, запас юлдан Өфө вокзалының перронына табан тәгәрләне. Уның иң һуңғы вагонында ун туғыҙ йәшлек Шәүрә тигән ҡыҙ ашығаашығ алһыу йомшаҡ таҫтамалға һөртөндө лә ҡалаҡ һөйәктәре сосайып сығып торған ҡаҡса тәненә хаки төҫөндәге күлдәк менән юбка кейеп алды. Был хәрби күлдәкте ул ҡышҡыһын Мәскәүгә барғанында Калинин проспектындағы ике ҡатлы ҙур «Военторг» магазинында һатып алғайны. Ул бында Ҡыҙыл майҙанды эҙләп йөрөгәндә аҙашып барып сыҡты. Метрола «Ленин исемендәге китапхана» туҡталышынан ҡапма-ҡаршы яҡҡа киткән дә барған. Универмагтың бормалы баҫҡыстары, алтын ялатылған барельефтар, йөҙөм тәлгәштәре рәүешендәге мөһабәт гәлсәр люстралар – уның быға тиклем шул тиклем зиннәтте бер ерҙә лә күргәне юҡ ине. Хатта ҡайһы берҙә самаһыҙыраҡ булып киткән был байлыҡ уны хайран итте, һушын алды. Бындай урында берәй нәмә һатып алмайынса сығыу үкенес булыр ине. Тик һәр ерҙә лә хәрбиҙәр өсөн генә кейем-һалым һатыла. Аптырап йөрөй торғас, Шәүрә ошо офицерҙар күлдәген һатып алды. Ул сағында нимәгә алғанын, ҡайҙа кейерен үҙе лә белмәй ине: оҡшаған өсөн генә тәүәккәлләгәйне. Әмәлгә күрә, күлдәктең кәрәге бик тиҙ тейҙе. Ул Башҡорт дәүләт университеты студенттары проводниктар отрядының формаһы өсөн бына тигән булып сыҡты. Ә юбканы әсәһенең олоғара шкафында әллә нисәмә йыл буйы ятҡан тауарҙан оҙонлоғон тубыҡтан түбәнерәк итеп ҡыҙ үҙе текте. Кешенең тубығы йомро ғына булырға тейеш тип

---

*Шәүрә Рәшит ҡыҙы Шәкүрова (1967) Өфө ҡалаһында тыуған. БДУ-ның тарих факультетында белем ала, Мәскәүҙә Рәсәй Фәндәр академияһының Донъя әҙәбиәте институтында башҡорт халҡының «Урал батыр» эпосы буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай. 2008 йылда С.А. Герасимов исемендәге Бөтә Рәсәй дәүләт кинематография институтын тамамлай. «Аҡбуҙатты эҙләгәндә» фәнни-популяр һәм башҡа бик күп фильмдарҙың сценарий авторы. «Ағиҙел»дә тәүге тапҡыр сығыш яһай.*

иҫәпләй Шәүрә. Был уйынан һис кем уны кире дүндерә алмаҫ. Шуға күрә ослайып торған тубыҡтарынан ныҡ ояла, уларҙы күҙгә салынмаҫлыҡ итеп ҡаплап ҡуйырға тырыша. Тик был юлы артыҡ тырышып ташлаған, күрәһең: перрондан вагон баҫҡысына күтәрелгәндә итәкте бер аҙ ҡалҡытырға тура килә. Бындай саҡта Шәүрә һәр саҡ ҡыҙарып китә лә, инде әллә нисәнсе тапҡыр, үҙен эстән генә әрләп ала. Ә бына аяғындағы резина ҡатаһы уның ысын мәғәнәһендә ғорурлығы. Үткән йәйҙән алып Өфөлә ифрат модалы булып һаналған был аяҡ кейемен «һабын һауыты» тип йөрөтәләр. Шәүрә уны быйыл йәй башында «Өфө» универмагында әллә нисә сәғәт буйы сиратта тороп һатып алды.

Шәүрә рейсҡа студенттар отрядының һалдаттарҙыҡына оҡшаған формаһы ялҡытып киткәндә кейергә алмашҡа ситса күлдәк ала. Ул ике яҡтан да кеҫәле, еңдәре күбәләк ҡанаты кеүек. Күк сәскәләр төшкән аҡ күлдәкте кейеп алһаң, рәхәтлектең сиге юҡ. Тик быны бик һирәкләп, төндә генә кейештерәһең. Тәртип икән – тәртип, форманы һаҡламай булмай.

Шәүрә һәр кейеменең тарихын хәтерендә һаҡлай. Был матур күлдәген ул өләсәһе ҙур һандығынан алып бүләк иткән тауарҙан тегеп кейҙе. Тауарға ҡушып ун һум да биргәйне өләсәһе. Бигерәк изге күңелле, йомарт йәнле кеше инде ул. Ҡыҙыҡай уны күлдәген кейгән һайын һағынып хәтергә ала. Ул да үҙенең ете тау, ете урман аръяғындағы ауылында, ыҡсым ғына өйөнөң тәҙрәһенән ҡарай-ҡарай, ейәнсәрен көтә торғандыр.

Шәүрә вагонды йыуып сығарырға, өҫтәлдәрҙе һөртөргә, тәҙрәләргә пәрҙәләр элергә өлгөргәйне инде. Хәҙер Ташкент тарафтарына юлға сығырҙан алда башҡа кәрәк-яраҡты ла әҙерләй һалырға кәрәк. Иң мөһиме – таш күмер брикеттары тейәлгән арбанан, ул үтеп барған арала ырғып сыға һалып, мөмкин тиклем күберәк яғыулыҡ алып ҡалыу. Ҡайһы берҙә түшәк кәрәк- яраҡтары һалып тегелгән тоҡсайҙар тейәлгән арба менән күмерле арба бер юлы үтә. Был ваҡытта инде ауыҙ асып торҙоңмо – бөттөң. Ярай әле, бельелы тоҡтарҙы эшселәр вагон тәңгәленә ырғытып ҡалдыра. Тик улар перронда оҙаҡ ятырға тейеш түгел. Шуға күрә лә Шәүрә үтә яшыҡ кәүҙәһен үҙе өсөн ауырыраҡ булған был физик эшкә старт һыҙығына баҫҡан спортсы кеүек әҙерләй. Шундай мәлдәрҙә йыш ҡына башына: «Был тиклемде күтәреп, мин аҙаҡтан бала таба алырмынмы һуң?» – тигән уй ҙа килеп ҡуя. Тик йәш ваҡытта кем сәләмәтлеге хаҡында артыҡ уйлап тора инде. Ғүмер тигәнеңдең иге-сиге юҡ, шуға күрә бөтәһенә лә өлгөрөргә мөмкинһең кеүек тойола.

Өфө вокзалында, һәр ваҡыттағыса, яңы ғына бешеп сыҡҡан ваҡ бәлеш һәм ҡыҙҙырылған көнбағыш еҫе аңҡый. Халыҡ мыжғып тора.

Бына «Өфө – Ташкент» поезы ла юлға сығырға әҙер. Инде күмер ҙә етерлек булды, хатта иң эҫе көндәрҙә лә һаҙлыҡ еҫе аңҡытып торған еүешерәк простынялар һалынған тоҡсайҙар ҙа купела ята.

Шәүрә үҙе менән бик ҡәнәғәт: күмерҙе етерлек алды, ашыҡ-бошоҡ булһа ла һындырғылап, титан янындағы йәшниккә тултырып та ҡуйҙы. Юл алыҫ, ҡайнаған һыу гел генә кәрәк. Уларға бит икһеҙ-сикһеҙ ҡыу дала һәм ҡом сүллектәре аша тын алғыһыҙ эҫелә бик оҙаҡ барырға тура киләсәк. Дөйә көтөүе кеүек сайҡала-сайҡала, өтөп барған ҡояш аҫтынан әҙәм әҫәре, күҙ эленерлек ағас, ҡыуаҡ йәки торлаҡ булмаған бушлыҡтан барған саҡта берҙән-бер күңел йыуанысы – ул сәй. Бындай саҡтарҙа ваҡыт бөтөнләй туҡтап ҡалған һәм поезд да бер урында сайҡалып торғандай күренә. Һәм бөтөн шартына килтереп, тәмләп сәй эсеү генә тормоштоң һаман да нисек тейеш шулай дауам иткәненә дәлил булып күренә.

Шәүрәнең икмәкле ҡалаға беренсе генә барыуы түгел. Шуға күрә Өфө халҡының был шифалы эсемлекте ни тиклем ятратҡанын яҡшы белә. Титан шыжлар һәм үҙенең бирән ҡорһағына иртәнән кискә тиклем бер туҡтауһыҙ күмер ырғытҡанды талап итер. Сәй эсеүҙән барыһы ла ҡәнәғәт ҡалыр. Оҙон юлда рәхәтләнеп һыуһын ҡандырған пассажирҙар ҙа, сәйлек баҡырҙар кеҫәһен ярайһы ғына ҡалынайтҡан студентка ла. Бер ҡараһаң, алты тин күп тә түгел. Әммә урап ҡайтыуға ҡәҙимге аҡса йыйыла. Бында иң мөһиме – сәйҙе дөрөҫ бешереү.

Шәүрәнең даланы бар: тәүге рейста ул ысын проводник ҡатын менән бергә эшләне. Аня сәстәрен перекись менән яндырып һарғайтҡан, йөҙөнә йылдар тәрән эҙҙәр һалған ҡырҡ йәштәр тирәһендәге ҡатын ине. Гүзәл заттың матурлығына юлдар шулай аяуһыҙҙырмы, ул ныҡ ҡына таушалғайны. Шулай ҙа Шәүрәгә үҙенә «апай» тип әйтергә рөхсәт итмәне. «Әсәйең йәшендә булһам да, Аня тип кенә йөрөт», – тине.

Уңды Шәүрә. Аня уны нишләп шул тиклем оҡшатҡандыр, билдәһеҙ. Бәлки, үҙенең балаһы булмағанлыҡтан, кемделер ҡурсалау теләге уянып киткәндер. Шаяртып һәм яратып, уны «батша ҡыҙы Будур» тип кенә йөрөттө. Ысынлап та, Шәүрә ҡайһы яғы менәндер «Аладдиндың тылсымлы шәме» тигән әкиәт-фильмда уйнаған актрисаға оҡшағайны. Етмәһә, үҙе бик зирәк. Шуға күрә Аня үҙенең ажарлы проводник ҡатындан хәстәрлекле кәңәшсе-тәрбиәсегә әйләнгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Хатта үҙе лә аптыраны. Шулай итеп, рейстан урап ҡайтҡансы Шәүрә был һөнәрҙең бик күп серҙәренә эйә ине инде. Улар араһында «контролерҙарға эләкмәй генә нисек билетһыҙ пассажирҙарҙы алырға» кеүек өҫтәлмә табыш эшләү юлдары ла, титандың быуында картуф бешереү кеүек тамаҡҡа әҙерләү дәрестәре лә бар ине. «Ялҡауланмаһаң, сәй менән дә яҡшы ғына килем алып була», – тип өйрәтә торғайны Аня. Сәйҙе ҙур цинк сәйнүктә көнөнә бер нисә тапҡыр бешерәһең. Ҡатыраҡ сыҡһын өсөн саҡ ҡына аш содаһы өҫтәп ебәрәһең. Шәүрә үҙенә Аняныҡы кеүек ике кеҫәле алъяпҡыс та тегеп алды. Уң кеҫәгә көмөш, һул кеҫәгә баҡыр тинлектәрҙе һала. Һумлыҡтар шунда уҡ түш кеҫәгә инеп ята. Ситтән ҡарап торған кешегә ҡулына эҫе сәйле стакандар тотҡан ҡыҙға ваҡ аҡса һанап тороу бик мәшәҡәтле кеүек күренә. Шуға ла йыш ҡына: «Ярар, ҡалғанын биреп торма!» – тиҙәр. Шәүрәгә тап шул ғына кәрәк тә инде.

Шулай итеп, ҡыҙ хәҙер һәр рейс һайын арыу-талыуһыҙ сәй өләшә. Эске ярыш тойғоһо дәрт биреп торғанда, алыҫ юл да, мәшәҡәтле эш тә еңелерәк кеүек. Ә ҡыҙ һәр рейс һайын бәләкәс кенә булһа ла рекорд ҡуя, йәғни өҫтәлмә килеме саҡ ҡына булһа ла арта бара. Был иһә тормошҡа үҙенә бер мәғәнә өҫтәп ебәргән һымаҡ. Матди хәленең яҡшыра барыуы ла күңелде йылытып тора.

Отрядҡа ул әхирәте Әлиә менән бергә яҙылғайны. Тик уның атаһы менән әсәһе ҡыҙҙарының был теләгенә теше-тырнағы менән ҡаршы төштө. «Ҙур ҡалала былай ҙа ҡыҙ баланы хәүеф аҙым һайын һағалап тора. Инде яҙмышыңды тәгәрмәстәр өҫтөндә һынамаһаң да була. Тимер юлда эшләү ҡыҙ кеше өсөн үҙ башыңа үҙең бәлә эҙләп йөрөү менән бер», – тип, мең һүҙгә барып еттеләр. Хатта Шәүрәне лә был ниәтенән кире һүрергә тырышып ҡаранылар. Әммә ул аҡса эшләү мөмкинлегенән баш тартырға йыйынмай ине. Студенттар отрядында айына ике йөҙ илле һум эшләргә була. Премиялар менән өҫтәлмә табышты ла ҡушһаң, байтаҡ булып китә.

Унан Шәүрә кешеләрҙең яҡшылығына ышана һәм үҙенең донъялағы иң

ғәҙел илдә – Советтар Союзында йәшәүе менән ғорурлана, Латин Америкаһындағы һәм Африкалағы үҙҙәренең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшергә мәжбүр булған халыҡтарҙы ул ихлас ҡыҙғана. Бер йылды атаһы менән әсәһе, әмәлен табып, уны халыҡ-ара пионерҙар лагерына ебәргәйне. Шунда йөҙҙәре төндөң үҙенән дә ҡарараҡ, ә устары, көтөлмәгәнсә, алһыу ғына балалар – сит илдән килгән дуҫтар бик күмәк ине. Улар ниндәйҙер аңлашылмаған һүҙҙәр һамаҡлап, йоҙроҡтарын күккә сөйә һәм бөтөн майҙан улар артынан ҡабатлай: «Эл пебло, унито, хаманто равен сито». Был һүҙҙәрҙе пионерҙар бер-береһенең йыр дәфтәренән ошолай кириллица менән күсереп алды һәм, лагерҙа кемде генә хатта төн уртаһында уятып һораһаң да, Азатлыҡ утрауында ирек өсөн көрәшеүселәрҙең ялҡынлы девизын тотлоҡмай әйтеп бирер ине. Был тылсымлы һүҙҙәрҙең «бергә саҡта беҙҙе еңеп булмай» тигәнде аңлатҡанын барыһы ла белә ине. Тик тәржемәлә улар Азатлыҡ утрауының үҙенән килгән революционерҙарҙың телмәрендәге кеүек ышандырғыс һәм еңеүле яңғырамай.

Шулай итеп, Шәүрә – идеологик йәһәттән ярайһы ғына сыныҡҡан кеше. Ә инде тарих факультетында алған белеме уның донъя тураһындағы ҡараштарының дөрөҫлөгөн тағы ла нығыраҡ раҫлай. Сөнки ул уҡытыусылары һөйләгәндәргә лә, үҙе уҡығандарға ла ысын күңеленән ышана.

Хәйер, ата-әсәһе әпәүләп кенә торған Әлиәнән айырмалы рәүештә, Шәүрә ғаиләлә, балаларҙың иң өлкәне һәм аҡыллыһы булараҡ, үҙе терәк ине. Юҡҡамы ни ул университетта конкурс иң юғары булған тарих факультетына уҡырға үҙ көсө менән барып инде. Ә бынан, тырышлығың һәм аныҡ маҡсатың булғанда, партия эшенә тура юл илтә. Ул саҡта иһә, бығаШәүрәнең иманы камил, уның үҙ фатиры ла, шәп вазифаһы ла, водителе менән машинаһы ла, һәм, әлбиттә, яҡшы ире менән аҡыллы, тыңлаусан балалары ла буласаҡ. Тик ҡыҙ хыялында ире менән балаларының йөҙөн күҙ алдына килтерә алмай. Водителде – етди сырайына бер ни тиклем арыу һыҙаты сыҡҡан өлкән йәштәрҙәге һәйбәт кешене – айырым-асыҡ күрә. Ә бына башҡаларҙың ҡиәфәте үҙе ванна бүлмәһендә ҡыҙыл ут яҡтыһында эшләгән фотоларҙағы кеүек тоноҡ.

Бына шул күңелен йылытып торған хыялындағы киләсәкте яҡынайтыу өсөн уға аҡса кәрәк. Өфөлә ҡышын бик һалҡын. Ә уның беренсе курста тәүге ике айлыҡ стипендияһына алған пальтоһының йүнле йылыһы юҡ. «Балалар донъяһы» магазинында алған итеген артабан да кейеп йөрөү иһә бөтөнләй оят. Ҡыҫҡаһы, Өфө тип аталған гүзәл ҡалала йәшәү өсөн һәр ваҡыт матур булырға кәрәк. Ленин урамында бер көн эсендә әллә күпме танышыңды осратаһың. Өҫтәүенә, Шәүрә театр ярата. Өфөлә улар бер нисәү: башҡорт һәм рус драма театрҙары, Йәш тамашасы театры, ә иң үҙенсәлеклеһе, әлбиттә, Опера һәм балет театры. Унда Рудольф Нуриев сәхнәгә тәүләп аяҡ баҫҡан, ул ғына ла түгел, Шаляпин йырлаған. Уйҙырма донъяның тылсымына сумһаң, үҙ тормошоң да сағыу һәм мауыҡтырғысыраҡ күренә. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, матур булыу талап ителгән урындар күп – Өфө затлы һәм уңыш ҡаҙанған ҡыҙҙарҙы ярата. Унда йәшәү ҙур ләззәт кенә түгел, оло хеҙмәт тә. Шул уҡ ваҡытта ғаиләңдең абруйы тураһында ла оноторға ярамай. Ғәжәп, бында барыһы ла бер-береһе тураһында белеп тора. Әсәһе гел генә тылҡый: миллионлы булһа ла, бында бөтә нәмә күҙ алдында. Бөтә яңылыштарың һәм хаталарыңды энә күҙәүенән үткәрәләр. Уңыштарың һәм осоштарың да шулай уҡ күҙ уңында. «Өфө бер нәмәне лә ғәфү итмәй. Әммә уны яратҡандарҙы һәм арымай-талмай эшләгәндәрҙе күтәрә лә, хөрмәтләй ҙә белә», – ти атаһы.

Шәүрә вагонды тағы ла бер тапҡыр ҡарап сыҡты. Барыһы ла тәртиптә кеүек. Тығыҙ итеп төрөлгән матрастар – өсөнсө ҡаттағы һәндерәлә, мендәрҙәр – икенсеһендә. Тәҙрәләрҙә ап-аҡ пәрҙәләр елберҙәй.

Пассажирҙар булмаған саҡта вагон ялтлап тора ла бит. Һауа ла саф, боҙола башлаған колбасаның, ҡаҡланған балыҡтың «хуш еҫтәре» лә әлегә танауҙы ҡытыҡламай. Тик хәҙер йүгерешеп килеп инәләр ҙә, әйберҙәрен урынлаштырыу менән, ғүмерҙәре буйына поезға ултырып туйғансы ашарға хыялланған кеүек, тығынырға тотоналар инде.

Бына диктор «Өфө – Ташкент» поезын иғлан итте. Шәүрә тағы бер тапҡыр өҫ-башын һыйпаштырып, сәсен рәтләне лә вагондың ишеген асып, шығырҙаҡ баҫҡыстан перронға төшөп баҫты. Үзбәкстан тарафтарына атлыҡҡан ғәм халыҡ күптән инде вагон тәңгәлендә өймәкләшкән. Улар шул тиклем күп, хатта Шәүрәгә вокзалдағы бөтә кеше тап уның вагоны эргәһенә йыйылғандай тойолдо. Ҡапыл барыһына ла эҫе Ташкентҡа барырға, бының өсөн тиҙерәк ултыра һалырға ла олоғара сумаҙандарҙы тыҡшыра башларға кәрәк булған. Тик бында Шәүрәнең хужа икәнлеге, билеттарын тикшермәйенсә бер кемде лә эскә индермәйәсәге береһенең дә башына килмәй, ахыры. Әммә ҡыҙыҡай асыҡ ауыҙҙарҙан түгел, юҡҡа өмөтләнмәһендәр.

Бала-сағаның илашыуы, бисә-сәсәнең ҡысҡырышыуы, ирҙәрҙең бурылдауы – Өфө вокзалындағы йәйге ығы-зығыға Шәүрә күнеккәйне инде. Барыһынан да алда вагонға инергә маташыусыларҙың ялбарыуы ла күңелен йомшарта алмай хәҙер. Ул эшен үҙенә өйрәтелгән ҡағыҙәләргә таянып башҡара. Барыһы ла ваҡытында инер, урынлашыр, ғәҙәттәгесә, был йүнәлештә багаж ҡуйырға урын етмәйенсә ыҙғыш булып алыр. Тик ҡыҙ пассажирҙар үҙ-ара хәл итә ала торған мәсьәләләргә ҡыҫылмаҫҡа тырыша. Бәләкәй түгелдәр, аңлашырҙар. Әлегә уның өсөн иң мөһиме: вагонына шул йүнәлештә барасаҡ кешеләр генә ултырырға тейеш. Юғиһә күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй инәләр ҙә, эш үткәс: «Яңылыш ултырғанбыҙ, ярҙам итегеҙ», – тип инәлергә тотоналар.

Ниһайәт, барыһы ла ултырышты. Поезд яй ғына ҡуҙғалып китте. Ҡыҫҡа ғына толомдарын һелкетеп вагон күтәрмәһендә баҫып торған Шәүрә ямғырға еүешләнгән перрондың алыҫлашҡанына моңһоу ҡарап хушлашты. Әйтерһең дә, Өфө вокзалы менән бергә баш ҡаланың ғәжәйеп тормошо ла тороп ҡала. Шәүрәгә яратҡан ҡалаһына ҡабат ҡайтҡанға тиклем байтаҡ юл үтергә тура киләсәк. Киске Өфө һәр ваҡыт һоҡланғыс, миллиондарса уттарын емелдәтеп, ул гел генә үҙенең матур кейенгән һөйкөмлө кешеләре йөрөгән киң урамдарына саҡыра. Поезд ҡуҙғалыу менән үк Шәүрәнең шаулы проспекттағы ҡарт ағастар араһында ултырған өйөнә ҡайтҡыһы килә башланы.

Ташкентҡа сәфәр был юлы ла еңел булманы. Ни өсөндөр ошо йүнәлеш студенттар отрядына ышанып тапшырылған рейстар араһында иң ауыры һанала. Отрядта күберәге ҡыҙҙар. Егеттәрҙе, уларға вагонды тәртиптә тотоуы ҡыйын, алыҫ юлда спиртлы эсемлектәр менән шаярыуҙары ла ихтимал, тип был эшкә алмаҫҡа тырышалар. Дөрөҫ эшләйҙәр. Ә ҡыҙҙар халҡы әрһеҙ ҙә, егәрле лә, улар йөкмәтелгән ышанысты аҡлар өсөн йәнтәслим тырышып эшләй.

Отрядта Шәүрәнән башҡалар филология факультетынан. Бөтәһе лә икешәрләп, сменалап эшләй. Әлиәгә ышанған Шәүрә генә яңғыҙ. Тәүге рейсҡа ғына Аня менән барҙы ла йәй буйы бер үҙе. Арый инде, тик нишләйһең. Уның ҡарауы, аҡсаһы күберәк, уға бер ярым ставка түләйҙәр. Нишләп ярым, ошоноһон ул аңлап етмәй етеүен – әйтерһең дә, ярты кеше була.

Эшен нисек тә еңеләйтер өсөн Шәүрә төрлө яңылыҡтар уйлап таба. Бына

әле лә «Башҡорт дәүләт университеты студенттары отряды. Проводник – тарих факультеты студенткаһы Шәүрә Вәлиева» тигән яҙыу эргәһенә иң кәрәкле дарыуҙарҙың барлығы тураһында белдереү яҙып элде. Дарыуҙар бушлай бирелә. Эҫелә бала-саға йышыраҡ эс китеүҙән йонсой. Пассажирҙар һау-сәләмәт булһа, проводникка ла мәшәҡәт аҙыраҡ тип, Шәүрә һәр үтенесте ихлас үтәй.

Вагонды таҙа тотоу мәсьәләһендә лә Шәүрәгә профессиональ проводниктарға ғына билдәле булған алымды ҡулланыу ярҙам итә. Таҙалыҡты тәьмин итеү алымдарын да, өҫтәлмә табыш алыу серҙәрен дә Шәүрә башҡалар менән уртаҡлашмай. Ҡайҙан беләһең, йә отрядтың талапсан командиры Фәйрүзәгә еткереп ҡуйырҙар. Ә инде поезд начальнигының үҙенә барып ишетелһә, бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп, тиерһең. Ул саҡта Шәүрәне премиянан мәхрүм итеү генә түгел, отрядтан ҡыуып сығарыуҙары бик ихтимал.

Ҡыҙ шым ғына пассажирҙарҙы күҙәтергә һәм кемдең кем икәнен фаразларға ярата. Ҡайһы ваҡыт дөрөҫ уйлағанмы-юҡмы икәнен белергә форсат та сығып ҡуя. Кемдәрҙер Үзбәкстанға эш буйынса бара, кемдәргәлер докторҙар климат алмаштырырға кәңәш иткән. Ташкентта ҡоро булғанлыҡтан, астма менән ауырығандарға унда тын алыуы еңелерәк. Үткән юлы уның вагонында Фатих тигән урта йәштәрҙәге ағай барғайны. Тыуған яғында тыны быуылып йонсоғанға Урта Азияға юлланырға мәжбүр булған. Ҡасандыр бергә хеҙмәт иткән һәм Ташкентта төпләнгән дуҫына төбәп барыуы.

– Оҡшаһа, тороп та ҡалырмын, бәлки, – тигәйне ул. – Ҡатыным менән айырылышҡанбыҙ. Балаларым юҡ. Атам менән әсәмде күптән ерләгәнмен. Яңғыҙ башым. Әлегә ял алдым. Эш, торор урын ҡараштырырмын. Тәүге мәлдә хеҙмәттәштә лә йәшәп торорға була ла, кешегә ауырлығымды һалырға күнекмәгәнмен. Иң мөһиме – сәләмәтлегем яҡшырһын.

Шәүрәнең Ташкентта булғаны бар инде. Ул юлы, эш башлауҙарының тәүге генә айы булғанғамы, ҡыҙҙарҙың береһе лә ҡалаға сығырға баҙнат итмәне. Уға бер үҙенә тәүәккәлләргә тура килде: шампунь дә кәрәк, икенсенән, форсат тейгән икән, нисек инде йырҙарҙа Көнсығыш йондоҙо тип маҡталған ҡаланы күрмәйенсә ҡайтаһың. Иң тәүҙә ул ҡала үҙәгендә урынлашҡан ҙур универмагҡа йүнәлде. Итәге теҙҙәренән саҡ ҡына түбәнерәк төшөп торған аҡ күлдәк, аяғына «һабын һауыты» кейгән, сәстәрен ике ҡыҫҡа толом итеп үргән ҡыҙ Ташкенттың эҫе бөркөп торған урамында, ете ят бер йән эйәһе булып, бөтәһенең дә иғтибарын йәлеп итә. Башҡалар менән сағыштырғанда ап-аҡ күренгән йөҙө лә, ғәҙәт-ҡылығы ла килмешәк икәнен әллә ҡайҙан күрһәтеп тора. Шәүрә бер кемгә лә йылмаймай, үҙен бик етди тоторға тырышты. Универмагтағы һатыусы – башына ялтыр епле ҡыҙыл яулыҡ ябынған, өҫтөнә милли кейем кейгән үзбәк ҡатыны – ни өсөндөр Шәүрәне күрмәмешкә һалышты. Бәлки, ул ысынлап та русса аңламайҙыр, тик Шәүрә лә үзбәксә белмәй ине. Бер нисә тапҡыр өндәшеп ҡарағандан һуң, түҙеп торҙо ла, сабырлығын юйып, башҡортсалап тороп һүгенде лә ебәрҙе: «Эш ниҙә? Миңә шампунь кәрәк», йәнәһе. Тимер юлында эшләү уны түҙемлегенең иң һуңғы сигенә еткәндә норматив булмаған лексиканы ҡулланырға өйрәткәйне. Шуныһы ҡыҙыҡ: уның да, Штирлиц тураһындағы мәшһүр фильмдағы радист ҡыҙ Кэт шикелле, бөтә тыйылған һүҙҙәр иҫенә туған телендә төшә.

Бына әле лә вайымһыҙ үзбәк ҡатыны уны иғтибар менән тыңлай. Әллә ҡайһы арала йыйылып киткән халыҡ та ауыҙын асҡан. Мәрәкә, Шәреҡтә кешеләр, хатта өлкәндәр ҙә, балалар шикелле ҡыҙыҡһыныусан. Берәй ғәҙәттән

тыш хәл булһа, бөтөн эштәрен ташлап, донъяларын онотоп, сәғәттәр буйы күҙәтергә әҙерҙәр. Әле лә ҡыҙҙың һүгенеүен, ғәҙәттәгесә, бер ниндәй ғәйепләүһеҙ, хатта ихтыярһыҙ һоҡланыу менән ғәжәпләнеп тыңлайҙар. Ә Шәүрә ауыҙын ябыу менән, тирә-яҡта зыңлап торған тынлыҡ урынлашты. Кешеләр баштарын сайҡай-сайҡай таралыша башланы. Был ҡолаҡҡа яҡмаҫлыҡ йәмһеҙ һүҙҙәр улай уҡ матур ишетелмәҫкә тейеш ине, ә был ҡыҙ уларҙы шулай яңғырата алды.

Һатыусы ҡатын, ҡатырға ҡумтанан бер һауыт шампунь алып, Шәүрәнең алдына ҡуйҙы. «Рәхим итеп алығыҙ», йәнәһе. Шәүрә аҡсаһын түләп, тауарын алды ла сығыу яғына йүнәлде. Сираттағы баш әйләндергес еңеүенә ҡарамаҫтан, нимәлер һатып алыу теләге юҡҡа сыҡҡайны.

Килгән саҡта уҡ юлаусыларҙан Госпиталь баҙарында арзан ғына хаҡҡа көмөш биҙәүестәр алырға мөмкин икәнен, бында емештең дә осһоҙ тороуын һорашып белешкәйне. Ә «Ганг» тип аталған һинд магазинында ниндәй ҙә булһа дефицитҡа юлығыуың мөмкин икән. Шәүрәгә быңдай магазиндың Советтар Союзында икәү генә булғаны мәғлүм: береһе – Мәскәүҙә, икенсеһе – бында. Шуға күрә был һирәк мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырғы килмәй, әлбиттә, бәлки, берәй матур кейем алып булыр. Тик көндөң түҙеп торғоһоҙ эҫе булыуы бөтөн теләкте һүндерә. Быңдай көндә ят ҡаланың хуш еҫтәрен һулап, тирәяҡтағы матурлыҡҡа һоҡланып бер маҡсатһыҙ йөрөгө килә. Уның ҡалаға юғарынан, «шайтан тәгәрмәсе»нән ҡарағыһы килеп китте. Өфөлә лә, дуҫтары менән Мәжит Ғафури паркындағы «күҙәтеү тәгәрмәсе»нә ултырып, ҡаланы юғарынан ҡарарға ярата ул.

Шунан ул баҙарға йүнәлде. Данлыҡлы шәреҡ баҙарҙарындағы кеүек үк, бында ла кеше мыжғып тора. Аллы-гөллө кейем, төрлө тел, төрлө лөғәт. Олоғара ҡаҙандарҙа хуш еҫле былау әҙерләйҙәр. Тандырҙа яңы ғына бешеп сыҡҡан ләүәш кеүек, уны ла шунда уҡ һатып алып ашарға мөмкин. Төрлө-төрлө кешеләр, баштарҙы әйләндерерлек тәмле еҫтәр үҙенекен итте: Шәүрә, асыҡҡанын тойоп, ашарға ултырҙы. Бындағы ҡайнап торған тормош әкиәт донъяһы кеүек күренә. Әйтерһең дә, эргәлә генә Ғәли-баба тылсымлы шәмен тотоп йөрөп ята, ә ҡала янындағы Сим-сим мәмерйәһенә ҡырҡ юлбаҫар хисапһыҙ хазиналарын йәшерә. Әммә был донъя, матур һәм мауыҡтырғыс булыуына ҡарамаҫтан, уныҡы түгел. Тирә-яғындағы быға са күрелмәгән һоҡланғыс сәскәләр күҙҙең яуын ала, тәмле-татлы емештәрҙе татып ҡарағы килә. Тик улар барыһы ла ваҡытлыса ғына ҡыҙыҡ. Ҡояш та бында аяуһыҙ. Ир-ат та сәйер ҡарай. Ҡайһы береһе: «Бында һиңә яңғыҙ йөрөргә ярамай, урлап ҡуймаһындар», – тип әйтеп китә. Шәүрәнең олатаһы менән өләсәһе йәшәгән ауылда ла ҡыҙ урлау йолаһы бар. Әммә был ят ерҙә буйлы ыштан, һырмалы сапан кейгән сәйер ҡарашлы кешеләрҙең урлау ихтималынан ҡурҡыныс булып китә.

Шулай итеп, Шәүрәгә Ташкент, ни өсөндөр, оҡшаманы. Шуға күрә икенсе сәфәргә ашҡыныуһыҙ ғына сыҡты. Юл ауыр, вагондар иҫке, етмәһә, барып еткәс, ҡалала иркенләп йөрөрлөк түгел. Берҙән-бер мәрәкә – тимер юл йүнәтеп йөрөгән һалдаттарҙы һыуыҡ һыу менән ҡойондороу. Уныһы былай. Ремонт эштәре барған урынға яҡыная башлау менән, машинист тиҙлекте әкренәйтә. Быны абайлап ҡалыу менән ҡыҙҙар вагондарының ишеген аса ла өтөп алған эҫе елгә биттәрен ҡуйып һонола, баш баҫып эшләп йөрөгән егеттәрҙең иғтибарын йәлеп итеү өсөн ҡул болғап ҡысҡырыша башлай. Йәш кенә егеттәр, һындарын турайтып, ҡыҙҙар тулы сәйер составтың яҡынлашҡанын көтә

башлай. Егеттәргә был һылыуҙар әллә ҡайҙан алыҫ-алыҫтан тик уларға төбәп килгәндәй тойола, ҡиәфәттәрендә ғорурлыҡ сағыла, ауыҙҙары йырыла. Шул саҡ ҡыҙҙарҙың береһе, ғәҙәттә, иң арттағы вагондан – был мейе ҡайнатырлыҡ эҫе көндә боҙҙай һалҡын тойолған бер биҙрә һыу менән ҡойондороп үтә. Әхирәттәре иһә дала яңғыратып көлөшә.

2

Өфөнән сыҡҡаны бирле сәсенә сал төшкән ҡаҡса ғына кәүҙәле бер егет Шәүрәне эсеңкерәгән ир-аттың бәйләнеүенән, ғауғасыл ҡатын-ҡыҙҙарҙың һөйләнеүенән ипләп кенә ҡурсалап килә. Быны шунда уҡ абайлап ҡалған ҡыҙға, бер яҡтан, бик уңайлы – юҡ-бар хәбәре менән йонсотмай. «Сәй өсөн Ташкентҡа тиклем бер юлы түләп ҡуям», – тип башта уҡ бер һум тоттороуы ла йәтеш булды: башҡаларға үрнәк күрһәтте. Күптәр уға эйәрһә лә, һәр бер стакан өсөн тинлек һанап маҙаға тейгән һыҡмырҙар ҙа етерлек. Әммә Шәүрәнең уларға ҡаршы үҙенең көрәш алымы уйланылған: сәйҙе лә, ҡалған аҡсаны ла килтерергә ашыҡмай. Өҫтәүенә, ун тиндән ҡалған дүрт тинде үткән һайын берәр тинләп ҡайтара-ҡайтара башҡалар алдында һаранлыҡтарын күҙҙәренә төртә. Ниһайәт, иң ҡарун тигәндәре лә һына, ун тинде: «Ҡалғаны кәрәкмәй», – тип тоттора башлайҙар. Ә ярлы студентҡа шул ғына кәрәк тә инде. Ул эске ҡәнәғәтлек менән: «Һаран ике түләй» тигән әйтемде ҡабатлап ҡуя.

Ҡурсалаусының исеме Олуғбәк. Бер ай ваҡытын Өфөлә үткәреп ҡайтып барыуы. Әсәһенә бөтә илгә даны таралған Күҙ ауырыуҙарын дауалау институтында операция яһағандар.

Күреү һәләте кире ҡайтасағына өмөтләндереп алып ҡалғандар. Йонсоған, хафаларҙан йоҡоһон юғалтҡан егет кисерештәрҙән һаман тыныслана алмай. Әммә тәгәрмәстәрҙең тигеҙ генә туҡылдауы уны ысынбарлыҡҡа кире ҡайтара алды шикелле. Юл да, ниһайәт, бер аҙ иркенерәк тын алырға форсат бирҙе. Һуңғы аҙналарҙа булған ваҡиғаларҙы барлап, ул барыһының да шулай уңай ғына килеп торғанына һаман да ышана алмай. Бер генә танышы ла булмаған Башҡортостанға Алланың фатихалы сағында килергә ҡарар иткәндер, моғайын. Гәзиттә институт тураһында уҡыны ла әсәһен шунда алып барырға булғайны. Аҡса йыйҙы, етмәгәнен туғандарынан үтескә алып торҙо, шунан юлға сыҡтылар. Ул хатта институттың адресын да белмәй ине. Бара торған ҡалаһы ғына мәғлүм: Өфө.

– Әсәһе күҙ нурҙарын юғалтҡан аварияла уның ире – Олуғбәктең атаһы менән ғаиләләге кесе балалар: биш йәшлек һеңлеһе Рано менән ун йәшлек ҡустыһы Шухрат һәләк булғайны. Шулай итеп, егет һуҡырайып ҡалған әсәһе менән генә тороп ҡалды. Бер нисә йыл әсәһе ҡайғынан айный алманы. Яҡында йәшәгән туғандарының береһе уға өй эштәрендә ярҙамлашып, әсәһен ҡарашып йөрөй. Тик егет иң ғәзиз кешеһенең башҡа бер ваҡытта ла яҡты донъяны күрмәүе менән һис кенә лә килешә алманы. Ул бәхетте һынап ҡарарға һәм Аллаһы Тәғәлә менән кешеләр ярҙамында ҡулдан килгәндең барыһын да эшләргә ҡарар итте. Олуғбәкте үтә динсел кеше тип әйтеп булмаһа ла, ул көн һайын, төн һайын әсәһенең тере ҡалғаны өсөн Аллаға шөкөрана ҡыла. Юғиһә егеткә йәшәүҙең бер кәрәге лә булмаҫ ине.

Әсәһе тураһында хәстәрлек күрергә тейеш булыуы Олуғбәккә ҡайғыһын еңергә мәжбүр итте. Институттың ситтән тороп уҡыу бүлексәһенә күсеп, тыуған ҡалаһына ҡайтты, тимер юлға эшсе булып урынлашты. Күпмелер ваҡыттан һуң станцияға кассир булып күсте, институт тамамланы. Автобуста

булған бөтә пассажирҙар араһынан бары әсәһе генә тороп ҡалған ул ҡурҡыныс һәләкәттән һуң өс йыл үтеп китте. Һуҡыр ҡалған ҡатындың улына нисек тә ярҙамсы булғыһы, буласаҡ килене менән ейән-ейәнсәрҙәрен күргеһе килә ине, әлбиттә. Шуға күрә улының өгөтөнә күнде. Шулай итеп, улар Өфөгә юлға сыҡтылар.

Төнгө туҡталыштарҙа Олуғбәк һәр ваҡыт Шәүрә эргәһендә була. Өндәшмәҫ үҙе, күҙгә лә ташланып бармай, уның менән ҡыҙыҡ та түгел. Ҡарап торһаң, уны эстән бер һыҙланыу туҡтауһыҙ кимергән һымаҡ күренә. Күҙҙәре төпкә батҡан, арҡаһы көмөрәйә төшкән был егеткә Шәүрә ҡәҙимге тормошта бөтөнләй иғтибар итмәҫ ине, моғайын. Ҡыҙ үҙе, йәшәү – ул уйын һәм тормошта бер ниндәй ҡайғы-хәсрәткә урын юҡ, тигән тойғо менән йәшәй. Әммә бында, төн йөҙөндә, Аллаһы Тәғәлә үҙе лә барлығын онотҡан станцияла, бик сәйер тойолған был кешегә үҙе башлап өндәште.

– Әллә һеҙ мине һаҡлап йөрөйһөгөҙ инде? – тине ул. – Мин бер нәмәнән дә ҡурҡмайым. Барығыҙ, рәхәтләнеп ятып йоҡлағыҙ.

Ҡайғынан ҡара торонбаштай көйөп ҡалған егеткә бары егерме ике генә йәш. Ул ҡыҙҙан өс йәшкә генә өлкән. Әммә улар араһында йылдар менән генә үлсәп булмаҫлыҡ упҡын ята. Ҡыҙ ирекһеҙҙән быны тоя һәм шуға күрә лә үҙенән күпкә олораҡ кеше менән һөйләшкәндәй мөрәжәғәт итә ине.

Егет үҙенең башынан үткәндәрҙе һөйләп торманы. Ҡыҙҙың кәйефен боҙмаҫлыҡ нәмәләрҙе генә әйтте. Йәш ҡыҙҙар өсөн тимер юлында эшләү еңелдән түгел. Уларҙың Үзбәкстанында проводник булып тик ирҙәр генә эшләй. Ҡыҙҙарҙың ҡаҡса ғына яурынына шул ҡәҙәре көс етмәҫлек йөк һалыу дөрөҫ түгел. Юғиһә киләсәктә нисек ул әсәй була? Ә үзбәк өсөн әсәйҙән дә ғәзиз йән эйәһе юҡ.

– Мин әсәйемде Өфөлә ҡалдырып киттем. Уның күҙенә операция яһанылар, хәҙер институтта дауалана.

– Пушкин урамындамы?

– Эйе. Унда шул тиклем һәйбәт кешеләр эшләй. Шуға күрә мин үҙемде бөтөн Башҡортостан кешеләре алдында бурыслы итеп тоям. Аңлайһығыҙмы?

Ҡыҙыҡай йылмая биреп баш сайҡаны. Юҡ, ул аңламай. Уның ҡарашы буйынса, бер кем дә бер кемгә лә бурыслы түгел. Ғаилә эсендә, әлбиттә, унда барыһы ла бер-береһенә терәк. Ә сит кешеләргә ни өсөн? Шәүрә уға туған түгел дә баһа. Бәлки, йәш, аҡылһыҙ тип, матур һүҙҙәр менән албырғатырға самалайҙыр.

– Әсәйем менән Өфөгә иртән иртүк барып төштөк. Такси алып, ҡунаҡхана эҙләп киттек. Бер ерҙә лә урын юҡ. Бушҡа ике сәғәт ваҡытыбыҙҙы ғына әрәм иттек. Таксист та бер нисек тә ярҙам итә алманы, институт алдында ҡалдырып китте. Торам аллеяла, юл аша – боронғо, әллә ун һигеҙ, әллә ун туғыҙынсы быуатта төҙөлгән бина. Уға ҡарағанмын да нишләргә белмәй аптырайым. Әсәйем арыған, асыҡҡан, врачҡа барыр алдынан, исмаһам, сайынып булһа ла сығырға кәрәк. Ул күләгәләге эскәмйәгә ултырған да йөҙөн ҡулъяулыҡ менән ҡаплаған: һуҡыр күҙҙәренән ояла. Эргәһендә кейем-һалым тултырылған сумаҙан, төйөнсөктәрҙә – ҡауындар. Врачтарҙы һыйларбыҙ тип алған булғайныҡ: Азиянан киләбеҙ бит. Эргәнән үтеп барған бер иргә: «Иптәш, ҡунаҡханала урын булмағанда ҡалағыҙҙа тағы ҡайҙа туҡталырға мөмкин?» – тип өндәштем. Әсәйемде күреп ҡалды ла унан ҡарашын айырып ала алмай. «Берәй нәмә булдымы әллә?» – тип һораны. Һөйләп бирҙем. Ул беҙгә ҡарап торҙо ла:

«Әйҙәгеҙ», – тип институт эргәһендәге бейек йортҡа алып китте. Икенсе ҡаттағы фатирға күтәрелдек. Эскә ингәс, бөтә нәмәне күрһәтте лә, ҡулыма асҡыс тоттороп: «Йәшәгеҙ, – тине. – Кәрәк була ҡалһам – бына телефон. Минең исемем – Шамил. Ҡайтып киткәнегеҙҙә асҡысты эстә ҡалдырырһығыҙ, шапылдатып япһағыҙ, ишек үҙе бикләнә ул». Шулай тип, ете ят кешеләргә фатирын ышанып ҡалдырҙы ла китте. Мин ныҡ ҡаушағайным, күпме түләргә икәнен һорамағанмын. Шылтыраткайным, асыуланды. «Юҡ-бар менән баш ҡатырма, мин ысын йөрәктән ярҙам итәм», – тип кенә ҡуйҙы. Ҡайтып китер алдынан рәхмәт әйтер өсөн тағы шылтыраттым. Күп һөйләшергә яратмай, күрәһең: «Ярар, ярар», – тип кенә ҡуйҙы. Тәүләп күргән кеше бына шулай ярҙам итте. Ә больницала операцияға сират, бер йыл алдан яҙылырға кәрәк икән. Унда ла хәлебеҙгә инделәр, әсәйемә нисектер сиратһыҙ ғына эшләнеләр. Ул тәүҙә яҡтылыҡты ғына шәйләне, яйлап ҡына әйберҙәрҙең һыҙаттарын да күрә башланы. Әле тыныс күңел менән ҡайтып барам, сөнки уны бик яҡшы ҡарайҙар. Бер айҙан ҡабат киләм. Бөтә врачтарҙы, шәфҡәт туташтарын, Шамилды, рәхмәтемде белдереп, берәй нисек ризалатҡым килә. Әле аҡсам ҡалманы тиерлек. Бурысҡа алып торорға тура килер. Әммә беҙҙә: «Табипҡа мотлаҡ түләргә кәрәк, юғиһә дауаның файҙаһы булмаясаҡ», – тиҙәр. Аҙ булһын, бүләгең дә хәлеңдән килгәнсе булһын, әммә булһын. Бына шулай. Шуға күрә һеҙ минән ҡурҡмағыҙ.

– Тимәк, әсәйегеҙ әле больницала?

– Эйе, көн һайын шылтыратып хәлен белеп торасаҡмын. Шәфҡәт туташтары менән һөйләшеп киттем. Өйҙә эштәремде ҡараштырып, аҡса табам да ҡабат киләм. Мин һеҙҙән бер нәмә һорайым тигәйнем. Урыным титан эргәһендә генә бит. Рөхсәт итһәгеҙ, кәрәк сағында күмер ташлап, уны үҙем ҡарап торор инем. Саҡ ҡына булһа ла мәшәҡәтегеҙ кәмер.

– Һеҙ бит былай ҙа һәр бер станцияла тап-топ йыйып, уны ҡайнатып тораһығыҙ. Нишләп рөхсәт һорайһығыҙ?

Егет беренсе тапҡыр йылмайҙы.

– Йыям шул. Һеҙгә бит кире ҡайтҡанда ла күмер кәрәк буласаҡ. Яғыулыҡты һаҡлайым. Тик рөхсәтһеҙ, нисектер, уңайһыҙыраҡ.

–Улай бик теләйһегеҙ икән, яғығыҙ, – тип көлдө ҡыҙ.

Шулай итеп, һөйләшә-һөйләшә туҡталыш ваҡытын үткәрҙеләр, төнгө перронда саф һауа һуланылар. Башҡаса Шәүрә Олуғбәк менән һөйләшмәне, хатта нисектер уға иғтибар ҙа итмәй башланы.

Вагонда Олуғбәк, тыныс төн теләп, үҙенең урынына китте. Шәүрә был станцияла төшкән пассажирҙар тапшырған түшәк кәрәк-яраҡтарын ҡарарға керешә. Өс комплекттан сағыштырмаса таҙа ике йәймә, мендәр тышы, таҫтамал табылды. Төнгө һиллектә ҡыҙыҡай «ҡытай» әҙерләргә тотондо – проводник ҡатын Аня өйрәткән аҡса эшләү серҙәренең береһе ошо ине.

Тотонолған бельены элекке бөгөлдәренә тап килтереп бөкләйһең дә, саҡ ҡына һыу бөркөп, тоҡтоң иң төбөнә, яңыларының аҫтына һалып ҡуяһың. Ул шул рәүешле «үтекләнеп ята». Ә был тоҡтан таҙа комплектты алып, буш тоҡҡа һалаһың. Иң мөһиме, таҙалары янында ундан артыҡ комплект булып ҡуймаһын. Тикшерһәләр-маҙар, быға иғтибар итәсәктәр. Икенсенән, бындай һаҡлыҡ үҙең буталып китмәҫ өсөн дә кәрәк. Бәйле тоҡтарҙа унар комплект. Тоҡ сиселгән икән, тимәк, унда – кәмерәк ҡалған. Бер комплект – бер һум. «Ҡытай» ни тиклем күберәк була, кеҫәңә һумдар ҙа шул тиклем күберәк төшөп ята. «Ҡытай»ҙы төндә, йәшерәк кешеләргә, иң яҡшыһы ир-атҡа бирергә

кәрәк – улар бик иғтибар итеп бармай. Ҡатын-ҡыҙҙар ҡараңғыла ла күҙгә күренмәҫлек тапты абайларға, сит еҫте һиҙергә һәләтле. Улар менән бәйләнмәүең хәйерле», – тип өйрәтә торғайны Аня. «Кәңәшсе-тәрбиәсе»һенең һабағын үҙе һынап маташманы Шәүрә, оҫталыҡ серҙәре менән уртаҡлашҡан өлкән иптәше нисек әйткән, шулай эшләне. Ҡайһы берҙә уның шул тиклем белгеһе килеп китә: ҡыҙҙарҙың берәйһе «ҡытай» етештереү серен беләме икән, әллә ул ғына шулай эшләйме?

«Ҡытай» менән эште бөтөргәндән һуң, Шәүрә күрше вагонға, Айгөл менән Вәлимә янына, барып килергә булды. Бөгөн көндөҙ ҡыу далалағы бер туҡталышта ҡысҡырышҡан тауыш ишетеп тәҙрәгә ҡараһа, ике ҡаҙаҡ егете Вәлимәне вагон күтәрмәһенән һөйрәп ҡырталаша. Шәүрә, пассажирҙарҙы этә-төртә, уға ярҙамға ташланды һәм бик ваҡытлы килеп өлгөрҙө. Вәлимәнең хәле бөтә яҙғайны инде. Ә егеттәрҙә көс-дәрт ташып тора.

Баҡтиһәң, поезда килгәндә береһенең Вәлимәгә күҙе төшкән. Станцияһына ҡайтып еткәс, төшөп барышлай, үҙе менән бергә ҡыҙҙы ла алырға булған. Ҡаршыларға килгән ағаһына ҡаҙаҡса ҡысҡырған да, тегенеһе атынан һикереп төшә һалып, платформаға шаптырҙап килеп менгән. Икәүләшеп ҡыҙыҡайҙы һөйрәкләргә тотонғандар. Әммә сымыры ғына ҡыҙыҡай ҙа берешә һалып барыусыларҙан түгел. Ҡолаҡ тондорғос итеп ҡысҡыра башлаған. Шул тиклем шарылдауға ҡаҙаҡ егеттәре лә ҡаушаңҡыраған. Ул арала Вәлимәгә әхирәттәре Айгөл менән Шәүрә ярҙамға килеп өлгөрҙө. Поезд ҡуҙғалғас, тәҙрәнән был эшкинмәгән ҡыҙ урлаусыларҙың башына әллә күпме мыҫҡыллы һүҙҙәр яуҙы. Егеттәр иһә, рәхәтләнеп көлә-көлә, үтә сос ҡыҙҙарға ҡул болғаны. Алыҫтағы ярым ҡыйшайған саман өйҙәр фонында тыныс ҡына үлән семсегән ҡара юрғалары был шау-шыуҙан тертләп, ҙур күҙҙәрен тонйоратып ҡарап-ҡарап алды.

Ул арала Айгөл вагондағы пассажирҙар һанын асыҡлаған мәғлүмәт ҡағыҙы килтерҙе. Үҙеңдә күпме юлаусы барғанын өҫтәп яҙырға ла уны артабан ебәрергә кәрәк. Арыуҙан һәм эҫелектән йонсоп сайҡала-сайҡала китеп барған Шәүрәне күрше вагондың тамбурында иҫерек егет эләктереп алды. Нәҙек оҙон буйлы, үҙе торғаны бер ҡоро һөйәк. Егет тиҙ генә өйләнешергә лә артабан юлды бергәләшеп ҡыҫҡартырға тәҡдим итте. «Улай күпкә еңелерәк буласаҡ, сибәркәй. Бына үҙең күрерһең», – тип өгөтләне ул аяғында саҡ баҫып торған килеш. «Минең бит әле йәшем етмәгән»,– тип хәйләләне Шәүрә. Егет йораты уға шунда уҡ ышанды. «Йәл, – тине ул, ҡаҡса ғына ҡыҙға ҡарап. – Ярар, үҫеп етеү менән мине эҙләп табырһың».

«Шөкөр, ҡотолдом, – тип һөйөндө ҡыҙыҡай. – Поезға ултырыу менән тубыҡтары сығып, ҡайышланып бөткән спорт салбарҙарын кейеп алалар ҙа, колбаса турай һалып, араҡы эсергә ултыралар. Етмәһә, үҙҙәрен яҙмыш бүләгеләй һанап, бәйләнергә керешәләр. Ярай әле, ун алты йәшлек ҡыҙыҡайҙың проводник була алмағанына башы етмәне».

Үҙенең вагонына урап ҡайтты. Халыҡ йоҡлай. Был юлы рейс тыныс. Бер кем дә эсеп, боларып йөрөмәй. Тынлыҡты кемдеңдер хырылдауы ғына боҙа. Киләһе станцияға тиклем саҡ ҡына йоҡлап алырға ла мөмкин. Тик сәғәтте шылтыратырға ҡуйырға онотмаҫҡа кәрәк. Тәүге үҙ аллы сәфәрендә ул, йоҡлап ҡалып, ирле-ҡатынлы пассажирҙарҙы уятырға онотҡайны. Шул арҡала тегеләр кәрәкле туҡталыштарын үтеп киткән. Әл дә әрләшмәнеләр, хатта һаман уянып етмәгән йәш кенә ҡыҙыҡайҙы йәлләнеләр ҙә булһа кәрәк әле.

Шәүрә, юл ыңғайында оҙон, ҡалын резина бирсәткәләрҙе кейә-кейә, икенсе остағы бәҙрәфкә йүнәлде. Әсәһе был бирсәткәләрҙе әллә ҡайҙан табып, уның өсөн бер нисә пар һатып алғайны. Ҡыҙыҡай уларҙы күҙ ҡараһындай һаҡлап ҡына тотона. Биҙрәгә һыу алып, мул ғына хлор өҫтәне лә таяҡ менән болғатты. Унан стенаның уртаһынан башлап тотош һибеп сыҡты. Әле хлор еҫе уға «Шанель №5» хушбуйынан да хуш еҫлерәк тойолдо. «Эш хаҡы бирһәләр, шунда уҡ француз хушбуйы һатып алам», – тип хыялға бирелде ул. – Шундай хәтәр булып факультетҡа килермен дә коридор буйлап үтермен. Ә артымдан затлы хуш еҫ томаны аңҡып ҡалыр». Шәп бит, ә! Тик бына дефицит әйберҙәр менән шунһы ҡыйын: ялғанды тоттороуҙары бик мөмкин. Францияла түгел, Дерибасовская урамында әтмәләнгән тауар өсөн әллә күпме аҡса түләп отолоуың бик тә ихтимал. Бер саҡ әхирәте Clema һатып алғайны, шыптырын асып ҡараһа, шешә буп-буш. Әммә был осраҡ Шәүрәнең затлы хушбуйға эйә булыу теләген һүндермәне, бары тик таныш фарцовщиктарҙан алыр кәрәк.

Эшен бөтөргәс, Шәүрә бәҙрәф ишеген бикләп ҡуйҙы: ныҡлап кибергә тейеш. Юғиһә таҙартыуҙың бер файҙаһы ла юҡ. Был эшкә лә уны Аня өйрәткәйне: ҡулыңды бысратып, сепрәк менән мәшәҡәтләнеп тораһы юҡ. Ә һөҙөмтәһе иҫ киткес. Тәүлегенә бер нисә тапҡыр ошолай эшләп, ике бәҙрәфте лә алмаш-тилмәш таҙалап торһаң, бер ниндәй ҙә насар еҫ сыҡмай. Был бик мөһим. Юғиһә бит, Ташкент йүнәлешенә «тәгәрләгәс тә ярай, шунһына ла рәхмәт» тип әйтерлек иҫке вагондар бирәләр. Ә бына Мәскәүгә һәр ваҡыт ялтлап торған өр-яңы вагондар йөрөй. Уны йыйыштырыуы ла еңел, барыуы ла күңелле. Ә бында әллә ниндәй тотош ағас тип әйтерлек вагон, революцияға тиклемге тормошто күрһәткән кино төшөрөргә генә ярарлыҡ. Уларҙың Өфөһөндә лә берәй ваҡыт киностудия булыр әле, бына шул ваҡытта оҙон-оҙаҡ юл тормошонан таушалған тәгәрмәс өҫтөндәге был «табуттар»ҙың бик тә кәрәк булыуы бар. Егәрле һәм тернәксел ҡыҙ шул Шәүрә. Тормоштағы моңһоу һәм ялҡытҡыс ваҡиғаларҙың да ыңғай яҡтарын күрә белә. Кем әйтмешләй, шул арҡала бирешмәйбеҙ ҙә!

3

Был яҡҡа барышлай вагон һәр саҡ лыҡа тулы була. Башлыса ғаиләләр: береһенән береһе бәләкәйерәк мыжыҡ балалы ата-әсәләр. Саҡ ҡына ҙурыраҡ балалар тиҙ арала үҙ-ара танышып ала ла вагон буйлап йүгерешә, шаяра башлай. Эҫелектән мейе ҡайнарлыҡ вагонда сыр-сыу тынмай тиерлек. Ескәйҙәрҙән айырмалы рәүештә, өлкәндәр ҡымшанып бармай, әлһерәшеп, ярға ташланған балыҡ кеүек ауыр һулап, урындарында аунай. Ә балалар, нисектер, эҫене еңел кисерә.

Плацкарт вагондың беренсе һәм икенсе бүлектәрендә урынлашҡан ҡатындар юлға сығыу менән үк әшнәләшеп алғайны. Был апаҡайҙар хатта тышҡы ҡиәфәттәре менән дә бер-береһенә ныҡ оҡшағайны: ҡыҫҡа ғына итеп ҡырҡылған сәстәрен химка менән бөҙрәләткәндәр. Ауыҙҙарында алтын тештәре йылтырай, йыуан бурбайҙары йөнтәфи. Кейемдәренә тиклем бер рәүештәрәк: кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән лапшыҡ халаттар. Ҡарап тороуға өлкән күренһәләр ҙә, ҡырҡтан артыҡ түгелдәр, буғай. Яһиллыҡтары йөҙҙәренән генә түгел, бөтөн булмыштарынан аңҡып, титан шикелле ҡайнап тора. Улар шунда уҡ ҡыҙҙары йәшендә булған йәш кенә проводник һылыуҙы күрә алмай, көндәшкә ҡараған кеүек ярыша, уның менән булаша башланы. Балаларын ҡарарға ла онотоп, Шәүрәнең һәр аҙымын күҙәтергә, йылан

һымаҡ ыҫылдап тикшерергә керештеләр. Үтеп барған һайын артынан: «Ана, тағы китте. Бер туҡтауһыҙ тегендә-бында йүгерә. Ҡалай анһат эш табып алған, ә беҙ ғүмер буйы бил бөгөүҙән башҡаны белмәйбеҙ. Иртәнән кискә тиклем эш тә эш! Ә был, сәсен елпелдәтеп, вагондар буйлап сабыуын белә!»

Мәшәҡәтенә сумған ҡыҙ иһә уларҙы бар тип тә белмәй. Бындай бисәләрҙе осраҡҡылағаны бар, шуға күрә, нисек кенә тырышһаң да, уларға ярап булмағанын бик яҡшы аңлай. Шулай ҙа был апаҡайҙар уның йәненә тейергә сәбәп тапты. Тауыштары көр, үҙҙәренә башҡаларҙың да иғтибарын йәлеп итеү теләге лә ҙур:

– Нишләп һеҙҙең расписаниеғыҙ юҡ? Поездың йөрөү ваҡыты һәр бер вагонда эленеп торорға тейеш.

Дөрөҫөн әйткәндә, Шәүрә аптырап ҡалды. Бөтәһе лә күрерлек итеп элеп ҡуйырлыҡ расписание, ысынлап та, юҡ. Ул үҙе файҙаланғаны – тәүге биттәре йыртылып бөткән китапсыҡ кеүеге – бик иҫке. Уның менән кешеләрҙең башын бутағыһы килмәй. Тик был йүнһеҙҙәргә аңлатып буламы ни?

Уның ҡулындағын күреп ҡалдылар ҙа яңъял ҡуптарҙылар:

– Үҙенеке бит бар! Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ! Уға ғына булһын да, башҡаларға кәрәкмәйме ни?! Тәкөрә ул пассажирҙарға!

Ҡыҙ тәүҙә аңлатырға тырышҡайны. Кемдер уны яҡлап маташҡанын, ғауғаға башҡаларҙың да ҡатнашып, ҡысҡырыш киткәнен күргәндән һуң, ҡул һелтәне. Бөтәһенең дә бер аҙға шымып ҡалған мәлен файҙаланып, тотош вагонға ишетелерлек итеп:

– Ярар, элеп ҡуям, – тип белдерҙе. – Тик алдан уҡ иҫкәртәм: ул ныҡ иҫке, күп ваҡыт ысынбарлыҡҡа тап килеп тә етмәй. Шуға күрә, бер-бер хәл була икән, яуаплылыҡ һеҙҙә. Үҙегеҙгә үпкәләгеҙ.

Был ҡатындар атлаған һайын юрамал расписание ҡарай һәм һәр бер туҡталышта, үҙҙәре әйтмешләй, «быуындарҙы яҙып алыр өсөн» тышҡа сыға башланы. «Әйтерһең дә, уларҙың быуындары менән һөйәктәре бар, – тип йәне көйөп уйланы ҡыҙ. – Ҡасандыр булһалар ҙа, шул тиклем май араһында йомшарып бөткәндәрҙер инде».

Әммә был оҙаҡҡа барманы. Кискә табан поезд далала туҡтаны. Будкалағы кешенән һәм шлагбаумдан башҡа күҙгә ташланырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Өҫтәл өҫтө кеүек тип-тигеҙ, аяуһыҙ ҡояш нурына көйгән ер. Проводник купеһының ишегендә эленеп торған расписание буйынса, был ваҡытта илле минутлыҡ туҡталыш булырға тейеш. Йүнһеҙ бисәләрҙең береһе был турала барыһы ла ишетелерлек итеп иғлан итте. Бөтөн вагон дәррәү ҡуҙғалып тышҡа атлыҡты. Будкалағы кешенең бындай хәлде бер ҙә күргәне булмағандыр: аптырап ҡалды. Бында поездар биш минуттан артыҡҡа туҡтамай ине. Бөтәһе лә ошонда төшөп ҡала тиер инең, яҡын-тирәлә кеше йәшәгән урын юҡ. Ә был тимер йорттан балалы ҡатындар, ир-егеттәр, хатта ҡарт-ҡоролар ҙа ағыла.

Шәүрәгә лә барыһы менән бергә сығырға тура килде.

«Ҡайҙа бараһығыҙ инде? Күрмәйһегеҙме ни, тирә-яҡта ҡоро даланан башҡа бер нәмә лә юҡ», – тип һөйләнә-һөйләнә, бейек ҡырсын өйөмөнә һикерергә ярҙам итеп торҙо. Кешеләр төшөп кенә бөткәйне, поезд сайҡала бирҙе лә, гудогын ҡысҡыртып, яй ғына ҡуҙғалып та китте. Көтөлмәгән хәлдән баштарын юғалтҡан халыҡ сыр-сыу килә. Етеҙерәктәр вагонға ырғыны, тик береһенең дә, Шәүрәнең ҡысҡырыуына ҡарамаҫтан, «стоп-кранға» баҫырға баштары етмәне. Был юлы ҡыҙға инде тиҙлеген арттыра барған вагонға кешеләрҙе бер-бер артлы этеп мендерешергә тура килде. Бөтәһе лә шул тиклем тиҙ

булды. Пассажирҙар аптырашып йүгерешә, һикерешә, кемдеңдер аяҡ кейеме төшөп ҡалды. Поезд бөтөн тиҙлегенә китеп барғанда өйөмдә Шәүрә бер үҙе генә баҫып тора ине. Үҙенең вагонына өлгөрөрлөк түгел ине, әле эргәһенән вагондар елдереп үтеп тора. Шул ваҡыт кемдеңдер көслө ҡулдары уны күтәреп алды һәм иң һуңғы вагондың күтәрмәһенә баҫтырҙы.

Вагонына әйләнеп ҡайтҡас, проводник ҡыҙға бер кем дә битәрләп һүҙ әйтергә баҙнат итмәне. Был хәлдән һуң барыһы ла уның ҡағиҙәләренә буйһондо. Башбаштаҡлыҡтары арҡаһында ҡыу далала тороп ҡала яҙғандарын һәммәһе лә яҡшы төшөнгәйне.

Шәүрә өндәшмәй генә расписаниены алып ташланы ла үҙ мәшәҡәттәренә кереште. Ярай, үткән эшкә ҡар яуһын, иң мөһиме, бәлә-ҡазаһыҙ ҡотолдолар. Кешеләргә был хәлдән һуң тынысланырға кәрәк. Кем генә хаталанмай? Был тормошта үлемдән башҡа бөтә нәмәне лә төҙәтергә мөмкин. Хәҙер ул ҡаты итеп сәй бешерер. Унан, серле алъяпҡысын кейеп, хуш еҫле эҫе сәй таратыр һәм барыһы ла яйланыр. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. Сәй өләшкән саҡта күңеленә хуш булған шөғөлөн дә онотмаҫ: пассажирҙарҙы күҙәтер, кемдең кем булыуы хаҡында күрәҙәлек итер.

Был рейста бер пассажир күптән инде уның иғтибарын йәлеп иткәйне. Буйлы ыштан, оҙон аҡ күлдәк кейгән, тап-таҡыр итеп ҡырылған башында ҡап-ҡара түбәтәй. Ул башта уҡ Шәүрәнең сәйенән баш тартты, әммә титанда һәр ваҡыт ҡайнар һыу булған өсөн бер һум аҡса бирҙе. Үҙенең ыҡсым ғына сәйнүгендә сәйҙе үҙе бешерә, шунан кәсәгә аҙлап ҡына яһай ҙа яйлап ҡына, ләззәтләнеп тороп эсә. Тимер ҡумтаһындағы яҙыуға ҡарағанда, ҡарт йәшел сәй эсә. Ә гәмәлдә эсемлек ни өсөндөр аҡһыл һары төҫтә һәм унан бөтөн вагонға һулап туймаҫлыҡ хуш еҫ тарала. Ҡарт бик тотанаҡлы, артыҡ бер кем менән дә һөйләшеп бармай, бер кемгә лә ҡамасауламай. Көмөрөрәк танау, үтә күренмәле кеүек тойолған зәңгәр күҙҙәр, нәҙек ирендәр, төйөлөңкөрәп торған ҡаштарына ҡарағанда, ул үзбәк тә, ҡаҙаҡ та түгел. Башҡорт тиер инең, кейеме, ҡылыҡ-фиғеле ятыраҡ. Йөҙ һыҙаттары менән ул бер ни тиклем Шәүрәнең олатаһын хәтерләтә. Шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер ят тормоштоң йоғонтоһо ла һиҙелеп ҡала. Был кеше шул тиклем мауыҡтырғыс тойолдо – ҡыҙ юл буйы һиҙҙермәй генә уны күҙәтеп килде. Ул илле өсөнсө урында, тап Олуғбәктең һәндерәһенең аҫтында бара ине. Сәй өләшеп бөтөүе булды, шул ҡарт эргәһенән үтеп барған ҡыҙға башҡортсалап өндәште:

– Кил әле, ҡыҙым, аҙ ғына яныма ултырып ял ит, сәй эс. Минең менән һөйләшкең килеп йөрөгәнеңде һиҙеп торам. Һис ҡаршылығым юҡ, әйҙә һөйләшәйек. – Ҡаршыһында ултырған Олуғбәккә үзбәксәләп ниҙер әйтте. Тегеһе ихтирамлы ғына тороп, Шәүрәгә урын бушатты, тамбурға сығып китте.

Ҡыҙ ҡарттың алдына күндәм генә килеп ултырҙы, ул өлкәндәрҙе тыңларға күнеккәйне. Ҡарт ап-аҡ тоҡсайҙан тағы бер кәсә килтереп сығарҙы ла үҙенең үҙенсәлекле сәйен яһап бирҙе. Был һирәк осрай торған шифалы тау үләндәренең ҡатнашмаһы булып сыҡты. Ҡайһы берҙәрен Шәүрә таныны ла шикелле, тик барыһын да түгел.

Бал, сәтләүек, кипкән өрөк ҡушып, яйлап ҡына сәй эсәләр. Ҡарт өндәшмәй. Шәүрә лә өнһөҙ. Ул ҡарттың яҙмышын саҡ ҡына сырамыҡкан да кеүек, әммә был тарихты уның үҙенең ауыҙынан ишеткеһе килде. Ул, моғайын, Урта Азияға колхозлашыу осоронда киткәндәрҙең береһелер. Ә, бәлки, иртәрәк, Граждандар һуғышы барған саҡта уҡ ҡасырға тура килгәндер. Ҡарт һаман да етеҙ хәрәкәтле, шуға күрә уның, яланғас ҡылысын һоноп, һыбай сапҡанын күҙ

алдына килтереүе ҡыйын түгел. Шулай тип фараз итте ҡыҙ, ә ҡарт уға сабыйҙарҙың күҙ йәшеләй саф күҙҙәре менән текләгән дә һаман өндәшмәй. Икенсе кәсә лә эсеп бөтөлөп, өсөнсөһө яһалғандан һуң ғына ҡарт һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә йылмайҙы. Унан Шәүрәгә табан эйелә биреп, тик ул ғына ишетерлек итеп:

– Ярай, ҡыҙым, һине нимә ҡыҙыҡһындырғанды аңлайым. Ишегеңдәге яҙыуҙан һинең тарих факультетында уҡығаныңды белдем. Тимәк, минең унда нисек барып сыҡҡанымды, кем булғанымды, ҡасан унда киткәнемде белгең килә. Үҙең нисек уйлайһың һуң?

– Моғайын, һеҙ Башҡорт ғәскәрендә булғанһығыҙ һәм аҡтар менән дә, ҡыҙылдар менән дә һуғышып, сит илгә сығып киткәнһегеҙҙер. Унан кире ҡайтып, баҫмасыларға ҡушылғанһығыҙҙыр, – тип бер тынала әйтеп һалды Шәүрә.

Ғәжәпләнгән ҡарт йәшенә күрә түгел аҡ, тип-тигеҙ, ныҡ тештәрен күрһәтеп көлөп ебәрҙе.

– Тап өҫтөнә баҫтың, тиергә була. Тик мин баҫмасы булманым. Ә бына Башҡорт ғәскәре тураһында – дөрөҫ. Вәлиди менән бергә киткәйнем. Тик Көнбайышта йәшәй алманым. Төркиәлә төйәкләнергә лә була ине. Тик Тыуған илемә яҡыныраҡ булғы килде. Шуға күрә һуғыш алдынан, уның буласағы асыҡ ине инде, боролоп ҡайттым.

Шәүрә:

– Һуғыштың булыры билдәле инеме ни? Германия бит мәкерле рәүештә һөжүм иткән, бөтөн килешеүҙәрҙе боҙоп, – тип ҡыҙып һөйләй башлағайны, ҡарт йылмая биреп бүлдерҙе.

– Был Сталиндан башҡа бөтәһенә лә асыҡ ине бит. Ул мәлдә Францияла инем. Советтарға ҡурҡыныс янағанын күптәр аңлай ине инде. Мин Урта Азияға күстем, уның төрлө яҡтарында йәшәнем. Бер урында ла тамырланып, ныҡлап төйәкләнеп китә алманым. Гел Уралға тартты, һаман да тарта. Тыуған илдән дә ғәзизерәк бер нәмә лә юҡ, ҡыҙым. Тик минең нәҫелдән бер кем дә тере ҡалмаған. Барыһын да үлтереп бөткәндәр. Башҡаса өйләнмәнем, балаларым да бүтән булманы. Сит яҡта, ят ҡатындарҙан балаларым булыуын теләмәнем. Кем булып үҫер ине улар? Моғайын, һеҙҙең тарих факультетында был турала һөйләмәйҙәрҙер.

– Һуғыш ваҡытында нимә эшләнегеҙ?

– Бөйөк Ватан һуғышын күҙ уңында тотаһыңмы? Һуғыштым, әлбиттә. Уларҙың Уралға барып етеү ихтималын күреп, нисек сыҙап тораһың? Үзбәкстан тураһында ишеткәнең барҙыр. Рәсәйҙән килгәндәр, унда Совет власы юҡ, тигән фекерҙә. Бында бер ни тиклем дөрөҫлөк бар. Шуға күрә унда йәшәнем дә инде мин. Урта Азияла беҙҙекеләр бик күп бит. Ҡайһы берәүҙәре хәҙер Башҡортостанға күсеп ҡайта. Бәлки, берәй ваҡыт мин дә ҡайтырмын. Әлегә мөҙҙәте етмәгән. Һеҙҙә азатлыҡ юҡ әле.

– Унда бармы?

– Көлһәң көлөрһөң инде, әммә бар. Эшләп тапҡаның менән бүлешә белһәң, байлығың менән күҙҙәренә төртмәһәң, һиңә иғтибар итеп бармайҙар. Тик ерле халыҡ ҡына бай була ала. Ә беҙгә уларҙың йәненә теймәү хәйерле.

– Ә һеҙ миңә быларҙы һөйләргә ҡурҡмайһығыҙмы?

– Юҡ, ҡурҡмайым. Әгәр ҙә минең ейәнсәрем булһа, ул тап һинең кеүек булыр ине, моғайын.

– Ысынлап та миңә оҡшаған булыр ине, тип уйлайым. Ышанмаҫһығыҙ, бәлки, әммә һеҙ минең олатайыма ныҡ оҡшағанһығыҙ. Тик ул буйға һеҙҙән

тәпәшерәк. Ул һуғышмаған. Бик бай булған, өҫтәүенә мулла. Ғаиләһе менән Башҡортостандың икенсе яғына күсеп киткән. Икенсе фамилия алған һәм бөтәһен дә яңынан башлаған. Аҙаҡтан, заманалар бер аҙ тыныслана башлағас, Үзбәкстандан алыҫ ҡына туған апай һирәк-һаяҡ ҡунаҡҡа килә башланы. Килә лә илай. Ул Урта Азияға ата-әсәләре менән сығып киткән. Улары күптән инде гүр эйәһе. Шул киткәндәренән бер тапҡыр ҙа кире ҡайтып күрә алмағандар. Апай шунда кейәүгә сыҡҡан, балалары инде ҙурайып бөткән, ә ул һаман күнегә алмай, һаман да үҙен ят итеп тоя, тик ҡайтырға һуң. Ханатластан тегелгән ялтыр-йолтор күлдәген кейеп ҡайта. Был күлдәгендә ул шул тиклем сәйер күренә, шул арҡала минән иптәштәрем көлә. Шуға күрә мин ул күлдәкте берәй нисек бысратырға тырышам, тик уның бөтә күлдәктәре лә бер төрлө.

– Уға йәнең көйгәне тойола, тик ни өсөн? – тип ҡыҙыҡһынды ҡарт.

– Үҙем дә аңламайым. Уны бәләкәй генә сағында алып киткәндәр, бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡ.

– Күсһөҙҙәрҙе бер кем дә яратмай. Ә ул һиңә үҙенең күсһөҙлөгөн күрһәткән, шуға күрә һин үҙең дә аңламаҫтан уға асыуланаһың. Ысынында иһә һин үҙеңде күсһөҙ тип тояһың һәм шунан ҡурҡаһың. Әммә бел: һин күслөләр нәҫеленән. Тик ир-егеттәргә күсәңдө күрһәтмә, улар быны яратмай. Иҫеңдә тот.

Шәүрә һөйләшеүҙең тамам икәнен аңланы. Ҡарттың сырайы ҡапыл ғына битарафҡа әйләнде, әйтерһең дә, асыҡ китап күҙ асып йомғансы ябылды. Ҡыҙ, урынынан тороп, ҡартҡа хөрмәт менән баш эйҙе. Уларҙың осрашыуы һис тә осраҡлы һәм, иң мөһиме, һуңғы түгел кеүек тойғо ҡалды. Ҡарт та быға ышана ине шикелле. «Ниндәйҙер мистика,– тип уйланы ҡыҙ. – Шулай ҙа була икән был донъяла». Ул да үҙенең китабын япты һәм уға яңы ғына мәғлүм булғандарҙы күңеленең иң түренә бикләп ҡуйҙы.

4

Ташкенттан һуң Шәүрәләрҙең отрядын Мәскәүгә ебәрҙеләр. Йәнәһе, яҡшы эшләнегеҙ, афарин, хәҙер баш ҡалаға бараһығыҙ. Бер баш ҡаланан икенсе баш ҡалаға. «Өфө – Мәскәү» поезының өр-яңы вагондары ялтлап тора. Йәйге ямғыр уның башындағы күҙгә күренмәҫлек туҙандарын да йыуып төшөргән. Һәр йүнәлештең үҙенең ыңғай һәм кире яҡтары бар шул. Ташкент поезында халыҡ ябай булһа, Мәскәүгә юлланған ханымдар барыһы ла тиерлек үҙҙәрен әллә кемгә ҡуя. Уның ҡарауы, Мәскәүҙә рәхәтләнеп урам ҡыҙырырға мөмкин. Иң тәүҙә Арбатҡа барырға кәрәк. Унда яйлап йөрөп тә, ҡайһы бер кәрәк нәмәләрҙе алып та була. Тәүге барғанда Шәүрә унда футболка һатып алды, ҡапҡара ғына, еңһеҙ, түшенә «New-York» тип яҙылған. Был юлы, бик булмаһа, Калинин проспектына барыр, унда магазиндар күп, инеп ҡапҡылап сығырлыҡ урындар ҙа етерлек.

Рейс тыныс, артыҡ мәшәҡәтһеҙ. Күберәге Өфө халҡы бара. Дөрөҫөн әйткәндә, юл да рәхәт: эҫе түгел, хатта тештәрҙә шытырҙай башлаған ҡом да юҡ. Етмәһә, бер тәүлек кенә барырға. Шәүрә, быға́са һис булмағанса, бер китап уҡып бөтөп, икенсеһен башланы. Күрше вагонда барған Вәлимә килгәс, көнбағыш ярып, байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Ул Шәүрә менән бергәләп Мәскәүҙә йөрөргә лә дәртләнгәйне, һуңғы минутта кире уйланы – ҡыҙҙар менән Горький исемендәге паркка барырға булды.

Йәкшәмбе. Шәүрә тәүҙә сит ил туристары мыжғып торған Иҫке Арбатҡа барып, сувенирҙар һатылған ерҙә йөрөнө. Бына ошо айырым ғына бер урамда

ирекле, матур, хатта бай ҙа сит ил тормошо ҡайнай кеүек тойолоп китте. Ваҡыт һиҙелмәй ҙә үтеп киткән. Шәүрә «Нәфис фильм» кинотеатры янындағы бер киоскынан йәнә «New-York» тип яҙылған футболка алды, был юлы күл төҫөндәгеһен, оҙон еңлеһен.

Ә бына ҡайтыр юл ҡыйын булып сыҡты, бәлки, шуға күрә лә бөткөһөҙ оҙаҡ тойолғандыр. Урта йәштәрҙәге ирҙәр, табын ҡороп, юл буйы эсте. Атлаған һайын үҙҙәренә ҡушылырға саҡырып маҙаға тейеп бөттөләр. Ниһайәт, иң ситтәге купела килгән, уларҙан йәшкә бер ни тиклем өлкәнерәк ике ҡатын уларҙың иғтибарын йәлеп итте. Бәхеткә күрә, аралашыу теләге уртаҡ булып сыҡты, һәм шаулы табын таңға саҡлы дауам итте. Быныҡ һөҙөмтәһе буларaҡ, иртәнсәк бөтөн вагон тәрән йоҡола ине.

Элеонора Петровна тигән егерме ете йәштәрҙәге ҡатын урынында барыһынан да оҙағыраҡ аунаны. Һүнгән ҡараштарына ҡарап, уға үҙ йәшенән байтаҡҡа күберәкте биреп була. Элеонора Һамар ҡалаһында тимер юл кассаһында билет һатыусы булып эшләй. Иптәштәре уны күңелсәклеге һәм алсаҡлығы өсөн бик ярата ине.

Әле уның Мәскәүҙән ҡайтып килеүе. Түҙгеһеҙ итеп эсе яна, һәм, ҡулынан килһә, мәңге урынынан тормаҫ ине. Әйтерһең дә, уның ниндәйҙер бер ағзаһын ҡырҡып алғандар ҙа, бөтөн булмышы йән әрнетеп һыҙлай. Ә бит был сәфәрҙе ул йыл буйы өҙөлөп көтөп алғайны. Баш ҡалала уны яратҡан кешеһе, берҙән-бер Витюшаһы көтә ине.

Еүеш түшәгендә әйләнә-тулғана ятҡан Элеонора Петровна поезд тәгәрмәстәренең йәнгә тейгес туҡылдауы аҫтында нисек итеп үҙенең көндәше барлығы хаҡында белгәнен ҡабат-ҡабат иҫенә төшөрҙө. Һәр ваҡыттағыса, ул Витюшенькаһының коммуналь фатирында туҡталды. Ул көндө лә йәренең ҡасан ялҡытып бөткән ҡатынынан – ҙур түрәнең һөйөклө ҡыҙынан – ысҡынып килерен көтә ине. Ялының өс аҙнаһы бына шул көтөүҙәр менән һиҙелмәй ҙә үтеп бара. Эшһеҙлектән Элеонора күптән инде бер кем дә йәшәмәгән был бүлмәне йыйыштырырға булып итте. Бәлки, үҙенсә яҡшы хужабикә булыуын да күрһәткеһе килгәндер. Ботинка ҡумтаһының эсендә ятҡан ҡағыҙҙар араһында үҙенең хаттары менән бергә икенсе берәүҙекен дә күреп, йөрәге өшөп китте. Тәрбиәле кеше буларaҡ, башҡаларға төбәлгән хаттарҙы уҡыуҙың бик насар икәнен аңлай. Әммә бындай саҡта нисек сыҙамаҡ кәрәк. Хаттар ҡыҫҡа, шаян һәм уның һөйгәненә ҡарата һағыш менән һуғарылған хаттарына бөтөнләй оҡшамаған. Бына бит береһендә Элеонора Петровна, ниҙер һиҙгән кеүек: «Бына тарағым төшөп китте лә иҙәндә аунап ята. Минән башҡа һин унда бер кем менән дә аунама инде, зинһар, йәме», – тип яҙған.

Хаттарҙың башында эш тураһында яҙылған, шуларҙан сығып, ул алтын бөҙрәле Витюшаһы менән был бисәнең бергә эшләгәнен аңланы. Артабан иһә һөйөшөү тураһында бер нисә генә һөйләм өҫтәлгән. Уларҙы уҡып, ҡатындың тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Йәш булыуы өҫтөнә бик дәртле лә, оятһыҙ ҙа, ахыры, был көндәш. Ә йәш икәне шикһеҙ, яҙыуы балаларса, хаталары ла байтаҡ. Элеонора Петровна ла улар танышҡан саҡта Эля ғына ине. Ҡырҡ йәшлек Виктор Федорович уның йәшлегенә ымһынғайны. Улар бынан һигеҙ йыл элек көньяҡта, данлыҡлы Сочи ҡалаһында, йәйге ял ваҡытында осрашты. Ул саҡта барыһы ла мөмкин кеүек ине. Элеонора Виктор янына Мәскәүгә бара. Ҡайһы берҙә икеһененең ялы бергә тура килә. Шул рәүешле улар Алупкала, Геленджикта, бер тапҡыр Феодосияла булды. Күҙгә төртһәң дә күренмәҫлек көньяҡ төндәрендә һөйгәне уның ҡолағына: «Сабыр ит, һөйөклөм.

Мин беләм, һин барыһын да аңлайһың. Һин генә мине аңлайһың, башҡаса һиндәйҙәр юҡ, – тип бышылдай. – Әле генә айырылыша алмайым. Ҡайным эштән ҡыуҙырасаҡ. Ул сағында беҙ нишләрбеҙ?» «Беҙ» тигән татлы һүҙ башты әйләндерә. Витяның әйткәне дөрөҫ. Ир кеше эшһеҙ ҡайҙа барһын? Ә Витюшаның эше һәйбәт, Мәскәүҙең төҙөлөш трестарының береһендә етәксе булып эшләй. Улар бер ваҡытта ла Витюшаның ҡатыны тураһында һөйләшмәй торғайны. Элеонора йәне һөймәгән ҡатын янында ғүмер үткәреүҙең ни тиклем әрнеткес икәнен былай ҙа күреп тора. «Ҡайным мәңгелек түгел. Оҙаҡламай пенсияға сығасаҡ. Шул саҡта инде ул миңә бер нисек тә зыян итә алмай. Мин һине Мәскәүгә яныма алырмын, һәм беҙ, ниһайәт, бәхетле булырбыҙ».

Әле килеп Элеонора Петровна был һүҙҙәрҙең алдаҡ икәнен, үҙенең юҡҡа ғына өмөтләнгәнен тулыһынса аңланы. Һәр ваҡыт унан йәшерәк ҡыҙҙар табылып торасаҡ. Йылдар үткән һайын, улар тик арта ғына барыр. Ана, вагон буйлап берәүһе, былай ҙа әрнегән яраһына үткән һайын сибәрлеге менән тоҙ һалып, елдереп йөрөй. Нисек шул тиклем алданды һуң Элеонора? Артыҡ ныҡ ышанғыһы килгәндер, моғайын. Иң ҡыйыны хыянатты фашлаған хаттар түгел, ә Викторҙың мөнәсәбәте булды. Элеонора Петровна хаттарҙы күрһәткәс, һөйгәне һиҙелер-һиҙелмәҫ йылмайыу менән генә сикләнде. Дөрөҫөн генә әйткәндә, был үтә оҙаҡҡа киткән бәйләнеш уны ялҡытҡан һәм араны нисек өҙөргә белмәй йөрөгән булған, күрәһең. Витюшаһының шулай еңел генә ташлашырға әҙер булыуына һаман да ышанып бөтмәгән бисара ҡатын үҙенең хаттарын да кире ҡайтарып биреүен талап итте. «Әлбиттә, әлбиттә, ал», – тине Виктор тыныс ҡына. Шунан: «Һине вокзалға алып барайыммы?» – тип һораны. Элеонораның үҙәк өҙгөс итеп илауы уны ныҡ аптыратты. «Бигерәк эҫенеп киткән. Күптән үк өҙөргә кәрәк булғандыр, күрәһең», – тип ғәжәпләнде ул. Уның бер ваҡытта ла Элеонораның тормошо тураһында уйлағаны юҡ ине. Тимәк, ҡатын был мөнәсәбәттәргә артыҡ етди ҡараған. Нишләргә белмәй, түшәккә ҡапланып үкһегән Элеонора янына ултырҙы, ҡулынан һыйпарға маташты. Тегеһе тартып алғас, яурындарын һикертеп, урынынан торҙо ла: «Кисер инде мине, – тине. – Үҙеңде ҡулға ал. Барыһы ла яҡшы булыр. Мин арыным, артабан һуҙыуҙан бер ниндәй ҙә фәтүә юҡ. Һин тыныслан, өйөңә ҡайт. Асҡысты бында ҡалдыр, ишекте шапылдатып япһаң, үҙе бикләнер». Эйелеп иренен Элеонораның маңлайына тейҙереп алды. «Былай килеп сыҡҡан өсөн ғәфү ит инде. Ярар, миңә китергә кәрәк», – тип урынында тапана бирҙе лә сығып китте. Элеонора кис буйы үкһеп ятты, төн буйы илап сыҡты ла иртәнсәк тороп вокзалға китте. Барыһы ла бөттө.

Алда әле бер аҙна ялы ҡалған, тик был уны ҡыуандырмай инде. Проводник ҡыҙ килеп, тиҙҙән Һамарға етәсәктәрен, ярты сәғәт алда бәҙрәфтәрҙе бикләргә тейеш булыуын әйтеп китте. Уның һылыу йөҙөнә ҡарап, Элеонора Петровна йәнә Витюша хаҡында уйланы. Бәлки, уның башҡа һөйәркәләре лә барҙыр һәм, ғөмүмән, бер ваҡытта ла ҡатынынан айырылырға йыйынмағандыр. Нишләп был ошоға тиклем уның башына килмәгән һуң?

Проводник ҡыҙ йәнә Һамарға яҡынлашҡандарын ҡабатлай. Йә Хоҙай, ни тиклем ялҡытты был Шәһрезада. Бына шундай икенсе бер йәш һәм һылыу арҡаһында Элеонора Петровна ташландыҡ ҡатын булып ҡайтып бара бит инде.

Шәүрә, уңыштар теләп, уның менән Һамарҙа хушлашып ҡалды ла шунда уҡ онотто. Үҙенең вагонында барған егеттән туңдырма һатып алыуын һораны.

Ә егерме минуттан һуң, автобустан төшөп, урамдың икенсе яғына сығып

барған Элеонора Петровнаны юғары тиҙлектә килгән йөк машинаһы бәреп китте. Ҡатын шунда уҡ йән бирҙе. Әллә ҡайҙа барып төшкән сумаҙанынан тигеҙ генә ваҡ хәрефтәр менән сыбарланған ҡағыҙ биттәре һәм сағыу төҫтәге юбкалар менән блузкалар осоп сығып, тирә-яҡҡа туҙраны. Һөйөү һәм һағыш тулы хаттарҙы ел өйрөлтөп алып китте. Ике хат барыһынан да алыҫҡараҡ барып төштө, гүйә, перрондан ҡуҙғалып киткән поезды ҡыуып етергә теләй ине улар.

5

Шәүрә төндә вагон ишегенә тиҫтәләрсә кеше дөбөрҙәткәнгә уянып китте. Йоҡо аралаш һикереп торҙо ла, арыуҙан сайҡала-сайҡала, көтөлмәгән пассажирҙарға ишек асырға ашыҡты. Ниндәйҙер бәләкәй генә станцияла нишләп улар шул тиклем күмәк булып ябырылды һуң? Нишләп барыһы ла Шәүрәнең ун өсөнсө вагонына ынтыла, ә перронда башҡа бер йән эйәһе лә юҡ? «Моғайын, кассир шаяртып билетты тик уның вагонына ғына һатҡандыр», – тип уйланы арыған ҡыҙ. Нижневартовскиға сәфәр бик ауыр булғайны. Шуға күрә ҡайтыр юлда пассажирҙарҙың булмауын ул күктәрҙең фатихаһы кеүек ҡабул иткәйне. Тимәк, рәхәтлектең дә сиге етте, Себерҙән кире китергә теләүселәр ҙә бар булып сыҡты.

Бәләкәй генә станциялағы берҙән-бер фонарҙең яҡтыһында Шәүрә, ғәҙәтенсә, билеттарҙы төпсөрләп тикшереп индермәксе ине, күмәк халыҡ быға ирек бирмәне. Дөһөрләшеп өҫкә менеп киләләр. Профилдән ҡараһаң, йөҙө грекtарҙыҡына оҡшап торған ҡарасман ир талапсан тауыш менән: «Бына, бөтә билеттар ҙа ошонда. Индерегеҙ, туҡталыш бында биш кенә минут», – тигәс, һаман уянып та етмәгән ҡыҙ тамбурҙа артҡа сигенде. Ныҡлап йоҡо эләкмәгәнлектән, баш йүнләп эшләмәй. Билеттарҙы һанап ҡараны, ун ете, күбеһе – балалар билеты. Ә эргәһенән леһерләшеп үтеп торған ғәм кәмендә биш тапҡырға артыҡ кеүек. Шәүрә асыуланып уларҙың артынан ташланырға, билетһыҙҙарҙы ҡыуып сығарырға теләгәйне, өлгөрмәне, поезд ҡуҙғалып та китте. Нишләйһең, уларҙы бөтөн тиҙлектә төртөп төшөрөп булмай бит инде. Ишекте ябырға тура килде. Инде ҡалайтырға, поезд начальнигына нисек хәбәр итергә? Әҙерлек курстарында бындай хәлдәр һәм унан сығыу юлдары хаҡында һөйләүсе булмағайны. Дөрөҫөн әйткәндә, унда артыҡ бер нәмә лә өйрәтмәнеләр инде. Ниндәйҙер сәйер уҡытыусылар бер-бер артлы иҫке вагондарҙың бер нисә минут эсендә янып бөтөргә һәләтле икәнен генә ҡабатланы. Һөҙөмтәлә, уларҙың нимә әйтергә теләгәне лә аңлашылып етмәне: «Янғын сыға ҡалһа, йәһәтерәк үҙеңә ысҡынырға, сөнки башҡаларға барыбер ярҙам итеү мөмкин түгел» тигән һығымта яһарғамы? Бынан тыш, уларға һәр станцияла тәгәрмәстәге бутсаларға ус менән тейеп тикшереп торорға кәрәклеген өйрәттеләр. Эҫе булһа, йәһәт кенә поезд начальнигына хәбәр итергә. Был инде: «Артабан барырға ярамай, был вагонды тәҙөгөнә алмаштырырға кәрәк» тигән һүҙ була, йәнәһе.

«Моғайын, поезд начальнигы билет һата алыр, – тип уйланы ҡыҙ. – Әгәр ҙә улай булмай икән, оятһыҙҙарҙы киләһе туҡталышта төшөрөрҙәр ҙә ҡалдырырҙар. Бик рәхәт түгел, әлбиттә, тик начальствоға баш баҫып барырға тура килә инде».

Ул, мөмкин тиклем асыулыраҡ төҫ сығарып, вагон буйлап йөрөп сығырға ынтылғайны, ишек асылғанын, вагондар тоташҡан урындан тәгәрмәстәр туҡылдауын ишетеп туҡтаны. Ҡараһа, филология факультетының икенсе курс

студенткаһы, хәҙерге мәлдә күршеләге ун икенсе вагондың проводнигы Вәлимә икән.

– Шәүрә, тороп тор әле. Бер нәмәкәй әйтәм… – Ашығыуҙан ыһылдап төшкән үҙе.

– Сәләм. Нишләп йоҡламайһың? Һинең пассажирҙарың юҡ та инде. Күрҙеңме, әй, миңә килеп тулдылар! Күҙ алдыңа килтерә алаһыңмы оятһыҙлыҡтарын – ун ете генә билеттары бар, ә бөтөн вагон туп-тулы. Үәт эләктем!

– Һин ысынтылап та эләктең, ҡыҙыҡай! Ҡара әле, вагоныңда кемдәр икәнен һин һаман аңламаныңмы әллә?

– Нисек инде кемдәр? Пассажирҙар инде!

– Улар бит сиғандар! Тотош таборҙары менән!

– Ниндәй табор? – Шәүрә аптырауҙан ҡысҡырып ебәрҙе лә шау-шыулы пассажирҙар яғына ҡараны. Ҡараңғыла йөҙҙәре күренмәй. Тик эргәләге бер нисәһе генә, уның тауышын ишетеп, был яҡҡа бороллдо.

Араларында оҙон буйлы бер егет, аттыҡы кеүек эре, ап-аҡ тештәрен йылтыратып:

– Ҡурҡма, һылыуҡай, беҙ сиғандар, тик беҙ тешләшмәйбеҙ, – тип йылмайҙы.

Рәхәтләнеп көлөп ебәрҙеләр ҙә шымдылар. Вәлимә бышылдап ҡына үҙенә әйтергә ҡушылғандарҙы һөйләп бирҙе.

– Мине поезд начальнигы ебәрҙе. Бөтөн состав буйлап йөрөй алмаһындар өсөн, беҙҙең бөтәбеҙгә лә вагондарҙы бикләргә ҡушылды. Улар менән һин генә ҡалаһың. Нимә ҡушалар, шуны эшлә. Улар менән әрләшмә. Тик постель бирмә. Начальниктың ҡото осҡан. Вагондан бер нәмә лә ҡалмаҫ инде, тип борсола. Бына шул. Ярай, мин киттем. Ныҡ тор.

Бер тынала теҙеп сыҡты ла ялп итеп сығып та китте. Ишекте гөрһөлдәтеп япты һәм артынан өсмөйөшлө махсус асҡыс менән бикләп тә ҡуйҙы.

Шәүрә бикле ишеккә арҡаһы менән бороллдо ла, был сәйер пассажирҙарҙан нимә көтөргә икәнен уйламаҫҡа тырышып, ғәҙәттәге эшенә тотондо. Вагонда утты тоҡандырҙы. Титанды яға башланы. Унан барыһы ла ишетерлек итеп: «Кемгә сәй кәрәк?» – тип һораны.

Барыһы өсөн дә балаһын имеҙеп ултырған һарғылт сәсле, йәшел күҙле һылыу йәш ҡатын яуап бирҙе. Ул бай итеп кейенгән, юбкаһы менән блузкаһы затлы тауарҙан, ә биҙәүестәре әллә кемдәрҙе көнләштерерлек.

– Беҙгә сәйнүк кенә бир. Үҙебеҙ яһап эсербеҙ. Йәл булмаһа, шәкәр менән сәй бирһәң дә була. Тағы ла стакандар кәрәк булыр. Шунан, һиңә постель бирмәҫкә ҡуштылар. Ә одеял тураһында бер нәмә лә әйтмәнеләр. Бирәһеңме? Төн һалҡын… – Ул күҙҙәре кеүек үк фәйрүзә төҫөндәге ебәк блузкаһы аҫтындағы йомро яурындарын һикертеп ҡуйҙы.

– Берәйегеҙҙе миңә ебәрегеҙ. Сәйнүк менән стакан бирәм. Сәй менән шәкәр күп ҡалмаған. Күпме бар – барыһын да бирермен. Одеял да алырһығыҙ.

– Бына был икәү һинең менән барыр. – Сибәр ҡатын башта артыҡ бешкән еләк кеүек тамылйып торған ҡыҙға күрһәтте. Тулы ғына, бүлтек ирендәре өҫтөндә мыйыҡ ишараты ҡарайып беленгән һылыу янында баяғы ҡуйы ҡара ҡашлы көләкәс егет күҙҙәре янып баҫып тора. Шәүрә баш ҡағып уларҙы артынан әйҙәне лә үҙенең купеһына йүнәлде. Бөтә нәмәне яҙып, һанап бирҙе, «бушҡа ғына мәшәҡәтләнәм» тигән уйҙы башына ла килтерергә теләмәне. Бер нисә минуттан вагонға үрелеп ҡараны. Сиғандар барыһы ла тамаҡ туйҙырып алған, дәррәү ҡуҙғалышып йоҡларға ятырға әҙерләнәләр. Беренсе купела ултырған егет менән ҡыҙға:

– Мин йоҡларға ятам, берәй нәмә кәрәк булһа, ишеккә туҡылдатырһығыҙ,– тип өндәште.

– Ярай, – тинеләр. Вагонда утты һүндерҙе лә купеһында бикләнде. Ни генә булһа ла, йоҡларға, күс йыйырға кәрәк. Поезд башлығының нимәгә шул тиклем ҡото осҡанын, Вәлимәнең нишләп хафанан күҙҙәре түңәрәкләнгәнен аңламаны. Хәйер, бер ваҡиға иҫенә төшә биреп ҡуйҙы. Бер поезда сиғандар, проводник ҡатын менән ыҙғышып китеп, тотош вагонды ҡыйратып ташлағандар икән, тип һөйләгәйнеләр. Өҫтәлдәргә тиклем емергәндәр, тәҙрәләрҙе ватҡандар, бәҙрәфтәге көҙгөләрҙе лә ҡалдырмағандар. Уйлап ҡараһаң, күпме зыян! Ә бит үҙҙәренән елдәр иҫкән. Тоторһоң һин уларҙың ҡойроғон!

«Поезд начальнигы валерьянка эсәлер инде», тип көләмһерәп уйланы ҡыҙ. Ә уға ни өсөндөр үҙенең сиғандары бик тә һөйкөмлө күренде. Таҙа ғына кейенгәндәр, кейемдәре кинолағы кеүек, сағыу, ялтыр-йолтор. Күберәге йәштәр. Араларында икәүһе генә өлкән күренә. Ни өсөндөр улар Шәүрәгә оҡшап етмәне. Ҡараштары ауыр, йөҙҙәре һытыҡ. Ә теге сибәр ҡатынға береһе бер ҡаршы һүҙ әйтмәй, һәр бойороғон үтәп торалар. Өҫкө һәндерәлә ятҡан баяғы грек профилле ир иһә ҡараштарын түбәгә төбәгән дә бер нәмә лә өндәшмәй, гүйә, ишетмәй. Хас та батшаларса эре тота үҙен, хужалыҡ мәшәҡәттәренә ҡыҫылмай, ҡатынына идара итергә ирек ҡуйған.

Шәүрә иртәнсәк үҙе уянып китте лә, һағайып, вагондағы тынлыҡҡа ҡолаҡ һалды. Унан урынынан һикереп торҙо, башын һоноп ҡараны. Сиғандар үҙҙәре титанды ҡайнатҡан, рәхәтләнеп сәй эсеп ултыралар. Вагонда тәртип. Бөтә нәмә лә теүәл күренә. Йылмайышып, уға хәйерле иртә теләйҙәр. Хатта поезда ла улар үҙҙәренең тәртибе, табор тормошо менән йәшәй. Шәүрәнең уларҙың донъяһына ҡыҫылырға бер теләге лә юҡ. Уның үҙ донъяһы бар һәм унда рәхәт, һил. Үҙенә сәй яһаны, әсәһе ҡайнатҡан вареньены алды, сыр телде. Иртәнге тамаҡтан һуң үткән рейста уҡ уҡый башлаған китабына тотондо. Мауыҡтырғыс ҡына, тик был мәшәҡәтле эш менән бер битте лә тыныс уҡып булмай. Бына әле лә бер ҡатындың өндәшкәненә тертләп китте, шым ғына ингән дә һиҙҙермәй генә эргәһенә баҫҡан. Егерме биш йәштәрҙә, бәлки, йәшерәктер, Шәүрәнең тиҫтерелер. Был сиғандарҙың йәшен теүәл генә билдәләүе еңел түгел.

– Лагың матур икән. Миңә лә буярға биреп тор әле.

Шәүрә яҡтыла йылҡылдап торған көмөш тырнаҡтарына ҡараны ла ризалашып баш ҡаҡты: ысынлап та матур.

Тороп, кәштәнән бәләкәс кенә лаклы һауытты алып һондо.

– Бүләк итәм. Тик аҙыраҡ башланған. Ә һеҙ миңә киләсәгемде әйтерһегеҙме?

Ҡояшта емелдәп торған ялтыр һауыт киң итәктең бөткөһөҙ ҡатмарҙарының береһендә юғалды. Моғайын, унда кеше күҙенән йәшерен әллә күпме кеҫәләр барҙыр. Шунан сиған ҡатыны Шәүрәнең тәүҙә бер, унан икенсе усын асып ҡараны ла башын сайҡаны.

– Юҡ, әйтмәйем, – тине. – Ҡурҡма, иртәме-һуңмы барыһы ла һәйбәт булаҫаҡ. Нимәгә һиңә алдан белергә? Ә үткәнеңде үҙең дә яҡшы беләһең. Кәрәкмәй һиңә алдан белеү, миңә ышан.

Сағыу сәскәле киң итәген бөтөн купе иҙәненә йәйеп, йыуынғыс янына сүгәләне лә, Шәүрәнең күҙҙәренә туп-тура ҡарап, һөйләүен дауам итте.

– Һиңә күрәҙәлек итергә ярамай. Алдан белергә ярамай һиңә. Юғиһә йәшәргә көсөң булмаясаҡ. Тураһын әйткәндә, күптәр күрәҙәлек тә итә белмәй бит ул. Хатта беҙҙекеләр араһында ла. Шуға күрә бер кемде лә тыңлама, бер

кемгә лә ышанма, нисек беләһең, шулай йәшә. Йөрәгеңә ышан, күңелеңә ҡолаҡ һал, ә башыңды тыңлама. Һинең тәбиғәтең шундай. Башҡаса ярамай һиңә. Был турала әйтеп бөттөм. Бына һин миңә үҙең әйт әле. Һин беҙҙән ҡурҡмайһыңмы ни? Ана, әхирәтең ҡайһылайтып ағарынып йүгереп килгәйне. Ә һин ҡурҡмайһың…

– Ә нимәнән ҡурҡырға? Һеҙ ҙә шул уҡ әҙәм балалары…

– Беҙ – молдаван сиғандары. Ишеткәнең бармы? Юҡтыр, моғайын. Беҙ һәйбәтбеҙ, ә кешеләр был хаҡта белмәй. Беҙ сиғандар ғына түгел, беҙ – артистар. Күпме йөрөйбөҙ, һинең кеүек үҙен дөрөҫ тотҡан кешене тәүгә осратабыҙ. Мине кисә һинең менән һөйләшкән ҡатын – ул барондың бисәһе – ебәрҙе. Борсолмаһын, үҙ ихтыярынан башҡа бер нәмәһенә лә теймәйбеҙ, тип әйтергә ҡушты.

Ул талғын ғына, бейегәндәге кеүек һығылмалы итеп тороп баҫты ла инде коридорҙан:

– Һепертке менән биҙрә алам. Йәштәр йыйыштырып сығарыр. Беҙ ҡарбуз ашаныҡ, сүпләнек, – тигән тауышы ишетелде.

– Юҡ-юҡ, һеҙ нимә! Үҙем, – тип урынынан һикереп торҙо Шәүрә. – Был бит минең эшем.

– Ултыр, йыйыштырабыҙ тигәнмен икән, йыйыштырабыҙ. Ултыр, ял ит, – тип бойорҙо ла ебәк итәктәрен ҡыштырҙатып, тәңкәләрен сылтыратып, китеп тә барҙы.

Шәүрә тәҙрәгә ҡарап бара, бер пейзаж икенсеһе менән алмашына. Башта бер генә уй ҙа юҡ, ә күңелдә ни өсөндөр яҡты.

Икенсе көндө иртән иртүк шау-шыулы табор ҙур ҡаланың перронына төштө. Шәүрә үҙенең инде ары китергә ҡуҙғалған сиғандарына оялып ҡына ҡул болғағандай итте. Барон кешеләрен күҙ ҡараштары менән генә туҡтатып ниҙер әйтте лә Шәүрәгә боролдо.

– Бар, ҡара, барла. Барыһын да һанамай тороп, беҙ китмәйбеҙ.

Ҡыҙыҡай вагонға йүгерҙе. Бөтә матрастарҙы, матрас тыштарын, мендәрҙәрҙе, стакандарҙы һанап сыҡты. Сәйнүк менән бер матрас тышы юҡ. Тағы ла ике стакан етмәй, тик уларҙың ярсыҡтары титан эргәһендәге биҙрәлә ята. Тимәк, юғалмағандар, иҫәп-хисапҡа ҡушып була. Тимер юл сметаһында сәйнүктең күпме торғанын ул белмәй ине, ә бына матрас тышы – һигеҙ һум ҡырҡ тин.

– Сәйнүк менән матрас тышы етмәй. Ике стакан ярылған, тик ватыҡтары булғас, уларҙы иҫәптән төшөрә алам.

Барон Шәүрәгә баштан уҡ оҡшамаған өлкән йәштәге ирле-ҡатынлыға асыулы ҡараш ташланы. Ауыҙын асып та өлгөрмәне, тегеләр урлаған әйберҙәрен кире ҡайтарып бирҙе.

Был станцияла туҡталыш ярты сәғәттән артыҡ ине. Ҡыҙыл флажогын тотоп кире сығып баҫҡас, теге ваҡытта унан тырнаҡ лагы алған ҡатын:

– Поезд начальнигынан беҙгә кер һабыны менән сода һорап ал әле, – тип ҡысҡырҙы.

– Күпме?

– Күпме йәл түгел!

Шәүрә штаб вагонына йүгерҙе. Начальник перронда тора ине.

– Кер һабыны менән сода һорайҙар.

– Күпме?

– Күпме йәл түгел!

– Бына, егерме киҫәк һабын менән биш ҡап сода. Башҡаса юҡ, – тине начальник,

ауыр ғына тоҡ сығарып тоттороп. – Һин миңә шуны әйт әле: вагонда берәй нәмә имен ҡалдымы, исмаһам, әллә юҡмы?

– Бер нәмәне лә боҙманылар, бер нәмә лә алманылар.

Начальник бер нәмә лә аңламаны, ахыры, – аңшайып ҡарап ҡалды. Шәүрә кире йүгерҙе. Ул, эсендәге әйберҙәрен әйтеп, тоҡто бирҙе лә яңынан вагоныбаҫҡысына күтәрелде һәм был юлы инде сиғандарына ҡулын ҡыйыуыраҡ болғаны. Тегеләр ҙә уға йылмаялыр, ҡул болғайҙыр кеүек тойолдо. Тик таборҙың инде унда эше юҡ ине. Улар шаулашып үҙ юлына китте һәм һалҡын иртәнең ҡуйы томанына инеп юғалды.

Пассажирҙарын оҙатҡандан һуң Шәүрә вагонын Өфөлә тапшырырға әҙерләй башланы. Тәҙрәләрҙән пәрҙәләрҙе йыйып алды, матрастарҙы тығыҙ итеп төрөп, өсөнсө ҡаттағы һәндерәләргә урынлаштырҙы, вагон иҙәндәрен йыуҙы, бәҙрәфтәрҙе таҙартты. Сепрәк, һыу, порошок ярҙамында үткән көндөң эҙҙәре йыуылды ла бөтә нәмә ялт итеп сафланып ҡалды. Бер нисә сәғәттән улар һөйөклө Өфөгә ҡайтып етер. Ҡайтыу менән ул иң тәүҙә рәхәтләнеп йоҡо туйҙырып алыр. Бер уянмай тәүлек буйы йоҡо һимертер, моғайын. Өс көндән – беренсе сентябрь. Башҡорт дәүләт университеты тарих факультетының өсөнсө курсында уҡыу йылы башлана. Тимәк, уға тиклем факультетҡа инеп, уҡыу расписаниеһын күсереп алырға кәрәк булыр. Шәүрә бөтә нәмәне лә алдан уҡ эшләп ҡуйырға, тормошон алдан планлаштырырға ярата.

Эшен тамамлағас, Шәүрә ҡарайып барған латунь ҡоршауға ултыртылған стаканға эҫе сәй ҡойоп алды ла, тәҙрәнән һарғая башлаған ағастарға ҡарап, яйлап ҡына сәй эсергә тотондо. Бер аҙҙан вагон тәҙрәһенә һалҡын ямғыр тамсылары туҡылдата башланы. Йәйҙең аҙағы етте һәм инде көҙ ҙә беленде. Йыл миҙгелдәре үҙгәргән кеүек, тормош та үҙгәрә. Тәгәрмәс өҫтөндәге туҡтауһыҙ алмашынып торған, ҡайһы ваҡыт хәүефле лә булып киткән тормошо тамамлана. Уның урынына күңелле студент тормошо башлана. Үлән һалып тороп бешергән тәмле сәйен эсеп бөткәс, тәгәрмәстәрҙең туҡылдауын гитара моңо кеүек күҙ алдына килтереп, ҡыҙ шым ғына яратҡан йырын башланы. «Өфө вокзалы» тип аталған был йырҙың авторы билдәле түгел ине. Шиғыры ла, көйө лә күңелгә шул тиклем ятышлы. Былтыр археологик экспедицияға барғас, төнгө усаҡ янында ултырғанда уны, моғайын, меңәрләгән тапҡыр йырлағандарҙыр.

***

Һәйбәт сиғандар ун өсөнсө һанлы вагонға ысынлап та бер тинлек тә зыян килтермәгәйне. Әммә поезда уларҙың махсус аҫҡыс менән вагондар араһындағы ишекте еңел генә асып, төн йөҙөндә, күрше вагондан ун туғыҙ матрас тышы, ете мендәр, әлбиттә, өр-яңы һүренделәре менән, алып сыҡҡандарын әле бер кем дә белмәй ине. Ҡыҙыллы-күкле буй-буй матрас тыштарынан арыу-талыуҙы белмәгән сәйәхәтселәр өсөн бик тә йәтеш ҙур-ҙур тоҡтар сыға. Ун икенсе вагондың проводнигы Вәлимә был юғалтыуҙы бары тик Өфөлә генә беләсәк, һәм уның хеҙмәт хаҡынан байтаҡ ҡына аҡсаһын тотоп алып ҡаласаҡтар. Шәүрә иһә хатта ватыҡ стакандарҙы ла иҫәптән төшөрөп ҡотоласаҡ. Поезд начальнигы ҡыҙға яҡшы эшләгәне, асылда, тимер юл транспортының мөлкәтен һаҡлап ҡала алғаны өсөн премия вәғәҙә итер, тик, ғәҙәттәгесә, онотор. Күңел нескәреп киткәндә нимә генә әйтеп ташламайһың!

Шәүрә менән Вәлимәнең араһы һыуыныр. Күршеһенең уны шулай еңел генә сиғандар менән яңғыҙ ҡалдырып бикләүе, аҙаҡтан иһә хәл дә белешмәүе

Шәүрәнең күңелен ҡырһа, Вәлимәнең сиғандарҙың уның вагонын талауына йәне көйөр. «Үҙҙәренең», йәғни Шәүрәнең вагонында урлашырға тейештәр ине бит, тип фекер йөрөтөр ул.

*Ике йылдан һуң Үзбәкстан Совет Социалистик Республикаһының Мөбәрәк ҡалаһында сал сәсле ир төндә конвертҡа ваҡ ҡына хәрефтәр менән семәрләнгән аҡ ҡағыҙ һалыр. Конверттың тышына «Өфө. Башҡорт дәүләт университеты, тарих факультеты. Вәлиеваға (сәсен ҡыҫҡа ғына ике толомға үргән ҡыҙыҡайға)» тип яҙылғайны.*

*«Һаумы, ике толомло ҡыҙыҡай! Исемеңде онотҡанмын, ғәфү ит. Ул минең өсөн ҡатмарлы тойолғайны. Тик мин һине һәр ваҡыт иҫкә алам. Һин миңә бик оҡшаның һәм мин һине онота алмайым.*

*Мин инде өйләнгәнмен. Ҡатыным бик һәйбәт. Бәләкәй генә ҡыҙыбыҙ үҫә. Уны ҡулыма алған ваҡытта теге мәлдә һиңә тойғоларымды белдерергә баҙнат итмәгәнем, һинең менән бәхетле булырға ынтылыш яһамағаным өсөн әрнеү бер аҙ сигенгәндәй була.*

*Моғайын, инде һин дә кейәүгә сыҡҡанһыңдыр, балалар үҫтерәһеңдер. Ҡатыным да һинең турала белә. Ә әсәйем һиңә сәләм ебәрә. Беҙ барыбыҙ ҙа һине ғаиләң менән бергә үҙебеҙгә саҡырабыҙ. Өйөбөҙ иркен, ҙур емеш баҡсабыҙ бар. Һин бит емеш яратаһың. Һеҙгә эсәр һыу ағыуланған ҡалала һис кенә лә ҡалырға ярамай. Бөтәгеҙ ҙә, атайың-әсәйең дә, туғандарың да, ирең, балаларың – күмәкләшеп килегеҙ.*

*Һинең ни тиклем ғазапланыуыңды күҙ алдына килтерһәм, йөрәгем ҡанһырай. Һин бит бер нәфис кенә сәскә кеүек инең, нисек иҫән ҡалырһың? Минең һуңлап асылған тойғоларым кәрәкһеҙҙер, әммә файҙаһыҙ түгел. Һеҙгә бәлә килгәндә мин ярҙам итергә теләйем һәм ярҙам итә алам. Хәҙер мин ҡалабыҙҙа ҙур ғына вазифалы кешемен. Сәләм менән Олуғбәк».*

*Хатты уҡыһа ла, Шәүрә уға яуап ҡайтара алмаҫ. Был ҡыҫҡа ғына ваҡытта – 1989 йылдан алып 1991 йылға тиклем – уның тормошонда, бер яҡтан ҡараһаң, һис нәмә лә үҙгәрмәҫ, икенсе яҡтан, барыһы ла бөтөнләй икенсе булыр. Уға тыуған ҡалаһынан Өфөләге экология һәләкәтенә тиклем үк ҡапыл ғына китергә тура килер. Был хат ҡулдан ҡулға тапшырылып, бары бер йыл үткәс кенә уға килеп етер. Шәүрә уны Манхеттен ҡалаһында кафела ултырып ғәжәпләнеп һәм сәйерһенеп уҡыр. Төҙөлөш отрядында үткәргән ул йәйҙән һуң уның тормошонда булған сағыу ваҡиғалар быға тиклемге бик үк әһәмиәтһеҙ хәлдәрҙе компьютерҙағы кәрәкһеҙ файлдар кеүек юйып ташлар. Урта Азия тарафтарына йөрөгән сәфәрҙәрҙән уның хәтерендә бары тик теге ҡарт ҡына тороп ҡалыр, башҡалары, тупраҡҡа һеңгән ҡар һыуы кеүек, эҙһеҙ юғалыр. Әле ул үҙенә хат яҙған кешенең йөҙөн иҫенә төшөрөргә тырышыр, әммә бер нәмә лә килеп сыҡмаҫ. Хәтерендә уның яҙмышын ҡырҡа үҙгәртеп ебәргән ҡарттың һыҙаттары ғына уйылып ҡалған булыр. Ҡыҙ Америка Ҡушма Штаттарына егерменсе быуаттың егерменсе йылдарындағы башҡорт тарихына ҡағылышлы көтмәгәндә табылған архивты өйрәнергә барыр. Был документтарҙы тапшырған кешенең төп шарты буйынса, уларҙы өйрәнеүсе төркөмгә мотлаҡ рәүештә контракт менән Американың тарих фәне өсөн быға тиклем бөтөнләй билдәһеҙ булған СССР тарихсыһы – Башҡорт дәүләт университетының тарих факультеты студенты Вәлиева Шәүрә индерелергә тейеш ине.*

2005 йыл, сентябрь – ноябрь.

**Руссанан Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА тәржемәһе.**



**Дилбәр
БУЛАТОВА**

# ҠУНАҠ МУНСАҺЫ

**хикәйә**

1

Ә беҙ ҡунаҡҡа китеп барабыҙ. Аръяҡҡа. Өләсәйҙәргә, мунса инергә.

Кинәт... Зәңгәрһыу-ҡара күк йөҙө тибрәлеп китә, эре-эре йондоҙҙар урындарынан ҡубып, ергә ҡойола башлай тиһәм... атай мине күтәреп үҙенең яурынына ултыртҡан, имеш. Миңә, биш йәшлек оло ҡыҙға, атай елкәһендә барыу оят та кеүек. Тик был хаҡта бөтөнләй онотам да, тәү күргәндәй, тирә-яғыма күҙ һалам. Бығаса аҫтан, ерҙән баш күтәреп, ауыҙ асып ҡарап барған донъя кинәт бәләкәйләнеп ҡалған! Минең түгел, атайҙың ҡолағы етмәҫ ҡайындар тәпәшәйеп ергә сүккән; әллә ҡайҙа, аҫта, атайҙың сүсинкәләре аҫтында, баш әйләнерлек түбәндә емелдәп ятҡан ҡар, миңә асыуланып, теш шығырҙата.

Беҙҙең яндан атлаған, ҡышҡы пальто, башына бәйләнгән башлыҡ кейгән әсәйемә күҙ һалам. Ул юрғанға төрөлгән ҡустымды күтәргән. Беләбеҙ юрған хәлдәрен – ҡыҫыҡлығы уның, уңайһыҙлығы... Ә атайҙың иңбашында юрған михнәттәренең береһе лә юҡ.

Һалам, силос киҫәктәре сәселеп ятҡан сана юлы таҡыр. Ара-тирә тупсыҡтар – ат „ҡойроғо“нан төшөп ҡалған шарсыҡтар – осрай. Атай ҡайсаҡ уларҙы тибеп-тибеп ебәрә. Атайымдың муйынына нығыраҡ йәбешәм, танауым уның ҡолаҡсынлы, ҙур төлкө бүрегенә килеп төртөлә, тик мин ҡурҡып та ҡарамайым. Ниңә ҡурҡайым, минең атай – ауылдағы иң көслө, иң оҙон кеше. Һәр хәлдә, мин белгән кешеләр араһында. Иң ҡырыҫы ла. Шуға күрә мин һыңар өн дә сығармаҫҡа, атайымдың асыуын ҡуҙғатмаҫҡа, юғарылағы рәхәт мәлемде нисек тә оҙаҡҡараҡ һуҙырға теләйем.

*Дилбәр Булатова (1972) Саҡмағош районының Ҡашҡар ауылында тыуған. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. „Тулпар“ журналының проза бүлеге мөхәррире. „Туй“ исемле хикәйәләр йыйынтығы авторы. 2011 йылдан БР Яҙыусылар союзы ағзаһы. „Ағиҙел“дә тәүге тапҡыр сығыш яһай.*

Ҡапыл йондоҙҙар ҡабат урындарынан ҡуба, тик был юлы улар дәррәү өҫкә сөйөлә – атайҙың оҙон ҡулдары мине юл ситенә төшөрөп ҡуя. Ҡар өҫтөндәге йоҡа ғына боҙло ялтыраууыҡ ҡылау мине күтәрерлек түгел. Батыуым – бер хәл, атлап китә алмай этләнәм. Әсәй ҡулындағы ҡустым атай ҡулына күсә, әсәй мине ҡар эсенән тартып алып, әйләнә-тирәләге берҙән-бер таяныс – көндөҙгө епшектән һуң төнгөлөккә ҡатып киткән юлға баҫтыра.

Йылға аша сығаһыбыҙ бар, шуға төшөрҙөләр инде мине ҡулдан. Уң яҡта өңрәйеп, ҡап-ҡара шәүлә – тирмән өйө ҡала. Был туралағы күперҙе тирмән күпере тип атайҙар, ат күпере лә тиҙәр, сөнки уларҙан егеүле ат менән дә сығып йөрөмәле.

Беҙҙең инеш, бәләкәй генә булһа ла, бик йүгерек, бик етеҙ үҙе. Шуғалырмы, ярҙарын уйып, ашап бөтөрөп, әллә ҡайҙан, төптән ағып ята. Шыуып төшөргә лә иҫәп бар, тик ҡартатайым быйыл ғына алып биргән өр-яңы ҡара баймаларым тыңлап та ҡарамай. Ирекһеҙҙән, гөжөлдәп йүгереп төшөп китәм. Йығылмайым, абынмайым – беләм был ерҙең холҡон. Дөбөр-дөбөр килеп, таҡта күперҙән сығабыҙ. Күпер аҫтынан ҡар ҡаплаған инештең сылтырап ағып ятҡан тауышы ишетелә. Үҙ алдына ниҙер һөйләнә-һөйләнә ҡайҙалыр китеп барған эшлекле генә, үҙ-үҙенән бик ҡәнәғәт кенә тере бер йән эйәһеләй тойола ул миңә. „Привет!“ тим уға, иптәш ҡыҙҙарыма өндәшкәндәй иттереп.

Ҡараһам, атайҙар теге ярға инде менеп етеп баралар. Йән-фарманға мин дә улар артынан сабам. Бая шыумай тиҫкәреләнгән баймаларым хәҙер тайып интектерә. Атайҙар яр башында. Беҙҙең атай ҙа, әсәй ҙә бик иркәләп, мәмәйләнеп тора торғандарҙан түгел, көтмәй китеп барыуҙары ла бар. Ашығыуҙан абынып йығылам, ғәрләнеп илап ебәрәм, үҙем һаман эйелеп булһа ла өҫкә үрмәләйем.

Менеп етеүемә, их, ниндәй бәхет (мин әлегә был һүҙҙе белмәйем, ләкин уның ни икәнен, ниндәй икәнен атайҙың киң елкәһендә тоям), йондоҙҙар тағын йылпылдап ергә ҡойола; ярҙың ике яғын тултырып үҫкән, өнһөҙ генә, сабыр ғына ултырған ҡайындар тағы кесерәйеп ҡала...

Ат һарайын уң яҡлап урап, өләсәйҙәргә туранан киттек. „Был яҡ баҫыуҙағы һалам эҫкерттәрен астыҡ“,– ти атай. Әсәй үҙебеҙҙе ҡайғырта: „Халыҡҡа һалам бирмәйҙәрме әле?“ – ти. Мин атайҙың ни тип яуаплауын ишетмәйем, ат аҙбарын тыңлайым. Әскелтем силос еҫе аңҡый. Утарҙағы бер нисә ҡарағусҡыл шәүлә, беҙҙән өркөп, бышҡырынып, арғы башҡараҡ күсеп баҫа. Һарайҙың бүрәнә стенаһы аша дөпөлдәгән, кешнәгән, тибешкән тауыштар ишетелеп ҡала. Өләсәйҙәргә барып етеүебеҙ һиҙелмәй ҙә. Йорттоң урам яҡ тәҙрәһе ялт итеп балҡып тора, мунса тәҙрәһендә ут яна, күтәрмә өҫтөндәге, тыштағы лампочканы ла ҡабыҙғандар.

– Башығыҙға мендерегеҙ әле баланы, – ти гөр-гөр килеп беҙҙе ҡаршыларға сыҡҡан өләсәй. – Унан төшөрә алмаҫһығыҙ ҙа...

„Тәхет“емдән ҡолаҡ ҡаҡтыралар. Тупһа төбөндә ятҡан ҡаҙ ҡанатын алып, атайымдың сүсинкәһенә ҡунған, һары ҡайры тун салғыйына йәбешкән ҡарҙарҙы һепнерергә тотонам. Әсәйҙең бүркенә боҙланып ҡар һырыған. Үҙемдең баймаларым да шул рәүештә таҙартыла. Аяҡтарыбыҙҙы бер-береһенә бәрәбәрә, байма төптәрендәге ҡарҙы иҙәндәге балаҫҡа ҡойоп ҡалдырырға тырышып, ҡараңғы солан аша үтеп, өй ишеген асабыҙ.

2

Яҡты, йылы, парлы донъя ҡосағына сумабыҙ. Туҡмаслы аш, бәлеш, компот, тағы әллә ниндәй тәмле еҫтәр болото сорнап ала. Тунымды, башлығымды һалып элгескә эләм дә түргә йүгереп кереп китәм.

– Һалма быймаҡды! – тип ҡысҡырып ҡала өләсәй. Әйтмәһә лә беләм инде, ҡышын быймаларҙы өләсәйҙең мәңге һалдыртҡаны юҡ, „иҙән һыуыҡ, шул килеш йөрөгөҙ" тип сыҡҡан һайын туҡый.

Ололарҙа минең ҡайғы түгел хәҙер. Әсәй түрҙәге карауатта ҡустымды юрғандан арындыра. Атай өҫтәл артына инеп ҡунаҡлаған. Табын менән кәбәркә араһында бөтөрөнгән өләсәйҙең бөтә иғтибары атай менән әсәйҙә. Ирек! Азатлыҡ! Асыуланыусы ла, „тегеләй ит, былай ит" тип тартҡылап тороусы ла булмаясаҡ бер аҙға!

Бәләкәй яҡ менән оло яҡҡа атлап төшәм. Ҡорғандарҙағы ҡып-ҡыҙыл алмалар, тулышып бешкән сейәләр ҡойолорҙай булып тибрәнеп ҡалалар. Һары шифоньер башындағы шахмат таҡтаһы менән гармун иҙәнгә төшөп ҡунаҡлаған. Иҙәнгә түгел, иҙәнгә йәйелгән юрғандарға, пальто-фуфайкаларға. Һыуыҡ булғас, беҙ ҡунаҡта саҡта өләсәй уларҙы иҙәнгә түшәй. „Йәлләп торорға әллә, аунағыҙ рәхәтләнеп",– ти.

Сепрәк-сапраҡҡа беҙҙең өләсәй кеүек һушы киткән башҡа кеше бар микән? Бейек, ҙур итеп һалынған йортоноң биҙәлмәй ҡалған ере юҡ тиерлек. Оло яҡ тәҙрәләрҙәге ҡорғандарҙағы еләк-емеш тағы ла сағыуыраҡ. Мейес өҫтө тирәләй һәм урта стенала ике яҡтан да ҡыҫҡа ҡашағалар, карауаттарҙы сит-ят күҙҙән йәшереп, шау сәскә сымылдыҡтар эленгән. Мөйөштәрҙә – сей һары ерлектә ҡып-ҡыҙыл эре мәктәр төшкән, сиғандарҙан һатып алған япмалар. Тегеү машинаһы, өҫтәлендәге телевизор, түр өҫтәлдәге ҙур һары радиоалғыс өҫтөндә ялтырауыҡ яулыҡтар.

Мин туп-тура гармунға табан атлайым. Ул да түгел, әсәй был яҡҡа индереп ебәргән ҡустым да ауа-түнә гармунға килеп тотона. „Көтөбөрәк тор әле, ҡустыҡай, һиңә хәтле апайың бар бында!" Ләкин тартҡылашып, илашып өлгөрмәйбеҙ, әсәй беҙҙе быжғытып мунсаға йыя башлай.

Ҡыҙарып-бешеп ағайҙар ҡайтып инә. Оло ағай, ғәҙәттәгесә, етди итеп, ҡул биреп күрешә. Кесеһе үсекләргә, ирештерергә бик маһир:

– Һо-о, аръяҡтар сыҡҡан! Нишләп ултыраһығыҙ, тайығыҙ мунсаға! – ти. „Тайығыҙ" – уның иң яратҡан һүҙе. Мәғәнәһен генә аңлап бөтөрмәйем. Таятая барырға ихатала боҙ юҡ та инде!

Мунса инергә яратмайым мин. Ыҫ, төтөн еҫе! Иҙәненең һалҡынлығы! Сәс йыуғанда әбизәтелнә күҙгә кергән шампуне! Миндеге тимерсыбыҡтан, һеперткеһе таяҡтан яһалғандай тойола башлай аҙаҡҡа табан. Әсәй мине йыуындырып, ҡойондороп, өҫтөмә таҫтамал ҡаплап, ишек төбөндәге киң эскәмйәгә ултыртыуға ишек асыла. Түргә йүгереп кереп киткән ҡуйы пар болото өҫтөндә ҡустымды күтәргән атай күренә. Ҡустым да мунсаны өнәмәй: юрған эсенән тоноҡ ҡына булып илау тауышы ишетелә. Уның урынына мине яҡҡыралар.

Бәләкәй генә юрғанға аяҡтарым һыймай. Һуҙмайса бөкләп ҡайтырға ҡушалар. Түҙемлегем ярты юлға ғына етә – аяҡтарымды һалҡын һауа өтөп-бешереп ала.

Беҙ ҡайтҡанды өләсәй ишек төбөндә көтөп торған. Атай мине карауатҡа илтеп һала ла сығып китә.

– Парланып ят бер аҙ! – ти миңә өләсәй. Юрғандан һерәйеп сығып торған аяҡтарымды күреп, кеткелдәп көлә. – Үҫтең инде, үҫтең. Собханалла! – Һәм миңә алмаш кейемдәремде кейҙерә башлай. Әсәй күлдәгемде оноткан. Ыштандан ғына булыуыма ғәрләнеп илап ебәрәм. Малай кеүек йөрөйөммө инде хәҙер? Әләкәй ағай клубтан ҡайтып инһә: „Малай, малай, бер биҙрә тоҙ ялай!“,– тип күҙемде лә астырмаясаҡ. Өләсәй, мине йыуатырға була, ҡапҡаслы зәңгәр эмаль биҙрәнән компот һалып бирә. Сынаяҡ төбөндә төштәре лә бар. Йөҙөмдәр, балан-миләш, әллә нимәләр! Тағы компот һорауыма:

– Етәр, мунсанан ҡайтыу менән күп эсмәйҙәр, – тип ҡырт киҫә. Ул үҙе, мунсанан аһ-ваһ килеп ҡайтып инеүгә, бер-ике семтем тоҙ ҡабып, түшәгенә ауыусан.

– Бар, оло яҡта ятып тор, – ти миңә лә.

Яталар тиме ни инде! Күпме ҡыҙыҡтар көтөп торғанда! Шахмат һындарын өҫтө-өҫтөнә теҙеп башня төҙөйһө, гармунда „Аһа-һай, ҡарабай“ көйөн уйнап моңланаһы... Ағайҙар өйҙә юҡта уларҙың „хазина“ларына күҙ һалырға кәрәк.

Ике тәҙрә араһындағы өҫтәлдең ауыр тартмаһын көс-хәл менән тартып сығарам. Изолента, машина майы, тағын әллә нindәй ят еҫтәр бөркөлөп китә. Һу-у, бындағы байлыҡ! Радиодеталдәр, шөрөп-ҡаҙаҡ, келәшнә-ҡыҫҡыстар! Әһә, ана, иҫке фотопленка таҫмаһы! Уны тығыҙлап урап, бер ситенән тартһаң, мушкетерҙарҙыҡылай шпага хасил була!

Эш күп. Бик күп! Ҡустым ҡайтып етһә, шахмат сиртеште уйнайһы бар, әбәкле, ҡасышлы, тәкмәс атышлы, парланған тәҙрә быялаларына бармаҡ менән һыҙып рәсем төшөрөшлө.

– Рәхмәт, инәкәй! – тип әсәйҙең ҡайтып ингәне ишетелеп ҡала, „мунса харап шәп булған, әбей, йөҙ йәшә“ тип атай ҡайта.

Уйнап арып, йоҡо килә башлауға беҙҙе бәләкәй яҡҡа аш эсергә саҡыралар. Тимер тәрилкәләрҙә мул өйрәле, ҡуйы, туҡмаслы аш. Усаҡ плитәһендә сүлмәктә оҙаҡ ҡайнатҡанғамы, шулай гел ҡуйы бешерә өләсәй ашты. Мул итеп әпәкәй (беҙҙә икмәкте шулай тиҙәр) телеп ҡуйған. Өҫтәл уртаһындағы ҙур сәй тәрилкәләге бәрәңге, кишер өҫтөнә ит турап өйөлгән, ситендә һуған түңәрәктәре. Нәҡ минең яҡҡа ҡарап торған харап тәмле күренгән ҡаҙ ботона ҡул һуҙам. „Сәлт“ итеп беләгемә ҡатыҡлы ҡашыҡ килеп төшә.

– Ололарҙан алда ҡайҙа үреләһең? – ти өләсәй. Ботто атай алдына ҡуя. Аранан бөтән ит киҫәген һайлап алып, миңә һуҙа. Мин, турһайып, әсәйгә мөлдөрәп ҡарайым. Уның миңә иҫе китмәй, алдында ултырған ҡустыма балғалаҡтан һурпа һемертә. Өҫтәл башында тирләп-бешеп аш һемереп ултырған атай миңә хәйләкәр генә күҙ ҡыҫа: „Эләктеме?“, йәнәһе.

Берәүҙең дә мине яҡлашырға йыйынмауын аңлап, яҙмышыма күнергә тура килә. Өлөшөмә төшкән киҫәк тә харап тәмле күренә ҡалай. Өләсәй кәбәркәлә мейес ауыҙынан йөҙөм бәлеше алып маташа. Юҡ инде, уныһына көс етмәҫ. Компот эсәм дә бына, бик хуш.

– Амин тот, барып ҡулыңды сайҡа, – ти өләсәй, урындыҡтан төшөргә йыйынып борһаланыуымды күреп.

Етешмәгән ере юҡ был өләсәйҙең! Табынды ла ҡарай, әсәй менән атай алдында ҡояштай балҡып, алдарына ризыҡ этә-этә һыйларға ла өлгөрә. Беҙҙе, бәләкәйҙәрҙе, „тегеләй итмә, былай итмә“ тип ҡыуырға ла, улар алдында яҙын бәпкәләрен көтөп тыпыр-тыпыр бейегән ҡаҙҙай өлтөрәп кенә тора.

Ҡулбашындағы сигеүле таҫтамалға тирен һөртә-һөртә мәтрүшкәле сәй эскән атайымдың ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡҡан. Шулай булмай ни! Хөрмәттең, иғтибарҙың иң олоһо уларға.

– Кейәү, баллап эс! Бына, ҡағынан ауыҙ ит! Тәбикмәкте ашаманың да... Ҡатығын да ҡапманың. Бына, сөсөһөн ҡабып ҡына ҡара әле...

Мин инде урындыҡтан төшөп китергә йыйынған еремдән, ҡалағымды ҡулға алып, сөгөлдөрлө ҡыҙыл ҡатыҡтың уртаһына батырам.

– Үҙеңә яҡын ситенән ал, – тип тағы төҙәтеп ҡуя өләсәй. – Ризыҡтың уртаһына тығылмайҙар улай.

Әсәй, ҡулында йоҡлап киткән ҡустымды уятмаҫҡа тырышып, уны ҙур яҡ диванға һаҡ ҡына индереп һала. Минең дә күҙҙәр йомолоп бара, ҡорһаҡ та пух итеп тора. Ниндәйҙер бер ҡалын китапты аҡтарғылап ултырам да үҙемдең урыныма – түр мөйөштәге тар карауатҡа барып ятам.

Сымылдыҡты томалап ябып ҡуям, дымлыраҡ булып торған аҡ тышлы мендәргә битемде терәйем. Лампочканың һүрән уты, сымылдыҡтың ҡыҙғылт-һары туҡымаһы аша һарҡып ҡына кереп, ундағы эреле-ваҡлы йорттар, әкәмәт замок-башнялар тулы әкиәти ҡалаға тылсымлы бер төҫ бирә. Үҙемде өс яҡтан әйләндереп алған шул мөғжизәле батшалыҡҡа кереп китәм, таш йәйелгән урамдар буйлап гиҙәм, үрелеп тәҙрәләрҙән ҡарайым. Йорттары бөтөнләй беҙҙең ауылдағыса түгел. Ҡайһы бер башняларҙың остарына ҡалай әтәстәр ҡунаҡлаған, ҡайһы берҙәрендә сәғәт. Тик шуныһы мәҙәк: бер кем дә юҡ урамда. Йоҡлайҙармы, әллә, бына беҙҙең кеүек, ҡунаҡҡа китеп бөткәндәрме? Был уй һуңғы уйым була, тәрән ҡойоға төшөп киткәндәй, сабый саҡтың татлы-баллы, ғәмһеҙ йоҡоһона сумам. Утты ҡасан һүндереүҙәрен, әсәйҙәрҙең ҡасан кереп ятыуҙарын, иртән нисек тороп китеүҙәрен дә һиҙмәйем.

3

Мин уянғанда яҡтырған ине инде. Мейестә шарт-шорт килеп утын яна. Мейес янып ҡына киткәндә бар йылыны үҙенә һура – өй һыуыҡ, иҙәнгә баҫмалы түгел. Ҡайҙа, тышта ни хәлдәр бар икән? Ихата яғына ҡараған берҙән-бер тәҙрә диван өҫтөндә. Диван ситенә, йоҡлап ятҡан ҡустым йығылып төшмәһен тип, мендәр өйөлгән. Уларҙы ах-ух аралап, дивандан тәҙрә төбөнә үрмәләп менәм.

Өләсәй „тук"тан – ырҙын табағынан – ҡайтҡан, мал эсерергә әҙерләнеп йөрөй. Ул унда „бойҙай һеперәм" ти. Бөгөнгә һепереп бөтөргәндер инде. Йәшел шәльяулығын эйәк аҫтына төшөрөп бәйләгән, мал ҡарағанда кейә торған ҙур кеҫәле ҡара итәген, фуфайкаһын кейгән. Ҡулына онло ҡалай тәрилкә тотоп, мунса ишеге алдынан сығып килә. Утар ҡапҡаһы асыҡ. Кисә беҙ мунсала ултырып йыуынған ҙур кәритәнән бөтөрөлөп пар болото күтәрелә. „Төтөн!" тиер ине ҡустым, күрһә! Өләсәй башаҡ бешергән, тимәк.

Утар ҡапҡаһын асып ебәреүгә, һарыҡтар, кемуҙарҙан сабышып сығып, башаҡҡа йәбеште. Хәйләкәрҙәр, суҡынмыштар, өҫтәге көрпәне генә семетәләр. Өләсәй, араларына кереп, таяғы менән башаҡты болғатып ебәрә.

Улар туйғандай булыуға, башмаҡҡа сират етә. Шунан, башаҡ өҫтәп һалыуға, ҙур еленен һелкетеп, оҙон мөгөҙҙәрен ҡурҡыныс һелтәп ҡара-ҡыҙыл һыйыр сыға, һаман көрпә ялманған һарыҡтарына асыуланып, уларҙы һөҙөп-һөҙөп ебәрә. Абау, ҡорһаҡтарын тишә инде! Тегеләре лә әрһеҙ. Ашап туймағанды, әллә ялап туйырбыҙ тиҙәрме икән?

Ихатаның был башында – ҡаҙ өйө. Таҡтанан ҡоролған ҡыуыш инде ул. Ҡаҙҙарҙы ла тышҡа сығарғандар. Өшөйҙәрме бахырҙар, ап-аҡ ҡар өҫтөндә тәпәйҙәре ҡып-ҡыҙыл булып янып тора. Ата ҡаҙ, ғәҙәттәгесә, тәрәндәге кескенә күҙҙәрен уҫал секерәйтеп, түшен киреп, муйынын һуҙып, тирә-яҡты күҙәтә. Ана, ҡаҙҙарҙың кесерәге, ҡара-һорғолто, һалам бөртөктәрен томшоғо менән арлы-бирле күсерештергән була. Күкре йыуан томшоҡло ҡытай ҡаҙы һыңар аяғын мамығы эсенә йәшергән. Бер аҙҙан томшоғон да ҡанаты эсенә төрттө.

Мин, уларҙан күрмәксе, бер аяғымды күтәрәм дә, башымды ҡыйшайтып, иҙеүемә тыҡмаҡсы булам һәм, әлбиттә, сайҡалып диванға барып төшөп, ҡустымды уятам. Тәҙрә төбөндә бүтән бер ҡыҙыҡ та күренмәй. Бәләкәй яҡҡа сығам. Кисә бик яҡты тойолған өй эсе бөгөн томһа, тыныс бер хәлдә. Сүлмәктә кисәге аш ҡайнап ултыра. Плитәнең ҙурыраҡ түңәрәгенә сәйнүк ҡуйғандар. Ҡыш көнө газ баллонын һирәк килтергәс, газды һаҡлап ҡына тота өләсәй.

Бына ул үҙе күренә. Ҡосаҡ тултырып утын күтәргән.

– Торҙоң дамыни-и... – тип һуҙа, мине күреп. – Ҡорһағың асыҡҡандыр инде. Шул ғүмер йоҡо һимертеп ни...

Утындар гөбөрләп мейес алдындағы ҡалайға ята. Утын ярҡаларына эйәреп кергән ҡар киҫәктәре, ҡайнар сәйҙә эрегән шәкәр шаҡмаҡтарылай, теләр-теләмәҫ кенә ағас тәненә һеңеп юҡҡа сыға.

Бөгөн иң ҙур ҡунаҡ – беҙ. Кисәге „ярамай"ҙарҙың береһе лә юҡ. Өләсәй, үҙе әйтмешләй, „воле" ҡуя беҙҙе бөгөн. Оҙаҡ ҡайнауҙан өйрәгә әүерелгән ашты бик тәмләп ашап алабыҙ ҙа ҡустым менән уйынға керешәбеҙ. Юрған, толоп, гармундар тағын иҙәнгә төшөп ҡунаҡлай. Өләсәй бәләкәй яҡтағы түшәгенә ятып серем итә. Беҙ, донъябыҙҙы онотоп, тағын уйын тылсымына сумабыҙ.

Көн кискә ауышыуға мәктәптән ағайҙар ҡайтып етте.

– Кәзә майыңды сығарайыммы? – ти бәләкәй ағай, инеү менән, сумкаһын өҫтәл аҫтына ырғытып.

– Миндә кәзә майы юҡ! – тимен, турһайып, уның тағын бер-бер этлек эшләрен һиҙеп.

– Бар, бар! Әллә ышанмайһың? Әйҙә, күрһәтәм!

– Миңә күрһәт!? – тине ҡустым, ҙур күҙҙәрендә ҡыҙыҡһыныу ҡатыш тәбиғи ышаныс балҡытып.

Бер аҙҙан инде ул, ҡыҙарған маңлайын ышҡып, аҡырып иларға тотона, бәләкәй ағай, өләсәйҙән өлөш эләгеүҙән ҡурҡып, өйҙән сығып һыҙа, оло ағай, ҡустымды йыуатырға була, сөйҙә эленеп торған фотоаппаратты алып, беҙҙе төрлөсә ҡыландырып фотоға төшөрөргә тотона.

Баяғы тауыш-ғауғаның үҙе өсөн зыян-һүрәтһеҙ тамамланыуын самалаған бәләкәй ағай был шөғөлгә лә килеп ҡыҫылмай булдыра алмай:

– Бына бынауында ҡарағыҙ, ташбаштар, турғай осоп сығасаҡ хәҙер!

Күҙҙәр йәшләнеп бөтә, баштар ауырта башлай, әммә фоотоаппарат „күҙ"-енән ҡошсоҡ түгел, себен дә күренмәй.

„Әй ҙә!" тинем дә бәләкәй яҡҡа сыҡтым. Өләсәй ҙә кискелеккә малдарын ҡарап бөтөрөп (үҙе әйтмешләй, „һыйлап") ингән икән. Сәй ҡуйған, кисәге бәлеш төптәрен йылытҡан. Кескенә табаҡта компот төштәре. Улар бүртеп, тағын да тәмләнгәндер.

Киске аштан һуң ағайҙар дәрес әҙерләргә ултыра. Өләсәй оло ағайға ҙур яҡтағы лампочканың ишек төбөндәгеһен бороп ҡуйырға ҡуша: „Береһе етер, аҡса ашамаһын",– ти.

Бәләкәй ағай беҙгә сумкаһына тейергә рөхсәт итмәй. Хәйер, ул дәресте оҙаҡ әҙерләп интекмәй, сумкаһын тултырып, ишек төбөндәге сөйгә элеп ҡуя ла шытыр-пытыр килтереп радиоалғысты борғоларға тотона. Беҙ, ҡустым менән, хазина һандығындай күреп, оло ағайҙың сумкаһын аҡтарабыҙ, китаптарын уҡығандай итәбеҙ, дәфтәрҙәрҙә ҡыҙыл менән ҡуйылған билдәләрҙе һанайбыҙ.

Ул кисте әле беҙ аръяҡта ҡунабыҙ. Атай менән әсәй көноҙоно эштәләр барыбер. Ҡустым ятыр алдынан көйһөҙләнеп илай. Өләсәй уны үҙ янына алып ята һәм ниҙер көйләй-көйләй һөйләй башлай. Мин ул һүҙҙәрҙең береһен дә аңламайым. Шиғыр ҙа түгел, йыр ҙа.

Тышта кисләтеп ҡупҡан бурандың ыжылдап олоғаны, ябылмай ҡалған тәҙрә ҡапҡасын йолҡҡолап шаҡ-шоҡ бәргеләгәне ишетелә. Өләсәй татарсаға күсә. *Әллә кем, әллә кемдәрҙең исемдәрен,* атайҙарының исемдәрен атап „һеҙгә доға бағышланым“ ти. Быларҙы һөйләгәндә уның неском тауышы ҡалтырап-ҡалтырап китә.

Миңә күңелһеҙ. Мин үҙемдең икһеҙ-сикһеҙ яңғыҙлығымды тоям. Көндөҙ шундай шат, барыһын да белеүсе, бар нәмәгә көсө етерҙәй күренгән өләсәйемдең бөтөнләй башҡа, ялбарыулы, үтенеүле халәтенә шаһит булып, уны ҡыҙғаныуҙан быуынһыҙ ҡалам. Ник улай һөйләнә ул? Кемдән үтенә? Әруахтар кемдәр ул?

Күҙ алдымда шундай һүрәт пәйҙә була: өләсәйҙең йорто, торбаларынан төтөн сығара-сығара, осһоҙ-ҡырыйһыҙ ҡар яланын йырып, ҙур бер карап һымаҡ ҡайҙалыр йөҙөп китеп бара... Ул карапҡа беҙ тейәлгәнбеҙ, ләкин уның ҡайҙан килгәнен дә, ҡайҙа китеп барғанын да белмәйбеҙ... Донъя ҡараңғы. Бурандың шомло һыҡраныуы аша иламһыраулы тик бер аһәң яңғырай: *„...лә иләһә иллэллаһ, лә иләһә иллэллаһ...“*

4

...Үҙгәреп тә ҡарамаған ине мунса. Яңыһын һалғандан һуң унда күптән мунса инмәһәләр ҙә, барыһы ла элеккесә: һул яҡ түр мөйөштә ҡаҙанлы мейес, ишек төбөндә ләүкә. Хатта тәҙрәлә лә шул элекке, ҡыҙыл сәскәле ситса пәрҙә. Уң яҡтағы оҙон эскәмйә урынына ике карауат ҡына ҡуйылған. Уларға иҫкерәк мендәр-юрған, пальто-фуфайка өйөлгән.

– Иҫәнгенәме, өләсәй? – тим. Теҙләнеп ҡаҙан аҫтына юныҫҡы тултырып булашҡан өләсәй тороп баҫа ла, ғәҙәттәгесә, күҙҙәрен ҡыҫа төшөп, бар йөҙө менән яҡтырып:

– И-и-и... – тип миңә табан килә. Ҡаштары өтөлөп көйгән. Битендә бешкән яра эҙе. Уны ҡосаҡлап алам.

– Ниндәй пожар сығарып ятаһығыҙ бында?! – тимен һәм өмөт менән күҙҙәренә бағам.

Өмөтөм бушҡа түгел. Ул көлә! Ҡараңғы мунса, утыҙ йыллап элек беҙ йыуынып йөрөгән мунса эсе, ҡояш сыҡҡандай, яҡтырып китә.

Өйө янды бит өләсәйҙең. Яҙ һулышы аңҡыған зәңгәр апрель кисендә бер нисә сәғәт эсендә янған да бөткән. Ғүмер буйы бөртөкләп йыйған донъяһы, ҡәҙерләп биҙәп кенә тотҡан йорто үҙенең үк күҙ алдында көл-күмергә ҡалған да ҡуйған.

– Әлдә үҙең иҫәнһең!

– Ишекте асып ебәреүем булды – йөҙөмә ялҡын бәрҙе, – ти ул, яра эҙен

бармаҡтары менән ҡапшаштырып. – Үҙем дә янған ғына булһамсы шунда! – ти унан, баяғы ҡиәфәтен кинәт үҙгәртеп.

– Һөйләмә юҡты! Әле һин өр-яңы өй һаласаҡһың! Ҙурҙы, тағы ла яҡшыраҡты! Һәй-й, һин бындай ғына ҡайғыларҙы үткәргәнме!

– Эйе шул, – ти өләсәй, нисектер, бик тиҙ генә ризалашып. Уның үҙендә лә шул уҡ уй булған. Аръяҡҡа, йәғни беҙгә, әсәйгә, сығып, ике генә төн ҡунған янғындан һуң. „Ҡоҙа нигеҙендә ни йөҙөм менән ятайым, ихатамды етем итеп!" – тигән, ти. Һәм уның был ҡарарын бер кем үҙгәртерлек, уның ихтыярын бер ни ҡаҡшатырлыҡ түгел ине. Иҫке мунсаны йылытып, карауат ҡороп, шунда тора башланы. Бер аҙҙан Ҡазандан оло ағай ҡайтып төштө иптәшкә.

Күс инәһе йортһоҙ ҡалһа, күс нишләй? Балалары бер йәй эсендә йорт күтәрҙеләр. Үҙенең ғүмер буйы, йылдың-йылы страховка түләүе лә юҡҡа булмаған – шуның аҡсаһына бура ҡайтарҙылар. Бәләкәй ағай бигерәк тырышты: оҫталар менән дә ул һөйләште, материалға ла ул сапты. Техника кәрәк саҡта ауылдағы ейәне – йәшләй аварияға осрап үлгән улының улы – тракторы менән килеп ярҙамлашты. Өфөлә йәшәгән уртансы улы ике малайы менән һәр ял һайын ҡайтып, эшләшеп йөрөнөләр. Әсәй менән еңгәйҙәр аш-һыу яғын, аҙыҡ-түлеген ҡараны.

Иң көтөлмәгәне шул булды: үҙебеҙҙең ауылдан ғына түгел, күрше ауылдан да исемлек менән йыйып, өләсәйгә аҡса килтереп бирҙеләр. Әллә ҡайҙағы нәҫел осо тейешле кешеләр, Себерҙән ялға ҡайтыусылар, өләсәйҙе күреп белеүселәр, ҡаза хәбәрен ишетеп, ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итергә тырыштылар.

...Хәйер, былар әле һуңыраҡ, алдағы ярты йыл эсендә буласаҡ хәлдәр... Әле иһә, ана, бағаналары күмерләнгән, ҡыйшайған бәләкәй ҡапҡанан кемдер керелеп килә...

– Һиндә лә ут, миндә лә ут! – тип өләсәйҙе ҡосаҡлап ала Заһиҙә апай.

Күҙҙәре селт-селт килә, ике яңағынан сөбөрләп йәше аға. Уның минең менән йәштәш улы быйыл токка һуғылып вафат булды.

– Нишләйбеҙ һуң инде, Заһиҙә, нишләйбеҙ! Хоҙайҙан уҙмыш юҡ, сабыр итергә, сабыр, – тип гөр-гөр һөйләнә өләсәй.

Заһиҙә апай ҡулындағы төргәкте өләсәйгә һуҙа. Гәзит эсенән шаҡмаҡлы апаҡ оҙон таҫтамал килеп сыға.

– Бына быныһы – ойоҡбаштар. Бына был пакетта май. Бөгөн иртән генә Рәйсәнең дә хәлен белергә барҙым, – ти ул. – Зарлы хәлен зарлы белмәһә, кем белһен... Уға ла ойоҡбаш бәйләп илттем.

Яҙ башында бер юлы ике сабыйы боҙ аҫтына киткән Рәйсәне иҫемә төшөрөп, йөрәгем өшөп китә. Күрше апай саҙаҡа итеп килтергән ап-аҡ таҫтамал, ойоҡбаш, һөт-майҙарҙа – ҡара ҡайғыларға бирешмәйсә, аҡ күңел менән ҡартайған ауыл ҡарсыҡтарының йән сағылышын күргәндәй булам. Күңелем тулып, ситкәрәк китеп баҫам.

Янғын урынын таҙартҡандар, йыйыштырғандар инде. Ярарлыҡ бүрәнәләр бер ситкә өйөп ҡуйылған. Баҡса яғында һауыт-һаба өйөмө. Табалар, тәрилкәләр ҡап-ҡара. Мейесте кемдер ағартып булашҡан, эсендә тимер бумала ята, буй-буй аҡ эҙҙәр һыҙылып ҡалған. Тегеү машинаһы иреп, ғәрип ҡиәфәткә кергән. Өҫтәл-урындыҡ, эскәмйәләр яртылаш күмерләнгән, йыйырылып ирегән клеенка киҫәге аунап ята. Ҡайҙандыр шыплап тултырыулы, өләсәйҙең үлемтеккә тигән әйберҙәре һаҡланған оло һандыҡтың ҡайырылған ҡапҡасы ҡаҙ ҡыуышы өҫтөндә ята.

Сепрәк-сапраҡтың барыһын бер ергә, мунса ишеге алдына, өйгәндәр. Ярты-лаш янып, ҡоромға батҡан еүеш туҡымалар сүмәләһе... Алмалы-сейәле пәрҙәләргә, әкиәти ҡала һүрәте төшөрөлгән сымылдыҡҡа янғын мөһөрө ҡыҙҙырып баҫылған. Әйтерһең дә, ниндәйҙер яуыз зат уларҙы сатлы-ботаҡлы ҡулдары менән өҙгөләргә, йыртҡыларға яҫҡынған, утлы тынын өргән...

Тыҡрыҡтағы ҡарт ҡайынға ла янғын һулышы ҡағылған: кәүҙәһенең йорт яғы күмер генә, аҫтағы ботаҡтары юҡ. Һаман япраҡ ярып аҙаплана үҙе. Өҫкө суҡтарындағы шыйыҡ йәшел нәфис япраҡтар көл-күмер, ҡором баҫҡан ихатаға сабыйҙарса ғәжәпләнеп, „ниңә былай булды һуң әле был?“ тигәндәй, мөлдөрәп ҡарайҙар кеүек...

5

Мин тағы аръяҡҡа сығып китеп барам. Өләсәйҙе мунсаға саҡырырға. Әсәйем яғып ҡалды. Ҡустымдар был ялда ҡайтманы. Иптәшем:

– Әйҙә, машина менән генә урап керәбеҙ, – тиһә лә, баш тарттым.

Иркенләп, яңғыҙым ғына үтәһем килде бала саҡ юлдарын.

Күстәнәстәрҙе алдым да киттем тыҡрыҡтан төшөп. Элекке ат күпере юҡ хәҙер. Урталағы ҙур күперҙән йөрөйҙәр. Дөрөҫ, бер ситтәрәк баҫма бар. Унан тура бәләкәйләнеп, ергә һеңеп бөтһә лә, тирмән йорто иҫән икән әле.

Ҡайындар ҡартайған... Ағастарҙың да ҡартлығы була. Ҡалын тупаҫ ҡайрыларын тәрән йыйырсыҡтар ярғылаған. Өҫкө ботаҡтарының да туҙҙары ҡупшаҡланып, уларҙы ҡара шаҙралар таплаған. Ел-дауылданмы, үҙҙәренең ваҡыты етепме, ҡайһы берәүҙәренең ботаҡтары ҡайырылып төшкән. Ике яҡ ярҙа ла әҙәм буйы кесерткән, әрем, әрекмән. Ауыл көтөүе лә бынан йөрөмәй инде хәҙер.

Йылға ғына шул килеш, һаман кәйефле генә, күңелле генә сылтырап, арыуталыу белмәй үҙ юлынан йөрөүен белә. Ҡайһы бер урындарҙа ярҙары ишелеп, юлын ғына үҙгәрткән. Уң яҡта элекке күпер убылып, тәрән соҡор хасил булған, серек бүрәнә ҡалдыҡтары араһынан ҡайын, ерек үҫентеләре үреп килә.

Тар һуҡмаҡтан бейек текә ярға күтәрелеп, клуб янына килеп сығам. Уның нигеҙ урынында бер нисә бүрәнә ҡалдығы аунап ята. Һул яҡта ырҙын табағы, аҙбар келәттәре. Әле август башы, кәбәк таҙартыусы агрегат геүләп эшләп тора. Арпа-фәлән ҡайтамы, әҙерлеген ҡарарға-тикшерергә ҡабыҙғандармы...

Ат һарайы урынында – кесерткән ғәскәре. Һарай артындағы алма баҡсаһында – һыңар алмағас. Уйым-уйым ат ҡуҙғалағын иҫкә алмағанда, ҡайҙа ҡарама – теҙҙән үлән һабағында кибеп ултыра! Хатта урамда ла. Бесән итеп сабырлыҡ, биллаһи! Был остар һыйыр тотмағанды аңлата инде был.

Һә-әй, бар ине ваҡыттар, бесәнгә төшөр көн яҡынлаша башлаһамы? Урман юлына туҙан да ҡундырмаҫтар, һәр кем үҙенең ыҙанын, дәүләт сиген һаҡлағандай, керпек тә ҡаҡмай һаҡлар ине. Күршеңдең өлөшөнә бер генә покос кереп ҡара – күрһәтерҙәр күрмәгәнеңде!

Урмандағы бер покос бесән өсөн тарҡылашып донья көтөргә мәжбүр ителгән ғәйрәтле ағайҙар, һай, ҡайҙа һеҙ? Улдарығыҙ, ейәндәрегеҙ ҡайҙа? Ҡайһы ҡалаларҙың ҡайһы таш йорттарында көн күрәләр икән нәҫелдәрегеҙ?! Урам тултырып йөрөгән ҡаҙ-өйрәктәр, тауыҡ болғауына ҡушырға ат ҡуҙғалағы йыйып йөрөгән ҡарсыҡтар ҡайҙа? Үлән түгел, әремен дә төбөнә ҡәҙәр

кимереп, ҡырып үтә торған аттар ҡайҙа, көтөүҙәре менән күккә ашҡандармы? Ниндәй зилзиләләр ялмаған беҙҙең ауылды?

Өләсәйҙең ҡойма алдындағы үләне сабылған былай. Бакуйҙа кибеп ята. Һыйырын бөтөрһә лә, сапмай түҙмәгәндер инде.

Эстән тереү һалған бәләкәй ҡапҡаны асып, эскә үтәм. Ихатаны бәрхәттәй булып кәрлә ромашка үләне баҫҡан, элекке һуҡмаҡ урындарындағы бәпкә үләне өҫтөндә өйрәк бәпкәләре семсенеп йөрөй. Үҫкәндәр инде, күгәрсен хәтле булғандар. Һул ҡулдағы алма баҡсаһында йәш үҫентеләр алынып килә. Быйыл яҙ түтәлдәрҙе төпләп, йәштәрҙе ултыртҡан бәләкәй ағай. Элекке нигеҙ урынында сәскә түтәлдәре. Уртала георгин ҡыуағы, ҡояштай булып пәйғәмбәр тырнаҡтары балҡый, астра сәскәгә бөрөләнгән.

Ана, өләсәй үҙе лә күренде. Ялтырабыраҡ торған бит алмалары йылмайыуға йәйелә, күҙ ситтәрендә йыйырсыҡтар нурлана. Яулығын төҙәткеләп, ҡулын алъяпҡысына һөртөп, нәҡ элеккесә көйләп, йырлағандай итеберәк, „и-и...“ тип ҡосаҡ йәйеп миңә табан килә.

Йылдан-йыл кесерәйә барып, орсоҡ ҡәҙәр генә ҡалған өләсәйемә ике баш юғарынан ҡарауыма ҡыйынһынып, уның ҡорошоп бөткән, бер бармағын быҙау арҡанлағанда өҙҙөрткән ҡулын усыма алам.

– Үҙең генәме ни? – ти ул. – Кейәү ҡайҙа? – ти, ҡапҡа тарафына ҡараш ташлап, инде ейәненең иренә лә кейәү хөрмәте күрһәтергә әҙер булып. Үҙенең берҙән-бер кейәүе – атайымдың ер аҫтына инеп ятыуына егерме йыл быйыл.

– Һине мунсаға саҡырырға сыҡтым, – тим. – Әсәй томалап ҡалды. Әҙерлән. Көтөү ҡайтҡас, машина менән сығып алырбыҙ.

– Кисә үҙем яғып керҙем, – ти ул, ҡулын һелтәп. – Интеккән бар әллә? Ҡойо ихатала булһын, моторы гөрләп торһон! Шатланып бөтә алмайым, ҡыҙыҡайым, бөгөнгө тормошҡа! Рәхмәт уҡып йөрөйөм! Газы гөрләп янып торһон, пенсияһын килтереп бирһендәр, әпәкәй ҡайтып торһон! Утын вуле! Әкәмәт бит, ә! Сәй ҡуям хәҙер! Эсмәй китмәйһең! Теге буш умартаға күс килеп керҙе бит быйыл, өсөнсө көн бал айыртам. Баллап сәй эсәбеҙ!

Ул, бал алырғалырмы, ғәҙәтенсә ваҡ-ваҡ атлап, келәткә табан китә. Алъяпҡыс кеҫәһенән бауы ҡат-ҡат төйөнләнеп бөткән асҡыс бәйләмен сығарып, бихисап иштәре араһынан кәрәкле асҡысты эҙләй.

Мин келәт йәнәшәһендәге иҫке мунсаға күҙ һалам. Уның ишеге алдын өләсәй хәҙер бәпкәләр ябырға көйләгән. Мөйөшөнән һул яҡ алма баҡсаһына һуҙылған кер ебендә мунса керҙәре кибә. Янғын һарыһы һеңеп ҡалған яулыҡтар, көйөк эҫе һеңгән таҫтамалдар... Яңылары шкаф тулы булһа ла, иҫкене киймә тип туҡып торһаҡ та, шуларҙан айырыла алмай ул һаман...

Яңы йорттоң бейек, киң күтәрмәһенә ултырам да йәнәшәмдәге алмағастан балдары тамырҙай булып бешкән алма өҙөп алам. Өлгөрөүе еткән ҡып-ҡыҙыл алмалар, шуны ғына көткәндәй, дәррәү тупылдашып ергә ҡойола. Аяҡтарымды вайымһыҙ һелкә-һелкә, сертләтеп алма тешләйем. Йорт ышығынан „сығып“ икендегә йүнәлгән ҡояшҡа күҙ ҡыҫам, ҡунаҡ килеүгә шатланып үрле-ҡырлы һикергеләгән һары көсөккә ҡул болғайым һәм, өләсәйемдең эше бөтөп, мине табынға ултыртып һыйлаясаҡ, ҡунаҡ итәсәк танһыҡ, хозур мәлде көтә башлайым...

## *Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына – 100 йыл*

# Тос йөкмәткеле роман*

Атаҡлы ғалим, талантлы яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың биографияһы ла, ғилми һәм әҙәби эшмәкәрлеге лә башҡорт культураһы үҫешенең айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Башҡорт тел ғилемен бөтә совет һәм донъя фәне кимәленә күтәргән ғалим Жәлил Кейекбаев юғары культуралы, киң эрудициялы әҙип булараҡ та һиҙелерлек эштәр башҡарҙы. Уның әкиәт һәм хикәйәләре, шиғыр һәм ҡобайырҙары, очерктары, «Туғандар һәм таныштар» романының ҡыҫҡартылған варианты «Ағиҙел» журналы аша күптән инде уҡыусы йөрәгенә барып етте. Әммә уның ижады хаҡында бығаса бер нindәй һүҙ булғаны юҡ әле. Беҙҙә Жәлил Кейекбаев ғалим булараҡ ныҡыраҡ билдәле, сөнки тел ғилеме буйынса уның хеҙмәте шул тиклем ҙур, шуғалыр, бәлки, әлегәсә Кейекбаев (яҙыусы Кейекбаев) ғалим күләгәһендә ҡала килә. Ә бит яҙыусының хеҙмәте ҙур баһаға лайыҡ.

Жәлил Кейекбаев 1911 йылдың 7 ноябрендә Башҡортостандың Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында тыуа. 11 баҫҡыс Маҡар ауыл йәштәре мәктәбен, шунан Өфө рабфагын тамамлай һәм республика гәзит-журналдарында эшләп йөрөй. Яҙыусының тәүге ижади аҙымдары ошо осорға тура килә. Ул шиғырҙар, хикәйәләр яҙып ҡарай. Әммә үҙенең әҙәби-художестволы культураһының әлегә самалы булыуы уны бик көйөндөрә. Ул рус классикаһын, совет әҙәбиәтен ныҡлап өйрәнергә тотона. Был мауығыу Жәлилде сит ил, бигерәк тә көнбайыш классик, әҙәбиәте менән дуҫлаштыра. Ошо әҙәбиәтте үҙ телендә уҡырға, өйрәнергә теләү уны 1933 йылда Мәскәүҙәге Сит телдәрҙе өйрәнеү институтына алып килә. Институтты тамамлағас, ул 1937 йылдан башлап мәктәптәрҙә, вуздарҙа немец теле уҡыта. Әммә күп кенә телдәрҙе практик белеү һәм өйрәнеү уны кешелек тарихындағы һәм тормошондағы ғәжәп ҙур һәм мөһим ижтимағи күренеш булған тел һәм уның законлылыҡтары хаҡында уйланыуға, тәүге теоретик һығымталар һәм асыштар яһауға килтерә. Хатта ул көнбайыш, бигерәк тә немец классик поэзияһынан үрнәктәр тәржемә иткәндә лә ике маҡсат тота башлай. Беренсенән, ул классик һәм хәҙерге немец әҙәбиәте өлгөләре менән башҡорт уҡыусыһын таныштырырға теләһә, икенсенән, тәржемә иткән тел менән үҙ туған теле араһындағы мөнәсәбәтте лә асыҡлау менән мәшғүл. Әммә әлегә әҙәбиәт

---

**Әнүр Вахитовтың уҡыусыларыбыҙға тәҡдим ителгән мәҡәләһе лә, Жәлил Кейекбаевтың унда һүҙ барған, киң танылыу яулаған «Туғандар һәм таныштар» романы ла социалистик реализм ҡыҫаларында яҙылған. Әммә был «уларҙың художестволы ҡиммәте юҡҡа сыҡҡан» тигәнде аңлатмай.*

*Бөгөнгө юғарылыҡтан, был юғарылыҡ яҡтылығынан әҙиптең дә, әҙәби тәнҡитсенең дә йомшаҡ яҡтары ла, ҡабатланғыһыҙ һоҡланғыс таланты ла асығыраҡ күренә. Күреү, тәғәйен баһалау, уларға таянып рухты нығыта-байыта алыу инде һәр ҡайһыбыҙҙың күңел күҙе үткерлегенә, зиһен зирәклегенә, тормош тәжрибәһенә, ниәт-маҡсаттарына бәйле.*

**Редакция.**

уның төп эше булып ҡала. Ул, тәржемә менән бер рәттән, күп кенә оригиналь шиғыр, ҡобайыр, хикәйә һәм әкиәттәр яҙа. Повесть кеүек күләмлерәк әҫәрҙәр ижад итеп ҡарай һәм, ниһайәт, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда Ғафури районы Сәйетбаба урта мәктәбенең директоры булып эшләгәндә «Туғандар һәм таныштар» тигән ҙур роман-дилогия яҙырға ултыра. Әммә Өфөгә күсеп килеү, романдың тәүге китабын баҫтырып сығарырға әҙерләгәндә осраған ҡайһы бер ҡаршылыҡтар уның әҙәби ижадын тотҡарлай. Тап ошо осорҙа уға төрки телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт тел ғилеменең, ҙур белгесе профессор Н. К. Дмитриев менән танышырға насип була. Ошо хәл Ж. Ғ. Кейекбаевта уның талантының икенсе йүнәлеше – ғилми эшмәкәрлектең ныҡлап еңеүен тәьмин итә.

1947 йылдан алып Жәлил Кейекбаев тел ғилемендә мөкиббән китеп эшләй башлай. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул башҡорт теленең генә түгел, төрки телдәрҙең, тағы ла торараҡ Урал-Алтай телдәренең бик ҙур белгесенә әүерелә, был өлкәлә яңы мәктәп барлыҡҡа килтерә. Шуның буйынса ул бик ҙур хеҙмәтен тамамлап килә ине инде. Уның һуңғы йылдарҙағы ғилми-педагогик эшмәкәрлеге күп яҡлы һәм һөҙөмтәле булды. Ул вуздар өсөн яңынан-яңы программалар, мәктәп дәреслектәре төҙөнө, уҡыу ҡулланмалары яҙҙы, аспиранттарға етәкселек итеп, фән кандидаттары әҙерләне. Уны илебеҙҙең төрлө юғары уҡыу йорттарына (Алмата, Якутск, Ҡазан, Тарту һ.б.) лекциялар уҡырға саҡыра торғайнылар. Был хеҙмәтен хөкүмәт юғары баһаланы: ул Ленин ордены менән наградланды, БАССР Верховный Советына депутат итеп һайланды, уға «БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре» тигән почетлы исем бирелде. Әҙәби ижад уның өсөн торған һайын киләсәктә мотлаҡ үтәләсәк бер бурысҡа әйләнә бара. Дөрөҫ, ул хикәйәләр, әкиәттәр, хатта һирәкләп ҡобайырҙар яҙғылай. Әммә әҙерлекле, юғары культуралы талант өсөн был тик ял итер өсөн эш төрөн үҙгәртеү генә ине. Ә ысын әҙәби ижад уны бик тарта ине. Ана шуға ла ул ашыҡты, бик ашыҡты. Алдына мотлаҡ үтәргә тип ҡуйған ғилми идеяларын тиҙерәк башҡарып сығырға ла әҙәби эшкә ҡайтырға теләй ине ул. Ошо ашығыу уны ваҡытһыҙ яндырҙы ла инде. Бәйгелә ярһып, ал бирмәй сапҡан ат һымаҡ булды уның был ашығыуы, ашҡыныуы.

Ж. Ғ. Кейекбаевтың әҙәби-художестволы пландары ҙур ине. Ул быға яҙғандарын мотлаҡ яңынан ҡарап сығырға йыйына ине. Шиғыр һәм ҡобайырҙарын яңы редакцияла бирергә, хикәйәләрен, бигерәк тә «Урман әкиәттәре»н бер ергә тупларға, «Дуҫтар» һәм «Зөбәй Үтәғолов» повестарын яңынан эшләп сығырға теләй ине ул. Бынан тыш, ул ғилми хеҙмәткәрҙәр тормошонан повесть, һуғыштан һуңғы ауыл хаҡында ҙур әҫәр яҙырға хыяллана ине... Был ике әҫәрҙең айырым главаларын ул республика гәзиттәре биттәрендә хикәйә рәүешендә баҫтырып та сығара. Ә инде «Туғандар һәм таныштар» романы ике китаптан торған киң эпик полотно буласаҡ, тигән уй менән йәшәй ине. Ҙур талант менән яҙыла башлаған дилогияның тәүге китабының ҡаралама килеш тиерлек ятып ҡалыуы бик үкенес, әлбиттә. Романды сығарырға әҙерләгәндә мин шуға ла уның һәр һүҙенә, интонацияһына тиклем һаҡларға, әҫәрҙең Жәлил ағай Кейекбаев иҫән саҡта үҙ ауыҙынан әллә нисә рәт ишеткән художестволы структураһын, композицияһын, сюжетын мөмкин тиклем яңынан тергеҙергә тырыштым.

Утыҙынсы йылдарҙың аҙағы әҙәбиәтебеҙ өсөн ауыр осор булды. Башҡорт совет әҙәбиәтен башлап ебәреүҙә, уны ойоштороуҙа һәм артабан үҫтереүҙә ҙур хеҙмәт күрһәткән бик күп яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, драматург һәм тәнҡитселәрҙең ижади эштән ситләтелеүе әҙәби процестың аҡрынайыуына, бигерәк тә прозаның тотҡарланыуына килтерҙе.

Ошондай ауыр тынлыҡ һәм бушлыҡта Ғ. Ғүмәрҙең, С. Агиштың һәм тағы бер нисә йәш прозаиктың тауышы ғына ишетелгеләй ине. Ана шуның өсөн дә был осорҙа оҙон ун йыл буйы тиерлек күләмлерәк әҫәрҙәр бик һирәк сыҡты. Улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. С. Агиштың «Егеттәр»е менән «Мәхмүтов»ы, А. Карнайҙың «Йәшлек» һәм «Беҙ ҡайтырбыҙ» повестары, Ғ. Ғүмәрҙең хикәйәләре – ул дәүерҙең ижади йөҙөн билдәләүсе әҫәрҙәр булды. Ә инде һуғыш осоронда Ж. Кейекбаевтың «Зөбәй Үтәғолов» тигән документаль повесынан башҡа ҙур күләмле әҫәр булманы, ғөмүмән, хикәйә һәм очерктар ғына ижад ителде. Ж. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романы бына ошондай шарттарҙа яҙылды. Роман үҙенең идея-художество концепцияһы һәм уның ижади хәл ителеше менән шул осорҙағы башҡорт прозаһының ҙур ҡаҙанышы булып тора.

«Туғандар һәм таныштар» – уғаса сыҡҡан роман һәм повестарҙың дөйөм ҡаҙаныштарын үҙендә туплаған әҫәр. Унда халыҡ тормошоноң, халыҡ яҙмышының драматик асылын анализлаусы ҙур эпик йөкмәтке һалынған. Шуның менән бергә, әҫәрҙең формаһы ла, һүрәтләү алымдары ла, теле лә дөйөм башҡорт әҙәбиәтенең, әҙәби культураның үҫеш кимәлен билдәләне.

Роман тамамлағас, 1946 йылдың 5 августында Башҡортостан яҙыусыларының партия йыйылышында Жәлил Кейекбаевтың ижади отчеты тыңлана. 7 августа «Красная Башкирия» гәзитендә был хаҡта информация бирелгән. Унда: «Роман Урал заводтарының береһендә эшселәрҙең 1912 – 1917 йылдарҙағы тормошон һәм көрәшен күрһәтә. Автор шул осорҙағы башҡорт көнкүрешен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен яҡшы белә», – тиелә. Партия йыйылышы романды яҙыусының етди ижади уңышы тип билдәләй һәм прозаиктар секцияһында роман буйынса киң дискуссия ойоштороорға тәҡдим итә. Дискуссия 1947 йылдың 7 ғинуарында Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара ултырышы рәүешендә үткәрелә. Романдың уңышлы яҡтары менән бергә күп кенә етешһеҙлектәре лә әйтеп кителә.

Партия йыйылышында һәм идара ултырышында әйтелгәндәр нигеҙендә Ж. Кейекбаев үҙ романын ҡабаттан ҡарап сыға. Шулай ҙа, төрлө сәбәптәр арҡаһында, роман ул йылдарҙа сыҡмай ҡала.

* * *

Романда автор бер туған өс бай – Әхмәди, Шаһиәхмәт, Баһауҙарҙың ауыл ерлеге мөмкинлек биргән өс төрлө хужалыҡ ысулы менән байыу тарихын күҙәтә. Уларҙың атаһы Сәлмән ҡарт, заманына күрә һиҙгер һәм эшмәкәр булһа ла, нигеҙҙә, иҫке традиция буйынса йәшәй. Файҙалы икәнлеген күрһә лә, әле улы Әхмәди һымаҡ «бүҙрәтчик» булып «аҡсалы бай» исеме алырлыҡ итеп бер башлаған эшен ҙурайтып ебәреүгә өлгәшмәй. Сөнки ул ниндәйҙер дәрәжәлә капиталистик мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған кустарсылыҡты үҙһенеп етмәй. Аяҡлы малын да әллә ни үрсетеп ебәрә алмай. Ҡортсолоҡ менән мауығыу ҙа албырғата Сәлмән ҡартты. Уның хужалығындағы бына ошо өс йүнәлеште артабан үҫтереп китерҙәй өс улы үҫә. Әммә авторҙы, аяҡлы малға ҡыҙығыусы Шаһиәхмәт менән Баһауға ҡарағанда, Сәлмән ҡарттың иғтибар итеп еткермәгән кәсебе – кустарсылыҡҡа мөкиббән китеп йәбешкән һәм бик тиҙ «аҡсалы бай»ға әйләнгән Әхмәдиҙең эшмәкәрлеге ҡыҙыҡтыра. Сәлмән ҡарт үлгәс, уның мираҫын бүлешеү ығы-зығыларын һүрәтләүгә автор нык иғтибар итә. Сөнки был мәлдә Япон һуғышында булып ҡалған Әхмәдиҙең үҙ туғандары тарафынан да «кәмһетелеү»ен күрһәтеү яҙыусыға был кешенең күңелен нигеҙлерәк итеп асыу һәм

сюжетҡа ла, конфликтҡа ла драматик оттенок биреү өсөн кәрәк. Әхмәди тәүҙә, мираҫтан ҡоро ҡалдырғанға туғандарына үс итеп, тырышып аҡса «яһарға» тотона. Әммә был үпкә оҙаҡҡа бармай. Сөнки Әхмәдиҙең һиҙгер күңеле аҡсаны ерлекле кәсеп нигеҙендә генә табып булыуын тиҙ төшөнә. Ул тире-яры йыйыу эшен бер яҡҡараҡ ҡуйып, һалабаш әҙерләү кеүек төшөмлө эште яйға һала, быны өсөн ҡала байҙары менән яҡын мөнәсәбәткә инә.

Әхмәди – заман ағышы тыуҙырған яңы тип бай. Ул аҡса менән бөтә нәмәне, хатта кеше ғүмерен дә һатып алырға мөмкин булыуын бик тиҙ төшөнөп ала. Ваһап ҡартты үлтертеү, Хөсәйенде юлдан алып ташлау эпизодтары Әхмәди юлындағы ябай, осраҡлы бер ваҡиғалар ғына түгел, улар – синфи-социаль йөкмәткеле эпизодтар. Автор быны менән яңы тип бай Әхмәдиҙең яһаған аҡсаһы – кеше күҙ йәшенә, кеше ҡанына мансылған булыуын аса. Социаль тип булараҡ Әхмәди бына шулай формалаша. Башҡорт ауылында капиталистик мөнәсәбәттәр революция алдынан бына шулай ныҡына.

Автор был процесты бер яҡлы ғына анализламай. Капиталистик мөнәсәбәттәр, үҙ сиратында, халыҡтың да күҙен аса бара. Был процесс Сөнәғәт кеүек көрәшсе характерҙарының тыуыуына килтерә. Әммә бында ла яҙыусы художестволы тактты юғалтмай. Образдың тормошсанлығын тәьмин итерҙәй, ышандырырҙай конкрет биография төҙөй. Дөрөҫ, икеһе ике поляр көстө сағылдырыусы был персонаждар (Сөнәғәт менән Әхмәди) араһындағы конфликт сығанағы бер үк социаль күренештә ятһа ла, улар йөҙгә-йөҙ ҡаршы осрашмайҙар әле. Әммә ижтимағи конфликттың үҫеше һис һүҙһеҙ уларҙың бәрелешәсәгенә ишара яһай. Быны автор Сөнәғәт менән Фатима араһындағы мөхәббәтте һүрәтләү юлы менән нигеҙләп тә ҡуя. Фатиманың Богоявлен заводында эшләүсе Сөнәғәт янына тәүге ҡасыуы, әммә юлда тотолоуы был осраҡта мөһим сюжет бөгөлөшө ролен үтәй. Ә беренсе китаптың инде Фатиманың Богоявленға икенсе тапҡыр ҡасып килеп йәшәй башлау эпизоды менән тамамланыуы беҙгә романдың үҙәк ике персонажы булған Сөнәғәт менән Әхмәди мөнәсәбәтенең революция мәлендә, моғайын, конкрет төҫ алырға тейешле булғанлығын фараз итеү рәүешендә генә раҫларға мөмкинлек бирә. Быны образдарҙың үҫеш логикаһы ғына түгел, ғөмүмән, романдың дөйөм социаль-тарихи йөкмәткеһе лә нигеҙләй.

Романдың киң эпик һыҙаты – ана шулай ижтимағи үҫеш процесын анализлауы, был үҫеш нигеҙендә замандың синфи-социаль ҡаршылыҡтары ятыуын асып биреүендә. Бынан тыш әҫәрҙең эпиклығын тарих менән, осор менән бергә Ташбатҡан ауылының да хәрәкәт итеүен күрһәтеү ҙә билдәләй. Ошо ҡараштан сығып, әҫәрҙең эске структураһына, сюжет үҫешенә, композицияһына күҙ һалайыҡ.

Ташбатҡан ауылы, уның тәбиғәте, кешеләре булып ятҡан хәл-ваҡиғалар хаҡында талғын ғына хикәйәләү менән башланып киткән әҫәрҙең эсенә кергән һайын, халыҡ тормошондағы был «талғынлыҡ»тың ҡарар күҙгә генә шулай булыуын, ә, асылда, ниндәйҙер көсөргәнешле ситуация барлыҡҡа килеүен, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттең дә яңы йөкмәтке ала барыуын күрәбеҙ. Әҫәрҙә тәүҙәрәк социаль характерҙағы бәрелеш бөтөнләй юҡ һымаҡ. Сөнки автор уны көнкүреш ығы-зығылары артына бик оҫта йәшерә, тел төбө менән эш итә. Әммә, ваҡиғалар үҫә барған һайын, автор уларҙың эҙмә-эҙлекле, ныҡлы уйланған ситуация төҫөн алыуына, идея-художестволы яҡтан теүәл һәм ынтылышлы бер сюжет барлыҡҡа килтереүенә өлгәшә. Был процесты һүрәтләү аша авторҙың кешеләр араһындағы мөнәсәбәтте килешмәүсән синфи көрәш билдәләүен нигеҙле һәм ышандырырлыҡ итеп раҫлауын тояһың. Әҫәрҙәге ошо раҫлау ғәжәп тәбиғи һәм тормошсан итеп бирелгән.

Бына Ташбаҡҡан ауылының тирә-яғын, мөһабәт Уралды, уның аша уҙған оло юлды тасуирлаған тәүге бүлек. Ташбаҡҡан ауылы тауҙар, урмандар төпкөлөндә ятҡан кеүек булһа ла, асылда Урал аша уҙған ана шул оло юл өҫтөндә ултырған. Ситләтелгән мәғәнәгә эйә булған был символик инеш бүлек артабан романдың идея-эстетик йөкмәткеһенә яҡтылыҡ ташлап тора. Унан һуңғы бүлектә ауылдың тулайым портреты тыуҙырыла. Автор аралар, ырыуҙар, туған-тыумаса, ҡан-ҡәрҙәшлек, иҫке ғөрөф-ғәҙәттәр көслө булған ауылдың биографияһын, социаль-экономик хәлен, ундағы мөнәсәбәттәрҙең нимәгә нигеҙләнеүен аҡрын ғына, тәфсилләп, нигеҙләп кенә һөйләп сыға. Ошо арала ул ауылға, уның тормошона бәйләп айырым социаль төркөмдәргә, кешеләргә характеристика биреп тә өлгөрә. Ауылдың ҡыуанысһыҙ тормошон алға тәгәрәтеүсе елдәрҙең ҡайҙан иҫеп ҡайҙа туҡтауын асыҡлаған ике бүлектән һуң, яҙыусы «Бәләкәй һабантуй» бүлеге менән ваҡиғаларҙы конкретлаштыра төшә.

Автор романдың был бүлеген ошондай күмәк кеше ҡатнашлығындағы картина менән асып, аңлы рәүештә уҡыусыларҙы әҫәрҙә ҡатнашасаҡ кешеләр һәм урын-ер менән таныштыра, туранан-тура ваҡиғаларҙың киң эпик ағышын төҫмөрләп алып китеүгә өлгәшә. Әҫәрҙә бөтә ауыл ҡатнаша. Ауыл менән ҡатарҙан завод та үҙенең ҡапма-ҡаршы ике синыфы менән килеп инә. Ауыл ярлыларын ул үҙенә тарта, уларҙың көсөн һура, энергияһын ала, уның урынына эшселәрҙең яйлап аңын үҫтерә, «Күмәкләгән – яу ҡайтарған» тигән хәҡиҡәтте аңларға этәрә.

Яҙыусы Ташбаҡҡан хаҡында мәғлүмәт биргәндә уның исеменең ҡайҙан алыныуына ла ситләтелгән мәғәнә һалырға тырыша: «Ташбаҡҡан ауылының түбәнге Ғөмәр ауылы яҡ осонда ҙур бер һаҙлыҡ бар. Ул һаҙ упҡынлы, күтерле. Уның ситенәрәк барып аяҡ менән баҫһаң, упҡыны алыҫтан һелкенеп тора. Унда ҡайһы саҡта быҙау, башмаҡ-фәлән батып ята. Элегерәк шул һаҙҙың ҡап уртаһында ҙур бер таш булған, имеш, тип һөйләйҙәр. Берҙән-бер көндө шул таш, һаҙға батып, ғәйеп булған. Шунан бирле һаҙҙы «Ташбаҡҡан һаҙы» тип йөрөтә башлағандар. Ауылдың исеме лә шунан ҡалған...»

Ташбаҡҡан үҙе лә, – ошо тау-таш араһындағы һаҙға батҡан таш һымаҡ, тормош һаҙлығына батып барған бер ауыл. Ул «йөҙ илле мөрйәнән төтөн сығарып, бер общество булып йәшәй». Төрлө кешеләр, төрлө мәнфәғәттәр бар бында. Бер яҡта ил талап көн күргән Ғариф староста менән бер төркөм байҙар, подряд тотоусы тәпе Әхмәди торһа, икенсе яҡта Сөнәғәт, Сәмиғулла, Ваһап һәм бөтә ауыл ярлыһы тора. Ауыл былай тәүге ҡараштa, әлеге һаҙға батып барған таш һымаҡ, тыныс ҡына көн күреп ятҡан кеүек булһа ла, ауылда килешеүһеҙ ике яҡ үҙенсә йәшәү өсөн көрәш алып бара. Хатта был көрәш ырыу менән ырыу, ауыл менән ауыл, аймаҡ менән аймаҡ араһында ла бара. Был көрәштең сығанағы социаль тигеҙһеҙлектә ята. Яҙыусы социаль иҙеүҙең һәм талауҙың төрлө формаларҙа барыуын асырға ынтыла. Мәҫәлән, бер килке күрше Ғөмәр ауылы кешеләре (бигерәк тә «бүҙрәтчик» Ишбулды бай. – **Ә. В.**) «Ташбаҡҡандарҙы бер общество булып йәшәргә өндәгәндәр. Хатта Ташбаҡҡан ауылының ҡарттарын, тыу бейә һуйып, бал ҡойоп, һыйлағандар, имеш, тиҙәр. Аҙаҡтан Ташбаҡҡан халҡы эштең әрәсәһенә төшөнөп алған. Баҡтиһәң, улар Ташбаҡҡан ауылының урманын алырға йәүкәләгәндәр икән...»

Яҙыусы Ташбаҡҡан ярлылары араһында аҡрынлап берҙәмлек тойғоһоноң көсәйеүен, уларҙың бер-береһен ҡурсалауҙарын күрһәтеүгә ҙур урын бирә. Быға автор ауыл сходтарын һүрәтләгәндә, йыйылып һөйләшкәндәге репликалар аша өлгәшә. Был берҙәмлек тойғоһо элекке ырыу, аймаҡ, ауыл, «общество» берҙәмлеге тойғоһонан үҙенең социаль йөкмәткеһе, политик характеры менән айырыла.

Элек берҙәмлек тойғоһо халыҡтың этник составына һәм ҡан-ҡәрҙәшлеккә барып тоташһа, хәҙер инде – социаль көнкүрештә тотҡан урынына, ғөмүмән, синфи сығышҡа. Ж. Киекбаев ана шул процесты асыҡ художестволы картиналарҙы анализлауға һәм конкрет-тарихи яҡтан дөрөҫ һығымта яһауға өлгәшкән.

Яҙыусы ауыл тормошон, көнкүрешен, булып ятҡан хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлауҙа үҙенсәлекле алымдар ҡуллана. Тәпе Әхмәдиҙең келәт буратыр өсөн әҙерләнгән бүрәнәләренә ултырып, ир-аттың мәсьәләне уртаға һалып һөйләшеүе, сходтағы талаш-тартыштар, берәй ваҡиға хаҡында ауыл араһында йөрөгән һүҙҙәр, репликалар – былар барыһы ла сюжет ағышында теге йәки был ваҡиғаларға халыҡтың мөнәсәбәтен күрһәтә, баһаһын бирә. Ләкин был мөнәсәбәт һәм баһа сюжет нигеҙенә ятҡан ваҡиғалар үҫешенә альюҫыҡҡа килтереп терәлмәгән. Дөйөм конфликттың, сюжеттың үҫеше тап ана шул халыҡ фекеренең асыҡлана барыуы менән тығыҙ бәйләнгән. Сөнки автор тарихты халыҡ алып барыуын һәр ваҡыт иҫендә тота. Халыҡ һәр ваҡыт юлда, шуға ла сюжет хәрәкәте, конкрет тарихи яҡтан ҡарағанда, халыҡ үҫеше, халыҡ биографияһы рәүешендә ҡабул ителә. Әммә халыҡ – ҡатмарлы тарихи-социаль күренеш. Уның көнкүреше, тарихи хәрәкәте һәм уҙған юлы ла ҡатмарлы. Романда ана шул ҡатмарлы көнкүреш, дөйөм хәрәкәт һәм юл анализлана.

Быуат башындағы башҡорт ауылының үҙенсәлекле портреты ана шулай төрлө яҡлап асыҡлана. Автор үҙ романында драматик тәрәнлеккә һәм эпик киңлеккә бына ошо ауылды художник ҡарашы менән тотошлай иңләүе, унда барған социаль ҡаршылыҡтарҙы, ҙур фекер эйәһе булараҡ, анализлауы һәм һығымта сығара алыуы менән өлгәшә лә инде.

Әҫәрҙәге драматизм, әлбиттә, сюжет үҫешендәге айырым «шартлауҙар»ҙың, эффектлы ваҡиғаларҙың күплегенә генә бәйләнмәгән. Әгәр сюжет хәрәкәте киҫкен һәм көсөргәнешле конфликтҡа таянмаһа, былар дөйөм ауыл тормошоноң тәбиғи ағышын иллюстрациялаусы факттар ғына булыр ине. Автор әҫәрҙә ваҡиғалар үҫешен, персонаждар араһындағы мөнәсәбәтте килешмәүсән синфи көрәш билдәләүен нигеҙләй. Ҡан туғандар, ырыу һәм аймаҡтар араһында була торған яҡынлыҡтан көслөрәк булған был тойғо һиҙҙермәй генә хикәйәләүҙе алып барыусы төп көскә әйләнә. Бәлки, шуны һыҙып күрһәтер өсөн дә автор әҫәрҙең исемен «Туғандар һәм таныштар» тип ҡуйғандыр. Сөнки, сюжет хәрәкәте үҫә килә, ҡайһы бер таныштар үҙ-ара дуҫҡа, хатта синфи туғанға әйләнһә, элекке ҡан-ҡәрҙәш туғандар ят танышҡа, синфи дошманға әүерелә.

Романда Ташбатҡан ауылында хәлфәлек итеүсе Мөхәррәм образы айырым урын тота. Ауыл менән завод араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүсе был кеше үҙенә күрә халыҡты ағартыуҙа һәм айырым кешеләрҙең аңын сарлауҙа үҙенсә эш алып бара. Автор был кешенең социаль-синфи ҡараштарының формалашыу тарихын бирмәй. Әммә уның заманына күрә белемле булыуын, дингә ҡарағанда донъяуи фәндәрҙе уҡытырға тырышыуын художестволы йәһәттән ышандырырлыҡ итеп нигеҙләй.

Ташбатҡан ауылы Рәхмәт, Сөнәғәт, Мөхәррәм кеүек ана шундай кешеләр тырышлығы арҡаһында тышҡы донъя менән алыш-бирешкә инә, уяна бара, үҙ өлөшөн дауларға әҙерләнә. Автор быны ауыл кешеләренең синфи аңының асыҡлана барыуын һүрәтләү аша ла, уларҙың шәхси яҡтан бәхетле булыу өсөн, дөйөм халыҡ бәхете, ирке өсөн көрәшергә кәрәклегенә төшөнә барыуҙарын күрһәтеү аша ла сағылдыра. Ауылдан ситтә, завод тирәһендә, эшләп йөрөп бер аҙ күҙе асылған Рәхмәт ҡайтҡанда был турала тәүге һүҙ була. «Башҡорт байы ла, рус байы ла бер. Береһен дә маҡтап булмай», – ти Рәхмәт.

– Улар икеһе лә ҡоно, икеһе лә ҡарға. Ә ҡарға ҡарға күҙен соҡомай. Икеһе лә ярлы халыҡ өлөшөн соҡой улар.

Ләкин әлеге ауыл Рәхмәт тиклем киҫкен һәм аныҡ фекер йөрөтә алмай. Автор быны һигеҙенсе бүлектә губернаторҙы ҡаршы алыу мажараларын хикәйәләү аша бик асыҡ һүрәтләй. Сарказм менән тулы был ваҡиға «ауылды тотоп тороусы» байҙарҙың күсәк образын береүе менән әһәмиәтле. Гоголсә тиерлек эшләнгән был эпизодта ауыл старостаһы Ғарифтан алып умарта байы Баһау, Шаһиәхмәт, бүҙрәтчик Әхмәди, Әхмәтша, Усман һ.б. образдарҙы ғәжәп бер колорит менән һүрәтләй.

Губернаторҙы ҡаршы алырға әҙерлекте сходта тикшереү авторға ауыл байҙарына тулайым һәм айырым-айырым социаль-психологик, әхлаҡ-этик характеристика биреү өсөн бик отошло. Бер яҡтан, яҙыусы ауыл һынлы ауылды тотоп тороусы аҡыл эйәһе булып ҡыланған был бәндәләрҙең ни тиклем буш булыуҙарын, икенсе яҡтан, уларҙың, төрлө эштәрҙе уртаға һалып кәңәшләшеп хәл итһәләр ҙә, бер-береһенә ни тиклем көнләшеү, шикләнеү менән ҡарауҙарын асып һала. Был «кәңәшмә» Кинйәғолдоң ҡарабойҙайын «потрава»ға эләгеүе арҡаһында күргән зыянды түләтеү өсөн йыйылған сходтан бик ныҡ айырыла. Әгәр тәүге сход ауылдың социаль-синфи бүленешен күрһәтеү йәһәтенән ҙур мәғәнәле булһа, икенсеһе – комик характерҙа бирелгән.

Шунһы характерлы: автор был һөйкәлмә эпизодҡа бик ныҡ иғтибар итә. Уны үҙ аллы әҫәр, дөрөҫөрәге, шул осор сәйәси, административ-чиновниклыҡ ҡоролошон әсе көлкө планында тасуирлаусы повесть-памфлет дәрәжәһенә күтәрә. Быға тиклем һәүетемсә, тыныс ҡына «йөҙ илле мөрйәнән төтөн сығарып бер общество» булып йәшәүсе Ташбатҡан ауылына Ғариф староста ғәҙәттән тыш хәбәр алып ҡайта: губернатор киләсәк! Бөтә ауыл ҡуҙа. Ярлыларға «общество өсөн» тип бушлай күперҙәр һалырға, юлдар төҙәтергә ҡушыла, ә байҙар, губернатор һынлы губернаторҙы нисек ҡаршы алырға, уны кемгә фатирға төшөрөргә, нисек ҡунаҡ итергә, тип баш ваталар, ығы-зығы киләләр. Гөлсәскәләрҙе ҡайҙан алырға, губернатор киләсәк юлға түшәр өсөн кейеҙ, балаҫ, келәмдәрҙе ҡайҙан йыйып еткерергә, Сафа мулла әйтмешләй, «бөтә гөбөрнаға хужа – батша илсеһен» ҡаршы алырға халыҡты нисек өйрәтергә, тип баш ваталар.

Ошондай факт-эпизодтар нигеҙендә автор һәлмәк йөкмәткеле ситуация төҙөй. Ситуация үҫә бара. Ситуацияның ҡатмарланыуында әлеге сход-кәңәшмә мөһим роль уйнай. Губернаторҙы ҡаршы алырға һәр кем үҙенсә әҙерләнә, сөнки һәр бай эстән генә уйлап, хыялланып йөрөгән иҫәбен тормошҡа атҡарыу өсөн юл асылғандай тоя, губернаторҙы ҡайһыһы сәйгә алып, ҡайһыһы эсереп, ҡайһыһы биренеп ошо хыялын хәл иттерергә йыйына. Хатта бер туған Шаһиәхмәт менән Әхмәди ҙә был осраҡта бер-береһенә ҡапма-ҡаршы позицияла торалар: улар икеһе лә, губернатор ярҙамына таянып, табын йортона старшина булырға ниәтләнәләр. Ғариф старостаның – үҙ иҫәбе, Усман бай менән Баһау байҙың үҙ уйҙары бар. Әхмәтша бай ҙа «үҙ өлөшөн» йолҡорға әҙерләнә. Бындай ниәттәрен ауыл байҙары, әлбиттә, бер-береһенән ныҡ йәшерәләр. Губернаторҙы ҡаршы алғанда өҫтөн сығыу өсөн мөмкин булған бөтә нәмәне эшләйҙәр. Губернаторҙы ҡаршы алырға әҙерлектең байҙар өсөн үҙенә күрә бер сиргә әйләнеүен яҙыусы Ғариф старостаның төшөн мәрәкәләп һүрәтләү аша бирә.

Шулай ҙа һөйкәлмә повесть-памфлеттың үҙәген губернаторҙы ҡаршы алабыҙ тип халыҡты оло юлға сығарып, кейеҙ-келәм түшәп, «үрә!» ҡысҡыртыу тәшкил итә. Автор бында сарказм ғына түгел, гротеск алымы ҡуллана. Повесть-памфлет

көтөлмәгәнсә тамамлана: көтөлгән губернатор урынына сиғандар төркөмө килеп сыға. Новелла алымы бында повесть-памфлеттың художество асылы тап ситуацияның көтөлмәгәнсә хәл ителеүенә ҡоролған да инде. Автор ошо юл менән «йөҙ илле мөрйәнән төтөн сығарып» йәшәп ятҡан ауылдың юғары ҡатламына ғына түгел, шул осорҙоң социаль-сәйәси ҡоролошона ғәжәп тос һәм үткер характеристика бирә. Үҙенән саҡ ҡына юғары булған түрә алдында баш ороу, уға ярарға тырышыу һәм шул нигеҙҙә үҙе лә кескәй генә булһа ла түрәлек алыу өсөн хыялланған байҙарҙың бөтөн бер галереяһына автор ана шулай тәрән социаль-этик характеристика биреүгә өлгәшә. Романдың беренсе өлөшөнөң ошолай сатирик-комик характерҙағы һөйкәлмә повесть-памфлет менән тамамланыуы, ә икенсе өлөштөң көсөргәнешле трагик картина менән асылыуы ул осорҙағы ижтимағи тормоштоң тәрән сәйәси кризис кисереүенә ишара булып тора.

Роман өс өлөштән тора: «Беренсе өлөш»тә ана шулай ауыл байҙары, бигерәк тә бүҙрәтчик Әхмәди, менән ауыл ярлылары араһындағы ҡаршылыҡтың барған һайын киҫкенләшеүе тасуирлана. Етеҙлегенә ҡарап нәҫел-сығышы легендар Алмасыбарға алып барып терәлгән ҡола байталдың юғалыуы арҡаһында көсәйеп киткән килешмәүсән, аҫтыртын талаш «Беренсе өлөш»төң төп сюжет һәм конфликт схемаһын тәшкил итә. Әлбиттә, ҡола байтал был талашҡа материаль төҫ биргән бер эпизод ҡына. Ысынында иһә ҡаршы синфи тигеҙһеҙлеккә, ҡала байҙарына һалабаш һалдырыусы, төрлө кустарь әйберҙәрҙе эшләтеүсе Әхмәдиҙең ауыл халҡын талауына нигеҙләнгән. Автор быны менән Башҡортостандың иң төпкөл урындарында ла капиталистик мөнәсәбәттәрҙең ныҡлап инә барыуын күрһәтә.

«Беренсе өлөш»тә Әхмәди бүҙрәтчик мораль яҡтан һиҙелерлек еңелеүгә осрай. Ул, судья Антроповтың ғәҙел приговор сығарыуы арҡаһында, Ваһап ҡартҡа уның тәпеһенә эләккән айыу хаҡын түләргә мәжбүр була. Етмәһә, юғалған йүгерек ҡола байталдың, Сәмиғулла тарафынан урланмайынса, ағасҡа төшөп үлгәнлеге асыҡлана. Был мораль банкротлыҡты автор губернаторҙы ҡаршы алырға әҙерләнеп ығы-зығы килеп көлкөгә ҡалыу картинаһы менән тамамлап, ҙур дөйөмләштереүгә өлгәшә.

«Икенсе өлөш»тә яҙыусы ваҡиғаларҙы икенсе пландараҡ ҡуйыртып ебәрә. Йылдың ярлыға ауыр килеүен тасуирлай ҙа Әхмәдиҙең тағы бер улы тыуыуын хәбәр итә. Әгәр «Беренсе өлөш»тә Сөнәғәттең Фатимаға булған мөхәббәте һәм ауыр тормошта йәшәүе планында ғына булһа, «Икенсе өлөш»тә инде герой үҙе лә аңғармаҫтан актив хәрәкәт уртаһына килеп инә. Заводта властарға ҡаршы һүҙ әйтә һәм ҡулға алына. Ошо уҡ шарттарҙа автор Фатиманың да, үҙ бәхетен яҡларға тырышып, ҡыйыу ғына аҙым яһауын – ауылдан заводҡа Сөнәғәт янына ҡасырға тырышыуын күрһәтә. Аҙмыштары әҫәрҙең үҙәгенә һалынған ике персонаждың ошолай тәүге көрәш сирҡанысы алыуҙары – уларҙың актив характерлы кешеләр икәнлегенә ишара.

Ҡаршылыҡтарҙың киҫкенләшеүен күрһәтеү яғынан «Икенсе өлөш» «Беренсе өлөш»тән ныҡ ҡына айырыла. Әгәр тәүгеһендә персонаждарҙың аҙмышы уларҙың сығышына, средаға бәйле рәүештә бирелгәнлектән, ваҡиғалар көнкүрешкә баҫым яһап һүрәтләүҙе талап итһә, икенсеһендә инде пассив социаль ҡаршылыҡ актив көрәшкә әйләнә башлай. Шул арҡала был өлөштә көнкүреште һүрәтләү бермә-бер кәмей, булғанда ла уның социаль йөкмәткеһе тулыраҡ бирелә. Был өлөштә автор, Ташбатҡан ауылы менән рәттән, завод тормошон һүрәтләүгә лә ныҡ ҡына баҫым яһай.

Завод үҙе, революцион фекер, ҡуҙғалыш сығанағы булараҡ, ауылды ла уята. Бер яҡта – завод етәкселеге, икенсе яҡта тормошҡа ризаһыҙлыҡ белдереүсе, актив сығыш яһарға ынтылыусы эшселәр һәм уларҙы ойошторорға, бер епкә туплarға тырышыусы социаль-демократтар тора. Автор Сөнәғәттең, көрәшсегә әйләнә барған һайын, Фатима менән араһы «алыҫайыуы»на иғтибар итә.

«Өсөнсө өлөш»тә Беренсе империалистик һуғыш осоро тасуир ителә. Һуғыш персонаждар яҙмышына ныҡ ҡына тәьҫир итә. Әммә бының менән уларҙың холоҡ-характеры үҙгәрмәй. Тик ваҡиғаларҙың ҡырҡыулашыуы, мәлдең киҫкен төҫ алыуы был характерҙарҙың асылын төптәнерәк, тәрәнерәк күрһәтеүгә килтерә генә. Әхмәди, мәҫәлән, тағы ла ҡороraҡ холоҡло кешегә әйләнә. Ул үҙенә теләгәнсә йәшәргә ҡамасаулаған кешеләрҙән үс алыуға, хатта яллап үлтертеүгә тиклем барып етә. Уның ҡушыуы буйынса Ваһап ҡарт менән Хөсәйен үлтерелә. Элек ҡулға алыныуҙан ҡурҡып ауылдан ауылға, ҡаланан ҡалаға ҡасып йөрөгән Сөнәғәт ысын революцион һалдатҡа әүерелә. Дөрөҫлөктө юллау уның йәшәү маҡсатына әйләнә һ.б.

Яҙылмай, план хәлендә генә ҡалған икенсе китапта автор Сөнәғәтте күренекле революционер Шәһит Хоҙайбирҙин менән осраштырырға, уның йомоштарын үтәтергә һәм хатта денщигы итергә лә уйлай. Уның ярҙамында Сөнәғәт икенсе китапта ысын революция һалдаты рәүешендә хәрәкәт итергә тейеш була. Автор уйлауынса, икенсе китаптың йөкмәткеһе асыҡ тарихи-революцион характер алып, документаль дөрөҫлөккә нигеҙләнергә тейеш була. Шәһит Хоҙайбирҙин, Чапаев, Фрунзе кеүек билдәле шәхестәр генә түгел, Өфөнө азат итеү, Әүжән операцияһы һ.б. шундай ваҡиғалар ҙа тарихи-конкрет дөрөҫлөгө менән әҫәргә инергә тейеш була.

Әйтергә кәрәк, романдың тәүге китабы ла тормош факттарының документаль дөрөҫлөгөнә нигеҙләнгән. Авторҙың «Ҡаранйылға ауылының тарихы» тигән әҫәрендә хикәйәләнгән айырым ваҡиғалар ғына түгел, ә шәхестәрҙең дә роман битенә инеп китеүе ана шул хаҡта һөйләй. Әммә яҙыусы үҙ ауылында, уның тирә-яғында булған хәл-ваҡиғаларҙы, айырым кешеләрҙең яҙмышын романдың идея-художество концепцияһынан сығып тикшерә, уларҙы үҙенә кәрәкмәгән мотивтарҙан таҙарта, яңы һыҙаттар өҫтәй. Был процеста Ж. Кейекбаевтың художник булараҡ та ҡараштары сағылыуын күҙәтергә мөмкин.

Ике китап берҙәм итеп уйланғанға ла күрә, романдың беҙҙең ҡулдағы беренсе киҫәге бер ни тиклем тамамланмағанлыҡ тойғоһо ҡалдыра. Әммә беҙҙең алдағы ошо беренсе китап та авторҙың үҙенсәлекле таланты хаҡында һөйләй.

Ташбатҡан ауылында булып ятҡан оло һәм кескәй ваҡиғаларҙы автор бик үҙенсәлекле һәм нигеҙле рәүештә Дашковтың быяла заводы тормошо менән бәйләй. Әгәр ауылдағы хәл-ваҡиғалар талғын, әммә тәрән драматик йөкмәткеле булһалар, завод тормошо социаль бәрелештәрҙең үткерлеге менән айырылып тора. Ул ауыл тормошона ла тынғыһыҙлыҡ алып инә.

«Бүҙрәтчик» Әхмәди менән ауыл ярлылары араһында йә аҫтыртын, йә асыҡтан-асыҡ барған көрәштең көсәйеүен автор һәр эпизод, уңайы тура килгән һәр ваҡиға менән раҫлай бара. Ағасҡа төшөп үлгән ҡола байталы арҡаһында Сәмиғулла менән әрепләшеүҙән башланған талаш-тартышты автор Әхмәди менән бөтә ярлы-ябаға араһындағы килешмәүсән бәрелешкә әйләндерә бара. Сөнки Әхмәдиҙең холҡо, характер логикаһы шуны талап итә: ул ярлы хаҡын, ауылдаштары хаҡын ашамайынса, шулар иҫәбенә байыҡмайынса түҙә алмай. Сәмиғулла менән бәрелеш баҫылыр-баҫылмаҫтан, ул ҡарабойҙай «потрава»ны

өсөн ауыл сходында бөтә ауылдаштары менән һүҙгә килә, шунан Ваһап ҡарттың тәпеһенә төшкән айыуын урлап, тағы ҙурыраҡ бәрелешкә инә, судҡа ҡала.

Былар, әлбиттә, сюжет үҫешендәге тәү ҡарашта күренеп торған «отошло» эпизодтар ғына кеүек. Асылда улар – Ташбатҡан ауылындағы синфи-социаль ҡаршылыҡтарҙың киҫкенләшә барыуын күрһәтеүсе факттар. Был хәлде Ваһаптың Әхмәди өҫтөнән биргән шикәйәтен ҡараусы судья Антропов бик яҡшы аңлай. Асылда уның Әхмәдиҙе хөкөм итеүе ябай ғәҙеллек күрһәтеүе генә кеүек. Әммә автор, ошо ваҡиғанан һуң күп тә үтмәй, завод поселогында төндә социаль-демократтарҙың йәшерен йыйылышын тасуирлай. Был йыйылышта ҡатнашыусыларға В. И. Лениндың хеҙмәтен аңлатыусы итеп земский врач Орлов менән бергә тап судья Антроповты күрһәтеү әлеге Әхмәдиҙе хөкөм итеү эпизодын мәғәнә яғынан тағы ла ҙурайта.

Автор ана шулай тәү ҡарашта ябай күренгән бәләкәй генә эпизодтарға ла социаль йөкмәтке биреп, уларҙы «ҙурайтыу» алымын бик оҫта файҙалана. Ауылда барған синфи-социаль көрәшкә баһа биреүсе был хәл бөтә әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһендә лә әһәмиәтле роль уйнай. Автор төртөп күрһәтмәй, ябайлаштырып аңлатмай ғына уҡыусыға заман теленең – революцион фекерҙең төп эшселәр коллективынан, уның социаль-демократик етәкселегенән килеүенә баҫым яһауға өлгәшә. Был етәкселектең башҡорт ауылдарына ла барып етә башлауын автор социаль-демократик ойошма ҡушыуы буйынса Илья Пахомычтың Сөнәғәт менән эшсе Хәбибулла аша ауылдағы синфи көрәшкә сәйәси төҫ бирергә тырышыуын күрһәтеп нигеҙләй.

Романдан күренеүенсә, заводта һәм поселокта социаль-демократик ойошма системалы эш алып бара. Автор врач Орлов менән судья Антроповтың был йүнәлештә эшләү өсөн һәр мөмкинлекте файҙаланыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Улар хатта завод управляющийы Вилис йортонда ла «ниндәйҙер политик мәсьәлә буйынса кәңәшеп» алырға тырышалар. Автор уларҙың оҫта конспиратор булыуҙарын, һәр ваҡыт һаҡлыҡ менән эш итеүҙәрен күрһәтә.

Шуның менән бергә, яҙыусы завод тормошонда булып ятҡан хәл-ваҡиғаларҙың синфи-социаль асылына баҫым яһарға тырыша. Романовтар династияһының өс йөҙ йыллығын байрам итер алдынан ғына завод управляющийы һигеҙ кешене ҡулға алдыра. Ошо һигеҙ кешенең береһе – эшселәр араһында революцион эш алып барыуы менән күптән үк билдәле Илья Пахомычтың булыуы Вилисты бигерәк тә ҡыуандыра. Сөнки уға, Романовтар пайтәхетенең өс йөҙ йыллыҡ юбилейына ҡарағанда, заводтағы тыныслыҡ һәм унда үҙ власының ныҡлығы ҡәҙерлерәк. Ул хатта юбилей уңайы менән биргән банкетты ла Илья Пахомыч кеүектәрҙе төрмәгә ултыртып, заводта тыныслыҡ урынлаштырыуҙы байрам итеү өсөн үткәрә.

Банкетта ҡатнашыусыларға характеристика биргәндә лә автор социаль-психологик анализды ҡуллана. Завод, поселок түрәләре батшалар һаулығына эскәндә, врач Орлов, судья Антроповтар халыҡ хөрмәтенә тост күтәрәләр.

Романда бөтә эпизодтар, диалогтар, персонаждарҙың уй-хистәре, хатта пейзаж картиналары ла әҫәрҙә һүрәтләнгән осорҙоң ижтимағи-сәйәси йөҙөн, синфи-социаль йөкмәткеһен асыуға буйһондоролған.

Әҫәрҙә Богоявлен заводы эшселәренең берҙәмлеге бик ныҡ һыҙыҡ өҫтөнә алына. Мәҫәлән, юҡ ҡына сәбәп арҡаһында ҡулға алынған һигеҙ кешене ҡотҡарыу өсөн уларҙың актив көрәшеүе үҙе үк ҙур сәйәси төҫ ала. «Беҙҙең егеттәр бер төптән торалар, – тип ғорурланып уйлай Сөнәғәт был хаҡта. – Бер эште алға алһалар, алып барып сығармай ҡуймайҙар... Бер төптән торалар». Шуға ла

үҙҙәренең аҡланыуына ҡыуанған Сөнәғәт заводҡа ашҡынып ҡайта. Үҙ геройының эшселәр араһындағы берҙәмлектең идея-сәйәси, ижтимағи-тарихи әһәмиәтен аңлау дәрәжәһенә күтәрелә барыуын күрһәтеүсе нигеҙле социаль-психологик анализы авторҙың Сөнәғәт хаҡындағы һығымтаһы ла, уның эшмәкәрлегенә биргән баһаһы ла булып яңғырай. «Завод мине кеше итте» тигән һүҙендә Сөнәғәттең ауыл менән завод араһындағы айырманы асыҡлауы ғына түгел (ауылды ул етемлектә үткән бала сағы нигеҙендә хәтерләй), ә кеше һәм шәхес, хатта революцион һалдат булып өлгөрөүендәге әһәмиәтен билдәләүе лә һиҙелә.

Яҙыусы үҙ геройының осор менән бергә үҫеүенә ныҡ иғтибар итә. Бының менән ул, бер яҡтан, шул осорҙағы хәл-әхүәлдәрҙе, өлгөрөп барған революцион ситуацияны асыҡлай, икенсе яҡтан, был процестың бөтә ил буйынса барыуына ла баҫым яһай. Сөнәғәт менән Хәбибулланың Ырымбурҙағы забастовкала активлыҡ күрһәтеүҙәре, һуғышҡа китер алдынан өйәҙ ҡалаһындағы бунт ана шундай ситуацияны тасуирлау өсөн индерелгән.

Автор Сөнәғәттең һуғышта ла сәйәси аңының үҫә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уның яраланып госпиталдә ятыуын тасуирлау – прогрессив ҡарашлы офицер Кулагин, элек Богоявленда врачлыҡ иткән социаль-демократ Орлов менән осраштырыуҙы художестволы нигеҙләү өсөн индерелгән эпизод булып тора. Һуғышта Ырымбур большевигы Тихон Иванов менән осрашыуы ла авторҙың ошо маҡсатына хеҙмәт итә. Уның һуғыштан бөтөнләй ҡайтып, батша төшөрөлөү уңайы менән үткәрелгән митингта ла сығыш яһағаны өсөн ҡулға алынып, өйәҙ төрмәһенә этап менән оҙатылыуы, Фатиманың һөйгәнен алыҫтан ғына оҙатып ҡалыуы, бер яҡтан, романдың тамамланыуына ишара яһаһа, икенсе яҡтан, Сөнәғәт менән Фатима образдарының билдәле дәрәжәлә теүәлләнеүен күрһәтә: был эпизод Сөнәғәттең сәйәси яҡтан өлгөрөү дәрәжәһенә күтәрелеүен, ә Фатиманың үҙ тормошонда киҫкен бер боролош мәлен кисереүен билдәләй.

Шулай итеп, әҫәрҙә эшселәр араһында коммунистик идеалдарҙы таратыусы оҫта конспираторҙар, социаль-демократтар: врач Орлов, судья Антропов, Тихон Иванов образдары һыҙатлана, эшселәрҙән Илья Пахомыч һәм Тимошканың, тәүге башҡорт эшселәренән Рәхмәт, Сөнәғәт һәм Хәбибулланың, завод түрәләренән Вилис, Кацель, ауыл байҙарынан Әхмәди, Баһау, Шаһиәхмәт, Әхмәтша, Исмәғилдәрҙең, Сафа мулла менән Ғариф старостаның колоритлы характерҙары күҙ алдына баҫа. Сәмиғулла, Ваһап ҡарт, Фатима образдарының да үҙ йөҙө, үҙ холҡо асыҡ ҡына төҫмөрләнә. Тимәк, романда күп кенә персонаждар хәрәкәт итә, уларҙың һәр берeһенең үҙ позицияһы, үҙ һүҙе бар. Персонаждарҙың ана шулай тейешле позицияға дөрөҫ ҡуйылыуы сюжет хәрәкәтен, конфликт сығанағын барлыҡҡа килтерә.

Ошо йәһәттән авторҙың тағы бер уңышын билдәләргә кәрәк. Жәлил Кейекбаев әҫәрҙә тасуирланған осорҙағы ауылды ла, завод тормошон да яҡшы белә һәм шул белгәнен уҡыусы күҙе алдына баҫтырыу оҫталығына эйә. Әҫәрҙә Ташбатҡан ауылының тормошо айырым кешеләр биографияһына ҡағылышлы фон ғына түгел. Ул – романда тере организм һымаҡ: йәшәй, хәрәкәт итә, ниҙер көтә, алға бара. Ошо теремеклек уның үҙенсәлекле характерын тыуҙыра.

Ғәҙәттә, ниндәй ҙә булһа ҙур яҙыусы хаҡында һүҙ барғанда «ул халыҡ образын, ваҡыт образын тыуҙырҙы» тиҙәр. Ж. Кейекбаев һәм уның романы хаҡында һөйләгәндә лә, ул егерменсе быуат башындағы башҡорт ауылы портретын асыҡ ҡына тыуҙырҙы, тип әйтеп була. Быға өҫтәп, Ж. Кейекбаевтың башҡорт әҙәбиәтендә тәү башлап революцион көрәш ваҡиғалары менән завод тормошон,

унда төҙөлгән социаль-демократик ойошманы һәм, рус кешеләре менән бер рәттән, тәүге башҡорт пролетарҙары образын тыуҙырыуын да билдәләргә кәрәк.

Таш кеүек ҡуҙғалмай бысрап ятҡан ауыл завод йоғонтоһонда хәрәкәткә килә. Автор был хәрәкәттең мотлаҡ ҡырҡыулашасағын, шуның нигеҙендә тормоштоң үҙгәрәсәген рельефлы картиналар аша раҫлай. Тормош ағышын, халыҡ хәрәкәтен ошолай киң эпик планда драматик йөкмәткеле итеп һүрәтләү, йәғни романда эпиклыҡ менән драматизмды органик ҡуша алыу йәһәтенән «Туғандар һәм таныштар», моғайын, тәүге әҫәрҙәрҙең береһе булғандыр.

Урал төпкөлөндә ятһа ла, Дашков заводы быяласылары илдә барған революцион хәрәкәтте белеп, бөтә Рәсәй эшселәре менән теләктәшлектәрен аңлатып торалар. Мәҫәлән, алыҫ Себерҙәге Лена ваҡиғалары ишетелгәс, быяласылар араһында ниндәйҙер үҙгәреш барлыҡҡа килә. Быны завод түрәләре лә һиҙә. Заводты ремонтҡа ҡуша ла иртәрәк туҡтаталар. «Завод идараһы эшселәр менән иҫәп-хисап эшен был юлы көтмәгәндә бик тиҙ эшләне. Завод туҡталған көндөң иртәгәһенә үк эшселәргә получка бирҙеләр. Был алдан белеп шулай эшләнде, сөнки апрель айында Себерҙә, Лена йылғаһы буйындағы алтын приискыһы эшселәрен йыртҡыстарса аттырыу Урал тауҙары араһында ултырған быяла заводы эшселәренә килеп еткәйне, һәм, был хәбәрҙе ишеткәс, ҡарт эшселәрҙең асыуы ҡайнаны, улар өндәшмәҫ булдылар, көндөҙгө тәнәфестә улар төркөм-төркөм булып түңәрәкләп ултырышып, шым ғына һөйләшеп алалар».

Быларҙың барыһы ла Сөнәғәттең күҙ алдында эшләнә. Ауылдан килеп, малай сағын батраклыҡта үткәргән, әле заводта яңы эшләй башлаған йәш эшсе Сөнәғәткә ҡарт эшселәрҙең тын алышының киҫкен үҙгәреше аңлашылмай. Шулай ҙа ул «ниндәйҙер бер ҙур эш булғанын» тоя. Ҡарт эшселәрҙең «эштәр былай барһа, беҙгә лә сирут килеп етер, ахырыһы» тип кинәйә менән һөйләшеүҙәренә иғтибар итә. Ә «туҡмалғыһы килгән бала атаһының мыйығы менән шаярыр», «үҙ башына ҡарыша батюшка» кеүек һүҙҙәрҙең батша хаҡында әйтелеүҙәрен ул дөрөҫ аңлай. Ғөмүмән, байҙан сығып, заводҡа эшкә инеү Сөнәғәт өсөн ҙур сәйәси мәктәп була. Аҙаҡҡа табан ул илдә барған дөйөм сәйәси ваҡиғаларға дөрөҫ баһа бирерлек революционер булып үҫеп етә. Яҙыусы үҙ геройының үҫешен халыҡ хәрәкәтенән айырмай, киреһенсә, уларҙың бер-береһенә ныҡлы бәйләнештә булыуҙарына баҫым яһай. Был, үҙ сиратында, авторға бер яҡтан шәхес яҙмышының драматизмын халыҡ тормошоноң эпик киң ағышы менән оҫта ҡушып һүрәтләүгә мөмкинлек биргән. Ғөмүмән, романда халыҡ тормошо бөтә яҡлап һүрәтләнгән кеүек, герой ҙа, ошо халыҡтың бер вәкиле булараҡ, төрлө яҡлап асыла. Сөнки автор халыҡтың дөйөм яҙмышы аша конкрет шәхестең тормоштағы урынын һәм конкрет шәхес характерын асыу аша халыҡтың дөйөм образының конкрет һыҙаттарын күрһәтеүгә өлгәшә.

«Туғандар һәм таныштар» романы башҡорт прозаһында, эпик киңлек һәм драматик тәрәнлектән тыш, хикәйәләү тығыҙлығына эйә булған тәүге ҙур күләмле әҫәрҙәрҙең береһе булды. Беҙ «Боролош» (Ғ. Хәйри), «Һалдаттар», «Ҡыҙылгвардеецтар», «Ҡыҙылармеецтар» (А. Таһиров) романдарында һүрәтләүҙең йыш ҡына ғәҙәти хәбәр һөйләү менән алмаштырылыуына осрайбыҙ. Ғәҙәти хәбәр итеү төрлө яҙыусыла төрлөсә күренде. Р. Хәйри романында, мәҫәлән, был күренеш йыш ҡына ваҡиғаларҙы натуралистик картиналарға әйләндерә. А. Таһиров ябай хроникаға төшөп китә. Ә ҡайһы бер яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә иһә публицистик тура һыҙыҡлылыҡ йәки детектив элементтар осрай.

Ул осорҙағы бөтә башҡорт прозаһына хас был күренештең төп сәбәбе

хикәйәләү бушаҡлығынан килә ине. Егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа ҙур башҡорт прозаһында хикәйәләү тығыҙлығы яғынан тәүге етди ҡаҙаныш итеп «Ҡара йөҙҙәр» (М. Ғафури) повесын, «Ҡан» (Д. Юлтый), «Ҡүҙәй» (И. Насыри), «Беҙ ҡайтырбыҙ» (А. Карнай) кеүек киң уйланған полотноларҙы күрһәтергә мөмкин. «Туғандар һәм таныштар» романы ошо йәһәттән был жанр өлкәһендә тағы бер уңышлы күренеш булды.

Жәлил Кейекбаевтың был романының художестволы структураһында халыҡтың көнкүреше социаль планда ғына түгел, этнографик ерлектә лә күрһәтелә. Автор әҫәрҙә һүрәтләнгән осорҙоң тарихи йөҙөн мөмкин тиклем асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн төрлө йөкмәткеле ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы индерә, фольклор әҫәрҙәрен файҙалана. Был йәһәттән яҙыусы этнографик күренештәрҙе, фольклор мотивтарын, хатта халыҡ ижадының айырым әҫәрҙәрен яңы күҙлектән ҡарап сығыу, эшкәртеү йә шул нигеҙҙә яңы йөкмәткеле сюжет төҙөү нигеҙендә яҙылған тәжрибәһен бик оҫта файҙалана.

Билдәле булыуынса, егерменсе-утыҙынсы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә был йүнәлештә байтаҡ тәжрибә тупланғайны. Революциянан һуң ижад ителгән әкиәт сюжетлы тәүге поэмалар, фольклор-этнографик материалдарға таянып яҙылған пьесалар, легендаға, сюжетлы йыр тарихына нигеҙләнгән повесть һәм романдар башҡорт әҙәбиәте үҫешендәге бөтөн бер этапты – әҙәбиәттең үҙ йөҙөн, үҙ формаһын һәм стилен, эпик хикәйәләү алымдарын эҙләү осорон билдәләне. Дөрөҫ, был эҙләнеүҙә айырым уңышлы моменттар һирәгерәк осрай, ә бына фольклор йә этнографик материалдың поэтик инерцияһынан ҡотола алмаған көйө яҙылған әҫәрҙәр күберәк. Һуңыраҡ яҙыусылар был юл менән оригиналь әҙәби-художестволы әҫәр тыуҙырып булмауын аңлап эш итә башланы. Ошо шарттарҙа Жәлил Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романы фольклор һәм этнографик материалды эстетик маҡсаттан, идея-художестволы концепция талап иткәнсә файҙаланыу мөмкинлеген күрһәткән тәүге уңышлы тәжрибәләрҙең береһе булды. Мираҫ бүлешеү, һабантуй һәм бәйгегә ат яратыу күренештәре, Алмасыбар хаҡындағы легенда, Фатиманың туйындағы хәл-ваҡиғаларҙың йөкмәткеһе, сеңләүҙәр, бәйеттәр, йырҙар – былар ғөрөф-ғәҙәт, йола һәм фольклорҙың күренеп торған фактик яғы. Әммә улар әҫәрҙең художестволы структураһынан сурайып сығып тормай, киреһенсә, уның органик һыҙаты рәүешендә ҡабул ителә. Сөнки автор был фактик материалдарҙы әҫәрҙә һүрәтләнгән осорҙо төрлө яҡлап һәм тәбиғи итеп күҙ алдына баҫтырыу өсөн файҙалана.

Яҙыусы ана шулай был романында башҡорт прозаһы алдында торған күп кенә идея-эстетик принциптарҙы хәл итеүгә лә һәйбәт өлөш индерҙе. «Туғандар һәм таныштар» романы шул йәһәттән дә юғары баһаланырға хаҡлы. Быға өҫтәп әҫәр теленең лексик-фразеологик яҡтан ғына түгел, ғөмүмән, стилистик йәһәттән дә бай һәм һығылмалы булыуын әйтергә кәрәк.

Шулай ҙа романға сюжет йыйнаҡлығы, композиция теүәллеге етеңкерәмәй. Шул сәбәпле әҫәрҙә персонаждар күплеге күҙгә ташлана. Уларҙың байтағының характер һыҙаттары асыҡланмай ҡала. Әммә ошо килеш тә Жәлил Кейекбаевтың был романының башҡорт прозаһының уға тиклемге ҡаҙаныштарын үҙенә йыйған тос идея-йөкмәткеле әҫәр булыуы шикһеҙ.

**Әнүр ВАХИТОВ.**

## ЕҢЕЛ БУЛМАҒАН ЯҘМЫШ

***Р. И. Бикәнәсованың мәҡәләһен баҫырҙан алда „Ағиҙел“ редакцияһы Зөһрә Жәлил ҡыҙы Кейекбаеванан ҡайһы бер факттарға өҫтәлмә аңлатма биреүен үтенде. Ул түбәндәге иҫтәлектәре менән уртаҡлашты:***

*– Рәмзиә менән ул әнемдең – РФ Дәүләт Думаһы депутаты Морат Жәлил улы Кейекбаевтың ярҙамсыһы булып эшләй башлағанда таныштым. Бикәнәсова ханым Мораттың атаҡлы ғалим улы икәнлеген белһә лә, БДУ-ның филология факультетын тамамлаһа ла, Жәлил Кейекбаевтың шәхсиәте тәңгәлендә әллә ни хәбәрҙар түгел ине. Һигеҙ генә йәшендә атайҙан ҡалған Морат та мәшһүр лингвист хаҡында күп нәмә һөйләй алмаҫ ине, әлбиттә.*

*Осрашҡан мәлдәрҙә атайыбыҙ биографияһына ҡағылышлы ҡыҙыҡлы факттарҙы телгә алдыниһәм, Рәмзиә шундуҡ ишеткәндәрен ҡағыҙға теркәй торғайны. Ханымды иҫкәрттем: бөтәһен дә яҙып алыуҙың кәрәге юҡ, сөнки һөйләгәндәремде БР Үҙәк дәүләт тарих архивында һаҡланған документтар дәлилләй.*

*Атайымдың архив документтары – беҙҙең өсөн ҡәҙимге ҡағыҙҙар түгел, ә атайыбыҙҙың ғүмере, ғаиләбеҙҙең тормошо ул. Унда һаҡланған документтарҙың асылын, ниндәй хәл-ваҡиғаға бәйле икәнлектәрен атайымдың һөйләүе буйынса ла, үҙем күп ваҡиғаларҙың шаһиты булғанлыҡтан да беләм. Ҡайһы бер документтарҙың копиялары миндә һаҡлана, заманында уларҙы Жәлил Кейекбаев хаҡында очерк яҙған Ғ. Шафиҡовҡа биреп тә торғоланым.*

*Жәлил Кейекбаевтың шәхеснамәһе менән ныҡлап танышырға теләгәс, мин Р. И. Бикәнәсоваға Кейекбаев телгә алынған бөтә сығанаҡтар, Кейекбаев хаҡында яҙған барса авторҙар хаҡында мәғлүмәтте ҡайҙан табырға икәнлеген төшөндөрҙөм. Йәнә уға профессор М. В. Зәйнуллин төҙөгән библиографик күрһәткесте тотторҙом, унда атайымдың баҫылып сыҡҡан һәммә хеҙмәттәре хаҡында информация тупланған.*

*Морат Жәлил улы Рәмзиәгә атайыбыҙҙың архивы менән танышырға рөхсәт итте, мин иһә архивтағы ҡайһы документтарға ныҡыраҡ иғтибар бирергә кәрәклеген өйрәттем. Документтарҙа телгә алынған кешеләр хаҡында һөйләнем, атайымдың Ҡазан профессоры М. З. Зәкиевҡа яҙған хаттары хаҡында ла әйттем. Эйе, етмешенсе йылдарҙа, Ҡазан аспирантураһында уҡыған осорҙа профессор Зәкиевтың атайыбыҙҙың хаттарын тәфсирләп һаҡлауын, ә аҙаҡ уларҙы Татарстан Дәүләт архивына тапшырыуын белгәйнем инде. Атайымдың хәҙер ҙур ғалим булып киткән аспиранттарын элек нисек ҡайғыртыуы, диссертацияларын яҡларға ярҙамлашыуы ла миңә мәғлүм. Мин Н. А. Баскаков, А. Н. Кононов, Б. А. Серебренников, В. Г. Решетов һәм башҡа профессорҙарҙы ла хәтерләйем – бәғзеләрен атайыма эйәреп барғанымда Мәскәүҙә күрҙем, бәғзеләре Өфөгә үҙҙәре килгеләне. Йәшем бәләкәй булыуға ҡарамаҫтан, академик*

*Дмитриевтың бик игелекле һәм итәғәтле икәнлеген онотмайым, ул беҙҙең өйҙә илленсе йылдар башында ҡунаҡта булғайны.*

*Әсәйебеҙҙең Фәндәр академияһына атайҙың китапханаһын тапшырыуына шаһит булыуым хаҡында ла һөйләнем Рәмзиәгә. Беҙҙең өйҙә китаптар ифрат күп ине. Бихисап китаптарҙы күреп, китапхана директоры Белобородованың күҙҙәре ялтырап китеүен дә иҫләйем. Фәндәр академияһы китапханаһына беҙ өйҙәге бөтә китаптарҙы ла бирәбеҙ икән, тип уйлағандырмы, директор ханым кәштәләрҙән тотош китаптарҙы йыйырға кереште, бигерәк тә атайым студент сағында Мәскәүҙең букинистик магазиндарында һатып алған боронғо немец – XVIII-XIX быуатта нәшер ителгән китаптарға ымһынды. Ләкин беҙ атайыбыҙҙың фәнни китаптарын ғына бирҙек, уларҙың исемлеге – берәйһенең «заказы» булғандырмы – алдан уҡ төҙөлөп, Белобородованың ҡулында ине. Үкенескә, китапханала атайыбыҙҙың күп китаптары юҡ хәҙер. Ә бит директор беҙгә Жәлил Кейекбаев китаптарының айырым фондын булдырырға һәм уларҙы тәфсирләп һаҡларға вәғәҙәләгәйне.*

*Атайымдың архивында – уҙған быуаттың утыҙынсы йылдарындағы Башҡортостандың топографик (хәрби) картаһы һаҡлана. Унда ҡәҙимге саф башҡорт атамалары менән утыҙынсы йылдарға тиклем булған һәммә йылғалар, күлдәр, шишмәләр, тауҙар, артылыштар, халыҡ йәшәгән бөтә пункттар – эреһе лә, ваҡы ла күрһәтелгән. Ул атамаларҙың күбеһе инде хәҙер ҡулланышта юҡ. Хәҙер бик тә олпат башҡорт ғалимы егерме биш йыл самаһы элек диалектология һәм топонимика буйынса хеҙмәттәрен яҙыу өсөн ошо юҫыҡтағы картаны эҙләп тә таба алмағас, беҙҙең ғаиләгә мөрәжәғәт итте: Жәлил ағай Кейекбаевтың архивында шундайыраҡ карта юҡмы? Әсәйебеҙ Нәфисә Хәлил ҡыҙы иһә атайҙың картаһын ғалимға, расписка яҙҙыртып, биреп ебәрә. Әммә был ғалим архивтан Кейекбаевтың картаһы менән файҙаланыуын һис тә телгә алмай һәм рәхмәт әйтмәй.*

*Ҡыҫҡаһы, Рәмзиә Бикәнәсованың документтарға нигеҙләнгән мәҡәләһе профессор Ж. Ғ. Кейекбаевтың еңел булмаған яҙмышына һәм уның оло шәхесенә үҙе бер раҫлама булып тора.*

# ҒАЛИМДЫҢ ШӘХСИ ФОНДЫ ХАҠЫНДА

Төркиәтсе ғалим, профессор, яҙыусы Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми мираҫын Башҡортостан Республикаһының Үҙәк дәүләт тарих архивына кесе улы, социология фәндәре докторы М. Ж. Кейекбаев 2002 йылдың ноябрендә тапшыра. 1899 – 1985 йылдар арауығына ҡараған 244 дело (1286 документ) өс йылдан артыҡ фәнни-техник яҡтан эшкәртелеп, ғалимдың шәхси фонды барлыҡҡа килтерелә. Был бай фондтың описе ике бүлектән тора. Беренсеһендә – фәнни һәм ижади эшмәкәрлегенә ҡараған, икенсеһендә тәржемәүи хәле тураһындағы документтар тупланған.

Бар ғүмерен фәнгә, башҡорт мәҙәниәтенә, мәғарифына бағышлаған һәм уларҙы үҫтереүгә ҙур өлөш индергән ғалимдың әҙәби һәм ғилми мираҫы буйынса комиссия ғалимдың вафатынан һуң – 1968 йылда төҙөлә. Ғаиләһенән байтаҡ материалдарҙы шул комиссия ағзалары алып китә (ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул материалдар кире ғаиләһенә ҡайтарылмай), ләкин уның хеҙмәттәрен баҫып сығарыу һәм архивта шәхси фондын булдырыу бик һуңлап тормошҡа ашырыла.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың “Башҡорт телендәге ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында” тигән беренсе фәнни мәҡәләһе 1940 йылда “Ҡыҙыл Башҡортостан” гәзитендә баҫылып сыға. Уның ижади эшмәкәрлеге утыҙынсы йылдарҙың тәүге яртыһында башлана. Студент йылдарында тәржемәләр менән шөғөлләнә, күренекле немец яҙыусыларының әҫәрҙәрен башҡорт теленә тәржемә итә, шиғырҙар, ҡобайырҙар яҙа. 1941 йылда Башҡорт академия драма театрында немец яҙыусыһы Ф. Вольфтың “Профессор Мамлок” пьесаһы Ж.Ғ. Кейекбаев тәржемәһендә сәхнәгә ҡуйыла.

Ж.Ғ. Кейекбаев 1948 йылдың 21 сентябрендә Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетында “Башҡорт әҙәби теленең орфоэпияһы” тигән темаға филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡлай. (*Был турала “Вечерняя Москва” газетаһының 217-се һанында 1948 йылдың 13 сентябрендә иълан баҫылып сыға: ”Филологический факультет Московского ордена Ленина государственного университета им. М.В. Ломоносова (Моховая, 9, ауд. 58), 21/IX – 48 г., в 7 часов вечера, состоится защита диссертации на соискание ученой степени кандидата филологических наук Д.Г. Киекбаевым на тему: “Орфоэпия башкирского литературного языка.”)* Уның был эшенә баһа биреп, профессор Н.К. Дмитриев былай тип яҙған: “Работа, представленная в качестве диссертации старшим преподавателем Уфимского Авиационного Института Д.Г. Киекбаевым, заслуживает самой положительной оценки. До сих пор никто еще не приступал к изучению башкирской орфоэпии, которая имеет такое большое значение для башкирского театра, радио и школы. Актуальнейшая тема, избранная Д.Г. Киекбаевым, разработана им необычайно широко: здесь мы находим и общее определение орфоэпии, и классификацию башкирских звуков в связи с их подробной фонетической характеристикой, и очерк башкирского ударения и интонации. Большинство этих вопросах поставлены автором диссертации впервые и, в общем, разрешены правильно. Такие детали, как редукция, интонация, мелодия и такты башкирской речи, членение ее на группы, представляют собой настоящее научное открытие даровитого и наблюдательного автора. Среди башкирских языковедов у него никаких предшественников не было, и в данной области его надо считать настоящим новатором. Хорошее теоретическое знание русских и некоторых западных языков и общей фонетики помогло Д.Г. Киекбаеву найти правильную методику для разрешения своей проблемы и приложить эту методику к своему башкирскому материалу. Оперируя, в основном, данными башкирского языка, Д.Г. Киекбаев проводит частые сопоставления их с русским, татарским и другими языками. Этот сравнительный материал повышает филологическую ценность работы, углубляет ее, а, с другой стороны, позволяет использовать ее и в методических целях, как пособие для преподавателя. К работе приложена орфоэпическая хрестоматия, библиография и две диалектологические карты Башкирии. Поскольку молодой еще башкирский литературный язык вырос и развился на базе живых башкирских диалектов, – корни башкирской орфоэпии, естественно, ведут к ним. Отсюда понятно, что исследователь башкирской орфоэпии должен в какой-то мере коснуться вопроса об исторической связи диалектов и литературного языка.

Отдельные недостатки, которые, конечно, имеются в работе Д.Г. Киекбаева, не могут поколебать ее общей ценности. Необходимо отметить, что работы аналогичного типа появляются только в Азербайджане; их еще нет в Узбекистане, Казахстане, Туркмении, Киргизии и Татарии.

Диссертация Д.Г. Киекбаева вполне заслуживает того, чтобы быть поставленной на защиту, а диссертант, по нашему мнению, вполне достоин ученой степени кандидата филологических наук.

Действительный член Академии педагогических наук, Член-корреспондент АН СССР, заслуженный деятель науки БАССР, профессор Н.К. Дмитриев. 8.02.1948 г., Москва”[1]. Был рецензияның күсермәһе архивта бар.

Жәлил Ғиниәт улы өс йыллыҡ аспирантураны бер йылда тамамлап, фән кандидаты дәрәжәһенә эйә була.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың фәнни ҡараштарының формалашыуында исеме бөтә донъяға билдәле төркиәтсе, башҡорт лингвистикаһына нигеҙ һалыусы, профессор Н.К. Дмитриевтың (1898–1954) роле баһалап бөткөһөҙ ҙур була.

1951 йылдың 13 сентябрендә яҙған хатында Николай Константинович Дмитриев Жәлил Ғиниәт улының докторлыҡ диссертацияһына тема һайлауына ҡарата фекере тураһында былай тигән: “Тему по исторической грамматике, в качестве докторской работы, очень одобряю. Ее можно было бы назвать примерно так: “Очерки по исторической грамматике башкирского языка”. Кроме Вас в Уфе ее никто разработать не может. Разумеется, тема необычайно трудна, но пора уже приступать к таким темам”[2]. Дмитриевтың был хаты ла архивта һаҡлана.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың докторлыҡ диссертацияһы башҡорт теленең фонетик һәм фонологик системаһын тикшереүгә арнала. Уны 1960 йылдың ғинуарында СССР Фәндәр академияһы Тел белеме институтында яҡлай. Шулай итеп, Ж.Ғ. Кейекбаев башҡорттарҙан беренсе булып филология фәндәре докторы дәрәжәһенә эйә була. 1961 йылда уға профессорлыҡ дәрәжәһе бирелә. Диссертацияһында бай лингвистик материал нигеҙендә башҡорт теленең һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр системаһы бөтән төрки телдәре менән сағыштырылып аңлатыла, һуҙынҡылар һәм тартынҡыларҙың тарихи үҫеше һәм үҙгәреше күрһәтелә, сингармонизм законы тулы яҡтыртыла. Был хеҙмәткә филология фәндәре докторы, профессор Н.А. Баскаков, академик В.В. Решетов кеүек атаҡлы тюркологтар бик юғары ғилми баһа биргән. Артабан ул тел ғилеме өлкәһендә эшләүен юғары уҡыу йорттарында уҡытыу, аспирантураға етәкселек итеү, лекциялар уҡыу менән бергә алып бара. Ғилми эштәре менән республиканан ситтә лә киң билдәлелек яулай, башҡорт теленең тамырын нығытыуға, уны һаҡлауға, телдең интеллектуаль кеүәтен үҫтереүгә ғәйәт ҙур көс һалған ғалим-шәхес булып таныла.

Башҡорт дәүләт университетының тәүге йылдарында – педагогия институтын университетҡа әйләндереү осоронда – Ж.Ғ. Кейекбаев унның беренсе проректоры итеп тәғәйенләнә. Был осорҙа ғалим яңы ғына ойошҡан университеттың уҡыу-уҡытыу эштәрен үҙгәртеп ҡороуҙың тап уртаһында ҡайнап эшләй. Проректор вазифаһын башҡарыу менән бер рәттән, университеттың филология факультеты башҡорт-рус бүлеге өсөн уҡыу планын төҙөй, быға тиклем бер ҡайҙа ла уҡытылмаған өр-яңы фәндәр: төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһын, башҡорт теленең тарихи грамматикаһын, башҡорт әҙәби теленең тарихын, иҫке төрки телен индерә, уларҙың программаларын төҙөй; урал-алтай телдәре буйынса ғилми-тикшеренеү эштәре алып бара.

Архив документтары Башҡорт дәүләт университетында иҫке төрки телен уҡытыуҙы уҡыу планына индереү ҙә еңел генә бирелмәгәнлеген һөйләй. Был фәндең төрки телле студенттарға уҡытыуҙың зарурлығын дәлилләп Ж.Ғ. Кейекбаев Мәскәү тарафтарына тиҫтәләрсә хаттар яҙған. Университеттың рус теле бүлектәрендә уҡыусыларға иҫке славян теле уҡытыла, башҡорт, татар

бүлектәре студенттары ла иҫке төрки телен өйрәнергә тейешлеген иҫбатлай ул хаттарында: “Знание старотюркского языка, умение читать и анализировать в оригинале письменные памятники необходимы не только для студентов-филологов, но и историков, специализирующихся по истории Башкортостана или других тюркоязычных республик Средней Азии и Кавказа. Без знания литературных, исторических, юридических и прочих документов, написанных на старотюркском языке, невозможно представить себе молодого специалиста-филолога и историка с университетским образованием в тюркоязычных республиках. Этого настоятельно требует развитие гуманитарных наук на современном этапе”[3].

1964 йылдың 5 февралендә М.З. Зәкиевҡа яҙған хатында Жәлил Ғиниәт улы тарихи грамматика дәреслеген яҙырға кәрәклеген әйтә: “...ана, марийҙар “Тарихи грамматика”ларын сығарып өлгөргәндәр, Иван Галкин яҙған. Беҙ әле сығара алғаныбыҙ юҡ. Ояты ни тора! Башҡорт һәм татар телдәренең грамматикаһын яҙып ташларға инде әллә рус телендә (краткая историческая грамматика... тип). Уны 8–10 табаҡҡа һыйҙырып була, заочниктарға 16 сәғәттә (8 пар) һөйләп бөтәм мин аны. Унда күп һүҙ кәрәкмәй, сөнки логик-математик нигеҙгә ҡоролған. Һин нисек ҡарайһың? Уны 2-3 айҙа яҙып бөтөргә мөмкин булыр”[4].

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Жәлил Ғиниәт улына, сағыштырма тарихи грамматиканан лекциялар уҡыһа ла, китабын сығарыу насип булмай. Ғалимдың ҡайһы бер шәкерттәрендә ул һөйләгән лекцияларҙың конспекттары һаҡланыуы тураһындағы хәбәрҙе матбуғатта үҙҙәре үк яҙып сығарыуҙарына ҡарамаҫтан, Ж. Кейекбаевтың лекцияларын күрһәтеүҙән ҡәтғи баш тартты уның бер шәкерте, мин уны үҙем сығарам, үҙ исемем менән, сөнки уны мин яҙып алдым унан, тине был профессор.

Бөгөн иҫке төрки телен студенттар юғары уҡыу йорттарында өйрәнә, иҫке төрки телендә яҙылған әҙәбиәт, китаптар халҡыбыҙға ҡайтарыла икән, был, һис шикһеҙ, профессор Ж.Ғ. Кейекбаевтың фәнни һәм граждандыҡ ҡаһарманлығы арҡаһында икәнлеген раҫлай архив материалдары.

Башҡорт теленең һөйләштәрен һәм диалекттарын ентекләп өйрәнеү ҙә Ж.Ғ. Кейекбаевҡа башҡорт диалекттары тураһында төплө хеҙмәттәр тыуҙырырға мөмкинселек биргән, был фәндең шишмә башында ла уның ғилми хеҙмәттәре тороуы бәхәсһеҙ. Ғалимдың вафатынан һуң 43 йыл үткәс уның диалектология өлкәһендәге хеҙмәттәрен юҡҡа сығарып тәнҡитләү, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының кәмеүендә нәҡ Ж.Ғ. Кейекбаевтың ошо мәҡәләләре сәбәпсе тип күрһәтергә маташыуҙар, – йомшағыраҡ әйткәндә, көлкө, улар бер ниндәй тарихи фактарға ла тап килмәй. Ҡырҡ йыл буйы ниңә уның менән полемикаға инмәгәндәр? Вафатына 43 йыл үткәс кенә Кейекбаевҡа күҫәк күтәрергә йөрьәт иткәндәр – ул, әлбиттә, хәҙер был “тәнҡитселәр”гә яуап бирә алмай. Бөгөн уның хеҙмәттәренең ғилми абруйын кәметергә һәм уның шәхесе тураһында хөсөт таратырға тырышыусыларға ул замандарҙа Ж.Ғ. Кейекбаев кеүек шундай хеҙмәттәрҙе яҙып ҡарарға ине. Кейекбаевтың архивында хәҙер инде күбеһе юҡҡа сыҡҡан бөтә географик аңлатмалары менән Башҡортостандың һуғышҡа тиклем төҙөлгән топографик картаһы һаҡланған. Архивта ғалимдың үҙ ҡулдары менән төҙөлгән башҡорт теленең диалекттары карталары ла һаҡлана. Ғалим вафат булғандан һуң был карталарҙы ҡайһы бер башҡорт ғалимдары уның ғаиләһенән ҡулланырға ла алып торалар, ләкин ни өсөндөр үҙҙәренең башҡорт теленең диалекттары темаһына бағышланған мәҡәләләрендә Ж.Ғ. Кейекбаевҡа һылтаныуҙы кәрәкле тип тапмайҙар.

Совет осороноң 40-сы йылдарынан башлап башҡорт тел ғилеменең байтаҡ өлкәләрен Ж.Ғ. Кейекбаев беренселәрҙән башлап өйрәнеүсе. Ул – Башҡорт дәүләт университетының беренсе проректоры, тигәйнек. Был вазифала Жәлил Ғиниәт улы дүрт йылға яҡын эшләй. Ләкин уның тәбиғәте, асылы административ эште өнәп бөтмәгән. Ул үҙен башкөллө фәнгә, ғилми эшкә бағышларға хыялланған. Был вазифанан азат итеүҙәрен үтенеп ғаризалар менән ректорға һәм партияның Башҡортостан өлкә комитеты секретары З. Н. Нуриевҡа мөрәжәғәт иткән: "... прошу Вас освободить меня от занимаемой должности проректора университета... оставив меня только доцентом кафедры башкирского языка и литературы. (Берәү булһа, был абруйлы вазифаға йәбешеп ятыр ине. Ҡыуып сығарғансы, тиҫтәләрсә йылдар ултырыр ине был креслола, ләкин Жәлил Ғиниәт улы ундайҙарҙан булмаған, ул башҡорт теле фәне менән шөғөлләнеүҙе артығыраҡ күргән, сөнки был осорҙа башҡорт телен өйрәнеү, уны фән кимәленә күтәреү өсөн эшләргә лә эшләргә кәрәк була. – **Р.Б.**) Причины моей просьбы об освобождении от должности проректора следующие:

> *1. В настоящее время я разрабатываю два серьезных общетюркологических университетских курса: сравнительная грамматика тюркских языков и старотюркский язык и веду эти курсы на отделениях башкирской филологии, татарской филологии и истории, не считая чтения курсов исторической грамматики башкирского языка и башкирской диалектологии. Работая проректором университета, я не имею возможности даже готовиться к лекциям, т.к. работа проректора отнимает много времени и сил. Оставить педагогическую работу не могу, так как, во-первых, в настоящее время нет другого человека для чтения указанных курсов и, во-вторых, преподавательская работа является моей основной работой.*
>
> *2. Вследствие моей занятости на работе в должности проректора совершенно заброшена моя докторская диссертация, которая еще не завершена, в частности не написан мною автореферат. Кроме того, я должен свою докторскую работу подготовить для издания и представить в Башкнигоиздат, так как она включена в план издания 1958 года, а без ее опубликования докторская диссертация не может быть защищена. Для подготовки диссертации к изданию также потребуется много времени. 16.04.1958 г. Д.Киекбаев."* [5]

Ж.Ғ. Кейекбаев фондының шаҡтай ҙур өлөшөн ғилми эшмәкәрлегенә бәйле документтар тәшкил итә: ғилми хеҙмәттәренең ҡаралама варианттары ҡульяҙмалары, алдан әҙерләгән материалдар, баҫылып сыҡҡан хеҙмәттәре. Ғалимдың архивында телсе-тюркологтарҙың бихисап хаттары һаҡлана. Улар араһында Н.К. Дмитриев, А. Н. Кононов, Г. Азимов, Н.А. Баскаков, Б.А. Серебренников, П. Аристэ, П. Нурмекунд, А. Абдурахманов, М.Ш. Ширалиев, С.К. Кенесбаев, В.А. Исенғәлиева, А.А. Юлдашев, Э. Р. Тенишев, М.З. Зәкиев, Л. Йәләй, Г.Х. Әхәтов, М. Рясянен, Г.Д. Санжеев, Е.И. Убрятова, Й. Пальяк, О. Притцак һ.б. хаттары бар. Шәхси фондта венгр, немец, фин ғалимдарының хаттары, мәҡәләләре лә һаҡланған, ҡайһы бер ғалимдарҙың башҡорт теленә ҡарата иғтибары айырыуса ҡыҙыҡлы һәм өйрәнеүгә лайыҡ. Ғалим Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми ижадына булған оло хөрмәт нәтижәһендә Венгрия ғалимдары башҡорт халҡын һәм башҡорт телен үҙҙәре генә өйрәнеп ҡалмай, хатта улар башҡорт телен Америка университеттарында уҡыта башлағандар. Быға дәлил – шул ғалимдарҙың башҡорт телендә Жәлил Ғиниәт улына UNIVERSITY OF CALIFORNIA, LOS ANGELES- тан яҙылған хаттары.

“Урал-алтай телдәренең тарихи грамматикаһы нигеҙҙәре” тигән фундаменталь хеҙмәте 60-сы йылдарҙың башында, нигеҙҙә, яҙылып бөткән була. Ошо хеҙмәте өҫтөндә эшләгән осорҙағы ижади эшмәкәрлегенә бәйле элекке СССР-ҙың һәм донъяның төрлө илдәренән килгән хаттар ҙа тупланған шәхси фондында.

Монгол телдәре белгесе академик Гарма Данцаранович Санжеев[1] 1960 йылдың 22 мартында яҙған хатында Жәлил Ғиниәт улының урал-алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген тикшерә башлауын хуплай: “Ваши намерения заняться сравнительной алтаистикой весьма своевременно и интересны: давно пора заняться ею в наших вузах и институтах. Для этого у нас, в СССР, имеются все условия (это признают и западные ученые, например, в Западной Германии, и то, что делается вообще на Западе, пока не дает ощутимых результатов: дальше Рамстеда[2] дело совсем не продвигается вперед, и как-то пошло назад).

Сегодня же почтой отправил Вам небольшой очерк “Современный монгольский язык” из серии “Языки зарубежного Востока”. С большим удовольствием и глубокой благодарностью осмеливаюсь протянуть свою руку за любезно предлагаемую Вами книгу Попова “Грамматика калмыцкого языка”. Со своей стороны, если у Вас нет и покажется нужной, могу предложить Вам оригинал на немецком языке “Исторической фонетики тюркских языков” Рясянена М.[3], который я получил из Хельсинки. С искренним уважением и приветами Г.Санжеев”[6].

„Ошо хеҙмәтемде яҙғанда миңә Ленинград, Эстония, Венгрия ғалимдары ифрат ҙур ярҙам күрһәтте. Улар – мине махсус әҙәбиәт менән тәьмин итеүселәр. Ҡайһы бер китаптарҙы Германия ғалимдарынан да алдым, мари коллегаларыма ла бик ҙур рәхмәтлемен, венгр телендә, үҙем дә һиҙмәҫтән, һөйләшә лә башланым,“ – тип яҙып ҡалдырған ғалим.

Архивта һаҡланған ҡиммәтле документтарҙың береһе – Жәлил Ғиниәт улының Эстонияның Тарту университеты китапханаһына фәнни командировкаға ебәреүҙәрен һорап Башҡорт дәүләт университеты ректоры Ш.Х. Чанбарисовҡа яҙған ғаризаһы: “Прошу Вас разрешить мне оплачиваемую командировку в Тартуский государственный университет с 10-го по 22-е февраля 1964 для сбора материалов по моей научной работе, т.е. для написания второй части книги “Основы исторической грамматики тюркских и других угро-алтайских языков” (часть вторая – глагол). Дело в том, что в старейшем Тартуском университете концентрирована огромная научная литература по тюркским (в том числе башкирскому языку), угро-финским, монгольским и другим дальневосточным языкам. Как сообщили мне из Тартуского университета, эта уникальная литература не высылается по библиотечному обмену. К моему счастью, почти вся научная литература, изданная в течение двух веков, написана на немецком языке”[7].

Әлбиттә, тел ғилеме тураһында Ж.Ғ. Кейекбаевты ҡыҙыҡһындырған махсус әҙәбиәт ул заманда Өфө китапханаларында булмай. Немец телен яҡшы белгән ғалимға Тарту университетының фәнни китапханаһында эшләү бай мәғлүмәт тупларға ярҙам итә. Сит ил телселәре уға үҙҙәренең китаптарын почта аша ла ебәргәндәр. Шуға ла уның хеҙмәттәрендә тел ғилеме тураһында немец телендә нәшер ителгән фәнни әҙәбиәткә ғәйәт ҙур урын бирелгән. Ғалимдың шәкерттәренең фәнни хеҙмәттәре менән танышҡас, моғайын, улар ҙа Кейекбаевтың китапханаһындағы бындай әҙәбиәттән файҙаланғандарҙыр. Улар тарихи грамматика, башҡорт теленең морфологияһы тураһындағы хеҙмәттәрендә сит ил

*[1]Санжеев Г.Д. (1902—1982) — филолог-монголовед, филология фәндәре докторы, профессор.*
*[2] Рамстедт Г. (1873—1950) — фин лингвисы.*
*[3]Рясянен М. (1893—1976) — фин тел ғалимы.*

ғалимдарының немец, төрөк, латин һ.б. телдәрҙә яҙылған китаптарына йыш мөрәжәғәт иткән. Уларҙың да уҡытыусылары, Ж.Ғ. Кейекбаев кеүек, сит телдәрҙе яҡшы үҙләштереп, үҙҙәренең хеҙмәттәрендә сит телдә яҙылған махсус әҙәбиәт менән иркен мөғәмәлә итеүен күрәһең. (Ж.Ғ. Кейекбаев вафат булғас, 1972 йылда Фәндәр академияһының китапханаһы директоры О.Е. Белобородованың үтенесе буйынса, ғалимдың ҡатыны Нәфисә Хәлил ҡыҙы ғалимдың бай фәнни китапханаһын (1077 китап) уларға тапшырған. „Ольга Ефимовна шул китаптарҙы алмайынса беҙҙең өйҙән сыҡманы, китапханалары беҙ йәшәгән йортҡа урам аша ғына, әле Йәштәр театры урынлашҡан бинаның подвалында ине,“ – тип хәтерләй Ж.Ғ. Кейекбаевтың ҡыҙы Зөһрә ханым. „Кейекбаевтың китапханаһындағы китаптар айырым шкафтарҙа һаҡланасаҡ,“ – тип ышандырып алһалар ҙа, китапханаға эйә булғас, был талапты үтәмәйҙәр, китаптар төрлө фондтарға таратыла. Мәҫәлән, ошондай һирәк китаптар: W. Schott. Versuch uber die tatarischen Sprachen, Berlin, I, 1836; W. Kotwicz. Les pronoms dans les langues altaiques. Krakow. 1936; O. Bohtlingk. Uber die Sprache der Jakuten. Спб., 1851; М.А. Кастрен. Алтай телдәрендә зат аффикстары хаҡында. Гельсингфорс, 1850 (латин телендә); В.Шотт. Алтайские этюды. Берлин, 1860-72 (немец телендә); М.Б. Мункачи. «Bubenz-Album». Будапешт, 1884; Keleti szemle», XVIII т. Будапешт, 1918-19; В. Банг. Этюды по сравнительной грамматике тюркских языков. Берлин, 1916 (немец телендә); J. Deny. Grammaire de la langue torque (dialect Osmanle). Paris, 1920; «Keleti szemle» II т. Будапешт, 1901; W. Radloff. Die Altturkiischen Lnschriften der Mongolei. NF. St.-Peterbug, 1898; K. Gronbech. Der turkische Sprachbau I. Kopenhagen, 1936; J. Szinnyei. Finnisch-ugrisch Sprachwissenschaft. Leipzig, 1910; W. Schott. Das Zahlwort in der tsehudishen Sprachensklasse wie auch Tungusischen und Mongolischen. Berlin, 1853; A.C. Emre. Turkçede isim temelleri, Istambul, 1943; һ.б. һ.б. Жәлил Ғиниәт улының китапханаһында булған. Был ғилми китаптарҙың байтағы китапханаға тапшырылған әҫәрҙәр теҙмәһендә лә бар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғалимдың китапханаһындағы ҡайһы бер китаптар бөгөн Фәндәр академияһы китапханаһының каталогынан юҡҡа сыҡҡан. Фәндәр академияһы китапханаһында һаҡланған Ж.Ғ. Кейекбаевтың китапханаһындағы фәнни китаптарҙың байлығына бөгөн дә хайран ҡалырлыҡ. Күренекле ғалимдарҙың автографтары яҙылған китаптарҙы ҡулға алғас, бит быларҙың һәр береһе тураһында айырым мәҡәлә генә түгел, китап яҙырлыҡ, тип уйлайһың. Үҙем уҡып сыҡҡан Башҡорт дәүләт университеты Ж.Ғ.Кейекбаевтың китапханаһына эйә булһа ине, тип хыялланып та алам. Ләкин мин уҡыған осорҙа, уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында, Ж.Ғ. Кейекбаев тураһында студенттарға бик һөйләп барманылар. Беҙгә уның тураһында “Педагогия училищелары өсөн башҡорт теле дәреслеген яҙған авторҙарҙың береһе, бик һәйбәт кеше ине”, – тигән мәғлүмәт биреү менән генә сикләнделәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның китапханаһына эйә булып, БДУ китапханаһын байытыу тураһында хәстәрләүсе табылмаған ғалимдың шәкерттәре араһында...

Тарту университетында Жәлил Ғиниәт улын филология факультеты телселәре бик һәйбәт ҡаршылай, университет менән, уғры-фин телдәре буйынса алып барылған фәнни эштәр менән таныштыралар: “...был эш менән уғыр-фин телдәре кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор Пауль Аристэ етәкселек итә. Ул ысын-ысындан Европалағы күп телдәрҙе белеүсе (полиглот) ғалим. Профессор Аристэ утыҙ ике тел белә, шуларҙан егерме телдә иркен һөйләшә һәм ун алты телдә фәнни эштәр яҙа ала. Фәнни маҡсат менән эстон теленең төҙөлөшөн теоретик яҡтан мин бынан бер-ике йыл элек өйрәнгәйнем, сөнки эстон теленең төҙөлөшө һәм ҡалыбы беҙҙең телдәр менән асылда бер

төрлө. Ул телде бер аҙ белеү арҡаһында мин университеттың студенттары һәм аспиранттары менән уларҙың үҙ телендә һөйләшә һәм яҡындан таныша алдым. Улар ҙа, – беҙҙең студенттар һымаҡ уҡ, дан совет йәштәре. Шулай ҙа миңә, ғөмүмән университетта өҫтөнлөк иткән фән атмосфераһы менән уларҙың нығыраҡ солғанған булыуы һәм фән орбитаһында күберәк әйләнеүе һиҙелде"[8]. Университеттың тарих-филология факультеты эргәһендә көнсығыш илдәрен өйрәнеү кабинеты барлығын да, унда Һиндостан, Ҡытай, Иран, Япония, Корея, Монголия, Афғанстан һәм башҡа көнсығыш илдәрҙең тарихы, теле, әҙәбиәте, сәнғәте һәм этнографияһы буйынса бик күп китаптар һәм ваҡытлы матбуғат тупланғанлығы һәм был кабинет Тарту университетында элек-электән булғанлығы менән һоҡланыуын да белдергән ғалим. Ул был кабинеттың мөдире ғалим П. Нурмекунд[4] менән дә немец һәм рус телдәрендә бик әүҙем хат алышҡан. Моғайын, ғалим ошондай кабинетты Башҡорт дәүләт университетында ойоштороу уйы менән дә йәшәгәндер. Немец телендәге хаттар әлегә тәржемә ителмәгән.

Ж.Ғ. Кейекбаев төрки телле республикаларҙағы институт, университеттар араһында студенттар, аспиранттар алмашыу тураһында, үҙебеҙҙең университетта айырым, махсус тюркология кафедраһы булдырыу хаҡында ла хыялланған.

Үҙе иҫән саҡта ошо изге хыялдарын ул тормошҡа ашыра ла башлаған. Был осорҙа Башҡорт дәүләт университетына ситтән Ж.Ғ. Кейекбаевтың аспиранты булып килергә теләүселәр ҙә аҙ булмаған.

Ж.Ғ. Кейекбаев "Урал-алтай телдәренең тарихи грамматикаһының нигеҙҙәре"н баҫтырып сығарыу өсөн ниндәй генә түрәләргә мөрәжәғәт итмәгән дә ниндәй генә хаттар яҙмаған. Был – үҙе бер мажаралы тарих. Уны ла архив материалдары һаҡлай.

Бына уның КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретары З.Н. Нуриев һәм Министрҙар Советы рәйесе З.Ш. Аҡназаров исеменә яҙылған мөрәжәғәте: "Обращаюсь к Вам по следующему вопросу и прошу Вашего содействия: за последние 5 лет я работал над исследованием исторической грамматики тюркских и других алтайских языков и написал книгу под названием "Основы исторической грамматики тюркских и других угро-алтайских языков". Книга написана на русском языке, объем 630 стр. машинописи или около 25 печатных листов. Это мое второе серьезное исследование после докторской диссертации.

Рукопись была сдана в Башкнигоиздат еще в мае этого года. При этом в своем заявлении я просил директора издательства тов. Куватова С.[5] включить книгу в план издания 1964 года. Издательство официальным письмом послало книгу на рецензию в Казань, доктору филологических наук, зав. кафедрой Казанского университета М.Закиеву, который написал положительную рецензию и рекомендовал книгу печатать.

По замечаниям рецензента я внес соответствующие изменения и добавления в книгу и своим заявлением от 25 июля 1963 года вторично просил директора издательства Куватова С. включить книгу в план издания 1964 года. В своем заявлении я рекомендовал также квалифицированного редактора, зав. кафедрой русского языкознания Башгосуниверситета Распопова И.П., который

---

*[4]Нурмекунд П. (1906 — 1996) — эстон ғалимы, көнсығыш телдәре белгесе, лингвист-полиглот (50 тел белгән, шул иҫәптән 20 көнсығыш телдәрен), филология фәндәре кандидаты.*

*[5]Ҡыуатов С.С. (1919 — 1991) — Башҡортостан китап нәшриәтенең баш мөхәррире (1956), директоры (1963).*

фрагментарно читал мою работу и отзывался положительно и который по той же системе написал докторскую диссертацию.

Однако директор издательства Куватов С. всячески препятствует и не включает книгу в план издания 1964 года. При беседе со мной т. Куватов внимательно не слушал и, перебивая меня, выставлял свои по-детски примитивные и лишенные элементарной логики аргументы, о которых я хочу говорить при личной беседе с Вами.

После беседы с Куватовым я заключил, что он питает ко мне явное недоверие. Однако напрасно он так думает. Я считаю, что моя книга написана на основе марксистского (материалистического) учения о языке, о чем говорил также и рецензент М. Закиев (кстати, тоже член КПСС). Я системно исследовал около 50 языков и наречий народов СССР и ко всем этим языкам отнесся с одинаковым уважением и любовью, как подобает языковеду-коммунисту.

Под конец, когда у Куватова ничего не осталось придумать, он предложил мне обратиться к Вам и сказал, что для включения моей книги в план издания 1964 года требуется специальное решение бюро Обкома и Совета Министров.

Я не знаю, действительно ли требуется такое решение, ибо то, что я написал книгу, не является чрезвычайным происшествием.

Дж. Киекбаев. 26 июля 1963 года"[9].

Дүрт ай үткәс, ғалим З.Н. Нуриевҡа яңынан биш битлек хат яҙа. Архивҡа һалынған был үҙенсәлекле хаттан да өҙөктәр килтереп үтәйек. Түрәгә, бәлки, тәьҫире көслөрәк булыр, тигән өмөттәнме, "...от члена КПСС Киекбаева Дж.Г. Заявление (вторично), – тип башлай ул был хатын, – ...несмотря на мои усилия, Башкнигоиздат не включил в корректированный окончательный издательский план 1964 года моей книги "Основы исторической грамматики тюркских и других угро-алтайских языков", хотя она была включена и значилась в напечатанном осенью этого года плане издательства после моего первого заяления на Ваше имя. Этим Башгосиздат, очевидно, хотел меня временно успокоить и доложить Вам, что книга Киекбаева включена в план. Таким образом, только для вида включив мою книгу в план, руководство издательства поступило со мной по-Молоховски, т.е. точно так, как один управляющий заводом в рассказе известного писателя Куприна "Молох". К великому сожалению, так поступают еще и в наше время, у порога в коммунизм, когда всякая наука должна достигнуть своего наивысшего расцвета.

На книгу имеются теперь положительные и весьма лестные рецензии двух профессоров-докторов наук: видного тюрколога профессора Н.А. Баскакова (Москва) и доктора наук, профессора М.З. Закиева (Казань).

Чтобы написать свою книгу, я работал более 12 лет, т.е. с момента защиты кандидатской диссертации. В течение этого времени мне пришлось теоретически освоить и осмыслить более 50 языков тюркской, монгольской, тунгусо-маньчжурской и угро-финской систем, а некоторые из этих языков изучил практически. Кстати, этот момент отметил также проф. Н.А. Баскаков в своей рецензии, в которой он писал, что "Автор безусловно провел титаническую работу..."

Аргументы руководства издательства, в частности его директора Куватова, против включения книги в план так наивны, что не имеют никакой логической связи. Сначала говорили, что для включения этой книги в план требуется специальное решение Башобкома и Башкирского правительства (с выделением средств и бумаги одной тонны при тираже 2000 экз.). Как Вам известно, я обращался и к тов. Акназарову с письмом.

Далее мне говорили, что мою книгу послали в Росглавиздат на рецензирование и если на основании положительной рецензии Росглавиздат будет рекомендовать печатать, будем издавать. Росглавиздат дал книгу на рецензию проф. Баскакову, рецензия положительная, но о рекомендации Росглавиздата мне ничего не сообщили. Затем мне говорили, что книгу будем издавать заказным изданием и университет должен оплатить все расходы, ... далее мне говорили, что издательский план сокращается; в связи с реорганизацией в центральной России будет только одно издательство для 3-х и даже 4-х областей и т.д. и т.п.

Затем выдвинули такой мотив, что книга написана для узкого круга и тираж не разойдется.

Во-первых, эта книга рассчитана на широкий круг языковедов, студентов и аспирантов и написана как учебное пособие.

Я уже несколько лет подряд читаю лекции по этой книге. По приглашению читал также и в Казахском университете. Книга написана аксиоматическом методом на основе математической логики. Все вопросы исторической грамматики башкирского, татарского, чувашского и других тюркских монгольских, тунгусских и угро-финских языков решаются математическим методом. А всякая математическая теория является материалистической.

Привлекая множество фактов из различных выше названных языков и анализируя их математическим методом, я фактически пропагандирую подлинный интернационализм у своих студентов, прививаю любовь к этим языкам и народам. Я вполне сознаю, что я, как коммунист и работник вуза высшей квалификации, нахожусь на передовой линии идеологического фронта. Следовательно, я должен читать свои лекции на основе материалистической методологии и я посильно и делаю это. В наших условиях чувство интернационализма лучше всего можно воспитывать у студентов через научные языкознание. Любовь к языку это любовь к народу, так как язык и народ неотделимы.

...Для любого научного работника, в том числе и для меня, нет другой радости и удовлетворения, как выход своей книги в свет. Я лишен этой радости. Мое состояние сейчас ужасное, я в отчаянии.

Однако я не буду останавливаться на полпути и буду работать над второй частью своей книги, написанной на такой же материалистической основе методом математической логики, как и первая. Возможно, что для этого мне придется перейти на работу в другое научное учреждение, так как при такой нагрузке в университете вести научную работу мне очень трудно. В течение 3-х лет, т.е. с момента освобождения от административной работы в университете (с января 1961 года) я написал 4 книги с общим объемом 50 печатных листов (не включая составление программ). Две книги печатаются и выйдут в 1964 году, одну книгу (учебник для вузов по башкирскому языку) будет издавать университет.

Все это, естественно, расшатало мое здоровье и мои нервы. Отношение руководства университета к нашей кафедре и ко мне лично также не блестяще: я просил одну штатную единицу для кафедры, в чем было отказано.

Вследствие этого мне самому приходится преподавать многие курсы на дневном, вечерном и заочном отделениях. Так работать невозможно. Я считаю, что некоторые работники отдела науки и пропаганды отнеслись к моему первому письму, следовательно, к моим нуждам и моей просьбе чисто формально. Это видно из отношения руководства издательства к моей книге и ко мне лично в целом. Это видно также из того, что Башгосиздат, официально поручивший рецензирование моей книги доктору наук, проф. М.З. Закиеву, не оплатил ему за

рецензирование, тогда как рецензирование проф. Н.А. Баскакова было оплачено. Я считаю это неправильным, ... поскольку система оплаты за рецензию не в издательстве существует.

Я прошу Вас, тов. Нуриев, лично вмешаться в это дело и оказать мне реальную помощь в издании моей книги. 16.11. 1963 г."[10].

Ғилми хеҙмәттәрен айырым китап итеп баҫтырып сығара алмаһа ла, профессор Ж.Ғ. Кейекбаевтың урал-алтай телдәренең грамматикаһы нигеҙҙәренә арналған мәҡәләләре фән донъяһында тюркология менән шөғөлләнеүсе ғалимдарға киң билдәле була. Сөнки ғалим тел ғилеме буйынса төрлө университеттар, фән үҙәктәре ойоштормған байтаҡ конференцияларҙа, симпозиумдарҙа әүҙем ҡатнашҡан. Ғилми мәҡәләләрен Тарту, Ҡазан, Удмурт, Ҡаҙаҡ университеттарында сыҡҡан фәнни журналдарҙа ла, "Советское финноугроведение" журналында ла баҫтырыуға өлгәшкән. СССР Фәндәр академияһының Баш ғилми секретары, академик Н.М. Сисакян 1964 йыл һөҙөмтәләре буйынса яһаған "Тәбиғәт һәм ижтимағи фәндәр өлкәһендә йылдағы мөһим ҡаҙаныштар" тигән докладында Ж.Ғ. Кейекбаевтың был хеҙмәтен дә ыңғай яҡтан билдәләп китә [11].

Атаҡлы совет тюркологы Андрей Николаевич Кононов менән Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев мөнәсәбәттәре тураһындағы документтар ҙа һаҡланған. Шәхси фондта 1967 йылда Мәскәүҙә төрки телдәренең тарихи грамматикаһын төҙөү буйынса уҙғарылған симпозиумға ҡағылышлы мәғлүмәт бар. Был симпозиумда Ж.Ғ. Кейекбаев урал-алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге тураһында сығыш яһай. Өс көн барған йыйылыштың ҡап яртыһы Жәлил Ғиниәт улының докладын тикшереүгә арнала. Битарафтар булмай. Симпозиум эшенә йомғаҡ яһағанда А.Н. Кононов башҡорт ғалимының хеҙмәтенә юғары баһа бирә: "Төрки һәм башҡа урал-алтай телдәренең тарихы 200 йылдан ашыу өйрәнелә, бының өсөн төрлө юлдар, методтар ҡулланылды, ләкин уларҙың береһе лә теләгән һөҙөмтәгә килтермәне. Ә һуңғы йылдарҙа Өфөлә профессор Ж.Ғ. Кейекбаев һәм уның мәктәбе был өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был – бәхәсһеҙ факт, шулай булғас, беҙҙең бөтәбеҙгә лә Кейекбаевтың хеҙмәттәрен һәм уның эш методтарын өйрәнергә, уның мәктәбе менән танышырға кәрәк. Башҡа юлды мин хәҙергә күрмәйем"[12]. СССР Фәндәр академияһының академигы, профессор А.Н. Кононов (1906 – 1986) менән Ж.Ғ. Кейекбаев уның БДУ-ның башҡорт, татар бүлектәре студенттарына махсус курстар уҡырға килеүе хаҡында ла һөйләшеп килешкән. Атаҡлы тюрколог 1968 йылдың апрель-май айҙарында Өфөгә килергә тейеш була. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, 1968 йылдың 19 мартында Ж.Ғ. Кейекбаевтың ҡапыл вафат булыуы сәбәпле, был осрашыу булмай.

Донъя тюркологияһы ғалимдары "Урал-алтай телдәренең тарихи грамматикаһы нигеҙҙәре" китабының баҫылып сығыуын 1962 йылда уҡ көткән. Тел белеме Институтынан билдәле тюрколог, филология фәндәре докторы, профессор Н.А. Баскаков хатынан: "...как Ваша "Сравнительная грамматика"? Мы все ждем ее с нетерпением". 1966 йылдың 16 июнендә яҙған хатында Н.А.Баскаков былай тип хәбәр итә: «…в ближайшее время предполагаем оживить Научный совет по алтаистике с тремя секциями: тюркской, монгольской и тунгусо-маньчжурской, а в будущем, я думаю, можно организовать под Вашим руководством (под руководством Киекбаева Дж.Г. – **Р.Б.**) и урало-алтайскую секцию» [13].

Был китапты Венгрия ғалимдары ла көтөп ала алмайҙар, Венгрия Фәндәр академияһының вице-президенты, профессор Лайош Лигети хаты: «…с большой радостью читал я в Вашем письме о том, что в недалеком будущем мы будем иметь новую, интересную книгу по важным вопросам алтаистики, а эта книга будет именно Вашей работой. Жду Вашу книгу с нетерпением и очень прошу

Вас, не забудьте известить меня, когда она выйдет. 7 декабря 1963 года. Будапешт» [14].

Артабан Төркмән ССР-нан академик Г. Азимовтың БДУ-ның башҡорт теле кафедраһына яҙған ҡыҫҡа ғына аныҡ хаты: «Прошу, как только выйдет из печати, выслать мне наложенным платежом книгу профессора Дж.Г. Киекбаева «Основы исторической грамматики угро-алтайских языков». 28.12.1963 г. Ашхабад»[15].

Ж.Ғ. Кейекбаевтың "«Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» китабы 1996 йылда ғына, ул ваҡытта филология фәндәре кандидаты, йәш ғалим Илдус Ғөбәйҙулла улы Илишевтың өс йылға яҡын фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә генә донъя күрә.

Урал-алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген иҫбат иткән теоретик хеҙмәте «Введение в урало-алтайское языкознание» 1972 йылда ғына баҫылып сыға. Китап "Азия һәм Африка халыҡтары" журналының юғары баһаһын ала (№2 - 1973г).

Ғалимдың "Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы" китабын баҫып сығарыуҙы үтенеп түрәләргә мөрәжәғәт иткән хаттарын да һаҡлай архив: "В 1963 году я написал книгу "Лексика и фразеология современного башкирского языка" и в марте 1964 года сдал ее в Башкнигоиздат в 2-х экземплярах. Насчет этой книги я уже обращался к Вам с письмом, был на приеме у тов. Ф.Султанова, несколько раз был у т.т. Н.К. Розанова и Якупова, у т.т. Т.Саяпова (комитет по печати) и С. Куватова (книгоиздат).

Однако работники издательства всячески тормозят выпуску этой книги. Она была включена в первый вариант плана издания 1965 года, но была из плана вычеркнута. Тов. Куватов тогда мотивировал тем, что не рекомендует Комитет по печати РСФСР. Потом С. Куватов выставил такой аргумент: "Над этой темой работает Уфимский Институт языка, литературы и истории, зачем дублировать одно и то же." Когда я недавно (в начале мая) был у тов. Розанова, С. Куватов по телефону сообщил ему, что Институт языка, литературы и истории возражает против издания упомянутой книги. Был я и в Институте языка, литературы и истории, говорил с зам. директора тов. Харисовым, который авторитетно заявил, что в Институте ЯЛИ никогда не было речи о возражении против печатания этой книги. Зав. сектором языка проф. К.З. Ахмеров заявил, что планом сектора языка не предусмотрено написание монографии "Лексика и фразеология башкирского языка".

После этого я все понял, что я попал в немилость Куватова и подвергаюсь негласной дискриминации или байкоту. Печально, но факт.

Книга "Лексика и фразеология современного башкирского языка" рассчитана для учителей родного языка, студентов, журналистов и редакторов. Ее объем 13-14 печ. листов – не больше школьного учебника среднего объема. Поскольку она рассчитана на учителей родного языка , я даже обращался с письмом в Башминпрос. На мое письмо не было никакого ответа.

Куватов старается, чтобы эту книгу выпустил заказным изданием университет. Но университет будет выпускать мою другую книгу "Сравнительная грамматика урало-алтайских языков" (объем 25 п/листов, на русском языке). Поэтому университет не может издавать только мои книги.

Книга "Сравнительная грамматика урало-алтайских языков", о которой я Вам писал тоже два письма и которая тоже была вычеркнута из плана издания 1964 года, находится в числе важнейших исследований советского языкознания в

общесоюзном масштабе. Эта книга упомянута в годичном отчете Академии наук СССР за 1964 год академика Н.М. Сисакяна (извлечение из отчетного доклада акад. Н.М. Сисакяна прилагаю).

Моя просьба к Вам:

Содействовать выпуску моей книги “Лексика и фразеология современного башкирского языка” (объем 14 п/л., на башкирском языке) как можно быстрее, так как эта книга лежит уже в Башкнигоиздате с марта 1964 года. Член КПСС Дж. Киекбаев” [16].

Был хеҙмәтен нәшер итеүгә бәйле тағы ла бер документты иҫкә алмай мөмкин түгел. Бына нәшриәттең бүлек мөдире 1965 йылдың 11 июнендә ҡул тамғаһын ҡуйған расписка [17]. Унда китап нәшриәтенең дәреслектәр бүлеге мөдире профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың “Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы” китабының ҡулъяҙмаһын (357 бит), кире ҡайтарып биреү шарты менән, ҡабул итеүе хаҡында яҙылған. Сөнки ошо ҡулъяҙманың 1964 йылдың 4 мартында тапшырылған данаһын нәшриәттә юғалтҡандар. Шуға күрә Жәлил Ғиниәт улы был юлы үҙ ҡулы менән расписка яҙып, ҡулъяҙманы ҡабул иткән бүлек мөдиренең ҡултамғаһын алырға мәжбүр була.

Башҡорт теленән дәреслектәр тулып ята тиерһең был замандарҙа. Ләкин башҡорт теленә түрәләрҙең үҙ ҡарашы булған. Был уҡыу ҡулланмаһы, “Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы”, китап нәшриәтендә ике йыл ятҡас ҡына, 1966 йылдың 15 ноябрендә генә баҫырға ҡул ҡуйыла. Уҡыусыларына китап, әлбиттә, 1967 йылда ғына барып етәсәк. Бына ниндәй ҡаршылыҡтар аша үтергә тура килә башҡорт теле дәреслектәре сығарырға теләгән тел ғалимына!

Ж.Ғ. Кейекбаевҡа немец һәм башҡа һинд-европа телдәрен яҡшы белеүе урал һәм алтай телдәре ғаиләһенә ҡараған телдәрҙе, шул иҫәптән башҡорт телен дә, тәрән һәм һәр яҡлап төплө тикшерергә мөмкинселек биргән. Ғалимға фәнни ҡараштарын төҙөк бер системаға һалырға тап немец теле, немец мәҙәниәте тәрән йоғонто яһай һәм ышаныслы нигеҙ була. Немецтарға хас теүәллек, ентеклелек һәм педантизм Ж.Ғ. Кейекбаевтың ғилми аңын һәм рухын тәртипкә килтереүҙә, уның күп яҡлы фәнни һәм ижтимағи эшмәкәрлегендә кәүҙәләнеш таба. Жәлил Ғиниәт улы башҡорт тел ғилемен донъя фәне кимәленә күтәрергә теләгән. Ул эшләгән заманда Башҡорт дәүләт университеты донъя урал-алтаистикаһы үҙәктәренең береһенә әйләнә башлаған да инде. Ж.Ғ. Кейекбаевтың Рәсәй һәм донъя лингвистикаһы фәненә һалған өлөшөн барлыҡ билдәле төркиәтсе ғалимдар ҙа таныған. Башҡорт халҡы, башҡорт теле өсөн иң үкенеслеһе – уны үҙ тыуған иле Башҡортостанда ғына танырға теләмәүҙәре. Бер аҡыл эйәһе әйткән: кешелек әле бик йәш, шуға ла уның барлыҡ бәләләре йәшлегенән килә, тигән. Моғайын, башҡорт тел ғилеменең йәшлеге сәбәпселер уны беренселәрҙән башлап һәр яҡлап өйрәнергә керешкән талантлы тел белгесе Ж.Ғ. Кейекбаев хеҙмәттәренең фәжиғәле яҙмышында. Үҙ илеңдә пәйғәмбәр юҡ шул.

Ж.Ғ. Кейекбаевтың архивтағы шәхси фондында донъя мәҙәниәтендә абруйлы рус ғалимы Ю.Н. Рерих төҙөгән “Тибет-санскрит-рус-инглиз һүҙлеге”нең макеты ла бар. Жәлил Ғиниәт улына был китапты бүрәт ғалимы, Ю.Н. Рерихтың аспиранты Бадараев Балдоржи Бадараевич[6] тибет телендә бағышлау яҙып бүләк

[6]*Бадараев Балдоржа (1929—1987) — Ленинград университетының Көнсығыш телдәре факультетын тамамлаған (1952) бүрәт ғалимы, билдәле тибетолог, филология фәндәре кандидаты, Өфөгә махсус Ж.Ғ. Кейекбаев менән осрашырға килгән.*

иткән. 1964 йылдың 28 июлендә Бадараев Ж.Ғ. Кейекбаевҡа үҙенең беренсе хатында: “Уважаемый профессор Дж.Г. Киекбаев! Очень хочу познакомиться с Вами и с Вашей работой “Основы исторической грамматики угро-алтайских языков” и с Вашей теорией определенности и неопределенности в языке. ...работаю в Улан-Удэ, Бурятский Комплексный Научно-исследовательский институт, отдел зарубежного Востока, на должности младшего научного сотрудника без степени. Занимаюсь тибетским языком, окончил аспирантуру по этому языку у профессора Ю.Н.Рериха[7], но в связи со смертью моего руководителя проф. Рериха в 1960 году мечта о защите диссертации по данному языку отдалилась и я перешел на алтаистику. Если мне удастся оформить диссертацию, то прошу согласиться быть оппонентом моей диссертации и защитником моей работы. Я пропагандирую Вашу работу здесь. И хочу получить ее первым”, – тип яҙа [18].

Ж. Кейекбаев йәш бүрәт ғалимын да үҙенең ярҙамынан ҡалдырмаған. Улар ғалимдың вафатына тиклем хат алышалар. Б.Бадараев кандидатлык диссертацияһын яҡлағас, Башҡортостанға Жәлил Ғиниәт улы менән осрашыуға, башҡорт ғалимына үҙенең сикһеҙ рәхмәтен белдерергә килә.

Профессор Н.К. Дмитриев менән Ж.Ғ. Кейекбаев уҡытыусыһының 1954 йылда вафат булыуына тиклем хат алыша. Хаттарының һәр юлынан дуҫтарса йылы мөнәсәбәт һәм оло хөрмәт бөркөлөп тороу менән бер рәттән, ике ғалимға ла хас булған уртаҡ борсолоуҙар, хеҙмәттәрен баҫтырыуҙа осраған ҡаршылыҡтар тураһында ла хәбәрләшкән улар. Тиҫтәгә яҡын хатында Н.К. Дмитриев “Башҡорт теленең грамматикаһы” китабын башҡорт теленә тәржемә итеп нәшер итеү процессында килеп тыуған ҡыйынлыҡтар, производство мәсьәләләре тураһында яҙа.

Яҙылыу датаһы теркәлмәгән бер хатында Н.К. Дмитриев: “мы... хотим предложить Вашу кандидатуру на должность директора Московского института: там создали кризис, а подходящих кандидатов нет. Отпустят ли Вас и кому об этом надо писать? Если это пройдет, то мы будем очень рады,”[19] – тип яҙа. (Бында һүҙ Тел институты тураһында бара, сөнки алда Н.К. Дмитриев шул турала бәйән итә. – **Р.Б.**). Һис шикһеҙ, атаҡлы рус тюркологы Н.К. Дмитриевтың был тәҡдиме – Ж.Ғ. Кейекбаевтың төрки тел ғилемендә тотҡан абруйының тос булыуы хаҡында кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил.

Немец, венгр, ҡаҙаҡ, ҡараим, үзбәк, яҡут, татар, төркмән, сыуаш, удмурт, мари һәм хатта грузин һ.б. ғалимдарының яҙған хаттарында Ж. Ғ. Кейекбаев менән тел проблемалары буйынса кәңәшләшеүҙәр, фәнни хеҙмәттәр алмашыу тураһында эшлекле тәҡдимдәр бар. Жәлил Ғиниәтович 1964 йылдың 14 ноябрендә Мирфатих Зәки улына Эстонияла дүрт телдә (рус, немец, инглиз, француз) лингвистик журнал сыға башлауы тураһында хәбәр итә. “Шундай уҡ журналды төрки телдәре өсөн дә сығарһалар ине. Йәле, шуны ҡуйыртайыҡ. Мин профессор Баскаковҡа яҙырға әйтәм. Юҡһа теге “Вопросы языкознания” тигән журнал беҙҙе (тюркологияны) ҡәнәғәтләндермәй. Ул журналды Ҡазанда йә Ташкентта сығарғанда шәп булыр ине. Был фантазия, әлбиттә” [20].

“Советская тюркология” журналы 1970 йылда Баку ҡалаһында сыға башлай. Тик был шатлыҡлы ваҡиғаның шаһиты булырға Ж.Ғ. Кейекбаевҡа насип булмай.

---

*[7]Рерих Ю.Н. (1902—1960) — көнсығыш илдәрен өйрәнеүсе, лингвист, этнограф, Тибет теле һәм мәҙәниәте белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, Н.К. Рерих һәм Е.И. Рерихтарҙың улы.*

Ғалимдың бай архивы туғандаш республикаларҙан кандидатлыҡ һәм докторлыҡ дәрәжәһенә дәғүә итеп яҙылған авторефераттар, Жәлил Ғиниәт улының уларға яҙылған рецензияларын да һаҡлай.

Докторлыҡ дәрәжәһенә диссертацияһын (темаһы “Тюркские глаголы с основами, заимствованными из русского языка”) 1967 йылда Ҡазанда яҡлаған ҡаҙаҡ телсеһе Валентина Исенғәлиеваға[8] ла Ж.Ғ. Кейекбаевтың ярҙамы ифрат ҙур булыуы хаҡында һөйләй ҡаҙаҡ ғалимәһенең остазына яҙған хаттары: “Дорогой наш Джелиль Гиниятович! Хочу поделиться своей радостью. 9 февраля пленум ВАК утвердил мою диссертацию. Мы очень рады, что скоро увидим Вас у нас. До свидания, дорогой, шексiз кымбатты, шексiз кадiрлi Джелиль Гиниятович! 19 февраля 1968 года”.[10] Был хаттарҙан башҡорт мәҙәниәтен генә түгел, ә Рәсәйҙең төрлө милләт халыҡтарының мәҙәниәтен үҫтереүҙә арымай-талмай эшләгән киң күңелле, бүтәндәр ҡыуанысы өсөн ысын йөрәктән шатлана белгән эскерһеҙ кеше образы күҙ алдына баҫа.

Ж.Ғ. Кейекбаев аспирантура аша фән кандидаттары әҙерләүгә айырыуса ҙур әһәмиәт биргән, үҙенең лингвистик мәктәбен булдырған, йәштәргә фән өлкәһендә үҫергә ярҙам иткән. Татар тел ғалимы М. Зәкиевҡа 1964 йылдың 6 мартында яҙған хатында үҙенең аспиранты В. Псәнчин тураһында яҙа: “Оҙаҡламай беҙ Һеҙгә аспирант Вәли Псәнчиндың диссертацияһын ебәрергә торабыҙ (тел тарихы буйынса). Эше ярарлыҡ яҙылған, үҙегеҙ баһаларһығыҙ. Ул егет йәш түгел, университетҡа тиклем үк армияла булған, унан һуң 2-3 йыл Мәғариф министерствоһында эшләне, фирҡә ағзаһы, тотанаҡлы, баҫалҡы егет”[21].

Ғалимдың хаттарында үҙенең башҡа аспиранттары М.В. Зәйнуллин, Ә.М. Аҙнабаев. А. А. Ғәлләмовтар тураһында ла хәстәрлекле юлдар бар: “...беҙҙең Аҙнабаев (Әхмәр Мөхәмәтдин улы – **Р.Б.**) бик инсафлы, баҫалҡы егет, партия ағзаһы, диссертацияһы рус телендә яҙылған, мин уға үҙем русса яҙырға тәҡдим иткәйнем. Шул Аҙнабаевҡа рәсми (беренсе) оппонент булһағыҙ, бик шәп булыр ине, ярҙам йөҙөнән. Вәли Псәнчинды бик уңышлы үткәргәнһегеҙ икән, мин бик шатмын һәм Һеҙгә ҙур-ҙур рәхмәт!”, “...көҙгә минең тағы бер аспирант яҡлай, Ғәлләмов фамилиялы, диссертацияһы “Башҡортса грамотаға өйрәтеү” тип атала. Ул Башҡортостанда баш методист, бик белемле егет, бик күп уҡыны, ныҡ эшләне. Ул да бик инсафлы, Башминпрос тирәһендә абруйлы кеше. Дәреслектәр авторы. Беҙ унның менән хәҙер педучилищеларға дәреслек яҙып ятабыҙ, 1966 йыл планында тора. Бәлки, һин Ғәлләмовҡа рәсми оппонент булырһың?”[22].

Бына бер аспирантының Ж.Ғ. Кейекбаевҡа Мәскәүҙән яҙған хаты: “Һаумыһығыҙ, Жәлил Ғиниәтович! Һеҙгә уңышлыҡтар һәм күп сәләмдәр ебәреп Әхмәр. Жәлил Ғиниәтович, мин бөгөн Өфөгә күсереүҙе һорап Решетовҡа[9] ингәйнем. Ул ризалыҡ бирҙе. Бәлки, барып сыҡһа, тиҙ үк Өфөгә ҡайтырмын. Һеҙҙе научный руководитель итеп һораным. Тик Һеҙ хәҙергә бер кемгә лә әйтмәй тороғоҙ, барып сыҡмаһа, хәрт булыр. Ҡайтаһы килә, бында бер нәмә лә оҡшамай; ятаҡ бик йыраҡ, 2 сәғәт бараһың, 2 сәғәт ҡайтаһың. Тик диссертацияның темаһы асыҡланмаған. Мин ”Айырымланған эйәрсен киҫәктәрҙе һәм хәл әйтемдәрен уҡытыу методикаһы” тигән тема алғайным. Бик оҡшай ине, ҡатмарлы пунктуация... Һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ. Бәлки, Һеҙ тәҡдим итерһегеҙ.

---

[8]*Исенгалиева Валентина Айтешевна (1924) — әл-Фараби исемендәге Ҡаҙаҡ Милли университеты профессоры, филология фәндәре докторы, Ж.Ғ. Кейекбаев менән әүҙем хат алышҡандар.*

[9]*Решетов В.В. — СССР Педагогия фәндәре академияһы академигы.*

Диссертацияның темаһын хәл итмәйенсә ҡайтып булмай. Шуға ла Һеҙ үҙ фекерегеҙҙе тиҙерәк яҙып ебәрһәгеҙ, бик шәп булыр ине. Ваҡытығыҙ булһа, яуап яҙыуығыҙҙы һорайым, шул тема ярармы-юҡмы икән?

Ошо адрес менән яҙығыҙ: г.Москва, Г- 117. ул.Погодина 8
Институт национальных школ,
Азнабаеву Ахмеру (аспиранту).
Сәләм м-н Әхмәр. 25/ 04." [23].

Профессор Ж.Ғ.Кейекбаев үҙенең шәкерттәрен Мәскәүгә, ғилми үҙәктәргә, уҡырға ебәрергә тырышҡан. Мәскәүҙән Башҡортостанға ҡайтҡыһы килгән был шәкертен дә ғалим үҙенең ярҙамынан ташламай. Артабан был аспирант өс йыл аспирантурала уҡып, педагогия фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡлап, ҙур ғалим булып китә. Оҙаҡ йылдар КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында фәндәр бүлеген етәкләй.

Урыҫ мәҡәле "Тарих шарт ҡылымын яратмай" тиһә лә (история не любит сослагательного наклонения), әгәр Ж.Ғ. Кейекбаев үҙенең һөйөклө шәкерттәре кеүек етмеш йәшкә тиклем йәшәһә, башҡорт телен тел ғилеменең ниндәй бейеклектәренә күтәрер ине, тигән уй мейене телә. Башҡортостанда үҙенең хеҙмәттәрен баҫтырып сығарыуҙы юллап эреле-ваҡлы төрлө-төрлө түрәләргә яҙған хаттарын уҡығас, Алмата, Тарту, Ташкент университеттарынан ғалимды эшкә саҡырып яҙған хаттарға, бәлки, ыңғай яуап бирергә кәрәк булғандыр, тип тә уйлап ҡуяһың.

Архив документтары менән танышҡас, үҙенең әйләнә тирәһендә бергә эшләгән иптәштәренә генә түгел, ғөмүмән кешелекле, изге күңелле, ярҙамсыл, бер үк ваҡытта ялағай, ике йөҙлө, шылғаяҡ бәндәләрҙе яратмаған, тура һүҙлелеге, түрә-ҡараға тәрликә тота белмәгән шәхес булған икән Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев, тигән фекер тыуа. Ундайҙар һирәк, уларға йәшәү бер ваҡытта ла еңел булмаған һәм еңел булмаясаҡ та.

Жәлил Кейекбаев тел фәненең барлыҡ йүнәлештәрендә лә һөҙөмтәле эшләгән. Фәнни хеҙмәттәр яҙыу менән бер рәттән, ғалим талантлы яҙыусы ла булған, башҡорт әҙәбиәтен байытыуға "Туғандар һәм таныштар" романын яҙып ҙур өлөш индергән. (Был романдың ташҡа баҫмаһын да ҡулына алырға насип булмай Ж.Ғ. Кейекбаевҡа, сөнки ул 1975 йылда ғына нәшер ителә. Романын баҫып сығарыу өсөн көрәш – үҙе бер айырым тарих.) Ж.Ғ.Кейекбаев башҡорт әҙәбиәтендә утыҙынсы йылдарҙан уҡ Ж. Табын псевдонимы менән билдәле. Немец яҙыусыларының әҫәрҙәрен туранан-тура башҡорт теленә тәржемә итеүсе берҙән-бер белгес була ул. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ул Советтар Союзы Геройҙары Зөбәй Үтәғолов һәм Александр Матросов тураһында әҫәрҙәр ижад итә. Уның ҡобайырҙары, әкиәттәре уҡыусылар тарафынан яратып ҡабул ителә. Ғалимдың Ишембай районы Маҡар урта мәктәбенең 9-сы "В" класы уҡыусыларына яҙған хатынан: "Ленин ордены менән наградланыу айҡанлы мине ҡотлап, изге теләктәр теләп яҙған хатығыҙҙы алдым; уның өсөн һеҙҙең бөтәгеҙгә лә рәхмәт белдерәм.

... Маҡар ауылында өс йыл уҡып яттым. Йәйен-ҡышын үҙебеҙҙең ауылға каникулға ҡайта торғайным. ... уның кешеләрен элегерәк мин бик яҡшы белә торғайным. Хәҙер Маҡарға 1957 йылдан бирле барғаным юҡ.

Маҡар элек-электән бик данлыҡлы ауыл булған; унда уҡымышлы кешеләр күп булған. 1880 йылдарҙа Ташбүкәнгә ҡунаҡҡа барған саҡта вафат булған генерал-майор Йософ Ҡарамышев та Маҡар ауылында тыуып үҫкән. Уның көйө лә бар, "Йософ майор көйө" тип йөрөтәләр. Мин һеҙгә ул көйҙөң нотаһын яҙып ебәрәм. Хәҙер мәктәптәрҙә музыка уҡыталар, арағыҙҙа музыкаль грамотаны

белеүселәр ҙә барҙыр бәлки. Уйнап ҡарарһығыҙ. Ул бик матур көй; “Перовский” көйөнә бер аҙ оҡшап ҡала, марш көйө.

Һеҙгә иҫтәлек итеп, үҙемдең бер-ике китапты ебәрәм. Һеҙҙең барығыҙға ла ихлас күңелдән уҡыуығыҙҙа уңыштар теләйем.

Күп сәләм һәм изге теләктәр менән профессор Жәлил Кейекбаев.

30 ғинуар, 1967 йыл. [24 ].

Жәлил Ғиниәт улы замандаштары, был осорҙа исемдәре киң ҡатламға билдәле булмаған, Рәсәйҙә ғүмер-ғүмергә хөкөм һөргән репрессияларҙан иҫән ҡалған башҡорт зыялылары М. Мирхәйҙәров, Ш. Ғәбдиев кеүек шәхестәр менән дә хаттар яҙышҡан. Улар хаттарын яңы алиф менән дә, иҫке төрки яҙыуында ла яҙғандар. Был документтар үҙҙәре бер айырым иғтибар һәм махсус тикшеренеүҙәр талап итә.

Ғалимдың улы М.Ж. Кейекбаев инициативаһы менән 2010 йылдың декабрендә Жәлил Ғиниәт улының Татарстан Республикаһының Милли архивында һаҡланған йөҙҙән артыҡ хатының етмешкә яҡын күсермәһе Башҡортостанға ҡайтарылды. Эстония Республикаһының Тарту университетының Әҙәбиәт музейы директоры доктор Мартин Халлик: “Профессор Ж.Ғ. Кейекбаевтың Эстония тел ғалимдары менән яҙышҡан хаттары һаҡлана” – тип хәбәр итә. Киләсәктә был хаттар ҙа ғалимдың шәхси фондын тулыландырасаҡ.

„Йөҙ ғалимды бизмәндең – бер яғына, Кейекбаевты икенсе яғына һалһаң, Кейекбаев яғы мотлаҡ еңәсәк,“ – тигәйне бер яҙыусы яҡташы уның тураһында. Ж.Ғ. Кейекбаевтың бай архивы менән өс йыл буйына танышҡас, был яҙыусының һүҙҙәре һис шикһеҙ раҫ икәненә иманым камил.

**Рәмзиә БИКӘНӘСОВА,**
Башҡортостан Фәндәр академияһы Гуманитар тикшеренеүҙәр
институтының ғилми хеҙмәткәре.

## ҠУЛЛАНЫЛҒАН ӘҘӘБИӘТ:

1. Музей имени Дж. Г. Киекбаева. д. 373.
2. Музей имени Дж. Г. Киекбаева. д. 347.
3. ЦГИА РБ.ф. Р-5085. оп.1. д. 225. л. 4.
4. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 98.
5. ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1. д. 236. с. 96.
6. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д.234. с.93.
7. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д.241. с.21.
8. ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1. д.41. с.23.
9. ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1. д.236. с.96.
10. ЦГИА РБ. ф.Р-5085. оп.1. д.236. с.112.
11. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп. 1. д.234. с.117.
12. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп. 1. д.232. с.183.
13. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д.234. с.95.
14. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 232. л.19.
15. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 234.л.137.
16. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 234. л.82.
17. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 232. л 28.
18. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 98. л. 57.
19. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д. 234. с.23.
20. Национальный архив Республики Татарстан. Ф.Р-2950. оп. 1. д. 48. л.53.
21. Национальный архив Республики Татарстан. Ф.Р-2950. оп. 1. д. 48. л.42.
22. Национальный архив Республики Татарстан. Ф.Р-2950. оп. 1. д. 48. л. 23.
23. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д.236. л. 100.
24. ЦГИА РБ. ф. Р-5085. оп.1. д.232. л. 112.

# Ебәрелгән һәм алынған хаттар

**21 февраль, 1941 йыл, Өфө**

*Дорогая и любимая Нафиса!*

*Бөгөн һинән тағы хат алдым. Рәхмәт, мең-мең тапҡыр рәхмәт минең һәр хатҡа ваҡыт табып яуап яҙғаның өсөн. Бик-бик шатландым. Был хатың минең Мәскәүҙән ҡайтыр көндө яҙған хатҡа яуап икән. Һинең асыҡ, саф, керһеҙ күңелле булыуың өсөн һәм барыһын да асыҡтан-асыҡ яҙыуың өсөн мин хәҙер бик-бик ныҡ яратам һине, Нәфисә, шул тиклем шатмын. Минең Өфөгә ҡайтҡас яҙған ике хатты ла алғанһыңдыр инде мыңарса. Аның тәүгеһе өсөн (11 февраль) мин бик уңайһыҙланам. Мин анда үҙемдең барлы-юҡлы аҡылым белән һине аҡыл өйрәткән булғанмын, дөрөҫөрәге, мораль уҡыған булғанмын. Анда беҙҙең булған мөхәббәттең артабанғы яҙмышы тураһында әйтә биреберәк тә ҡуйғайным. Билгеле, ул хатты уҡып, минең нимә әйтергә теләгәнде аңлағанһыңдыр: «Я не люблю Тебя одной только любви ради…», тағы: «Наша любовь должна решить нашу судьбу» һәм башҡа һүҙҙәр. Мин ул хатымда ошо һүҙҙәр белән генә сикләнмәгән инем. Ә инде икенсе хатымда (18 февраль) асыҡтан-асыҡ яҙҙым. Яҙыуын яҙҙым, но очень волнуюсь. Вдруг получу отказ – тогда гибель. Башҡа төрлө уйҙар килә. Шунан үҙемде үҙем успокоить итәм, һәм әллә нимә уйлар, тип шикләнәм. Һуңынан уйлайым инде: беҙ бер-беребеҙҙе яратабыҙ икән, ниңә тартынырға, һин дә мине яратыу өсөн генә ратмайһыңдыр, тип уйлайым. Беҙҙең арала булған көслө, ҡайнар мөхәббәт беҙҙе ҡайҙа табан алып барырға тейеш? Ул беҙҙе ғүмерлек мөхәббәткә, ғүмерлек дуҫлыҡҡа алып барырға тейеш. Шулай булмағанда, ул ысын мөхәббәт була алмай, дөрөҫөрәге, ул, ғөмүмән, мөхәббәт була алмай, а просто любовные забавы ғына тип атарға мөмкин. Аның белән ваҡыт әрәм итергә лә ярамай. Мин вообще бер кемгә лә андай ваҡытлыса ғына мөхәббәт уйынын уйнарға кәңәш бирмәҫ инем.*

*И так, әгәр һинән положительный ответ алһам, барыһына асыҡлап яҙырмын, бөтөн деталдары белән. Үткән хатта мин был турала яҙа биреп ҡуйғайным инде, хотя билгеле, һин килһәң, йәғни килергә булһаң, мин Мәскәүгә китмәйәсәкмен. Мин шуны ла хәтеремә төшөрөп ҡуям: әгәр инде һин предложениены ҡабул итеп, Өфөгә ҡайтырға булһаң, Урта Азия белән ғүмергә айырылышырға тейешһең. Был һүҙ һиңә, бәлки, странно тойолор, ғәфү ит асыҡтан-асыҡ яҙған өсөн. Һин атайың өсөн страдать итергә тейеш түгелһең һәм аның өсөн яуап бирергә тейеш түгелһең. Быны яҙғанға асыуланма, Нәфисә, яратып асыҡ яҙам.*

---

*Дауамы. Башы 9-сы һанда.*

*Теге «смелый» хатты уҡыһаң, яңылыш фекерҙә ҡалма. Мин был турала анда ла яҙғайным, әле лә хәтереңә төшөрәм. Мин ул һүҙҙе һиңә осраһас әйтмәксе инем тел менән. Хат менән әллә нисек һымаҡ, шулай булһа ла яҙҙым. Бөтә серҙәремде ысын күңелемдән яҙҙым. Мин һинән бер нәмәне лә йәшерергә тейеш түгелмен, тип уйлайым. Сөнки мин һине шул тиклем яратам, ул мөхәббәтте хатҡа яҙып бөтөрөү мөмкин түгел.*

*Бүләктәрҙе кисә иртә менән ебәрҙем, бәлки, барып еткәндер. Үтенеп һорайым, Нәфисә, һин уларҙы ҡабул итеп ал. Мин бик-бик ҡыуанырмын. Уны бүләк тип әйтеүе лә ҡыйын инде бер уйлағанда, ваҡ-төйәк әйберҙәр. Һин ваҡ нәмәләр өсөн көймә, ҡайғырма, иғтибар итмә, еңел үткәрергә тырыш.*

*«Ни өсөн йәшәгәнемде лә белмәйем» тип яҙаһың һин. Улай настроениеға бирелергә ярамай. Беләм, һиңә ҡыйын, ләкин ул һәр ваҡыт шулай булмаҫ, мин ышанам: булмаҫ, ул ваҡытлыса ғына.*

*Мин һиңә хатта өсөнсө четвертте бөткәс тә килергә кәңәш бирер инем, ләкин һинең решениеңды белмәйем хәҙергә. Ә дүртенсе четвертте бында теләгән мәктәпкә инеп уҡырға һәм урта мәктәпте тамамларға мөмкин. Мин быны шуның өсөн әйтәм, сөнки бик-бик һағынам һине, Нәфисә, бик-бик күргем килә. Әгәр осар ҡош булһам, һинең янға осоп барыр ҙа һиңә булған ысын, таҙа мөхәббәтемде һөйләр инем. Һиңә булған мөхәббәтемде мин бер генә нәмәгә лә алыштырмаясаҡмын. Ул мөхәббәт ғүмерлек булырға тейеш, ул һис бер ваҡытта ла һүнмәҫкә тейеш, һәм минең йөрәктә ул һүнмәйәсәк. Мин дә һинең мөхәббәтеңә ышанам. Мин һәр ваҡыт бик шатмын. Тик, анау хатым менән генә һине борсоғанмындыр, тип ҡыйынһынам. Берүк асыуланма миңә, әгәр һин аны ҡабул итмәһәң. Ҡабул итмәгән сүрәттә лә мин һине яратасаҡмын һәм ихтирам итәсәкмен, һис бер ваҡытта ла асыуланасаҡ түгелмен.*

*Уны әйтергә, т.е. ул смелый шагты яһарға мин бер аҙ ашыҡтым һымаҡ, бер аҙ иртәрәк башланым һымаҡ ул турала. Әҙерәк һуңғараҡ ҡалдырырға кәрәк ине, тип тә ҡуям. Хәҙер инде бер нәмә эшләп булмай, сөнки «әйткән һүҙ – атҡан уҡ» тиҙәр. Бер уйлағанда, дөрөҫ эшләнем һымаҡ. «Ҡалған эшкә ҡар яуа» тигәндәр боронғолар.*

*Һин һуңғы хатыңды бик упадочное настроение менән башлап, аҙағын бик һәйбәт бөтөргәнһең, шат күңелле. Мин һинең шатлығың өсөн һөйөндөм, бер нисә тапҡыр уҡып сыҡтым ул хатты. Шунан шатлығымдан мандолина алып, «Урал» көйөн уйнаным. Шуның менән күңел асҡан булам.*

*Ял көндәрен иптәштәр килеп ултырғылай. Миңә ярты Өфө таныш, элек бергә уҡыған иптәштәр бында төрлө урында эшләйҙәр, үҙҙәре киләләр, саҡыралар, ял көндәре, ял алды көндәре бик һәйбәт үтә. Башҡа көндәрҙә Яҙыусылар союзында төрлө литературный йыйылыштарҙа булғылайым. Мин, конечно, үҙем шағир ҙа, яҙыусы ла түгел, шулай ҙа барам көн уҙғарырға.*

*Хәҙер эш бик күп шулай ҙа. Көндөҙ институтта булған булам шунда, кисләрен төрлө йыйылыштар, ултырыштар була.*

*Өфөлә көндәр бик һыуыҡ әле шулай ҙа, әҙерәк йылы торғайны, хәҙер тағы һыуытты. Ҡар бик тәрән яуҙы быйыл.*

*Ярай, Нәфисә, мин хатымды ошоноң менән тамамлайым. Шат йәшә, ҡайғырмай йәшә. Мин дә һинең менән бергә шатланам бит, Нәфисә. Рәйсәгә сәләм, уны минән ҡосаҡлап үп.*

*Хәҙергә хуш, хуш, һөйөклөм, крепко-крепко целую.*

*Һине һағынып, сәләм менән, Жәлил.*

**24 февраль, 1941 йыл, Карши**

*Ҡәҙерле Жәлил ағай!*

*Һеҙгә иң һағынышлы сәләмемде ебәреп, иҫән-һау һәм шат йәшәүегеҙҙе теләп ҡалам.*

*11 февраль яҙған хатығыҙҙы алдым. Бик ҙур рәхмәт Һеҙгә за то, что написали мне о «законе существования человека», вернее «теорию жизни». Я сама тоже кое-что об этом узнала, но не все. Эту истину я буду стараться никогда не забывать. Дөрөҫ, Жәлил ағай, кеше машина, автомат түгел, но было бы лучше, если бы это было так…*

*9 февраля хатты яҙмаҫ элек мин бик күп ваҡыт уйлап йөрөнөм. Потом я решила, что обязана написать правду. Я почувствовала, что, если не напишу правду, то тем самым буду обманывать Вас и себя. А так я не хочу. И вот мои последние письма должны повернуть наши взаимоотношения в ту или другую сторону.*

*Давно уже обещала прислать фотокарточку. «Вәғәҙә – иман» тигән өсөн генә ебәрергә булдым. Рәсем йәмһеҙ генә түгел, больше, чем йәмһеҙ. В этом вина бога или моих родителей, а отчасти фотографа. Карточка на 80 процентов схожа с действительностью. Фотографировалась я в дождливый холодный день. В помещении было холодно, фотограф возился долго и я замерзла. От холода согнулась как горбатая. Фотограф сказал: «Так вид у Вас будет грозный, улыбнитесь». И мне сквозь слезы пришлось улыбнуться, хотя я не имела намерения улыбаться. Когда снимок был уже готовый, я увидела, что он приделал мне на шее очень «удачный» шрам, которого у меня в действительности нет. На мое недовольство он предложил переснять, но это будут опять долго и Вы можете подумать, что я не посылаю карточку по какой-либо другой причине. Потом фотографировались втроем. Тот снимок мне нравится больше. Я снялась в пальто, мне было тепло, я не дрожала, поэтому получилось лучше. Хотела прислать ее Вам, но передумала.*

*Ғәфү итегеҙ. Описанию процесса фотографирования посвящено так много места… Писать пока на этом кончаю.*

*Почему-то нет ответа на мое письмо от 9 февраля. По получении ответа напишу побольше. В этом письме я ответила на Ваши вопросы. Ну вот. Прошу не обижаться за лаконичность. В конце добавлю только то, что по прежнему люблю и уважаю Вас. В этом не должно быть никаких сомнений. Остаюсь в ожидании ответа от Вас.*

*Һағынышлы сәләм менән любящая Вас Нәфисә.*

*P.S. Заранее чувствую, что фото Вам не понравится. Прошу Вас эту карточку порвать, я пришлю другую.*

**25 февраль, 1941 йыл, Карши**

*Иң ҡәҙерле, иң яҡын, иң һөйөклө Жәлил ағай!*

*Һеҙгә йөрәгемдән ҡайнап сыҡҡан һағынышлы сәләмемде ебәреп, Һеҙгә шатлыҡ һәм сәләмәтлек теләп ҡалам.*

*Мин кисә генә Һеҙгә бер рәсем менән ҡыҫҡа ғына хат яҙып һалғайным. Я там многое не написала, многое пропустила, хотя в душе о многом хотела Вам сказать…*

*Насчет Вашего письма от семнадцатого февраля, по Вашей просьбе һис кемгә әйтмәҫтән, кәңәш итмәҫтән, бер үҙем генә хәл итмәксе бултым. Кәңәшләшә торған кеше лә юҡ, дөрөҫөн әйткәндә. Икенсенән, кәңәшләшә торған кеше*

булғанда ла мин был турала һис кем менән һөйләшеп, кәңәш һорап тормаç инем. Ведь это касается лично только меня и ответить должна я сама.

Дөрөç, мин көтмәгән инем, Жәлил ағай, һуңғы һүҙҙәрҙе. Когда первый раз прочитала Ваше письмо, у меня так закружилась голова, что я плохо поняла содержание письма. Ҡабат-ҡабат уҡып сығарға тура килде.

Вы пишете, чтобы я не обижалась на Вас и т.д. Что кто-нибудь другой, если не Вы, когда-нибудь сказал бы мне то же самое. Это верно. Сказал бы, вернее, говорили. Но, если бы это сказал мне кто-то другой, не Вы, я действительно приняла бы и принимала это только за оскорбление, потому что никого другого я не любила и не люблю и не могу любить. А чужая любовь, когда человек сам не любит, кажется оскорблением. По крайней мере, мне так кажется, не знаю как другим.

Но Вас я люблю. Люблю больше всех на свете. Дороже Вас для меня не существует никого. Правда, это пустые фразы. Вы можете сравнить меня с героями французских романов, которых Вы, кажется, не любите. Но я и на словах всегда готова повторять бесконечное количество раз – Люблю Вас.

Ответа в своей любви я не могу дать, только знаю, что люблю Вас всем сердцем, всей душой. На вопрос: «Почему?» – я ответа дать не могу. Я даже не задумывалась, любите ли Вы действительно меня. Уверенний в любви от Вас не требовала, я поверила, что Вы обманывать не станете. Ведь это ни к чему. А Ваши письма еще больше увеличивали и укрепляли мою любовь. Откровенность я люблю, но сама сделать признание, как Вы пишете, я не смогла бы, пожалуй, никогда, потому, что этому мешает инстинктивный стыд. Когда от Вас получила письмо с признанием, я не задумваясь ответила, что люблю Вас, но о последствиях я не думала.

Вот и теперь, Вы задали мне очень серьезный вопрос. Я, много не думая, без лишних слов, ответила – да, согласна. Это решила моя любовь к Вам. Объяснений не даю.

«Алтын тауҙар, тау-тау тиклем бәхеттәр» вәғәҙә итеү тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел. Әгәр Һеҙ уларҙы вәғәҙә иткән булһағыҙ или же мин шуларҙы теләгән, көткәм булһам, тогда это уже не любовь, минеңсә. Грубо выражаясь, это называется «купля-продажа» (это очень грубо и цинично, может быть, Вы меня извините).

Взаимная любовь, верность, доверие и уважение друг к другу – вот счастье в жизни. Я так думаю, может быть еще что-нибудь нужно добавить, я не знаю. Если я что-нибудь пропустила, Вы мне напишите. Я со своей стороны могу обещать только это, а раз обещала, то сдержу слово, а если бы обещала золотые горы, то это вышло бы смешно.

Пишу, сама не знаю, о чем пишу. Возможно, будут ошибки различного рода. Мин, әйткәнегеҙ буйынса, тартынмайынса яҙырға бултым. Баш әйләнә минең дә, сөнки мин дә был һүҙҙәрҙе һис кемгә яҙғаным да, әйткәнем дә юҡ ҡына түгел, даже әйтергә лә йыйынмай инем.

Вы задали мне такой вопрос, на который нужно было ответить конкретно – да или нет. Ну вот, я и ответила утвердительно.

По этому поводу не знаю, что еще нужно прибавить, думаю, лишних слов здесь не нужно. Шулай.

Өфөгә ҡайтыу тураһында. Уҡыуҙар июндең аҙағында бөтә, аны беләһегеҙ. Дүрт ай бар әле. Как много.

Өфөгә бер үҙем генә ҡайтҡым килә. Әтейем сыҡһа, Рәйсә обязательно аның белән ҡалыр. Сыҡмаһа, видно будет, ләкин сығырға тейеш. Әгәр ул сыҡһа, аңа

*нимә тип әйтербеҙ икән... Ул, урыҫлар әйтмешләй, бик характерлы старик («старику» ҡа 43 йәш ине –* **З.К.** *иҫкәрмәһе).*

*Думаю, что он ничему не помешает, даже при всем своем желании помешать, ничего у него не выйдет.*

*Жәлил ағай, что Һеҙ, мин бит, рәсемгә насар төшкәнһегеҙ, тип әйтмәгән инем. Ябыҡҡан кеүек күрендегеҙ, әллә ауырынығыҙмы, тип кенә һораған инем. Минең өсөн Һеҙ рәсемдә нисек сыҡһағыҙ ҙа, һәр ваҡыт лучше всех кажетесь. Рада, что Вы не болели, что в данное время здоровы...*

*Посылку еще не получила, но когда прочитала, что Вы хотите ее прислать, мне очень неудобно стало. Заранее благодарю и извиняюсь за беспокойство, которое причиняю Вам.*

*Сами живем ничего, по-прежнему. Уҡыуҙар уртаса бара быйыл. Рәйсәнән Һеҙгә сәләм. Ул Һеҙҙе белмәй, правда.*

*Мынта яҙ булты. Ағастар сәскә атты (мынтағы ағастар тәүҙә сәскә ата, анан япраҡ яра). Күңелһеҙ...*

*Бөгөн 25 февраль, көндөҙ хатығыҙҙы алтым. Үҙем иртәгә ебәрермен инде.*

*Сәғәт төнгө 2, ә йоҡо килмәй...*

*Хуш, хуш, һөйөклө Жәлилем.*

*Һағынып, сәләм белән Нәфисә. Целую.*

**5 март, 1941 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм, Нәфисә!*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ҡәҙерле сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Хатыңды һәм рәсемеңде алдым. Шул тиклем шатландым, әгәр белһәң ине, Нәфисә. Шатлығымдан йөрәгем атлығып сығып килгән һымаҡ. Рәсемең өсөн шул тиклем шатланһам да, һуңғы ике хатым өсөн беспокоиться итәм. Ул хаттар менән һине борсоғанымдыр, тип уңайһыҙланам. Һис бер тыныс йөрөгән минутым юҡ. Минең шул туранан-тура, асыҡтан-асыҡ әйтә торған бер алама ғәҙәт бар. Нисек ташларға шул ғәҙәтте? Хәҙер инде һуң, «әйткән һүҙ – атҡан уҡ» тиләр бит, ә урыҫса «что написано пером, то не вырубишь топором» тиләр.*

*Һин ул хаттарҙы февралдең аҙаҡтарында алғанһыңдыр. Ә теге ебәргән посылка өсөн икеләтә уңайһыҙланам: берҙән аның барып етеү өсөн, икенсенән, һинең шуларҙы минән ҡабул итеп алыуың өсөн. Кеше әллә нимә уйларға мөмкин.*

*Мин дә теге ике хатҡа яуап килмәйенсә хат яҙмам тиеберәк торғайным, ләкин һинең бер фекереңде үҙем аңлауымса тағатырға һәм дөрөҫ аңлау, аңламауым тураһында һорарға булдым. Һин обязательно яуап яҙырһың был хатҡа, теге хатҡа һинең тарафтан ниндәй яуап булыуға ҡарамаҫтан яҙырһың.*

*Һин яҙаһың: «Мои последние письма должны повернуть наши взаимоотношения в ту или другую сторону»,– тиһең. Мин һинең ул фекереңде былай аңланым: возможно, думаешь, что сложившиеся у тебя обстоятельства изменят мое отношение к тебе в худшую сторону. Нет! Тысячу раз нет! С моей стороны никогда не бывать этому! Я охотно верю, что такие случаи бывают часто. Такие люди, вернее людишки с маленьким умом, мизеры, трусы высшей марки, чеховские Беликовы, которые только ради защиты своей шкуры жертвуют кем угодно, чем угодно, когда угодно и где угодно. Они даже готовы пожертвовать любовью, что есть высшей степени подлость и мерзость. Я знаю несколько таких людей. Я лично считаю, т.е. предпочитаю лучше умереть за честь и клятву, жертововать собою, чем оказаться таким подлецом.*

*Только тогда будет настоящая любовь. Так любили веками. Так любили наши деды и прадеды. И так, только так, люблю Тебя и Я.*

*Возможно, мин һинең ул фекереңде яңылыш аңлағанымдыр, ул ваҡытта яҙырһың, но иначе я не мог понять.*

*Был хатымда мин һуңғы ике хатымда яҙған бер фекеремде тағы ла ҡабатлайым – мин уйымды һинән йәшерергә теләмәйем, һәммәһе лә асыҡ булһын тинем һәм шуны һинең алдыңа килтереп ҡуйҙым. Үҙемсә, дөрөҫ эшләгәнемдер, тип уйлайым. Сөнки ул була торған эш. Ул һинең башыңдан ҡасан булһа ла үтәсәк. Әйтәләр бит: «Донъя (т.е.яҙмыш) ағас башынан йөрөмәй – кеше башынан йөрөй» тиләр. Ҡабатлайым – мин һине ваҡытлыса ғына, для временного увлечения яратмайым. Ысын мөхәббәт ғүмерлек булырға тейеш. Ғүмерлек мөхәббәт кенә ысын мәғәнәһе белән мөхәббәт була ала. Һуңғы хатымдағы минең тарафтан булған аҙым, шул мөхәббәттең ғүмерҙә-ғүмерҙә һүнмәҫлек юғарылығына табан булған бер аҙым ғына. Мин ул һүҙҙе һиңә ҡасан да булһа бер әйтергә тейеш инем һәм фәҡәт мин әйтергә тейеш инем. Сөнки һин ғүмерҙә әйтмәйәсәк инең аны. Һиңә аны элекке һәм хәҙерге йола буйынса ла әйтергә ярамай.*

*Теге хаттарға яуап килгәнгә тиклем был хатымды ошоноң белән тамамлайым.*

*А я думаю, что скорее всего мои последние письма должны повернуть наши взаимоотношения в ту или другую сторону. В случае, если эти письма повернут их в худшую для меня сторону, то прости меня за все, за все, дорогая и любимая.*

*Рәсемең өсөн тағы бер тапҡыр йөрәгемдән рәхмәт.*

*Говорят: «Где память есть, там слов не надо». «Вәғәҙә – иман» тигәндәр боронғолар. По-русски это означает: «Обещание есть клятва». Һин аны үтәнең. Мең-мең тапҡыр рәхмәт.*

*Хуш, Нәфисә, хуш, һөйөклөм. Иң ҡәҙерле, иң һағынышлы сәләм ебәреп, яуап көтөп ҡалам. Уҡыуыңда уңыштар теләйем. Рәйсәгә лә сәләм.*

**8 март, 1941 йыл, Өфө**

*Иң ҡәҙерлем, иң һөйөклөм Нәфисә!*

*Һиңә иң һағынышлы сәләмдәремде ебәрәм һәм һинең шат, һау-сәләмәт йәшәүеңде ысын күңелем белән, ысын йөрәгем белән теләп ҡалам…*

*Хатыңды уҡығас, шатлығымдан нимә эшләргә лә белмәнем. Минең өсөн шундай бер минут булды ул, мин аны һис-һис онотмаясаҡмын. Билгеле, ул шатлыҡ минутлыҡ ҡына түгел, ә ғүмерлек, мин ул шатлыҡтың ғүмерлек булыуын теләйем хәҙер. Мин һаман-һаман шатмын. Рәсемдәреңә ҡарап туя алмайым, йәшермәй әйткәндә. Аның өсөн мең-мең тапҡыр рәхмәт. Һинән шуны үтенеп һорайым, Нәфисә: рөхсәт ит миңә тәүге ебәргән рәсемеңде йыртып ташламаҫҡа. Һин йыртып ташларға ҡушҡанһың. Үҙең уйлап ҡара: мин ул рәсемде нисек ҡулым етеп йыртайым. Ул рәсемдәр миңә һинең үҙең һымаҡ күҙ алмаһындай ҡәҙерле, мин аны эшләй алмайым, ҡулым бармай, мөмкин түгел. Һин мине ғәфү ит, ләкин үтенәм, һөйөклөм.*

*Был хаттарыңды алғас, мин шатлығымдан нимә яҙырға ла белмәнем. Һин, яҙаһы һүҙе юҡ икән, тип уйлама. Яҙаһы, һөйләйһе һүҙ күктәге йондоҙҙарҙан да күп, ләкин ҡайһы еренән тотоп яҙһам да килештереп булмаҫ төҫлө. Билгеле, ул һүҙҙәрҙе хатҡа яҙып ҡына бөтөрөп булмаясаҡ, ул һүҙҙәрҙе нисәмә томлы роман итеп яҙһам да бөтөрөп булмаясаҡ.*

*Мин ике-өс көн тураһында ғына бер хат яҙғайным. Ул хатты һин әйтә биребирәк ҡуйған бер фекергә яуап итеп (үҙ тиреләрен һаҡлау өсөн мөхәббәтте, намыҫты ҡорбан итеүсе, һатыусы ничтожный һәм махонький кешеләр тураһында). Беҙҙең фекерҙәр ҡушыла, булһа кәрәк. Һуңғы хатыңда беҙҙең фекерҙәр бер-береһенән айырылмайҙар – это самое главное.*



*Һинең Өфөгә ҡайтыу һәм ҡайтмауың тураһындағы мәсьәлә хәҙер асҡерген, тип әйтеп булалыр инде, минеңсә. Тик аны ойошторорға ғына ҡала. Ул турала фекер алышырбыҙ, уйлашырбыҙ һәм килешербеҙ, тип уйлайым. Шулай ҙа, атайың сыҡһа ла, Рәйсәне ҡалдырмасҡа кәрәк булыр, минеңсә, ул бер үҙе нишләр анда? Һине һағыныр, илар. Аныһын үҙең уйларһың һәм яҙырһың. Ҡатмарлыраҡ мәсьәләне атайыңа әйтеү-әйтмәү эше. Әйтһәң, үҙең әйтмешләй, бәләкәй ыҙғыш булыуы ихтимал. Әйтмәһәң, нехорошо һымаҡ. Әгәр һин аңа «мин Өфөгә китәм» тиһәң, аның һорауы мөмкин һиңә: «Нишләйһең анда, кемең бар анда?» – тир. Һөйләп бирһәң, әрләп ташлауы бар, бик ҡыҙыу бит.*

*Ҡыҫҡаһы – үҙеңдең фекерҙәреңде, пландарыңды яҙырһың. Главное и решающее здесь то, что мы друг друга безгранично любим и никакая сила не может нас разлучить теперь.*

*Һинең һуңғы хаттарың минең дә һинең согласие тураһындағы барлыҡ икеләнеүҙәрҙе бөтөрҙөләр. И я сейчас не ошибусь, думаю, если буду считать себя обрученным. Артыҡ булһа ла тағы ҡабатлайым: «Әйткән һүҙ – атҡан уҡ», ә «Вәғәҙә – иман», т.е. обещание – есть клятва.*

*Дүрт ай самаһы ваҡыт бар. Көтөүе оҙаҡ һымаҡ. Һин был хатты 18 март алырһың, тип уйлайым – өс ай ғына ҡала. Главное – терпение, сабырлыҡ. Ышаныслы сабырлыҡ. Немец халҡында был турала оҫта һәм дөрөҫ әйтелгән бер пословица бар (мин пословицалар, мәҡәлдәр яҙып ҡаңғыртып бөтәмдер әле һине). Ул мәҡәлде мин немецса нисек звучит, шулай яҙам: «Geduld briht eisen» тиләр алар. Дословный мәғәнәһе «Терпение ломает железо». Ни тиклем тәрән һәм дөрөҫ әйтелгән был мәҡәл. В этих словах сказано все.*

*Рәсемдәрең өсөн тағы ла ҙур рәхмәт.*

*Минең йүнле рәсемдәр юҡ. Ошо хатым белән асҡерәк ике рәсемде ебәрергә булдым, рәсемдең икеһе лә так себе. Береһен йәй ауылға ҡайтҡанда төшкәйнем. Беҙҙең ауылдың эргәһенән Мәндем тигән бик матур бер һыу аға (Еҙемгә ҡоя), ҡыҙыҡ итеп шул һыуҙың уртаһындағы утрау (островокка) баҫып төштөм. Хәтеремдә юҡ, йәй мин һиңә ниндәй рәсем бирҙем икән. Шуны биргән булһам, ҡабатлау булыр әле. Ғәфү итерһең.*

*Беҙҙең йәйге осрашыу шул тиклем молнееносно тиҙ һәм әҙ ваҡыт булды, мин ул ваҡытта шул тиклем ашыҡтым, нишләгәнемде белмәйем. Йәйге осрашыу матур төш һымаҡ ҡына булды ла ҡалды миндә…*

*Үҙем исән-һаумын. Һиңә лә исәнлек-һаулыҡ теләйем.*

*Өфөлә яҙҙың осо күренә башланы. Көндәр йылына төштө. Иртәле-кисле һыуыҡ булһа ла, көндөҙ йылы була, ҡыйыҡтарҙан тамсылар тама. Быйыл ҡар бик ҡалын яуҙы. Тәжрибәле кешеләр, йыл яҡшы килер, тиләр.*

*Ағиҙел бик шәп ташасаҡ. Өфө халҡы ғәҙәт итеп Иҙелде ҡарай бара. Ташҡан саҡта Иҙел бик интересно, бөтә туғайҙарҙы һыу ала.*

*Һеҙ йәшәгән ерҙә йәй булып, көндәр матурланғас, һиңә бик үк күңелһеҙ түгелдер, тип уйлайым.*

*Тырышып ҡына уҡып, урта мәктәпте тамамла. Уҡыуыңда уңыштар теләп ҡалам. В последних числах июня һин анан ҡуҙғалырһың тип көтәм. Аттестатыңды үҙең белән алып кил, уҡырға бында керерһең. Июлдең баштарында килеп етһәң, һин бер аҙ ял иткәс, Мәскәүгә китербеҙ…*

*Хәҙерге хатымды ошоноң белән тамамлайым. Рәсемеңде түҙемһеҙлек белән көтәм. Хат яҙ, һәр ваҡыт яҙып тор. Мин һинең белән генә шатланам бит. Һинең хаттарың миңә бөтмәҫ-төкөнмәҫ шатлыҡ килтерә. Һәр һүҙең ҡәҙерле, үҙең һымаҡ ҡәҙерле минең өсөн, Нәфисә.*

*Хуш, Нәфисә, хуш, ҡәҙерлем. Һиңә иң һағынышлы сәләмдәрем. 8 март белән ҡотлайым үҙеңде.*

*Һағынып һинең Жәлил. Рәйсәгә айырым сәләм.*

**8 март, 1941 йыл, Карши**

*Дорогой и любимый Жәлил ағай!*

*Һеҙгә иң һағынышлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам.*

*20 февраль яҙған хатығыҙҙы алдым. Киреһенсә, Жәлил ағай, үҙегеҙгә рәхмәт минең һәр бер хатыма ваҡыт табып яуап яҙғанығыҙ өсөн.*

*Дөрөҫ, Жәлил ағай, мин Һеҙгә һис нәмәне йәшермәй, барыһын да асыҡтан-асыҡ яҙғайным.*

*Но обо всем этом я написала не с целью разжалобить кого-либо или еще с какой-нибудь другой целью. Нет. Долго молчать, скрывать я не могла, когда-нибудь должна была написать Вам точную причину.*

*Вот и написала. Я, конечно, не знала, как Вы будете реагировать на это письмо. Некоторое время я даже себя ругала за то, что так откровенно написала. Но письмо уже было написано и отправлено, обратно вернуть его нельзя было. «Әйткән һүҙ – атҡан уҡ».*

*Потом стала ждать от Вас ответа. Ответ пришел. Это Ваше письмо от 17 февраля.*

*А 3 марта получила от Вас еще одно письмо (от 20 февраля). В этом письме Вы пишете, что письмо от 17 февраля написали немного необдуманно, поторопились.*

*Это верно. Мин үҙем тә яуапты ашығыбыраҡ яҙып ебәрҙем булһа кәрәк. Но Вы просили от меня конкретного ответа, а малейшее замедление могло Вас обидеть, так как Вы это могли посчитать за отказ. Поэтому ответ я послала без задержки. Шаг это был серьезный, в этом не может быть сомнения.*

*Вы пишете, что поступили необдуманно.*

*Жәлил ағай, если Вы поступили необдуманно и если Вы раскаиваетесь в этом, это исправить еще не поздно. Между нами еще ничего связывающего Вас со мной не было. Шаг этот очень серьезный, перед тем, как его совершить, действительно, нужно все обдумать и решить.*

*Вы, наверное, понимаете, о чем я хочу Вам напомнить. Это о том, что если Вы свой шаг считаете необдуманным, то можете и еще имеете время обдумать его, как следует. Я Вас люблю, поэтому обижаться на Вас не могу. Со своей стороны я желаю лишь одного – чтобы Вы были счастливы, чтобы Вы в последствии не раскаивались в своих поступках.*

*Һеҙ мине ғәфү итегеҙ, Жәлил ағай, барыһын да асыҡ итеп яҙған өсөн. Хәтерегеҙ ҡалмаһын. Башымда хәтерегеҙҙе ҡалдырыу тигән уй юҡ.*

*Ну вот. Барыһын да яҙҙым, шикелле.*

*Как жалко, что мы находимся так далеко друг от друга. Үҙегеҙҙе лично күргем килә. Я еще раз проклинаю судьбу, так далеко забросившую меня.*

*Жәлил ағай, Һеҙ һуңғы хатығыҙҙа яҙғанһығыҙ – «һиндә мине яратыу өсөн генә яратмайһыңдыр» тип. Белмәйем, Жәлил ағай, ни өсөн ятраҡанымды. Люблю и еще раз люблю – могу ответить я.*

*Тағы яҙаһығыҙ: «А вдруг получу отказ, тогда – гибель». К чему такие трагические восклицания? Ведь как бы ни повернулись наши отношения, все равно от этого никто не погибнет. Но на сердце моем это отразится. Это отразится на всем для меня. Минең Һеҙгә булған мөхәббәтем һис ваҡыт онотолмаясаҡ, Жәлил ағай.*

*Анан тағы Һеҙ ни өсөндөр һәр бер хатығыҙҙа 11 февралдә яҙған хатығыҙ өсөн извиняться итәһегеҙ. Ул хат мине һис обижать итмәне, киреһенсә, рәхмәт Һеҙгә ул хатығыҙ өсөн. Я могу только благодарить за то, что Вы исправляете мои ошибки.*

*Һуңғы хатығыҙҙа мине 3-сө четвертте бөткәс тә ҡайтырға кәңәш бирҙегеҙ (противореча вышесказанным словам). Мының өсөн рәхмәт, ләкин уҡыуҙар бөтөнләй тамам булмайынса ҡайтып булмай. Дөрөҫ, мин Һеҙҙе һағынам, бик күрәһем килә.*

*Придется подождать, чем кончится дело отца. Анан ағайым та быйыл июль айынта уҡыуын бөтөрөп мынта килә. Аңа бөтөн эшләрҙе тапшырырға кәрәк.*

*Так что встреча может состояться только летом.*

*Посылкағыҙҙы алтым. Бик ҙур рәхмәт Һеҙгә. Передаю привет и от имени Райсы, так как она бесконечно рада была.*

*Һеҙ яҙаһығыҙ, что, көндәр бик һыуыҡ, тип. Ә мынта бик йылы. Күлмәксән генә йөрөйбөҙ. Күлдә һыу инә башлаған кешеләр ҙә бар. Үләннәр йәм-йәшел. Ағастар япраҡ ярҙы. Бер айҙан нестерпимая жара начнется.*

*Экзамен ваҡытында не знаешь куда спрятаться от жары. Ищем где прохладнее и учим уроки.*

*Рада, что время у Вас проходит весело. Бергә уҡыған иптәштәрегеҙҙең барыһы ла Өфөлә йәшәйҙәр, тигәнһегеҙ. Это очень хорошо.*

*Беҙ ҙә быйыл бергә уҡыған иптәшләребеҙ белән айырлышабыҙ. Әҙерәк йәл. Бөтөнөһө Ташкентҡа китмәксе уҡырға, бер-ике ҡыҙ Сәмәрҡәндкә китмәксе, мединститутҡа кермәксе.*

*Хәҙер беҙҙә экзаменға әҙерлек башланты. Особенно математиканан эш күп. Немец теленән байтаҡ артта ҡалабыҙ. Уҡытыусылар так себе ғына…*

*Ярай, Жәлил ағай, шат йәшәгеҙ по возможности…*

*Барыһы-барыһы өсөн дә ғәфү итегеҙ, хәтерегеҙ ҡалып ҡуймаһын.*

*Был мине йәнә лә үҙенсә өйрәтмәксе булған, тип уйламағыҙ тағы. Уйланғандарымды яҙҙым да ҡуйҙым.*

*Һау булығыҙ. Һеҙгә иң һағынышлы сәләм. Һеҙҙе һағынып Нәфисә.*

**14 март, 1941 йыл, Өфө**

*Иң ҡәҙерлем, иң һөйөклөм Нәфисә!*

*Һиңә йөрәгемдән ҡайнап сыҡҡан иң ялҡынлы, иң матур сәләмдәремде ебәреп ҡалам…*

*Һинең 8 мартта яҙған хатыңды алдым һәм шул хаттағы бер нисә мәсьәләгә яуап бирергә ашыҡтым.*

*Асыҡтан-асыҡ яҙыуың өсөн бик-бик рәхмәт һиңә, Нәфисә. Дөрөҫ, һинең был хатыңдағы булған бәләкәй генә аңлашылмағанлылыҡ мине бер аҙ беспокоить итте. Сөнки мин уларҙы яҙғанда ундай мәсьәләләрҙе күҙ алдымда тотмағайным һәм ул уй, ул фекер минең башыма ла килгәне юҡ ине. Шуларҙы һин саҡ ҡына яңылыш аңлағанһың, булһа кәрәк.*

*Ул ике мәсьәлә – беренсеһе «необдуманность» һәм «торопливость» мәсьәләһе.*

*Мин бит унда, мәсьәләне уйламай эшләнем һәм ҡабаландым, тип яҙмағайным. Наоборот, мин унда, аҡылым еткән тиклем бар яғын да уйланым, үлсәнем, тип яҙҙым.*

*Һәм мин әле лә шуны әйтәм – сөнки ул серьезный мәсьәлә, мин уны әллә ҡасанан бирле уйлап йөрөнөм һәм яҙҙым. Мин уны һиңә ҡасан булһа ла барыбер йә әйтергә, йә яҙырға тейеш инем. Дөрөҫ, мин яҙҙым унда, что хаттың үҙен (чисто технически) уйлап, матур итеп килештереп яҙманым, ҡабаландым, нисек яҙһам да килешмәгән һымаҡ булды, тип кенә яҙғайным. Йәшермәй әйткәндә, мин ул хатты бер нисә төрлө итеп яҙып ҡараным. Билгеле, яҙған саҡта нисек итеп яҙһаң да килешмәҫ кеүек. Ни хәтле генә уйлап, матур итеп яҙайым тиһәң дә, килеп сыҡмай. Үҙем волноваться итәм һәм ҡабаланам. Ләкин был мәсьәлә тураһында минең необдуманно, поверхностно (спустя рукава ғына) яҙыу тураһында һәм ул поступкыма үкенеү (раскаиваться итеү) тураһында минең башыма ла килгәне юҡ. Һиндә шул фекер тыуыуы мине бик борсоно. Сөнки һин уны уҡып бик борсолғанһың. Возможно, унда стилистически хата киткәндер, ләкин хәтерләмәйем.*

*Вот, я сижу, пишу и до чего волнуюсь и беспокоюсь за то, что эти письма оставили у Тебя именно такое впечатление. Я готов даже отдать Тебе свое сердце, чтобы у Тебя было все хорошо, чтобы Ты была спокойна. Но насчет раскаивания за свой поступок – нет. Тысячу раз – нет, дорогая моя Нәфисә. Әгәр мин һинең тарафтан отказ алған булһам да, раскаиваться итмәгән булыр инем үҙемдең поступкам өсөн.*

*Унан һуң, мин бит һинең ниндәй яуап килерен белмәнем һәм бик волноваться итеп йөрөнөм. Шуға бәйләнә инде юғарылағы яҙған мәсьәләнең икенсеһе. Ул «гибель» мәсьәләһе. Дөрөҫ, әгәр отказ булһа, минең өсөн ул моральный удар булыр ине, гибель для моего внутреннего мира, гибель моих стремлений к вершине любви булыр ине. Мин ул «гибель» һүҙен шул мәғәнәлә генә яҙҙым һәм, уйымды дөрөҫ аңлатҡанмындыр, тип уйлайым. Сөнки һин үҙең уйлап ҡара. Ләкин мин Фридрих Шиллер пьесаһында, йә иһә Гетеның «Вертер»ындағы һымаҡ «гибель»ды, ундағы трагический конецты уйламаным да. Сөнки хәҙер ул заман түгел. Үҙенең хыялына башы етмәгән, үҙенә үҙе баш була алмаған кешеләр әле лә шулай эшләйҙәр, әле һаман ул бөтмәгән, ләкин был глупо. Был инде кешенең көсһөҙлөгөн, йомшаҡлығын күрһәтә. Ундай кешеләр хыялға, сентиментализмға нығ бирелеп, реаль тормоштан йыраҡлаша һәм тора-бара тормоштан ваз кисә. Дөрөҫ, хыялланырға, яратырға кәрәк, анһыҙ мөмкин түгел. Ләкин тормоштоң бөтә матурлығы белән бергә хыялланырға кәрәк, һәм тимер воля, терпение һаҡларға кәрәк һәр ваҡыт, ә «терпение ломает железо». (Мин әллә нимәләр яҙып бутап бөтөрмәһәм ярар ине тағы ла.)*

*Ярай, бик тәрәнгә төшөп китмәйем әле, тағы һине борсололорлоҡ әллә нимә ляпну.*

*«Үткән эштән төш яҡшы» тигән боронғо бабайҙар.*

*Барыбер хатҡа яҙып ҡына бөтөнөһөн дә аңлатып булмаясаҡ. Бына осрашырбыҙ, хәҙер өс ай ваҡыт ҡалды – апрель, май, июнь. Унда инде барыһы ла үҙенән үҙе аңлашылыр, хатһыҙ ҙа.*

*Самое главное теперь то, что мы друг друга безгранично любим и уважаем. Әгәр бына ошо ике нәмә – любовь и уважение икебеҙҙә лә традиционно һаҡланһа (ул миндә һаҡланасаҡ), беҙ һәр ваҡыт бәхетле булырбыҙ.*

*Теперь нам нужно думать о другом. Это – твоя дальнейшая учеба. Я очень и очень хочу, чтобы ты не остановилась на полпути и училась дальше до получения высшего образования. Я очень хочу, чтобы Ты изучала медицину. Я очень*

*люблю и уважаю ее. Иногда я жалею, что не пошел в медицинский. Жалею так же, что ушел из Башмединститута. В 1938 году я начал там работать – преподавать иностранных языков. Но с организацией в Уфе института иностранных языков меня попросили работать там. Я согласился и ушел из Башмединститута. Коллектив там был очень хороший. Вообще Башмединститут славится здесь – там очень много профессоров, докторов наук, доцентов и т.д. Медицина – это великое дело…*

*Душой и сердцем рад, что Ты получила посылку. Я очень беспокоился за нее. Рад так же и за Райсу. Әйткәндәй, Рәйсә бит, быны кем ебәрҙе, тип һорайҙыр әле, бәләкәйҙәр бик любопытный булалар, барыһын да һорайҙар. Лотфый быйыл институтты бөтәме ни? Ул, кажется, сельскохозяйственныйҙа… Тимәк, ул һеҙҙең янға ҡайтырға тейеш, алай булғас.*

*8 март ике рәсем ебәргәйнем, алғанһыңдыр. Яңы төшкәне 20 апрель көндө өлгөрә, унынһын специально һиңә ебәрергә тип төштөм. Бәхетең нисек булһа ла, ебәрермен. 8-ендә ебәргән рәсемдәр былтырғылар, икеһе лә так себе.*

*Ебәргән рәсемдәрең өсөн тағы бер тапҡыр рәхмәт.*

*Хатымды тамамлайым. Һинән түҙемһеҙлек белән хат һәм рәсемеңде көтөп ҡалам.*

*Хуш йөрәгем, берҙән-бер һөйөклөм. Сәләм белән, һағынып Жәлил.*

**22 март, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклөм, ҡәҙерлем Жәлил!*

*Һиңә йөрәгемдән ҡайнап сыҡҡан иң һағынышлы сәләмемде ебәреп, иҫәнлек-һаулыҡ теләп ҡалам.*

*14 мартта яҙған хатыңды алдым. Я извиняюсь перед тобой. Я виновата, потому что не так поняла твои слова, как хотел Ты сказать. Еще раз прошу – прости меня. Я своей глупостью причиняю Тебе столько неприятностей…*

*Мин һине һис ваҡытта ла Вертер белән сағыштырғаным юҡ. Мин Шарлотта түгел, анан тағы беҙҙең арала Альберт та юҡ, который мешал бы нам любить нам друг друга. Я, в отличие от Шарлотты, люблю Тебя больше всего на свете, больше жизни, больше… всего.*

*Хатҡа яҙып барыбер быларҙы аңлата алмайым, билгеле. Мына осрашырбыҙ, мин барыһын да әйтеп бирермен. Һин яҙаһың, мой любимый, что икебеҙҙә лә традиционная любовь и уважение һаҡланырға тейеш (причем подчеркиваешь, что һиндә һаҡланасаҡ), как по-твоему, ә миндә һаҡланмаясаҡмы? Как ты можешь сомневаться в безграничной преданности и любви к Тебе. Я уже не нахожу даже слов, которые могли бы объяснить все, что я к Тебе чувствую. Я люблю Тебя и до самой смерти буду любить только Тебя.*

*Насчет «гибели» тоже смешно вышло, я опять не то подумала. Я думала, что Ты уже просто так приписал это слово. Видишь, я ничего не скрываю от тебя, пишу все, что думаю. Правда, бывают случаи, когда лишней откровенностью обидишь человека, но Ты на меня не обижайся, прошу Тебя. И Ты пиши все, что думаешь, я не буду, да и не могу на тебя обижаться. Я знаю, что допускаю много ошибок различного рода, за которые самой в последствии бывает неудобно, а Ты о них мне ни разу не написал. Пиши.*

*Немного о Твоем письме от 5 марта. Получив его, я чуть не плакала. Мне очень стыдно стало за себя. Ты дал мне хороший урок. Благодарю Тебя, мой дорогой и любимый. Но с получением этого письма я люблю Тебя сильнее прежнего. Ләкин ғәфү ит мине, һинең хәтереңде ҡалтырғанмын. Это никак не могу простить себе.*

*Да, дорогой Жәлил, на свете много людей, которые ради защиты себя, своей шкуры, готовы жертвовать чем угодно. Такие люди есть как среди мужчин, так и женщин. Я тоже предпочитаю смерть, чем совершить такую подлость. Хорошо, что наши мысли взгляды сходятся. Это – самое главное. Иначе и быть не может.*

*Как видишь, письмо это выходит какое-то бессмысленное. Но на это имеются причины. Я сначала хотела Тебе пояснить их, но отложила немного к концу.*

*Дело в том, что я вот эти два дня была плохом настроении (ты сейчас можешь подумать «опять плохое настроение». Но на это имеется основание). В данное время я немного спокойна, это от того, что получила от Тебя письмо. Оно внесло радостное чувство в мое сердце, оно напомнило мне, что я еще на свете не одна.*

*Я объясняю Тебе все по порядку.*

*Насар настроениела булыуымның сәбәбе – семейные обстоятельства. Представьте себе: у меня нет ни одной спокойной минуты. Вечно неприятности. Это влияет и на учебу. Вот и теперь – кончили III четверть. Пришлось усиленно заниматься, сильно устала, голова болит, поэтому оценки за эту четверть получила не очень похвальные. У меня в табеле оказалось пять «посредственно». По этим предметам я хотела дополнительно подготовиться и пересдать, но здесь случилось маленькое происшествие, которое помогло закрепить за мной вышеуказанные отметки. Получилось так:*

*Әтейем белән ултырған кеше сыҡҡан. Ул беҙгә килеп, әтейемдең хаттарын бирҙе. Вместе с письмом было его заявление, которое немедленно нужно было переписать и отправить с почтовым поездом. А для того, чтобы отправить, нужно ехать на станцию (8 километров). До прихода поезда оставалось мало, но я, правда, успела. А обратно вернуться пришлось пешком, потому что сломалась машина, ждать, пока ее исправят, очень долго. Когда я пришла домой, было уже четыре часа. Я опоздала в школу, да и устала. Все равно, хотя бы и пошла, не смогла бы пересдать пять предметов. Я так и не пошла в школу. И отметки те сохранились, таким образом, за мной.*

*На другой день встала усталая и расстроенная. Ничего не хочется делать. В это самое время опять приходит другой человек. Тоже с поручением от папы. Но это поручение уже не такое, как первое, а более серьезное. Оно было вот такое: бросить учебу и немедленно ехать в Москву к товарищу Сталину вместе с Райсой для того, чтобы хлопотать о нем. Причем пишет мне, что, если я этого не сделаю, то он «погибнет». Велит быть настойчивой, ничего не бояться, быть уверенной, потому что «я еще молода и у меня будущее впереди», вот выйдет он, и я снова буду продолжать учебу. Ну вот. Подумай о безрассудности этой просьбы!*

*Мне стало очень обидно. Неужели я всю свою жизнь должна жертвовать своими личными интересами в угоду интересов отца. Ведь не мало было уже жертв.*

*Бросить учебу. Ведь до испытаний осталось каких-нибудь два месяца. Выходит, я зря проучилась целый год, и у меня не будет аттестата даже. Мне и сейчас неприятно учиться все еще в 10 классе. А, если сделать так, как велит отец, то мне до 30 лет нужно сидеть в средней школе или совсем не учиться, остаться всю жизнь недоучкой. Выходит так.*

*Да, ведь пользы от такой поездки не будет. Ладно, пусть я поеду в Москву (уже не говоря о том, что я там никогда не была), найду кого нужно, обращусь*

*к кому надо. Сколько нужно перетерпеть унижений, чтобы попасть в Кремль. Он так и пишет «не пустят – нужно плакать». Но ведь я не хочу притворяться, обманывать. А потом что? Что же я могу рассказать? Ведь я абсолютно не в курсе дела. Я же не работала с отцом, не знаю точно, за что он сидит и почему.*

*Все эти вещи меня сильно расстроили.*

*Что мне делать? На этот вопрос я сама себе ответила, что я не могу и не буду этого делать. Сама думаю, что я права. Да, я не сделаю того, что он требует от меня. Пусть придется мне с ним поссориться навеки, пусть я буду, быть может, плохой дочерью и т.д. и т.п., но такого безрассудного, бесполезного поступка, бесполезной траты времени, энергии и т.д. – я делать не буду.*

*Советоваться мне не с кем, да и не привыкла я обращаться за советом к кому-либо. Если обратиться за советом к его друзьям, то они скажут «езжай», а мои друзья… Они еще не могут разобраться в этих сложных делах, но уверена, что они были бы против.*

*Я еще тысячу раз пожалела, что мы не вместе. Я хотела бы узнать Твое мнение по этому поводу. Ведь каждое Твое слово дорого для меня.*

*Ну вот. Таким образом, я первый раз в жизни поступила не так, как мне велят, а так, как сама хочу. Может быть, я не права. Тогда не знаю.*

*Но у меня тот же вопрос опять возникает. Неужели я все время должна думать об интересах других, хотя бы они были против моих собственных.*

*Об этом, может быть, не следовало бы писать Тебе, беспокоить Тебя всякой всячиной, но извини меня. У меня нет никого кроме Тебя, которому я рассказала бы обо всем, что беспокоит меня. Ты для меня все – друг, старший товарищ, любимый и т.д. Напиши мне свое мнение.*

*В данное время я сильно расстроена, быстро раздражаюсь даже из-за пустяков. Если бы не Ты со своими письмами, то я готова ужу сделать что-нибудь, достойное Гетевским и Шекспировским героям, потому что даже люди с железной силой воли и те со временем могут впадать в панику, а я тем более.*

*Вот в этом настроении я была, когда получила Твое письмо. Оно меня обрадовало, конечно. Ничто не может на меня действовать так успокоительно, как Твои письма. Я очень благодарна Тебе.*

*Хотела еще о чем-то написать, но забыла. Да, о твоих фотокарточках. Почему Ты говоришь, что они так себе? По-моему лучше их быть не может на свете никаких карточек. Про мои ничего мне не говори, не благодари, мне стыдно за них. Вот снимусь во время каникул, пришлю Тебе, и тогда я буду вправе просить порвать прежние.*

*С 23 марта по 1 апреля будут каникулы. Отдохну немного, мне очень неудобно признаться Тебе, что я очень устала. Скоро экзамены, боюсь, сдам ли все.*

*Насчет медицины. Относительно ее у меня еще нет плана или стремлений. Об этом еще не приходилось задумываться. Медицина и педагогика – подходящие специальности для нашего пола. Некоторые девушки стремятся стать инженерами, строителями, пилотами, капитанами дальнего плавания. Но у меня наклонности к этим штукам нет. Правда, только в детстве под влиянием прочитанной литературы, хотела быть капитаном, да еще дальнего плавания. Но теперь думать об этом смешно.*

*Боюсь, что в мединститут будет трудно сдать экзамен в Уфе. Условия приема в вузы там труднее, наверное, чем здесь. Вдруг не сдам? У меня «отлично» по немецкому языку, но это только здесь. Ведь мы отстали от программы, а там требования, наверное, серьезные. И так, у меня окончательного решения по этому поводу нет.*

*При встрече поговорим. Я думаю, что у нас будет, что рассказать друг другу, не правда ли, мой дорогой, мой любимый Жәлил?*

*Да, посылку получила. Тағы ла рәхмәт аның өсөн. Рәйсә, действительно, кем ебәрҙе мыны, тип һораны, аңа ялған яуап бирҙем, әлбиттә. Ул бик любопытная, все интересует ее. Она надоедает своими вопросами.*

*Лутфый ағайым быйыл уҡыуын бөтөрә, ләкин ул сельхозда түгел – учительскийҙә. Бөтөргәс, ҡайҙа ебәрерҙәр инде... Ему хорошо, спокойно, он ни о чем не думает. Миңә генә барыһы өсөн дә отдуваться приходиться. Он еще мне пишет принеприятные письма с такими советами – сходи к прокурору, сходи к судье, еще куда-нибудь, оставь заявление от своего имени и от имени отца туда-то, сюда-то. А чтобы самому взять написать или что-нибудь сделать, он не сделает. Ему «некогда». Да, окончит учебу и будет «великим» учителем в 40 лет. Если бы кто-нибудь другой учился столько, то академию кончил бы.*

*Ярай, шуның белән бөтөрәйем хатымды. Бик оҙон булды, уҡый-уҡый ялҡып бөтөрһөң. Ҡалған һүҙҙәрҙе киләһе хатымда, каникул ваҡытында яҙырмын. Тогда спокойнее буду себя чувствовать.*

*Ғәфү ит барыһы өсөн дә, хаталары ла, килешмәгән ерҙәре лә күптер.*

*Карточкаңды көтәм. «Бәхет, нисек сыҡһа ла» тигәнһең. Һин һәр ваҡыт яҡшы сығаһың, тимәк – мин бәхетле.*

*Мәнтем буйында төшкән рәсемең минең өсөн бигерәк тә ҡәҙерле. Она доставляет для меня радость, так как это подножье Урала и окрестность Твоей родной деревни. Все, что связано с Тобой, Твоим именем, дорого для меня. Как хорошо звучит – Ҡаран-Йылға. Теперь это слово дорого и близко мне, так как это Твоя родная деревня, Ты родился там, һәм анда Һинең атайың белән әсәйең. Какое счастье произносить слово «әсәй». Я недолго пользовалась этим счастьем, да и слово «әсәй» не употребляла. Только теперь я понимаю, что плохо владею родным языком, но надеюсь, что под Твоим руководством я научусь нашему языку.*

*Напиши, как живешь? Ты очень мало о себе пишешь. Пиши больше. Мне очень хочется знать о твоих родителях, есть у тебя братья и сестры, сколько их, где они.*

*Һиңә иң һағынышлы, иң ялҡынлы сәләмем.*

*Һине һағынып, любящая Тебя Нәфисә.*

*Целую Тебя, мой любимый. Хуш.*

*P.S. Я бросила всякий стыд и перешла на «Ты». Без привычки трудно.*

*Хотела переписать, так как очень небрежно написано, но посморела на часы. Нужно собираться в школу. Письмо начала писать вчера ночью, закончила только сейчас.*

*Еще раз целую. Һау бул. Мин мәктәпкә китәм.*

**Редакцянан: йәш Жәлил Кейекбаев менән Нәфисә Халиҡованың хаттарына аңлатмаларҙы Зөһрә Кейекбаева дауам итә.**

(Хәлил олатайыбыҙ өлкән ҡыҙын Мәскәүгә барырға өгөтләй, сөнки, ҡыҙы күп нәмә эшләй ала, тип уйлай. Ғилләһе шунда: ун биш кенә йәше тулғанда әсәйебеҙ үҙ инициативаһы менән, Мәскәүгә — «эшен» тикшертеп ҡарауын һәм атаһына ярҙамлашыуын үтенеп, Муса Мортазинға мөрәжәғәт итә. Хәлил Халиҡов Граждандар һуғышы йылдарында Башҡорт дивизияһында айҡашып йөрөй, Муса Мортазинды шәхсән таный. 1937 йылдың майында, ҡулға алынмаҫ борон, Муса Мортазин үҙ дивизияһының элекке боецына ярҙам итеп өлгөрә: илебеҙҙә юғары вазифа биләгән кемдәндер

ҡултамғаһын ҡуйҙыртып, Халиҡовты һәм уның дуҫын арестан ҡотҡарыу буйынса күрһәтмә бирелгән ҡағыҙ ебәртә. Шуға күрә лә олатайыбыҙ ғүмеренең ахырынаса, гүргә ингәнсе М. Мортазинға рәхмәтле булды. Ғүмеренең һуңғы йылдарында олатайыбыҙ Мортазин хаҡында документтар йыйҙы, Башҡортостан комдивын шәхсән белгән, мәҫәлән, Буденный кеүек кешеләр менән осраша, урындағы һәүәҫкәр тарихсыларға Муса Мортазиндың эшмәкәрлеген юғары баһалаған ана шундай күренекле заттарҙың яҙма фекерҙәрен тапшыра. Хәлил олатайыбыҙ республика етәкселеге Мортазинға ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәртһен өсөн күп көс һала.)

**31 март, 1941 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерлем, һөйөклөм, берҙән-берем, Нәфисәм!*

*Һиңә ялҡынлы сәләмдәремде ебәреп ҡалам. 22/Ш яҙъан хатыңды алдым. Рәхмәт, Нәфисә, асыҡ күңелле булыуың өсөн рәхмәт, бик шатландым. Һинең миңә ҡарата асыҡ булыуыңды мин һис маҡтап һәм баһалап бөтөрә алмайым. Бына шул асыҡлыъыҡ өсөн мин һине таъы ла көслөрәк яратам, һис-һис шикләнмәй яратам. Бер ваҡытта ла, шикләнә икән был, тип уйлама, һәм ул уйҙы башыңа ла килтермә. Һин аңа ике икең дүрт тигәнгә ышанъан һымаҡ ышан. Мин дә шулай ышанам.*

*Һин хатыңда ъәфү үтенгәнһең. Минеңсә, һинең ъәфү үтенерлек һәм ъәфү итерлек бер нәмә лә юҡ, Нәфисә. Һәр хәлдә, ул ъәфү үтенерлек енәйәт түгел, бик-бик бәләкәй бер нәмә…*

*Хәҙер туранан-тура һин яҙъан Мәскәүгә китеү мәсьәләһенә күсмәксе булам. Мин ул турала кисәнән бирле уйлап йөрөйөм. (Хатыңды кисә алъайным.) Мин ул турала әллә ниндәй бер яңылыҡ яҙыръа йыйынмайым, билгеле. Минең фекерҙе һин үҙең дә яҙъанһың. Шуъа күрә мин быъа бик күп туҡталмайым.*

*Уҡыуыңды ташлап Рәйсә белән Мәскәүгә китеү – ул бессмыслица. Һин үҙең уйлап ҡара – анда барып һин нимә эшләй алаһың? Бер нәмә лә эшләй алмайһың. Тик физически (һәм морально) таланып (мучиться итеп) йөрөп ҡайтыуың булыр. Между прочим, Мәскәүҙә бер бик интересный, шуточный пословица бар, ул үҙе бик дөрөҫ – «Москва слезам не верит» тиҙәр. Бының белән мин нимә әйтергә теләйем. Анда бер нәмәһеҙ барып ни мәъәнә? Һин бит бер нәмә лә белмәйһең. Барһаң да, шул яҙып ҡалдырыуҙан башҡа артыҡ нәмә эшләй алмайһың. Ә аны яҙайым тиһәң – Каршиҙан тороп та яҙа алаһың. Шуъа күрә һин ул турала бик расстраиваться итмә. Билгеле, ул һинең өсөн неприятность, ундай хәл һәр кем белән булыръа мөмкин. Сөнки «бәлә аъас башынан йөрөмәй, кеше*



*Ж. Кейекбаев атаһы Ғиниәт, әсәһе Ғәрифә, ҡыҙ туғандары Ғәйшә, Фатима, Хәтифә менән. Ҡаранйылға. 1939 йылдың йәйе.*



Ж. Кейекбаев Ғәфүр энеһе менән. 1939 йыл.

башынан йөрөй» тиҙәр. Үҙең уйлап ҡара – һин расстраиваться итеү менән ул барыбер еңеләймәй, үҙгәрмәй. Ул һаман үҙенең ыңғайы белән йөрөй. Шуға күрә күңелһеҙ хәлгә бик тәрән бирелеп китмә. Сөнки ул һинең нервыларыңды ғына ҡаҡшата. Беләм, һиңә ауыр, Нәфисә. Аны шул ауырлыҡты кисерә белергә кәрәк. Түҙергә тура килә. Рух төшөңкөлөгөнә бирелмә. Хисләреңдән еңелмә.

Хәҙер һинең алда иң яҡын, иң беренсе бурыс – ул да булһа – урта мәктәпте бөтөрөү. Был инде нигеҙ.

Мин барыһын да аңлайым. Һинең хәлде, һәм, шулай булыуға ҡарамаҫтан, ошо кәңәште биргән булам. Беҙҙең ара йыраҡ булһа ла, мин һәр минут һинең белән, Нәфисә. Минеңсә, һин һәм мин (йәғни икебеҙ) бер бөтөн хәҙер. Расстояние здесь не играет никакой роли, ибо для любви нет расстояния.

Хәҙер осталось каких-нибудь три месяца, а потом мы – вместе. Һинең уҡыуыңда хәҙер һуңғы сирек башланды һәм ай ярым уҡырға ҡалды, анан экзамендар. Һин хәҙер тик уҡыуыңды ғына бел, Нәфисә. Урта мәктәпте бөткәс, күңелеңә оҡшаған институтҡа керерһең. Минең торған ер пединститут эргәһендә генә.

Минең фекерем шулай һәм, мин яңылышмайымдыр, тип уйлайым, башҡа кәңәш бирә алмайым. Үҙең дә дөрөҫ фекерҙәһең.

«Прости за глупости» тигәнһең. Ну, Нәфисә, бында, минеңсә, бер ниндәй глупость та юҡ, что һин. Һис хәтереңә ҡалмаһын, уйлама ла.

Да, һин права, у нас будет, что рассказать друг другу, осрашҡас. Хатҡа ғына яҙып һүҙ бөтәме ни. Ярай әле хат яҙыуҙы уйлап сығарғандар.

Үҙемдең хәлдәргә килгәндә, иҫән-һаумын. Һаман бер көйө генә эшләп йөрөгән булам, уҡытыу сәғәттәрем дә бар, ләкин әҙ, сәғәттәрем апрелдә бөттө. Унан балаларҙан экзамен алам да тынысланам. Мин немец теленең тарихын уҡытып аҙапланған булам өлкән курс балаларына.

Кисә ял көнөн бик күңелле генә үткәрҙем. Иптәштәр килеп ултырҙылар. Минең ике ҡурайсы иптәшем бар, шуның береһе килгәйне, көндөҙ туйғансы ҡурай уйнаттыҡ, кис ул үҙе саҡырҙы, анда барып әкиәт һатып, йырлап, шахмат уйнап ултырҙыҡ. Кисә көндөҙ көн бик һәйбәт ине – йылы, ҡар эрей, урамдан йылғалар аға. Өфөлә яҙ хәҙер.

Атайым һәм әсәйем иҫән-һау йәшәйҙәр, бик һәйбәт торалар, хаттары килеп тора. Атайым февралдә килеп ҡайтҡайны, был арала килгәне юҡ әле. Оҙаҡламай Иҙел боҙо китһә, килә алмаҫ инде. Унан йәй уның эше күп. Ул баҡсала ҡорт тәрбиәләй, әсәйем шул өй эше белән булаша. Бер туған ҡарендәштәрем ауылда мәктәптә уҡыйҙар. Береһе Рәйсә һымаҡ бәләкәй. Минең үҙемә йәтеш бер туған энем бар ине, ул былтыр Финляндия фронтында һуғышта үлеп ҡалды. 21 февралдә үлгән, иптәштәре ниндәй обстановкала һәләк булғанын подробно һөйләп бирҙеләр. Ҡыйын булды, конечно, туған бит. Әсәйемә бик ҡыйын булды. Кажется, мин ул турала һиңә һөйләгәйнем һәм икәүләп төшкән рәсемде лә күрһәткәйнем, буғай.

Двоюродный туғандарым күп. Атайымдың бер энеһе тау яғында лесной эш


Ж. Кейекбаев — педтехникум студенты. 1930 йыл.

*буйынса эшләй, тауҙа тора. Бер энеһе ауылда колхоз председателе. Әсәйемдең энеһе колхозда счетовод, бер энеһе ауылда уҡытыусы. Уҡытыусы энем (миңә өс туған) Финляндия фронтында теге үлгән энем белән булды. Ул еңел ранен булып ҡайтып килде, хәҙер уҡытыусы.*

*Туғандарым, ғәжәп, мине бик яраталар. Ауылға ҡайтһам, ҡунаҡтан-ҡунаҡҡа йөрөтәләр. Бороңғо ҡунаҡ йөрөшөү, бал ҡойоп саҡырышыу беҙҙең тирәлә әле һаман шул көйөнсә һаҡлана.*

*Ауылдан сығып киткәнгә хәҙер теүәл 15 йылдан артығыраҡ. Ләкин һаман йәйҙәрендә ҡайтып йөрөйөм. Тәүлә мин Мырҙаҡай ауылында (беҙҙең күрше ауыл) башланғыс мәктәп бөтөрҙөм. Унан һуң Красноусольскийҙа урыҫ башланғыс мәктәбен бөтөрҙөм. Ул дублировать ниңә кәрәк булғандыр инде. Атайымдың аҙабы инде – «Урыҫса өйрән» тип ҡаты ғына бойорҙо ла Красноусольскийға алып барҙы ла ташланы мине. Эй, ҡайтҡы килә торғайны. «Знаком»дарҙа торғайным. Анда ике йыл уҡыным. Шулай ҙа кис малайлары белән һуғышып йөрөй торғас, русса өйрәндем. Мине тәүлә 1 класҡа ултыртҡайнылар. Шунан сразу III класҡа күсерҙеләр, ике йылда бөтөрөп сыҡтым. Аны бөткәс, Маҡар 7 йыллыҡ мәктәбенә киттем. Ул мәктәпте өс йыл уҡып, бик уңышлы тамамлап сыҡтым. Унда уҡыу бик һәйбәт ҡуйылғайны. Ул мәктәпте тамамлағас, Өфөгә педтехникумға ебәрҙеләр. Ул ваҡытта уҡыуға разверстка белән ебәрә торғайнылар. Ҡулыңда разверстка булһа, обязательно алынаһың инде, ул булмаһа, алмай торғайнылар. Техникумды өс йыл уҡып тамамлап сыҡтым, «вуд»ҡа бөттөм, между прочим. Ул ваҡытта иң яҡшы отметка «вуд», йәғни «весьма удовлетворительно» була торғайны. Справкаһы әле лә һаҡлана. Техникумды бөткәс, уҡытыусы булып китергә тейеш инем. Әллә нишләп китергә тура килмәне. Шул көҙҙө үк малайлар белән Мәскәүгә уҡырға киттем дә барҙым – 1932 йылдың көҙө. Тоже разверстка белән киттем. Һис һүҙһеҙ барып керҙем Сит ил телдәре институтының немец теле факультетына, даже экзаменһыҙ алдылар, сөнки техникумды «вуд»ҡа бөткән инем. Немец телен генә әҙерәк һоранылар шунда. Бик ныҡ тырышырға тура килде, бигерәк тә рус теленән. Биш йыл уҡыным ул института, 1937 йылда тамамлап сыҡтым. Йәйҙәрендә Өфөгә каникулға ҡайта торғайным һәр выҡыт. Институтты тамамлағас, үҙем теләп бер йыл под Москвой эшләнем – урта мәктәптә немец теленән уҡыттым. Башҡортостанға бик ҡайтҡы килә торғайны. Мине ҡайтармаҫҡа тырыштылар, ҡайттым шулай ҙа. Өфөгә 1938 йыл ғына ҡайттым. Ҡайтҡас тағы Өфөлә эшләргә насип булманы. Бәләбәйгә киттем. Өфөгә 1939 йыл яҙға табан ғына ҡайттым окончательно. Бына инде хәҙер Өфөлә ике йыл торам…*

*Шулай итеп, ғүмеремдең яртыһынан күбеһе уҡып үтте. Институтта эшләй башлағас, сразу завуч итеп ҡуйҙылар, ул бик мәшәҡәт эш икән үҙе – уҡытыусының эше куда тыныс. Йәй булғас, ике ай тик йөрөй.*

*Студент саҡта мин шиғриәт белән ҡыҙыҡһына торғайным, между прочим. Хәҙер ташланым, аның белән булырға ваҡыт юҡ просто. Ул ваҡытты бик күп ала, ул үҙе насар эш түгел, билгеле.*

*Өфөлә туғандарым юҡ. Ләкин бик һәйбәт, йән дуҫ ике иптәш бар. Йән дуҫ*

*тигәс тә, һин алар беҙҙең (һинең) турала барыһын да беләләрҙер, һөйләгәнмендер, тип уйлама. Башҡа таныштар ҙа бар эш буйынса, билгеле.*

*Өфөлә «Салават Юлаев» картинаһы барҙы, аны күрҙем, бәлки, һеҙҙә лә барғандыр. Кино, театрларға йөрөгөләйем.*

*Көндәрем, сәғәттәрем, хатта минуттарым тик бер һине уйлап ҡына үтә, Нәфисә. Мин һинең белән генә, һәр ваҡыт һинең белән генә, Нәфисә. Ләкин расстраиваться итеп, насар настроенияла йәшәмә, нервыларыңды, сәләмәтлегеңде һаҡла. Бына нимә, Нәфисә.*

*Мин һиңә бер һорау бирәйем әле. Һеҙ бит өсәү йәшәйһегеҙ, ә йортта эшләүсе юҡ. Һин уҡыйһың, материально нисек йәшәйһегеҙ? Настроениегә ул да бик тәьҫир итә. Мин уны үҙемдең опыттан беләм. Һин асыҡтан-асыҡ яуап бир һәм асыҡтан-асыҡ яҙ. Был һорауҙы биргәнгә ғәфү ит. Мин уны күптән үк яҙайым тип йөрөй инем. Һин асыуланма, хәтерең ҡалмаһын. Был минең тарафтан булған любопытство түгел. Сөнки был мәсьәлә основа всех основ, определяющая все. Мин мәсьәләне конкретно ҡарарға яратам. Вот шулай. Барыһын да асыҡтан-асыҡ яҙыуыңды һорайым, һин смущаться итмә.*

*Йә, һиңә әллә ҡасан уҡ на «ты» күсергә кәрәк ине, мин быны яҙырға йөрөй инем. Ну, хорошо.*

*Беҙҙең ара йыраҡ, ә йөрәктәребеҙ белән ниндәй яҡын беҙ бит һинең белән, Нәфисә. Яҡындарҙан да яҡыны һин, һөйөклөм, Нәфисә.*

*Ярай, хуш, һөйөклөм. Һиңә иң ҡәҙерле сәләмдәремде ебәреп ҡалам. Рәйсәгә сәләм.*

*Һағынып һинең Жәлил.*

*Хәҙер сәғәт 2. Апрель башланды.*

*Крепко, крепко целую, дорогая.*

(Атайыбыҙҙың берҙән-бер ҡустыһы Ғәфүр Кейекбаев ҡарлы яланда яраланып ятҡан яҡташын ҡотҡарырға теләгәндә фин снайперы пуляһынан һәләк була. Ул ялан уртаһындағы яралыға шыуышып барып етә лә уны үҙҙәренең яғына өҫтөрәй, һәм улар хәүефһеҙерәк урынға еттек тигәндә генә, Ғәфүргә пуля тейә. Яҡташы иҫән ҡала, ауылға ҡайта һәм үҙенең ҡотолоуы, Ғәфүрҙең һәләк булыуы хаҡында һөйләй. Ғәфүрҙең Ленинград өлкәһенән өлкән ағаһы Жәлилгә 1940 йылдың февралендә, үлеменән аҙ ғына алдараҡ, яҙған хаты һаҡлана.


*Ж.Кейекбаев — Мәскәү сит телдәр институтының 1 курс студенты. 1932 йыл.*

Атайым әлеге хаттарында үҙенең дүрт йәштән ғәрип ҡалыуын яҙмай. Асылда уның атаһы тимер сынйыр менән үгеҙгә һуғырға теләгәндә яҙатайым үҙенең бәләкәй улының һул тубығына тейҙерә. Тубығының һөйәге сатнай, аяғы артҡа бөгөлә һәм ҡабат турайммай. Кескәй Жәлилгә атаһы ағас аяҡ эшләп бирә лә уны тубыҡ бөгөлөнә бәйләп ҡуя. Ул ана шулай үҫә, йәше өлкәнәйгән һайын ҙурырак «аяҡ» бәйләйҙәр, Жәлил иһә тиңдәштәре менән бер ҡатарҙан уйнай, мәктәптә уҡый, шулай уҡ һәр яҡлап атаһына ярҙам итә — ысын ирҙәр башҡарырға тейешле һәр эште үтәргә өйрәнә. Атайым бик көслө ине, уның ҙур ҡулдары матур ине.

Атайым бер ваҡытта ла, ағас аяҡта һәм ҡултыҡ таяҡтарында йөрөп йәшәүе һәм уҡыуы ауыр булды, тип



Ж.Кейекбаев—1939 йыл.

зарланмай торғайны. Ул бер ваҡытта ла Маҡар мәктәбендә уҡыған йылдарында үҙен усал шаяртыуҙары хаҡында ла һөйләмәне. Мәҫәлән, иртәнсәк мәктәпкә ҡабаланырға кәрәк, ә ятаҡ малайҙары уның ағас аяғын йәшереп ҡуйғылай, шунан уны үҙенә бирмәй, туп урынына һикертеп мыҫҡыл итәләр. Был хаҡта инде атайым үлгәс, оло үкенес һәм оялыш менән заманында уның менән бергә уҡыған ҡарт синыфташы һөйләне.

Красноусольскийҙағы рус ғаиләһендә фатирҙа торғанын атайым һәр саҡ йылы һәм рәхмәтле һүҙҙәр менән иҫләр ине, хужаның малайҙары менән һуғышыуын һис тә телгә алмай торғайны. Киреһенсә, үҙенә фатир эйәләренең һәйбәт мөнәсәбәте хаҡында һөйләр булды. Хужабикә уға гелән тауыҡтан, һарыҡ итенән айырым аш бешергән, сөнки башҡорттарҙың сусҡа ите ашамауҙарын белгән, ә үҙҙәренә уны йыш әҙерләгән. Атайым рус малайҙары менән ҡыштарын тауҙан шыуыуы, уларҙың үҙен саңғыла шыуҙыртыуҙарын, хатта уға һыныҡ салғынан һыңар коньки әтмәләп биреүҙәрен һәм уны күл боҙо өҫтөндә елдертеүҙәрен һөйләр ине.

Атайым ағас аяғында һәм ҡултыҡ таяғында Мәскәүгә барып, Сит телдәр пединститутына уҡырға ингәс, уға Мәскәү хирургтарына мөрәжәғәт итергә кәңәш бирәләр. Бына шулай итеп, Мәскәүҙә егерме ике йәшендә операция яһатҡандан һуң, атайыма ағас аяҡ һәм ҡултыҡ таяҡтары кәрәкмәй башлай, зәғиф аяғын төҙәйтәләр, әммә инде ул ҡабат бер ҡасан да бөгөлмәй һәм уң аяғынан бер аҙ ҡыҫҡараҡ була, ләкин быны ла атайым оло бәхеткә һанай. Әлбиттә, ул ғүмеренең аҙағынаса аҡһаны, мәгәр таяҡһыҙ ҙа йөрөнө.

1937 йылда Мәскәү сит ил телдәре пединститутын тамамлап, Башҡортостанға ҡайтырға йыйынғас, атайым үҙенең дуҫы Шакир Насировтан хат ала. Уныһы, ныҡышып тигәндәй, уға ҡайтмаҫҡа тәҡдим итә, сөнки был осорҙа Өфөлә, Башҡортостанда репрессиялар башлана. Атайым институт етәкселәренән үҙен Мәскәүгә яҡын берәй ҡалаға ебәреүҙәрен үтенә, һәм ул бер йыл Рошаль ҡалаһында немец теле уҡытыусыһы булып эшләй.

Атайым поэзия менән мауығып ҡына ҡалманы, поэтик талантҡа ла эйә ине. Был һәләте уға донъяны үҙенсә күрергә һәм телде аңларға күп йәһәттән йоғонто яһаны. Ләкин үҙен фәнгә бағышларға ҡарар иткәс, ул шиғриәткә ваҡыт бүлмәҫкә ҡарар итә. Үҙенең һөйләүенсә, ул шәхси етәкселегендә фән менән шөғөлләнергә теләүсе студенттарҙан һәр саҡ, һин шиғыр яҙаһыңмы, тип һораған. Әлбиттә, шиғыр яҙғандар уға был хаҡта ҡыуаныс менән белдергән. Шунан инде профессор Кейекбаев уларға артабан да поэзия менән шөғөлләнергә тәҡдим яһай һәм үҙенә аспирантлыҡҡа алмай, сөнки, поэзия уларҙы фәндән ситләтәсәк, тип һанай.

Атайым бер хатында үҙенең немец теле тарихынан һабаҡ биреүен яҙа. Ул саҡта уҡ атайымдың фәнни ҡыҙыҡһыныуҙары предметы булып бер немец теле тарихы ғына тормай, һуңғараҡ атайым БДУ-ның филология факультеты башҡорт бүлеге программаһына башҡорттар революцияға тиклем яҙылышын ҡулланған иҫке төрки телен өйрәнеүҙе индереүҙе оҙаҡ йылдар буйы юллай. Атайым Мәскәүгә хаттар яҙа, бөтә рус бүлектәрендә иҫке славян теле, боронғо рус теле өйрәнелә, шуға күрә лә башҡорт бүлегендә башҡорт теленең тарихын өйрәнергә кәрәк, тип дәлилләй. Аҙаҡ атайым

«төрки» фәненән үҙе уҡытты, үҙе таблицалар төҙөнө, минең күҙ алдында ватман биттәренә ғәрәп хәрефтәрен тушь менән яҙҙы. Һәр телдең тарихы ҡәрҙәш телдәр, бер төркөмгә ҡараған телдәр менән сағыштырма өйрәнелә. Мәгәр ниндәйҙер фәнни һығымталар яһар өсөн бихисап ғалимдарҙың фәнни хеҙмәттәрен уҡыу ғына һәм өйрәнеү генә етмәй, үҙеңә лә күп телдәр белергә, уларҙың тарихына хәбәрҙәр булырға, яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың автор телен, бөтә диалекттарҙы өйрәнергә кәрәк. Атайым ғүмер буйы ошоноң менән шөғөлләнде лә инде. Ул немец, инглиз телдәрендә иркен аралашып ҡына ҡалманы, тора-бара барса Европа, төрки, угрофин телдәрендә һөйләшә алды.

Әлбиттә, бүтән күп телдәрҙе өйрәнә башлаған сағында атайыма туған телен һәм рус телен яҡшы белеүе ярҙам итә. Ғиниәт олатай ҙа рус телен белеүҙең әһәмиәтен яҡшы аңлаған. Ғиниәт олатай улы Җәлил дә рус телен яҡшы белһен тип теләгән, сөнки үҙе русса апаруҡ һупалаған. Әйткәндәй, атайы ла, олатайы ла шулай уҡ олатайының олатайы — 1812 йылда француз яуын ҡайтарыуҙа ҡатнашҡан Кейекбай Ишемйәров та русса белгән. Ватан һуғышында ҡатнашҡан ауылдаштары араһынан бары тик Кейекбай уҙамандың ғына түшенә ике миҙал тағыла. Был хаҡта Ә. Әсфәндиәровтың «Любезники вы мои...» китабында мәғлүмәт бар.

Русса белеүенең олатайыбыҙға әрме хеҙмәтендә ныҡ ярҙамы тейә. Уны рус һалдаттары ярата, айырыуса офицерҙар хөрмәт итә: кәүҙәгә буйһыу, ғәйрәтле башҡорт Ғиниәт Кейекбаев көс еткеһеҙ снарядтарҙы анһат ҡына ташып, ауыр пушканы таһыллы ҡороп ҡына ҡалмай, ә, шундуҡ төшөнөп, командаларҙы ла һәләт һәм теүәл үтәй. Артиллерия ҡоралдарын аттар һөйрәп йөрөтә һәм башҡорт Ғиниәт Кейекбаев уларҙы бөтәһенән дә яҡшыраҡ итеп тәрбиәләй, өҫтәүенә ҡымыҙ ҙа бешә, уны офицерҙар ҡәнәғәтләнеп, рәхмәт уҡый-уҡый эсәләр. Кейекбаев хеҙмәт иткән батарея ғәскәрҙә иң яҡшы һаналған, хатта улар янына бер саҡ батша Николай II һуғылып китә. Олатайыбыҙ туғандарына һөйләп ҡалдырыуынса, улар батшаны ҡаршыларға бик ентекле әҙерләнәләр. Пушкаларҙы ялтыратып майлайҙар, итектәрен таҙарталар, кейемдәрен рәтләйҙәр, аттарын тарап, йыуып ҡуялар. Ордендарын һәм акссельбанттарын ялтыратып, эре офицерҙар һәм генералдарҙан торған ҙур төркөм пәйҙә була. Шуларҙың ҡайһыһы батша икән тип тә уйлай Ғиниәт. Мәгәр батша тигәне кәүҙәгә тәпәшерәк, фуражка-гимнастерка кейгән, билен ҡайыш менән быуған, яуырынында полковник погондары балҡыған хәрби булып сыға. Батша һалдаттарҙың сафын урап сыға, хеҙмәттәре өсөн һәммәһен дә ябай һәм эскерһеҙ итеп тәбриклəй. Был иһә Ғиниәт Кейекбаевҡа бик ныҡ тәьҫир итә һәм ул батшаны бик яратып ҡала. Шунда ул аңлай: ысын бөйөк заттар һәр саҡ ябай булалар икән. Ә хеҙмәттәге тырышлыҡтары өсөн Кейекбаевҡа артиллерияның кесе чины (бомбардир-наводчик) һәм грамота бирелә, был грамота Җәлил Кейекбаевтың Ҡаранйылғалағы музейында һаҡлана.)

**31 март, 1941 йыл, Карши**

*Ҡәҙерле Жәлил!*

*Һиңә иң һағынышлы сәләмемде ебәрәм.*

*Хатың белән рәсемеңде алдым (от 23 марта). Я была так рада, получив письмо и карточку. Я уже несколько раз писала, что каждое Твое письмо приносит мне радость, которую описать трудно в письме. Һин яҙаһың: «Әгәр минең хаттар һине шулай шатландырһа, мин һиңә көн һайын яҙыр инем»,– тиһең. Я бываю не только рада, но и счастлива, когда читаю Твои письма. Но я не хочу быть такой жестокой, чтобы заставлять Тебя каждый день писать мне. Я буду очень и очень рада, если Ты хоть через 3-4 дня будешь писать мне. До сего времени мы, кажется, получаем письма друг от друга через десять дней.*

*Это очень долго. Я, со своей стороны, писала бы Тебе через каждые 2-3 дня, если бы не думала, что эти письма могут надоесть Тебе. Ведь у Тебя, наверное, мало свободного времени. Но, если мои письма действительно хоть немного радуют Тебя, то буду писать Тебе почаще…*

*Вот у нас и каникулы прошли. За эти 7-8 дней я хотела сделать многое, но ничего почти не сделала. Даже обещания, данного Тебе, я не выполнила. Прости меня, мой любимый Жәлил, я не смогла сфотографироваться. Я на днях снимусь и пришлю Тебе.*

*В каникулы я съездила в г. Бухару в облсуд по делу отца (Бухара отсюда 150 км, 5 часов езды). Эшем бөткәс, бер юлы ҡаланы ҡарап сыҡтым. Посмотрела все достопримечательности этого старинного города. Особенного ничего нет – Азия. Все восточного типа – узкие улицы, дома глиняные, без окон на улицу, редко кирпичные. Много старых мечетей, есть очень высокие. Видела известную «Башню смерти» – очень высокая. Она очень старинная, но хорошо сохранилась. По преданию, очень давно какой-то эмир бухарский сбрасывал с вершины этой башни преступников и своих жен, которые изменяли ему. Упав с такой высоты, человек разбивался на мельчайшие частички. Насколько это правдоподобно, не знаю, но об этом много говорят, есть специальные книги, где описаны подобные истории. Потом зашла в исторический музей, была во дворце эмира Бухарского. Дворец замечательный, я не ожидала, что он такой. Я думала, что убранство дворца восточное, но, оказывается, европейское. Внутри очень красиво. Красоту эту даже описать трудно – все из золота и других драгоценностей. Видела его спальню. Там темно. Кровать золотая, массивная. Потом зашла в комнаты его жен, у него было около сорока жен, там тоже ничего. Все блестит и сверкает, но очень неприятно смотреть на все это. Дворец очень большой. Много времени прошло, пока я все осмотрела.*

*В Бухаре пробыла всего два дня, а мне показалось, что я там жила целых два месяца. За это время очень соскучилась по дому, по своим, особенно по Тебе (ведь Твоя карточка осталась дома). Потом еще письмо могло придти от Тебя в мое отсутствие. Вот эти причины заставили меня покинуть скорее Бухару, никакие уговоры знакомых не могли удержать меня.*

*Я приехала вчера вечером, а сегодня утром сходила на почту, на мое счастье, от Тебя письмо, да еще с карточкой, кроме этого было еще два письма от дяди Лутфия и из деревни. По пути зашла в школу. Там никаких новостей нет.*

*Мында хәҙер эҫе була башланы. Я уже успела здорово загореть, стала черная как негр, вернее, как узбек. Уже люди давно купаются. Я еще не купалась. Миңә, Жәлил, киреһенсә, йәй башланъас, бик күңелһеҙ. Күптән түгел ҡыҙҙар белән яланъа сыҡтыҡ. Бик күңелһеҙ. Дөрөҫ, везде зелень, цветы и т.д., но природа очень некрасивая. Тянутся бесконечные посевы хлопка, по дороге проходят караваны верблюдов, ишәк менән үзбәктәр. Все это надоело, везде скучно. Природа здесь вообще скучная, очень бедная. Мне очень хочется посмотреть российскую березу, маҡтаулы ҡайынны. Мында ул юҡ, кәкүк тә, һандуъастар ҙа юҡ мында. Эти герои песен и романсов отсутствуют. Деревья исключительно фруктовые, мелкие. Воды мало, местность здесь засушливая, поля поливаются искусственно, потому что дождей летом никогда не бывает. Летом пыль, зной.*

*Я слишком ударилась в географию. Тебе совсем неинтересно, наверное. Но я хочу, чтобы Ты имел представление о местности, где я проживаю.*

*Письмо пишу вечером, при свете лампы. Дома я одна, ребята ушли играть. Как бы хорошо было, если бы мы находились в одном городе, виделись бы, делились мнениями. 5000 саҡрым! Бик йыраҡ шул!*

*Я слишком люблю Тебя. Раньше, еще совсем недавно, я смеялась над людьми, которые часто вздыхали, худели, скучали и т.д, в общем были влюблены по всем правилам. Я не понимала книжную любовь, которую описывают в романах. Да,*

*и сейчас не могу объяснить, что такое любовь. Но если она вообще существует, то я Тебя очень люблю. Я больше ни о ком, ни о чем не думаю, только о Тебе. Ты пишешь, что любить нужно по-старому, я не знаю, как любили в старину. Тебе не нужно завидовать декабристам. Если бы с Тобой случилось, то что с Мурвьевым или с Волконским, то я, не задумываяь, последовала бы примеру княгини Волконской. Она была замечательная женщина, я ее понимаю и ценю.*

*«Любовь должна быть чиста и честна», – пишешь Ты. Я с Тобой согласна по всем пунктам. Иначе и быть не может. Иначе такой «любви» нужно дать другое, более подходящее название.*

*Тағы ла мединститут тураһында. Да, медицина – великое дело. Это верно. Но ведь и другие науки, вообще всякая наука – великое дело. Я была бы рада, даже счастлива, если бы сдала вступительный экзамен в мединститут. Есть еще пединститут. Как Ты думаешь – хотел бы Ты видеть меня педагогом? Ведь это тоже великое дело…*

*Остается до встречи три месяца. Они пройдут теперь незаметно. У нас больше каникул не будет, свободного времени будет мало, да и у Тебя в конце учебного года работы увеличится. Но писать время Ты находи.*

*Минең теге хаттарымда һинең хәтереңде ҡалдырылыҡ һүҙҙәр бик күп булған шикелле. Һин уларҙы әкрен генә минең иҫемә төшөрәһең. Ул яҡшы, әлбиттә, иҫкә төшөрөү. Ләкин мин һинән тағы ла үтенеп һорайым – ғәфү ит мине. Мин аҡылһыҙлығым менән һәр бер уйыма килгәнне, уйлағанымны яҙа биргәнмен. Был, әлбиттә, алама ғәҙәт. Ҡайһы кеше асыҡтан-асыҡ әйткәнде яратмай, ә мин яратам. Һин миңә барыһын да яҙ, мин бик шат булырмын.*

*Ты прости меня, письмо опять выходит какое-то смешное… До сих пор не научусь писать «умные слова».*

*Нужно и пора уже кончать. Завтра в школу. Сейчас допишу это письмо и прочитаю физику. Потом спать.*

*Да, скоро мы встретимся. Я даже не представляю, как мы встертимся. Об этом я часто и подолгу думаю. Әтейем сыҡһа ярар, Рәйсә аның менән ҡалыр ине. Ул сыҡмаһа, Рәйсә менән әҙерәк уңайһыҙыраҡ була. Особенно она будет мешать учебе. Здесь ее сейчас незаметно – то в детсаду, то играет, то мои подруги ее уводят куда-нибудь, то с Ахматом (двоюродный брат) пойдут куда-нибудь, так что ее на мою долю мало. А в Уфе знакомых нет. Она должна будет быть только со мной. Это немного неудобно и неприятно будет. Әгәр әтейем сыҡһа, я буду вполне свободна.*

*Ҡайҙа барыуым тураһында аңа күп әйтеп тормам инде, хотя чувствую, что у нас получится конфликт. Ладно, поживем – увидим.*

*Шуның менән тамамлайым хатымды. Былай ҙа бик оҙон булды. Килешмәгән ерләре өсөн ғәфү ит.*

*Һине һағынып, любящая тебя твоя Нәфисә. Крепко целую.*

**10 апрель, 1941 йыл, Өфө**

*Ҡәҙерлем һәм һөйөклөм, Нәфисә!*

*31/III яҙған хатыңды алдым. Был хатты көтөү миңә шул тиклем оҙаҡ тойолдо. Хатың өсөн рәхмәт. Шатлығым йөрәгемә һыймай. Һинән хат килмәйерәк торһа, күңелгә әллә нисек булып тора, Нәфисә. Бынан һуң хатты йышыраҡ яҙып торорһоң.*

*Шул тиклем шатлыҡ менән уҡыным һинең хатыңды, мин оҙон хат уҡырға бик әүәҫ. Оҫта яҙғанһың. Оҫталыҡ нимәлә? Оҫталыҡ – ул ябайлыҡ, аңлайышлы яҙылғанда, ул ысын рух, ысын йөрәк менән яҙылған. Мин һине аңлайым, Нәфисә. Асыҡ күңелле булыуға бер нәмә лә етмәйҙер, минеңсә. Мин уны кешенең һәйбәт сифаты тип һанайым. Эйе, хатты оҫта яҙаһың, был комплимент түгел, быны сит бер кеше уҡыһа ла әйтәсәк. Һинән хат алыу һәм уны уҡыу миңә оло бер*

*байрам. Мин аны ихлас күңелем белән уҡыйым. Шуға күрә һин дә хатты йыш яҙ, Нәфисә, ваҡытың булған тиклем.*

*Азияның табиғәтен мин китапта уҡып һәм кинола күреп кенә беләм. Китапта, ғәҙәттә, китапса яҙалар инде. Ҡайһы бер кеше маҡтай ул яҡты. Күрмәгәс, бер нисек тә әйтә алмайым. Үзбәктәр өсөн яҡшы, әлбиттә, һис һүҙһеҙ, уларҙың тыуған ере. Халыҡ, терпе балаһын «йомшаҡҡайымды» тип һөйә, имеш, ти бит. Һәр кемдең, шулай итеп, үҙенеке үҙенә ҡәҙерле.*

*Бохараға барып бик һәйбәт эшләгәнһең. Әҙгә генә булһа ла мөхит алыштырып йөрөп килеү кешегә бик ыңғай тәьҫир итә, ғәҙәттә. Етмәһә, һин унда теге хан һарайын күргәнһең, музей һ.б. Ул бик һәйбәт эш. Мин бик ихласлыҡ белән ҡарар инем ундай тарихи һәйкәлдәрҙе.*

*1935 йыл мин, Мәскәүҙән ҡайтышлай, Ҡазанға һуғылдым. Ҡазан да бик боронғо ҡала бит. Мәскәүҙәге һымаҡ, Кремль бар. Ҡазандың Кремлендәге Сөйөмбикә манараһы – бик ҙур бер тарихи әйбер. Музейларында булдым. Унда Болғар ханлығы осорон күрһәткән бүлеге бик интересно. Ҡазандың парктары матур. Ҡыҫҡаһы – университет ҡалаһы.*

*Беҙҙең Өфөлә әллә ниндәй шаҡ ҡатырғыс нәмә юҡ. Простой бер ҡала. Тәбиғәте бик матур, уратып урман, һыу – Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим. Йәй көнө, ҡаланың ҡайһы яҡ ситенә сыҡһаң да, һыу инеп була.*

*Ағиҙел. Одно название чего стоит, не правда ли, Нәфисә. Урыҫса ул Белая йөрөтөлә, ә тарихи яҡтан ҡарағанда дөрөҫө – «Белая Волжница». И она очень добрая, милая река.*

*Ағиҙел тураһында бер ҡобайыр яҙайым һиңә, Нәфисә. («Ҡобайыр» – гимнға оҡшаш бер халыҡ жанры).*

*Урал икән, тау икән,*
*Урал сәхрә тау икән.*
*Урал ярып ағырҙай*
*Ағиҙел кеүек матур һыу*
*Уралда тағы бар микән?*
*Ирәмәлдең төбөнән*
*Урғып сығар Иҙеле.*
*Сәхрә туғай эсенән*
*Һыҙылып ағыр Иҙеле.*
*Кәртә тауҙар араһын*
*Ярып ағыр Иҙеле.*

*Мең-мең йәшәр Уралды*
*Ҡырҡып ағыр Иҙеле.*
*Ятыуына йөҙөргә*
*Кем төшмәгән Иҙелдең.*
*Шарлап аҡҡан шаршыһын*
*Кем кисмәгән Иҙелдең.*
*Туғайына йәйәүләп*
*Кем күсмәгән Иҙелдең.*
*Шишмә һыу кеүек саф һыуын*
*Кем эсмәгән Иҙелдең.*

*Һеҙҙең ауылдар туранан-тура Иҙелде һыулай бит. Иҙел – һинең төп үҙ һыуың, туғаның була, минеңсә. Беҙ непосредственно Иҙелде һыуламайбыҙ. Һине белмәйем, Иҙелде яратаһыңмы, юҡмы, ләкин атайың бик ярата. Әйткәндәй, бында «белмәйем» тип ҡупшылап тораһы ла юҡ инде, билгеле. Һин дә Иҙелде яратаһың.*

*Мин әллә ҡайҙа кереп китеп барам, шикелле, был һиңә ҡыҙыҡ булмаҫ, бәлки. Иҙел ярында тирәк тә үҫә.*

*Уҡыу тураһында. Билгеле, фәндәрҙең барыһы ла – ҙур, маҡтаулы эш. Ә медицина бигерәк тә кәрәк. Шуға күрә аңа иғтибар ҙа ҙурыраҡ һәм аңа баһа ла күберәк бирелә. Дөрөҫ, врач булыу өсөн күберәк уҡырға кәрәк, түҙемле булырға кәрәк. Ә уҡытыусы булыу өсөн ҡайһы берәүҙәр ике йыллыҡ учительский институтты бөтәләр ҙә, районға килеп йәки ҡалала, һин әйтмешләй, «великий учитель» булалар ҙа йөрөйҙәр. Уҡыған саҡта куп напряжение лә талап итмәй пединститут. Миҫалға үҙемде алам: мин баш ватып, тырышып-тырмашып уҡыным, тип әйтә алмайым, шулай ҙа уҡып сыҡтым, насар ҙа уҡыманым, между прочим, сөнки языко-литературный институт, гуманитарный фәндәр, гел тел, әҙәбиәт, тарих. Роман уҡыйһың да роман уҡыйһың, шул саҡта бер үк ваҡытта телен дә, әҙәбиәтен дә, тарихын да уҡыйһың, ә экзаменда шуны сдавать*

*итәһең. Шул романдарҙы уҡыған өсөн диплом алып сығаһың. Ә аҙаҡтан шул уҡығаныңды уҡытаһың инде. Уҡытыусы булыуҙың бер яҡшы яғы бар: ул да булһа – йәйҙең иң матур саҡтарында ике ай тик йөрөйһөң. Ә, ғөмүмән, ул, билгеле, һис шикһеҙ почетлы эш, уны бер кем дә инҡар итмәй.*

*«Уҡытыусы итеп күрергә теләр инеңме мине?» тиһең. Нисек әйтергә, ҡырт киҫеп әйтергә ҡыйынһынам. Бында мәсьәләне һинең теләгең хәл итергә тейеш, минеңсә. Бер эште теләмәһәң, йәғни яратмаһаң, ысын ихласлыҡ менән эшләмәһәң, ул барып сыҡмай. Яратмаһаң, ғөмүмән, бер нәмә лә барып сыҡмай. Мин үҙем немец телен (шулай уҡ инглиз телен) бик яратып уҡыным. Вот шулай, үҙ теләгең…*

*«Не могу объяснить, существует ли любовь, что такое любовь», – тиһең һин. Был турала беҙҙең быуатҡа тиклем бик күп кешеләр баштарын ватҡан, һәр кем үҙенсә һөйләгән һәм бер кем дә һөйләп бөтөрә алмаған. Шулай уҡ яҙып та бөтөрә алмаған – нисә мең том роман яҙылғандыр инде ул турала һәм берәү ҙә конкрет бер нәмә лә әйтмәгән. Существует ли она? Да, существует она для тех, кто любит, кто ценит ее. Настоящая и полноценная может быть только взаимная любовь. Конечно, был турала тағы әллә нәмәләр әйтергә мөмкин. Минең аҡыл ғына етмәҫ, пожалуй, уны дөрөҫ әйтеү өсөн. Ғөмүмән философияға бирелергә әүәҫ түгелмен… Анда әллә нәмә бутап бөтөрөргә мөмкин… Я предпочитаю еще крепче любить Тебя, дорогая Нәфисә, чем философствовать о любви своим мизерабильным умом. Великий Гете (немцы его любя называют «старый мастер») говорит устами Фауста «Темна теория, зелено (т.е. светло) жизни золотое дерево»…*

*Я люблю тебя крепко, әгәр һин дә шулай ятатһаң (я в этом нисколько не сомневаюсь), следовательно, любовь существует…*

*Тиҙҙән осрашырбыҙ бит, Нәфисә? Ике ай ярым ваҡыт бар. Даже меньше. Һеҙгә хәҙер бер ай уҡыйһы ҡалды, анан һынауҙар. Ысынлап та, беҙ нисек осрашырбыҙ икән? Мин дә шул осрашыу минуттарын һәр ваҡыт уйлайым. Ул шундай көн булыр, Нәфисә, ниндәй көн тип әйтәйем инде… Юҡ, әйтә алмайым. Ул көн беҙҙең икебеҙ өсөн дә исключительный бер көн булыр. Һин, билгеле, телеграмма һуғырһың – ниндәй поезд, ҡасан, нисә сәғәттә Өфөгә килә. Ә мин ҡаршы алырға төшөрмөн, тәү башлап шунда, вокзалда, осрашырбыҙ…*

*Һин хатыңда ғәфү итеүҙе үтенгәнһең. Минеңсә, ғәфү үтенергә әллә ниндәй ғәйеп юҡ, дөрөҫөрәге, минең хәтерҙе ҡалдырырлыҡ бер нәмә лә юҡ. Минең хәтер ҡалмаҫ, уныһы өсөн ҡайғырма, һис ҡайғырма, Нәфисә. Мин һинең хаттарыңды уҡып шатланам ғына.*

*Хатымды ошоноң менән тамамлайым, бик оҙон булды…*

*Сәғәт төнгө 2.*

*Хуш, Нәфисә. Һиңә иң күп сәләм, тағы ла иң һағынышлы сәләм. Рәйсәгә сәләм. Аны обязательны алып ҡайт.*

*Һағынып Жәлил. Крепко целую.*

(Нисектер бер мәл атайым университеттан студенттарҙың ҡулъяҙма журналын тотоп ҡайтты. Был әҙәби журналда миңә төрлө курстарҙа белем алған студенттарҙың ҡобайырҙары бик тә оҡшаны, үкенескә, ул авторҙарҙың фамилияһын иҫләмәйем. Минең ҡобайырҙарҙы яратҡанымды күреп, атайым бер нисәһен үҙе лә ҡысҡырып уҡыны. Быны ул ҡобайырҙарҙа үҙенсәлекле ритм һәм үҙенсәлекле яңғыраш булыуын күрһәтер өсөн эшләне. Беренсе курс студенттары ла ошондай матур ҡобайырҙар яҙа аламы, тип һоҡланыуыма атайым аңлатма бирҙе: «Ҡобайыр — ул бары тик башҡорттоң поэтик йәне сағылышы, әгәр башҡорт поэтик һәләткә эйә икән, ул мотлаҡ ҡобайыр ижад итергә маһир. Һәм дә теге йәки был шағир башҡортмо, әллә башҡорт телендә яҙыусы ғынамы икәнен төшөнөр өсөн уның ысын ҡобайыр яҙа алыуын күреп-тотоп белергә кәрәк».

Атайыбыҙ Ҡазанды бик яратты. Ғүмеренең һуңғы йылдарында был ҡалаға йыш

сәфәр ҡылды, унда яҡын дуҫы — татар теле ғалимы, күренекле профессор М. З. Зәкиев йәшәй ине.

Профессия һайлауға килгәндә инде атайыбыҙ беҙҙе, үҙенең балаларын, күңелебеҙгә ятмаған эш менән шөғөлләнергә мәжбүр итмәне. Шулай, БДУ-ның физика-математика факультетында уҡығанда уҡ Искәндәр ағайым, уголовный розыск следователе булырға ҡарар итеп, милицияла эшләй башланы. Бәғзе берәүҙәр, профессор Кейекбаевтың улы милиционер икән дәһә, тип көлөргә маташһалар ҙа, атайым уларға һис тә иғтибар итмәне, енәйәтселәрҙе эҙәрлекләү өлкәһендәге һөнәрҙәрҙең оҡшауын һәм үҙ эшендә уңыштары барлығын күреп, улын күп йәһәттән хуплап торҙо.)

**4 апрель, 1941 йыл, Карши**

*...К нам приехала моя подруга, тоже Нәфисә исемле. Мин аны 10 йыл күргәнем юҡ ине. Летом, когда я была в Башкирии, ее там не было, она была в Узбекистане. Беҙ аның белән бәләкәй саҡта бергә уйнап үҫтек. Беҙ аны унбишләрендә көтә инек, ул неожиданно килеп сыҡты. Бер-беребеҙҙе, әлбиттә, ҡапыл ғына таныманыҡ.*

*Мин аның килеүенә бик шатмын. Ул минән бер йәшкә оло. Аның уже иптәше бар, ул армияла, башҡорт егете, Мәндем ауылыныҡы икән. «Еҙнәй» тейешле кеше армиянан быйыл ҡайта, ул да мында килә. Ләкин мин Өфөгә китһәм, аны күрмәй китәм инде, сөнки ул августың аҙаҡтарында ҡайта әле.*

*Нәфисә белән төнө буйы һөйләшеп сыҡтыҡ. Һөйләмәгән, һорашмаған һүҙ ҡалманы. Таң атҡанда ғына йоҡлап киттек. Йәш ваҡытларҙы иҫкә төшөрөп алдыҡ. Мин бик удивляться иттем – бергә үҫкән, уҡыған ҡыҙлар, малайлар – барыһы ла өйләнеп, тормошҡа сығып бөткән, ҡайһыларҙың уже балалары бар икән. Мин ышана ла алмайым.*

*Ауылда мин бер генә көн булдым, һис кемне күрә алманым, минем иптәшләрем ул ваҡытта ауылда юҡ ине. Они тоже жалеют, что не могли видеть меня, особенно жалеет, оказывается, Ишбулдин Һажий, ул минем белән уҡый ине, ә хәҙер ул уҡытыусы, да еще шиғырҙар яҙа, ти. Просто не верится, что тот рыжий, лопухий мальчишка, которого я таскала за уши, теперь стал поэтом.*

*Башҡа бергә уҡыған малайлар армияға барып ҡайтҡандар, күбеһе командир булып ҡайтҡан. Ҡыҙлар араһында бик алға киткән кеше юҡ икән, күбеһе тормошта, редкие – учителя начальных школ. Мин аларҙың барыһынан да бәләкәйерәк инем уҡыған ваҡытта. Да, чудеса. Мне нисколько не верится.*

*Нәфисә килгәс, миңә күңеллерәк һәм еңелерәк. Я пока ей ничего насчет наших отношений не говорила. Может быть, потом скажу. Она говорит, что увезет меня все равно домой, не знает, что я, возможно, раньше ее думаю уезжать. Теперь насчет Рәйсә я не беспокоюсь, она останется дома, а потом видно будет...*

**8 апрель, 1941 йыл, Карши**

*Һөйөклө Жәлилем!*

*31/Ш мартта яҙған хатыңды алып бик шат булдым. Ул хатты мин ҡурҡып көтөп йөрөй инем. Мин беспощадный тәнҡит көтә инем. Но я ошиблась. Теперь я уверена, что не совершила какой-либо поступок, за который меня можно было бы упрекнуть и ненавидеть. Много останавливаться на этой теме не хочу, потому, что она слишком отрицательно действует на меня.*

*Я теперь очень рада и почти совершенно спокойна, ибо узнала Твое мнение о касающихся меня вопросах. А знать Твое мнение для меня очень важно. Я ценю каждое слово, высказанное Тобою.*

*Жәлил, бик-бик ҙур рәхмәт Һиңә беҙҙең өсөн беспокоиться итеүеңә. Мин мыны ғүмерҙә онотасаҡ түгелмен. Ләкин беҙ материально ҡыйынһынмайбыҙ хәҙергә. Средств окончить учебу хватит, ә июль айында ағайым уҡыуын бөтөрә, ул*

*эшләй башлай, анан тағы, бәлки, әтейем килеп сығар. Ул сыҡһа, все восстановится. Һин, был оялып, уңайһыҙланып шулай яҙғантыр, тип уйлама тағы. Юҡ, мин оялғандан яҙмайым, а пишу все так как оно есть.*

*Ә һиңә мин ниңә мының өсөн асыуланайым? Һинең бөтөн мәсьәләләргә вопрослар бирергә хаҡың бар. Я с удовольствием отвечу на твои вопросы.*

*Минең һорауҙарға яуап яҙғаныңа бик ҙур рәхмәт. Теперь мой кругозор расширился.*

*Жәлил, һин счастлив, имея такую многочисленную родню. Я рада за Тебя. Ты пишешь, что они любят Тебя. Мне кажется, что весь свет должен любить Тебя. Мне очень жаль Твоего погибшего брата. Я уже не помню, что именно Ты говорил мне о нем. Ты показал его карточку. Беләһең бит үҙең, ҡабалан ине, ваҡыт әҙ ине. Дөрөҫ, һуғыш булғас, ҡорбанһыҙ булмай, ләкин был бик ауыр хәл. Я представляю, как трудно было Твоей матери. Әсәй кешегә бигерәк тә ҡыйын була.*

*Мин үҙем тә, әсәйем үлгәс, донъяла йәшәргә не стоит, тип ҡуя инем, ә хәҙер әкренләп өйрәнелде инде. Тәүлә бик ҡыйын булғайны. Да, в жизни бывает много огорчений.*

*Тебе с родными посчастливилось. Я вот даже точно не знаю всю свою родню. Многих из них я еще в жизни никогда не видела.*

*Ты познакомил меня со своей биографией. Мне тоже есть что рассказать. Судьба у меня очень интересная сложилась. Будет о чем вспомнить в старости.*

*«Йән дуҫ ике иптәш бар» тигәнһең. Бының өсөн мин бик шатмын. Иметь друзей очень хорошо и нужно. Знаешь что? Я их немного боюсь. Как они отнесутся ко мне? Я им могу не понравиться. Мне будет очень неудобно, если так получится, а Тебе будет обидно.*

*Уҡырға кереү тураһында. Как я уже писала, лучше поступить в педагогический. Тел һәм әҙәбиәт бүлегенә керер инем (урыҫ бүлегенә, әлбиттә, сөнки мин башҡортса яҡшы белмәйем бит. Урыҫ теленән экзамендарҙы биреүе еңелерәк буласаҡ).*

*Көннәр эҫе. Ҡом бураннары башланты, ә әле апрель башы ғына. Даже не верится, что в Уфе снег только теперь начинает таять.*

*«Салават Юлаев» кинокартинаһын күптән көтөп йөрөйөм, ләкин беҙҙең яҡтарға килгәне юҡ. «24 апрель була» тигән анонс бар, обязательно барасаҡмын.*

*Беҙҙең уҡыулар 20 июньдә тамамлана, шулай булғас, 5 июль тирәләрендә мин Өфөлә булырға тырышырмын. Как раз һинең отпускыңа ҡайтып өлгөрһәм ярар ине. Мин бер үҙем генә ҡайтам. Рәйсә Нәфисә белән ҡала. Нәфисә – хороший человек и товарищ.*

*Хатымды шуның белән тамамлайым. Әҙерәк торғас тағы яҙып ебәрермен.*

*Хуш, һөйөклөм! Һау бул. Һиңә сәләм белән, Нәфисә.*

*Целую Тебя, мой любимый. Сәғәт төнгө 11. Һағынам һине, Жәлил.*

(Атайыма ниҙәр һөйләгәндер, мин белмәйем, әммә әсәйем балаларына, йәғни беҙгә, үҙенең тормошо, ата-әсәләренең тормошо, Үтәш ауылындағы раскулачивание хаҡында һөйләй торғайны. Үҙенең күҙ алдында Фатима апайының ире — Хәсән еҙнәһен атып үлтереүҙәре хаҡында ла бәйән итте. Хәсән ҡулға алыуҙан һәм һөргөнгә ебәреүҙән ҡасып урманда йәшенеп йөрөй. Әсәйебеҙҙең иҫтәлектәре буйынса, Хәсән бик күңелсәк, ярҙамсыл, балаларына яғымлы ерән мыйыҡлы уҙаман булған. Төндәрен шым ғына ике бәләкәс улын һәм имсәк ҡыҙын ҡараған ҡатынын күрергә килеп йөрөй: Закир олатайҙың өйө конфискацияланғас,ҡыҙы Фатима, килене Ғәфифә һәм ейәндәре менән землянкала йәшәргә мәжбүр булалар. Ҡасҡынды эҙәрлекләп тоталар ҙа туған-тыумаһының күҙ алдында атып үлтерәләр. Әсәйем аҙаҡ йыш ҡына хәтерләр ине: иртәнсәк ике милиционер Хәсән ағайының мәйетен, ҡулдары һалынған килеш, санаға тейәп алып киткән. Берәүһе махорка төрөп тоҡандыра ла, төкөрөнөп, ҡәнәғәт кенә әйтеп ҡуя:

«Ниһайәт, беҙ уны тоттоҡ...» Саналар ҡуҙғалып китә һәм уларҙың артынан ҡанлы эҙ һуҙылып ҡала. Коллективизация өсөн ҡасан да булһа берәй саҡ халыҡтан ғәфү үтенерҙәр һәм конфискацияланған барса мөлкәтте ҡайтарып бирерҙәр, тигән өмөт менән йәшәне әсәйем. Хәлил олатайым 1940 йылдың йәйендә Каршиға алып барған Әхмәт исемле малай — Фатима апайҙың һәм Хәсән езнәбеҙҙең улдары.

1936 йылда, улар Каршила йәшәгәндә, Хәлил Халиҡов олатай репрессия тулҡынына эләккән саҡта әсәйемә ун дүрт кенә йәш тула. Уны комсомолдан сығаралар, «халыҡ дошманы» ҡыҙы буларaҡ мәктәптән ҡыуалар. Уның әсәһе Ғәфифә — уға ни бары утыҙ ике йәш була — йөрәк өйәнәге менән дауаханаға ята. Әсәйебеҙ Рәйсә исемле ике йәшлек һеңлекәше менән бер үҙе генә тороп ҡала. Әммә уның һөйләүе буйынса, Карши ҡалаһында йәшәгән кешеләр бик тә ярҙамсыл булған: төрлө милләт кешеләре — үзбәктәр, рустар, украиндар, татарҙар, йәһүдтәр — әлеге ауыр йылдарҙа гелән бер-береһенә таяналар. Кемдер әсәйемә документтар менән эшләүсе вазифаһына эшкә урынлашырға ярҙам итә. Бер мәктәптә уҡыған синыфташының әсәһе балалар баҡсаһының директоры икән, уныһы кескәй Рәйсәне баҡсаға түләүһеҙ урынлаштыра. Әсәйебеҙҙең хәтирәләренә ҡарағанда, әхирәт синыфташының ғаиләһе бик татыу йәһүд ғаиләһе булған. Улар һәр саҡ әсәйебеҙҙе Рәйсә менән ҡунаҡҡа саҡырған, ашатҡандар, төрлөсә ярҙам ҡулын һуҙғандар, файҙалы кәңәш биргәндәр, аҙыҡ-түлектән өлөш сығарғандар, шул ризыҡтарҙы әсәйебеҙ ауырыу әсәһенә ташыған. Шулай итеп, әсәйебеҙгә эшләргә лә, Рәйсәне ҡарарға ла, өҫтәүенә өләсәй оҙаҡ дауаланып ятҡан күрше ҡаланың дауаханаһына йөрөргә тура килә.

Бер мәл ул Рәйсәне әхирәтенә ҡалдырып, әсәһен күрергә китә, ләкин ҡайтыуына әхирәтендә Рәйсә һеңлекәше күренмәй. Әхирәте, Рәйсә ҡайҙалыр уйнап йөрөй, тигән. Ләкин ул эргә-тирәлә күҙгә салынмай, тет итеп бөтән тарафтарҙы эҙләп ҡарайҙар, ләкин был да һөҙөмтә бирмәй. Әсәйебеҙ бер өйҙөң түбәһенә барып менә лә алыҫ офоҡта бер бәләкәс кенә ҡыҙыҡайҙы етәкләп барған ҡатынды шәйләп ҡала. Күлдәгенең төҫөнән ул Рәйсәне таный. Әсәйебеҙ уларҙы ҡыуып етергә үҙендә көс таба һәм үзбәк ҡатынынан Рәйсәне тартып ала. Теге ҡатындың йөҙөн күрмәй, сөнки ул пәрәнжә бөркәнгән була. Әсәйебеҙ был ваҡиғаны йыш хәтерләр ине. Әсәһе менән ни булыр ине, ул атаһына ни әйтер ине, ғөмүмән, шул саҡта Рәйсә юғалған булһа, тормоштары нисек дауам итер ине, тип тетрәнеп һөйләне.

Бер нисә көндән һуң ул үҙенең әсәһен күрер өсөн дауаханаға барҙыниһә, врачтар әсәһенең вафат булыуын һәм уны ерләп тә ҡуйыуҙары хаҡында белдерәләр. Әсәйебеҙ мосолман традицияһында тәрбиәләнә, уның да әсәһе диндар була, шуға күрә әсәйебеҙ мәйетте шәриғәт ҡушҡанса ерләргә кәрәлеген ныҡ белгән. Күҙенә йәш тығылдырып, ят ҡалала яңғыҙ-яры йәшәгән 15 йәшлек ҡыҙ мулла эҙләп таба, уға бөтәһен дә аңлата, хәйергә аҡса бирә. Шунан улар мулла менән икәүләп зыяратҡа баралар, ҡәберҙән ҡаҙып алып, мәйетте арыҡ һыуында йыуалар. Шунан кәфенгә төрөп, шәриғәт йолалары буйынса кире ерләйҙәр. Толомон тараған саҡта, арыҡ һыуҙары үлек әсәһенең оҙон ҡуйы ҡара сәстәрен тулҡынландырып, уны тере һымаҡ күҙ алдына килтереүен, гүйә, бына-бына тороп китер ҙә, улар бергәләп ҡайтырға сығырҙар, тип уйлауын әсәйебеҙ ғүмер буйы онотманы... Әсәйебеҙ әсәһенең ҡәберенә бара алмауына оҙаҡ йылдар үкенде. Мәгәр үҙ әсәһен мосолман ҡағиҙәләренә ярашлы тәрбиәләп ҡуйыуына күңеле тыныс булды. Муса Мортазиндың ярҙамы арҡаһында Хәлил олатайыбыҙҙы 1937 йылда төрмәнән азат иткәстәр, ул әсәйебеҙгә ҡабат мәктәпкә барып уҡыуын дауам итергә ҡуша.)

*Хаттарҙы һәм комментарийҙарҙы*
*Зөһрә Кейекбаева әҙерләне.*

## ЙЫРЛЫ ҒҮМЕР

*(Рәсих Ханнановҡа 80 йәш)*

*Шәһит Хоҙайбирҙин, Әнгәм Атнабаев исемендәге премиялар лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәсих Нурғәле улы Ханнанов (1931) Ҡырмыҫҡалы районының Ҡырмыҫҡалы ауылында хеҙмәткәрҙәр ғаиләһендә тыуған. Урта мәктәптән һуң Стәрлетамаҡ мәҙәниәт училищеһында уҡый, бер үк ваҡытта Мәскәүҙә КПСС Үҙәк Комитетының Юғары партия мәктәбендә журналистика факультетын тамамлай. Райондың «Колхоз юлы» гәзитендә тәүге шиғырҙарын, хикәйәләрен баҫтыра. Беренсе шиғырҙар йыйынтығын төҙөй. Унда ингән күпселек шиғырҙар, һуңынан көй яҙылып, йырға әйләнә.*

*Күп һанлы гәзит-журнал мәҡәләләре, очерктар, әҙәби һәм театраль рецензиялар менән бер рәттән, автор робағиҙар, поэмалар, хикәйәләр, новеллалар, повестар ижад итә. Уның “Йәшлек ҡанаттары”, “Диңгеҙ ҡарлуғасы”, “Күңел нуры”, “Көтөгөҙ мине, тирәктәрем!”, “Юл буйында күк сәскә”, “Ҡатынға бүләк”, “Яҙмышмы, ҡарғышмы?”, “Күр әле бер генә”, “Робағиҙар”, “Ишәк – етәксе” һәм башҡа (егерменән ашыу) йыйынтыҡтары уҡыусылар, тәнҡитселәр тарафынан йылы ҡаршылана.*

*Рәсих Ханнановтың ижадында йырҙар айырым урын алып тора. Башҡортостан һәм Татарстандың профессиональ композиторҙары тарафынан уның шиғырҙарына ике йөҙгә яҡын йыр ижад ителгән. Уларҙың ҡайһы берҙәре халыҡ йырына ла әйләнгән. “Яңғыҙ аҡҡош күлдәрҙә” йыры, мәҫәлән, Татарстанда йылдың иң яҡшы йыры тип табыла. “Күр әле бер генә” йыры халыҡ-ара Гран-при ала. “Минең Өфөм – Уралдың саф гөлө” йыры республика конкурсында еңеп, баш ҡалабыҙҙың байрам гимны тип ҡабул ителә. “Онотма”, “Минең әсәй гөл ярата ине”, “Йылмайыу”, “Торналар киткән саҡта”, “Мин тормошто яратам!”, “Иҫеңдә тот” кеүек йырҙары грампластинкаларға яҙылып, бөтә Советтар Союзына таратыла. Композитор Тәлгәт Шәрипов менән берлектә аудиокассета, Рим Хәсәнов көйҙәренә Мәскәүҙә “Рәсих Ханнанов йырҙары” тигән компакт-диск сығарыла.*

*Драматург буларак, уның тарафынан бихисап пьесалар, музыкаль комедия яҙылған. Уларҙың байтағы төрлө республикалар сәхнәһендә ҡуйылған. Һуңғы ваҡытта Салауат Юлаев, Юлай Аҙналин, Ҡәнзәфәр Усаевтарға арналған драма, балалар өсөн "Салауат һәм Ҡараһаҡал йәйәһе" тигән пьеса ижад итте.*

*Яҙыусы ҙур йәмәғәтселек эштәре алып барҙы. Партия өлкә комитетының район гәзиттәре буйынса референты, Тыныслыҡты яҡлау фондының идара ағзаһы, Халыҡ контроле комитеты ағзаһы, Салауат Юлаев һәм Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялары буйынса комиссиялар ағзаһы, утыҙ йылдан ашыу "Һәнәк" журналы редколлегия ағзаһы, БР Журналистар союзының ревизия комиссияһы рәйесе булды. Хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн миҙалдар, юғары ойошмаларҙың Маҡтау  грамоталары менән бүләкләнде. Рәсәй матбуғатының 300 йыллығы уңайы менән, Рәсәй Журналистар союзы уны Ватан журналистикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн "Иҫтәлек" миҙалы менән бүләкләне. Башҡортостан халыҡтары араһында дуҫлыҡты нығытыуҙа актив эшләүен баһалап, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы уға үҙенең Маҡтау грамотаһын тапшырҙы. Ошо биографик белешмә лә Рәсих ағай Ханнановты яҡындан белмәгәндәргә ярты быуаттан ашыу ижад эшмәкәрлегенең бай һәм йөкмәткеле булыуы хаҡында һөйләй. Ә инде ул "Ҡыҙыл таң" гәзитенең баш мөхәррире сағында уның үҙе менән яҡындан аралашҡандарҙы, өҫтәүенә минең кеүек тиҫтә йылдан ашыу бергә эшләгәндәрҙе егәрлелеге, уңғанлығы һәм ныҡышмалылығы хайран ҡалдыра. Түбәндә уның менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.*

**– Рәсих ағай, яҙыусы булып танылып та, ижадтан туҡтап ҡалыу мөмкинме?**

– Яҙыусы – исеме үк әйтеп тора – ҡәләме ҡулынан төшөп киткәнсе яҙырға тейеш. Уға бүтән төрлө яҙмыш бирелмәгән. Ғүмерем буйына журналистикаға хеҙмәт иттем. Күпселек яҙыусылар әҫәрҙәрен мин мөхәррир булған гәзиттә баҫтырҙы. Һәр ваҡыт уларға иң алдан юл бирергә тырыштым. Сөнки мин әҙиптәрҙең хәлен, икенсе төрлө әйткәндә, ижади шарттарының ниндәй икәнен белдем һәм ярҙам итергә теләнем.

**– "Ижади шарттар" тигәндә Һеҙ нимәләрҙе күҙ уңында тотаһығыҙ?**

– Иң беренсе – уларҙың тормош мөмкинлектәрен. Яҙыусыларға ҡарата бигүк дөрөҫ булмаған ҡараш йәшәп килә. Ҡайһы берәүҙәр яҙыусылар хаҡында, күңел асып, затлы тормошта йәшәйҙәр, тип уйлай. Быға ҡаршы мин бер шиғырымда ошолай тип яҙғайным да инде:

*Ҡулда ҡәләм, эшең еңел, тиҙәр,*
*Ҡарайһың бит ҡайһы яғынан.*
*Мин йыш ҡына һабан һөргән саҡты,*
*Урман киҫкән саҡты һағынам.*

Яҙыусының иңдәрендә – донъя йөгө. Беҙҙең, Лев Толстойҙыҡы кеүек, имениеларыбыҙ юҡ. Ғүмер буйына ике фронтта эшләргә тура килә. Беренсеһе – тамағын туйҙырыу, ғаиләне ҡарау өсөн мотлаҡ рәүештә ҡайҙалыр эшләргә тейешһең. Мин бүтән төрлө яҙыусыны белмәйем: күбеһе журналистикала эшләне һәм эшләй. Шунлыҡтан әҙәби әҫәрҙәр ял сәғәттәре, һаулыҡ иҫәбенә яҙыла. Мин быны үҙемдән беләм.

**– Шундай ҡыйынлыҡ менән яҙылған китаптарҙы уҡыйҙармы һуң? Телевизор, Интернет кеүек саралар барлыҡҡа килгәс, халыҡ китап уҡымай, тигән һүҙҙәр ишетелә башланы бит.**

– Был дөрөҫ түгел. Кеше китапһыҙ йәшәй алмай. Китаптар төрлө-төрлө булырға мөмкин, йәғни йөкмәтке һәм сифат яғы менән айырылып тора, ләкин был һис тә “китап кәрәкмәй” тигән һүҙ түгел. Яҙыусы ниндәй генә үҫеш кимәлендә булмаһын, ул образдар аша ниндәй ҙә булһа яңы фекер әйтә. Уҡыусы күңеленә яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ ойотҡоһо һала, уны уйланырға, йәшәйештә тотҡан урынын билдәләргә ярҙам итә. Китаптар күп булырға тейеш. Улар йәнһеҙ Интернетҡа ҡарағанда үтемлерәк, фәһемлерәк. Китап өсөн аҡсаны йәлләргә ярамай. Әҙәби әҫәрҙәр халыҡтарыбыҙға күңел байлығы, рух күтәренкелеге, Тыуған илгә, изге еребеҙгә мөхәббәт булып кире ҡайта. Шул уҡ ваҡытта яҙыусылар тураһында хәстәрлек кәрәклеген дә онотorға ярамайҙыр. Улар бер осорҙа ла күпте өмөт итмәне, аҙына ла ҡәнәғәт булды. Күрә, аңлай белеү, йылы һүҙ әйтеү – иң тәүҙә шул кәрәк.

**– Дәүләт заказы буйынса китаптарҙы йыш сығарып булмай. Киләсәктә, бәлки, эш яҡшырыр. Шул уҡ ваҡытта икенсе бер етди мәсьәләгә – үҙнәшер менән китап сығарыуға туҡталғы килә. Был эшкә нисек ҡарайһығыҙ?**

– Әлбиттә, ыңғай ҡарайым. Был сара бер бөгөн генә уйлап табылмаған. Яҙыусыларға элек тә ихтирам күрһәткәндәр: бай, хәллерәк кешеләр ярҙам иткән. Яҙыусы нәшер иткән өсөн аҡса ла алған хатта. Хәҙер киреһенсә. Мин һуңғы өс йылда шиғырҙар, пьесалар, робағиҙар, мәҫәлдәр, нәҫерҙәр сығарҙым. Бында икенсе мөһим мәсьәләгә тап булдым. Үҙнәшер менән сығарылған китаптарҙы магазиндар һатырға алмай. Бөтә һүҙҙәре шул: “Һатып булмай”. Нимә эшләргә? Беҙ үҙебеҙ һатып йөрөй алмайбыҙ бит. Етди рәүештә, хөкүмәт кимәлендә берәй сара уйлап табырға кәрәктер. Киләсәктә был алым киң таралаcаҡ. Әле лә ул аҙ түгел. Райондар күләмендә лә үҙнәшер күбәйә. Быны күрмәҫкә тырышыу – хата. Бер “Китап” нәшриәте генә булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндерә алмай. Һүҙ ҙә юҡ, һуңғы ваҡытта ул тырыша, китаптарҙың йөкмәткеһе лә, йөҙө лә ныҡ матурланды.

**– Ул үҙнәшер китаптары дәүләт сығарғандар менән ярыша аламы һуң?**

– Бөтә хикмәт тә шунда – ярыша алмай. Бигерәк тә йөкмәткеһе яғынан. Бешеп етмәгән алманы ашап булмаған кеүек, уларҙың байтағын яратып уҡып булмай. Нимә эшләргә һуң? Минеңсә, бер генә юл бар: ярҙам итергә. Ҡулъяҙмалар мотлаҡ рәүештә Яҙыусылар союзының ижади секциялары аша үтергә, рецензия яҙылырға тейеш. Элек шулай ителә ине. Был һис тә ижад иркен сикләү түгел. Яҡшы китап сығарһа, уның авторына мәртәбә.

Танылған шағир Хәсән Назарҙың һүҙҙәре менән килешәм. Ул, етлекмәгән, образлы фекерләүҙең нимә икәнен дә белмәгән шиғырҙарҙың шул яғы ла бар: уларҙы уҡыған ябай кешеләрҙең, ысын шиғриәт шулай була икән, тип уйлауҙары мөмкин, ә автор үҙен "мин шағирмын" тип алданып йөрөйәсәк, эстетик зауыҡҡа, критерийҙарға торошһоҙ, түбән кимәлдәге әйберҙәре менән гәзит, журнал редакцияларын тултырасаҡ, тигәйне.

Дөрөҫ, һәр шиғыр яҙған кеше шағир булырға йыйынмай, шулай ҙа китап тиклем китап сығарғанда талап ҙур булырға тейеш. Нисек кенә, ҡайһы яҡтан ғына ҡараһаң да, теләһә ниндәй китап үҙ жанрының үҫеш кимәлен билдәләрлек булып торорға тейеш. Шуны онотмаһаҡ ине.

**– Һеҙ республикабыҙҙың иң күренекле композиторы менән берлектә күп йырҙар ижад иткән кеше. Бөгөнгө йырҙар торошо, Һеҙҙең ҡарашҡа, нисек?**

– Йырҙар күп йырлана, был һәйбәт, йәш йырсылар күбәйҙе. Йырҙарҙың да һәйбәттәре осрап ҡуя. Ләкин, тотош алғанда, күп лирик йырҙар "мин һине яратам, ташлап китмә, етем итмә" тигән кеүек бөтәбеҙгә лә билдәле һүҙ теҙмәһенән ары китә алмай. Һәр йыр, сәнғәт әҫәре буларак, кешегә яңылыҡ, матур, тапалмаған хистәр алып килергә бурыслы. Әлеге мөхәббәт тураһындағы йөҙҙәрсә йырҙарҙан бер нисәүһе, "Туған тел", "Азамат", "Тәфтиләү"ҙәр кеүек, киләсәккә барып етерме – әйтеүе ҡыйын. Бер-береһенә оҡшаш көйҙәр, әллә күпме ҡабатланған һүҙҙәр оҙаҡ йәшәүгә өмөт итә алмай.

Халыҡ күңеленә үтеп инерлек яҡшы йырҙар яҙыу өсөн ике яҡтың да тәрән белемле, зауыҡлы булыуы кәрәк. Ә ҡайһы саҡта нотаны белмәгән "композиторҙар" ҙа үҙҙәрен йондоҙға һанай, улар тураһында гәзиттәрҙә маҡтап яҙып сығалар.

Мин үҙем башҡорт халыҡ йырҙарына ғашиҡ кешемен. Әсәйем дә уларҙы ратып йырлай ине. Күрәһең, ошолар күңелемә ойотҡо һалғандыр. Бөгөн башҡорт халыҡ йырҙарына ҙур әһәмиәт бирелә, билдәле булмағандары эҙләп табыла. Халыҡ көйҙәре – тарихтан килгән – ҡабатланмаҫ мираҫ. Мин уларға яңылыҡ индерергә теләүселәрҙе аңламайым. Халыҡ йырҙарына ундай ниәт менән ҡағылырға ярамай, улар нисек барлыҡҡа килгән – шулай рухи байлығыбыҙ булып һаҡланырға тейеш. Ваҡыт үтеү менән, "запад" уларҙы үҙе килеп өйрәнер.

Йырҙар тураһында һүҙ барғас, мин тағы ла шуны әйтер инем: Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Нариман Сабитов кеүек атаҡлы композиторҙарыбыҙҙың йырҙары бик һирәк яңғырай. Беҙ шуларҙы тыңлап үҫтек һәм йәшәнек, йәштәр ҙә уларҙан ләззәт алһын. Йәштәр янына улар түгел, улар янына йәштәр һыйынһын ине.

**– Рәсих ағай! Әңгәмәгеҙ өсөн ҙур рәхмәт. Һеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, ижади уңыштар теләйбеҙ. Юбилейығыҙ ҡотло булһын!**

**Фәниә ҒӘБИҘУЛЛИНА әңгәмәләште.**

**Ғайса**
**ХӨСӘЙЕНОВ**

# МОСТАЙ КӘРИМ МЕНӘН ӘҢГӘМӘЛӘРҘӘН

Хәҙер миңә, туғыҙынсы тиҫтәне турай барған кешегә, ҡәләмдәш яҙыусыларҙан был яҡты донъяны үткәндәре, ололары хаҡында йыш ҡына уйланырға, үҙҙәре, ижадтары тураһында мәғлүм бер уй-фекерҙәр әйтке килә. Әммә ҙурҙан ҡубып, айырым китаптар яҙырға йәки олораҡ дөйөмләштереүҙәр яһарға мөҙҙәте һәм форсаты ла ҡалмаған кеүек.

Был арала Мостай Кәрим тураһында йышыраҡ уйланам. Эйе, мин – уның тураһында бер генә түгел, ике китап яҙып баҫтырған кеше: «Халыҡ шағиры Мостай Кәрим». Тәнҡит-биографик очерк. Өфө, 1965, 198 бит.

«Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург, Прозаик». Өфө, 1994, 416 бит. Уларҙа ижады хаҡында әйтәһен әйткәнмендер инде. Мин хәҙер күберәк Мостай Кәрим шәхесе, уның телдән әйткән аҡыллы фекерҙәре, айырым кәңәштәре, үҙ-ара булған әңгәмәләр хаҡында уйланам. Әммә уйға бирелеп, фараздарға төшөп киткем килмәй. Уның менән булған әңгәмәләрҙән көндәлектәремдә үҙ көнөндә, үҙ сәғәтендә үк теркәп ҡуйғандарым менән генә бүлешергә уйым был юлы.

Бына көндәлек яҙмаларымдың 1995 йылғы февраль - март айҙары биттәренән: «Был юлы Переделкино ижад йортонда Мостай Кәрим, Муса Ғәлиҙәр менән бергәбеҙ. Ашханала өсәүләп бер өҫтәл артында ултырабыҙ. Ял сәғәттәрендә Переделкиноның тар, әммә тыныс урамдары буйлап һауала һөйләшеп-гәпләшеп йөрөйбөҙ. Һүҙебеҙ күберәк, эш, ижад, ҡәләмдәштәр, үҙ уй-пландарыбыҙ хаҡында.

Фәһемле, аҡыллы һүҙҙәр әйтелә. Әммә Мостай Кәримдең бер әңгәмәһе фәһемле ине. Бер:

– Мостай ағай, Һеҙ көндәлек алып бараһығыҙмы? – тип һораным. Мин был һорауыма кире яуап көткәйнем, ә ул, мине бер аҙ ғәжәпләндереп:

– Алып барам, – тине.

– Көн дәме ни? – тим.

– Көн дә үк түгел, әммә ике-өс көндән дә ҡалмай бер аҙ ҡағыҙға төшөрәм. Инде был ғәҙәткә ингән.

– Көндәлеккә төрлө эреле-ваҡлы ваҡиғаларҙың барыһын да, әңгәмәләрҙе лә теҙеп яҙмайһығыҙҙыр бит?

– Юҡ, әлбиттә. Мин уны, асылда, көндәлек рәүешендә ул көндө нимәләр булған, ҡайҙа булғанмын, кемдәр менән күрешкәнмен йәки кемдәр миңә шылтыратҡан йә йомош менән килгән һ.б. рәүешендә яҙмайым.

Шул көндәрҙә тыуған уй-фекерҙәр, башта, мейелә ҡайнаған ҡараштар хаҡында яҙырға тырышам күберәк. Мөһимерәк хәл-ваҡиғалар булһа, уларға мөнәсәбәтемде теркәштергеләйем.

Хәҙер хәтергә генә ышанып булмай. Хәтергә килгәндәрҙе аҡҡа күсергеләү яҙыҡ булмаç, тим».

Бына шул рәүешлерәк һөйләшеү булды Мостай Кәрим менән көндәлек хаҡында.

Ижад йортонан ҡайтҡас, был мәсьәләлә икенсе яҙыусыбыҙ ҙа мине уйға һалды. Яныбай Хамматовтан шулай уҡ:

– Көндәлек алып бараһыңмы? – тип һораным.

– Алып барам, – тине.

– Күптәнме?

– Бик күптән. Һәр хәлдә, илленсе йылдарҙан уҡ – даими рәүештә.

– Көн дә яҙаһыңмы ни?

– Һәр көндө, көндәген көндә, әгәр берәй эш сығып, йә ситтә йөрөп, бүленеп торһам, ҡайтҡас та йә туҡталып, көндәрҙе яҙып тултырып ҡуям.

– Яҙыуың ентеклеме, әллә ҡыҫҡасамы?

– Мөмкин тиклем тулыраҡ яҙырға тырышам.

– О, Яныбай, былай ҙур эш эшләйһең бит! Ә бына минең көндәлек яҙырға түҙем дә, даимилыҡ та етмәй. Ялҡаумын. Күп хәл-ваҡиғалар онотола. Башҡа килгән һәйбәт уй-фекерҙәр осоп юҡҡа сыға.

– Ғәҙәткә инһә, көндәлек теҙелеп китә ул. Унан, ғәҙәткә ингәс, ваҡытында яҙып барғың килеп тора. Яҙмай ҡалһаң, ниҙер етмәгән кеүек.

– Быйыл миңә, көндәлек яҙа барам, тигән ике яҙыусының шулай һүҙен ишеттем. Береһе – Мостай Кәрим, икенсеһе – һин, Яныбай.

– Көндәлек тә – яҙыусы өсөн, яҙышыу шикелле, һөнәр бит. Уның да киләсәк быуынға, бәлки, кәрәге тейер, ғалимдар күҙ һалыр.

Бына ике ҙур яҙыусының бер ауыҙҙан тигеләй «Көндәлек алып барам» тигән һүҙҙәре инде мине лә, һирәгерәк булһа ла, был жанрға мөрәжәғәт итергә үҙенсә мәжбүр ҡыла. Хәҙер мин дә ҡайһы бер автобиографик тормош биттәрем, бәғзе бер уй-фекерҙәрем, күҙәтеүҙәрем ҡағыҙға төшкөләп ҡалһын тим.

«Ижад йортонда ҡайһы бер көндө йә төшкө, йә киске ашауға ашханаға бер биш-алты минутҡа һуңлабыраҡ инәм икән, Мостай Кәрим менән Муса Ғәли – бик ыҡтымат кешеләр: иртәнге туғыҙҙа, көндөҙгө икелә, киске етелә минуты-минуты менән ашау өҫтәле артындалар. Мин өс-биш минутҡа һуңлабыраҡ килеп ултырһам, иҫәнләшеү менән, икеһе лә бер ауыҙҙан тиерлек:

– Ну, Ғайса эшләй, хатта ашауын да онота, – тиҙәр. Мин ғәфү үтенгән шикелле:

– Әҙ генә һуңлағанмын икән шул, эш менән мауығып, – тим.

– Көнләшеп тә, йәлләп тә ҡуябыҙ һинең баш күтәрмәй эшләүеңә, – тиҙәр, әллә хуплап, әллә төртмәләп.

Мин һүҙ араһында үҙемдең икеләнеүҙәремде, яҙғаным менән ҡәнәғәтләнеп етмәүҙәремде белдереп, үҙемсә кәңәш көтәм өлкән ағайҙарымдан:

– Үҙебеҙҙең әүәлге кантондарыбыҙ тураһында беллетристик стиль ҡулланып, иркен формала, ҡыҙыҡһындырырлыҡ итеп яҙмаммы, тип уйлағайным. Тарихи факттарҙан, документтарҙан артығын – фараз-фантазияны ҡушырға тартынам. Шуға яҙғаным ҡороҡ, фактологиялыраҡ килеп сыға. Нишләргә икән?

Мостай ағай әйтә:

– Ғайса, һин уны шулай яҙылғанса, фактарҙан ҡырға китмәй яҙ. Ул документализмы, тарихи очерк йә тарихи потрет булыуы менән әһәмиәтлерәк һәм көслөрәк булыр. Теләһәләр, ярым художестволы итеп яҙыуҙы иләгеһеләр дауам итер, үҙҙәренсә үҫтерер.

Был фекергә Муса Ғәли ҙә ҡушыла. Улар кәңәшен ишеткәс, үҙем дә, былай булғас, дөрөҫ юлдан барамдыр, тип тынысланам. Шул документаль нигеҙҙә тарихи шәхестәребеҙҙең портретын яҙмаҡсымын».

«Бер көндө Мостай Кәрим әле Переделкинола яҙған бер нисә шиғырын, эпиграммаларын уҡыны. Шәйехзада Бабичҡа арналған шиғыры шәп. Хәҙерге яҙыусыларға төбәлгән эпиграммалары ла ҡыҙыҡлы. Улар ҡаты төртмәле лә түгел кеүек. Һүҙ аҫты мәғәнәләре, кинәйәләре көслөрәк.

– Һиңә лә, Ғайса, бер эпиграмма яҙайыммы? – тип һораны минән Муса Ғәли менән уның эпиграммаларын тыңлағанда.

– Яҙығыҙ! Минең өсөн ул бер мәртәбә булыр, – тинем.

Муса Ғәли Переделкинола яҙған шиғырҙарын тиҙҙән уҡырға вәғәҙә итте. Ләкин нишләптер бергә йыйыла алманыҡ».

Ошо уҡ көндәлегемдән 31 августа яҙылған бер мәғлүмәтте килтерәм:«Миҙхәт Ғәйнуллин менән мине әле бер генә китабыбыҙ ҙа юҡ көйөнсә, 1956 йылда, СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы итеп ҡабул иттеләр. Ул заманда яҙыусылыҡҡа ағза итеп Мәскәү үҙе генә ала торғайны. Мостай Кәрим Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булғанда ул беҙгә өмөт бағлап, йүнле ижади багажһыҙ көйө Мәскәүҙә Яҙыусылар союзында ағзалыҡҡа алдыра алыуына хәҙер килеп аптырап ҡуям.

– Мостай ағай, китабыбыҙ юҡ көйө, бары журнал мәҡәләләре буйынса ғына беҙҙе нисек Мәскәүҙә үткәрә алдығыҙ икән? – тип үҙенән бер һорағас, ул былай тине:

– Мин һеҙҙең әле китаптарығыҙ юҡ көйө лә әҙәбиәтсе ғалим, әҙип кешеләр булыуығыҙға ышандым, шуны Мәскәүҙең ҡабул итеү комиссияһы ағзаларына ла ышандырҙым, – тине.

– Ышанысығыҙ өсөн ҙур рәхмәт! – тип ҡырҡ йылдан һуң да тағы бер рәхмәтемде әйтәм. Мостай Кәримдең ышанысын аҡлай алыуыбыҙға, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәүебеҙгә әле лә ғорурланып алам».

**Бына әлеге көндәлек дәфтәремдә Мостай Кәримгә 75 йәш тулыу юбилей көндәре шаҡтай тулы яҡтыртылған.**

«20-21 октябрь Мостай Кәрим көндәре, уның 75 йәше. Был хаҡта хөкүмәтебеҙҙең махсус ҡарары булды. Юбилей комиссияһы төҙөлдө. Комиссия составында мин дә бар. Минең бер төп бурысым – «Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик» китабын байрамына өлгөртөү. Тантаналы юбилей кисәһе Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында бик матур үтте. Ул ысын тантана, оло байрам юғарылығын алды. Президентыбыҙ Мортаза Рәхимов үҙе телмәр тотто.

Юбилярҙың оло ҡунаҡтары ла күп ине. Рәсүл Ғамзатов ҡатыны Патимат менән. Мәскәүҙән Валентин Сорокин, тәржемәсе Елена Николаевская, Әхиәр Хәким. Ҡазандан Ғариф Ахунов, Ринат Мөхәмәҙиев, Ринат Харис, йырсы Хәйҙәр Бигичев, Сыуаштандан, Үзбәкстандан вәкилдәр.

21 октябрҙә байрам Шишмә районында, Келәштә шаулап үтте. Ҡыҙҙар тауына сыҡтыҡ. Унда, ҡулына ут тотҡан Прометей кеүек, Мостай Кәрим түңәрәкләп һөйәп ҡуйылған һөйән ағас пирамидаға үҙе ут ҡабыҙып ебәрҙе.

25 октябрҙә Өфөлә Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһында М. Кәрим ҡатнашлығында юбилей көндәре ослап ҡуйылды. Унда мин нотоҡ һүҙ тоттом. Һәр байрам тантанаһында бер әйткәндәрен ҡабатламай, Мостай Кәрим тос фекерҙәр әйтте. Хәтерҙә ҡалған һүҙҙәренән: «Йәшерәк булһам, маҡтау һүҙҙәрен аванс итеп ҡабул ҡылыр инем. Хәҙер улай итә алмайым. Үҙемә тейерен генә беләм. Минең өсөн иң ҡурҡынысы – бурысҡа дан алыу. Өс нәмәнән ҡурҡам: йәмғиәт алдында үҙ йөҙөмдө, дуҫтарҙы юғалтыуҙан һәм үҙем хаҡында насар һүҙ ишетеүҙән».

Келәштә әйткән һүҙҙәренән: «Тыуған тупрағыңдан, туған халҡыңдан айырылырға яҙмаһын. Минең төп төйәгем – ошо Келәшем. Бөтә ижадымдың башы ла, төп материалдарым да ошо Келәш тупрағында ялалған».

Шишмә ҡасабаһында әйткәндәренән: «Оло дуҫтарым алыҫ ерҙәрҙе яҡын итеп килгәндәре өсөн мең рәхмәтлемен. Улар минең байрамымды күркәмләнеләр, мине күтәрештеләр».

Академия залындағы осрашыуҙа әйткәндәре: «Ғалимдарҙың эшенә һоҡланам, уларға хөрмәтем ҙур. Әммә шул уҡ ваҡытта әҙәбиәттең, сәнғәттең тормоштағы ҙур миссияһын күберәк тоям. Иҡтисадҡа ҡарағанда ла, әхләҡ, рухи ныҡлыҡ нығыраҡ тоталыр донъяны».

Шуныһы йәл: һәр осраҡта ла Мостай Кәримдең тос һүҙҙәре магнитофон таҫмаһына яҙып барылмай.

**Көндәлегемдәге «Мостай Кәримгә – 80 йәш» тигән яҙмамдан бер нисә өҙөк:** «Ике айға яҡын инде республика Мостай Кәримдең 80 йәше тантанаһын киң билдәләй. Был хаҡта Президентыбыҙҙың махсус ҡарары булды. «Китап» нәшриәте М. Кәрим хаҡында махсус альбом әҙерләне. Уға мин баш һүҙ яҙҙым. Радио, телевидение, гәзиттәр, журналдар был данлыҡлы дата айҡанлы сығыштар, мәҡәләләр, очерктар, интервьюлар әҙерләне.

Мостай Кәрим, 80 йәшлек ҡарт, байрам алдынан үҙе йәштәрҙән былай әүҙемләшеп китте. Көн һайын тиерлек йә мәктәптәрҙә, йә колледждарҙа, йә гимназияларҙа, йә университеттарҙа, йә китапханаларҙа осрашыуҙарҙа ҡатнашты. Гәзит-журналдарға интервьюлар бирҙе. Шуларҙан күңелемдә ҡалғандарынан бер нисәһен көндәлегемә лә теркәйем әле.

Мин үҙем «Ағиҙел» журналында баҫылған мәҡәләмде былай башлағайным: «Мостай Кәрим 80 йәшендә лә олпат һәм һоҡланғыс, ҡартайыу тигән нәмәне һис белмәҫ йә һыр бирмәҫ, аҡыл һәм хәтер кеүәһе бөҫкәрмәҫ олуғ шәхес булып ҡала». Шул фекеремде уның ошо көндәрҙәге әллә нисәмә интервьюлары ла раҫлап тора. Шуларҙан минең иғтибарымды тартҡан һәм хәтеремә һалыбыраҡ ҡуйған ҡайһы берҙәренән бәғзе бер фекерҙәрен көндәлегемдә атабыраҡ та үтәйем әле. Ул бер хәтирә булып ҡағыҙға ла теркәлһен:

«Ваҡиғаларҙан һәм замандың ығы-зығыларынан өҫтөн булған ҙур яҙыусылар бар», – ти ул «Ағиҙел» журналының «түңәрәк өҫтәл»е янында. Ул үҙе нәҡ шундай әҙип ине.

Заман үҙгәрһә лә, кешенең асылы үҙгәрмәй. Яҙыусы ла кинәт кенә үҙгәреп китә алмайҙыр ул. Һәр өргән елгә үҙгәрергә яҙыусы флюгер түгел бит.

Мостай Кәрим – оптимист рухлы шәхес. Ул башҡорт әҙәбиәтенең киләсәгенә лә ҙур өмөт менән ҡарай: «Килер ул беҙгә лә күрелмәгән күкрәүҙәр. Сөнки милләтебеҙҙең рухи запасы ҙур. Беҙ әле сағыштырмаса йәшбеҙ, асыла торған милләтбеҙ. Быға мин тәрән ышаныс менән ҡарайым, – ти ул. – Әйткәнемсә, талант-тар килә торор. Милләттең потенциаль көс-ҡеүәтенән сығып, уны төҫмөрләргә

мөмкин. Әгәр затыбыҙҙың рухи дарманы көслө икән, даһиҙар тыуасаҡ. Беҙ әле шул мәлде – әҙерлек мәлен кисерәбеҙ».

«Нисек инде, яңы етеп килгән быуатта беҙҙең әҙәбиәттә бөйөктәр тыумаҫ, тип уйларға мөмкин?! Тыуасаҡ улар! Башҡаса уйларға хаҡыбыҙ юҡ».

«Барлау, баһалау яғынан, тәнҡитселәрҙән бигерәк, әҙәбиәтте уҡыусыларҙың күҙен ныҡ асаһы бар әле беҙгә».

«Яҙыусы тормош менән бәхәсләшеп йәшәргә тейеш. Тормош ҡанундары менән генә түгел, хатта рәсми власть менән бәхәсләшергә тейеш.

Бәхәсләшеү менән ыҙғышыу араһында айырма ҙур. Бәхәсләшеп хаҡлыҡ эҙләйҙәр, ыҙғышып донъя бутайҙар».

«Сәнғәт үҙ законадары менән йәшәй. Кеше үҙ-үҙен күҙәтеүсе генә түгел, ә үҙ-үҙен бар итергә, ижад итергә тейеш».

«Йәшәүҙең мәғәнәһе нимәлә?» – тигән һорау киҫкен мәлдә тыуа».

«Күңелебеҙ һәм аҡылыбыҙ урынында икән, беҙҙе уҡымаҫтар, бөтөнләй икенсе тормош килер, тигән төшөнкөлөккә бирелергә кәрәкмәй».

«Яҙыусы үҙенең тәбиғилеге, миллилеге менән көслө. Яҡшы әҫәрҙәр, әлбиттә, милли ерлектә тыуа, әммә улар барыбер дөйөм кешелек хазинаһына әүерелә».

Ғөмүмән, әҙәбиәт, минеңсә, ике маҡсатты үтәй. Милләттең үҙен аса, үҙенә ҡарата күҙен аса. Был – бер. Икенсенән, әҙип ул халҡы тураһында һөйләп, донъя халыҡтары өсөн асыш яһай.

Иң мөһиме – үҙебеҙҙе үҙебеҙ беләйек. Үҙебеҙсә икән – үҙебеҙгә нисек тә хеҙмәт итер, тик милли ауаз, милли хистәр, милли моң булһын.

Әммә быны сиклелеккә илтеүе лә ихтимал. Үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнауҙы әйтәм. Ҡоштарҙың ғәййәре осошта һайыҫҡан менән түгел, бөркөт менән ярышыр. Йәнә – бөркөтлөк бит беҙҙә генә түгел. Беҙҙәгене бүтәндәр ҙә күрһен, белһен. Башҡорт әҙәбиәте бейеклектәрҙе шулай яуларға тейеш.

Талант – ул һан да. Талант күп эшләргә тейеш. Ҡартлығыңды ҡабул итеп, уның менән килешеп йәшәү хәйерле. Ҡартлыҡтың әҙәп ҡағиҙәләре ҡатыраҡ. Әҙәп, иман, изгелек төшөнсәләре әҙәбиәттең асылында ятырға тейеш».

Алтын һүҙҙәр, аңға, күңелгә беркетер ҡағиҙәләр.

Мостай Кәрим үҙе ижадында төп ҡағиҙәләр, хаҡ хәҡиҡәт рәүешендә ҡулланып, шуның иң матур өлгөләрен бирмәнеме ни! Даланына ҡарай даны, талантына ҡарай үҙ талаптары ныгынманымы ни! Улар үҙҙәре бер күрекле ижад өлгөләре.

Мостай Кәримде талантлы ижадсы ғына түгел, аҡыл эйәһе, милли ерлекле философ булараҡ та өйрәнәһебеҙ бар әле.

Нисек кенә оло шәхес, талантлы әҙип булмаһын, Мостай Кәрим тормошта, кешеләр менән мөғәмәләлә шаҡтай ябай, мөләйем бер кеше ине. Уның үҙ эске донъяһы, тормош, ғаилә хәстәрҙәре, үҙ шатлыҡ, ҡайғылары бар ине. Хатта юҡтан ғына борсолоуҙарға, ҡайғы-хәсрәттәргә, болоҡһоуҙарға бирелгеләп китер саҡтары ла булғылай торғайны.

**Тағы көндәлектәремә ҡайтам.**

2001 йылдың 26 ноябрь кисендә Мостай ағай миңә шылтырата. Тауышынан тойоп торам: кәйефе яҡтылы-күләгәле кеүек. Ниндәйҙер бер борсолоу, болоҡһоу бар. Тыңлайым: «Икеләнгән-шикләнгән саҡтарҙа һиңә шылтыратам, шуға аптырама», – ти.

Бына Рауил Бикбаевтың яҙып биргән «Йөҙ ҙә бер хәҙис» тигән ус аяһындай ғына кескәй китабын уҡып сыҡтым да кәйефем ҡырылды. Рауил ише исемле, халыҡ шағиры атлы шағирҙың эшеме ни хәҙистәрҙе шиғырға әйләндереү шөғөлө?

Гонаһлы бәндә гонаһтарын йыуып, иманлы булмаҡсы итәме әллә? Дин әһелеме ни ул шағир?

Минеңсә, шағир кешегә, Рауил ише үҙ инаныуы булған әҙипкә, динле булып ҡыланыуы шәп түгел. Хәҙистәрҙән шиғыр сығарырға тырышыуы ла оҡшамай. Хөрт теҙмәләр булып сыҡҡан...»

Ошондайыраҡ һүҙҙәрҙе һорау ҡуя-ҡуя, өҙә-бүлә теҙеберәк китте Мостай ағай.

Һөйләгән һайын тауышы ҡырыҫлана барҙы, тауыштары ҡалтырабыраҡ киткеләне. Эске аһын, асыуын тышҡа сығарыуы кеүек тойолдо миңә Мостай Кәримдең:

– «Ниңә ундай килешмәҫ нәмәләрҙе яҙҙың, хәҙискә шиғыр сығарыу һинең ише шағир эшеме ни?» – тип Рауилдың үҙенә әйткәйнем, ағаһының һүҙенә ҡолаҡ һалырмы, ҡәнәғәтһеҙлегемде аңлармы тиһәм, ул миңә нимә ти: Мостай ағай, былай булғас, мин мең дә бер хәҙисте яҙасаҡмын, ти. Бына һиңә яуап!?

Бер аҙҙан Мостай ағай:

– Уҡыныңмы ул китапты? – тип миңә киҫә һорау бирҙе.

– Юҡ, уҡыманым әле. Теге көн Ҡәҙим Аралбаев кисәһендә ул кескәй китапты миңә лә яҙып ҡулыма биргәйне, әле ҡарамағанмын, – тинем.

– Уҡы әле, фекереңде миңә әйтерһең. Әллә мин яңылышаммы икән? Әммә, ни генә тимә, Рауилға был килешмәй.

– Мостай ағай, Һеҙ үҙ фекерегеҙҙе уға шулай тура әйткәс, Рауил уйланмай ҡалмаҫ, ә теге «хәҙер мин мең дә бер хәҙисен яҙырға кәрәк», тигәне шаяртып әйтеүе генәлер, тим.

Юҡ, Мостай ағай һаман, нисектер, тыныслана алмай, хатта ярһып-ярһыбыраҡ үҙ һүҙҙәрен түккәндәй итә. Мин үҙемсә уны тынысландырырға тырышам:

– Мин дә уҡып сығайым әле, үҙ фекеремде әйтермен, – тим, – Рауил Бикбаев аңламаҫтай, ололар һүҙенә ҡолаҡ һалмаҫтай шағир түгел. Аңлар, уйланыр.

Мостай Кәрим яйлап тынысл тонға күсте. Ҡыҙыбыраҡ алыуын да әйтеп алды. Ә шулай ҙа, ни тиһәң дә, Мостай ағайҙың барыбер ниндәйҙер борсолоуы ҡалғайны әле.

– Ғайса, бер борсолоуымды әлегә сер итеп кенә үҙеңә әйтәйем әле, – тип башланы ул. – Һинең фекереңде ишеткем килә. Кисә генә мин Ҡазанға бер хат яҙып ебәрҙем, Шәймиев исеменә. Тыңлаһаң, уның күсермәһен хәҙер уҡып ишеттерәм.

Мостай Кәрим бер аҙҙан ул хат тексын уҡый башланы. Ул шаҡтай оҙон ғына бик мөһим, етди хат булып сыҡты. Тап Мостай Кәрим стиленсә ярым рәсми, ярым шәхси тонда бик уйлап яҙылған хат.

Хат үҙәгендә – Татарстанда кириллицанан латин алфавитына күсеү-күсмәү мәсьәләһе (мин ишетеүсә, Татарстан Республикаһы 2002 йылдың яңы уҡыу осорон татар мәктәптәренең 1-се синыфынан латин алфавитында уҡытырға күсмәксе). Ул мәсьәлә йәмәғәтселек тарафынан хупланып, латин алфавиты принциптары эшләнеп, ҡарар проекттары ла әҙерҙер, моғайын. Президент Минтимер Шәймиевтың ҡул ҡуйып, рәсми төҫ бирәһе генә ҡалғандыр.

Шәймиевҡа шәхси хат рәүешендә яҙылған текст буйынса, Мостай Кәрим кириллицанан латинсаға күсеүгә ҡаршы фекерҙә. Уның практик һәм бүтән кире яҡтарын нигеҙләргә тырышҡан. Был процесты регресс тип иҫәпләгән. Бының Рәсәй күләмендә, хатта төрки республикаларҙа кире резонанс аласағын атаған. Шәймиевтан был ҡатмарлы хәлдән баш тартыуҙы үтенгән.

Хат, әлбиттә, тәрән уйланып, борсолоп, етди яҙылған. Хаттың аргументтары ла бик ышаныслы. Оло тәжрибәле кеше, аҡыл эйәһе булараҡ, Мостай Кәрим

Татарстан президентын хаталаныуҙан ҡотҡармаҡ булыу теләге менән яҙыуын баҫым яһабыраҡ әйтә. Киҫкен генә әйткән һүҙҙәре лә бар. Бер һүҙ менән әйткәндә, хаталанып латинға күсмәҫкә саҡыра.

Был хатты уҡығас, Мостай ағай минән, тәбиғи, фекеремде ишетергә теләгәнен әйтте. Мин, уның күңелен ҡырмаҫ өсөн, тура һүҙемде ярып та һалманым, бигүк хуплап та барманым. Латин алфавиты Ер шары буйлап киңерәк таралған, унан миллиардтар файҙалана, ә кириллица славян илдәрендә генә, региональ сиктәрҙә генә бит, тинем.

Әммә уйлағанын асыҡ итеп яҙыуын, Шәймиевтың уның фекере менән иҫәпләшер шәхес булыуын әйттем. Аҙаҡ Шәймиевтың Мостай Кәрим фекере һәм теләге менән килешеүендә ике ҙур шәхестең Рәсәй күләмендә тотороҡлоҡты һаҡлап ҡалыуҙа аҡыллы компромесҡа килеүҙәрен аңланым. Был хәл прогресмы, әллә регресмы икәнен XXI быуат үҙе генә асыҡлай алыр, моғайын».

**«2001, 1 декабрь. Тағы һөйләшәбеҙ.**

Иртән Мостай Кәрим шылтыратты. Кәйефе яҡшы ине, яғымлы һөйләште.

«Ағиҙел» журналынан минең «Яҙмышыма яҙғаны» автобиографик яҙмаларымдың икенсе дәфтәрен уҡып ултырған икән: «Мәктәп-интернатҡа арналған бүлеген уҡып сыҡтым да үҙеңә шылтыратырға, ҡәнәғәтлегемде еткерергә булдым, – тине ул. – Иҫтәлек рәүешенә төшөп китмәгәнһең – шуныһы һөйөндөрҙө. Ихлас яҙғанһың, шаштырыу, кәметеү тойманым. Юғиһә беҙҙең яҙыусылар, автобиографияларын яҙа башлаһалар, үҙ-үҙҙәрен маҡтарға тотоналар. Ҡәләмдәштәре хаҡында иҫтәлек яҙһалар, ваҡ-төйәк хәбәр һөйләйҙәр.

Был хаҡта, телефон аша булһа ла, мин дә үҙ фекерҙәремде әйткеләнем. Эйе, иҫтәлектәр яҙа белмәйбеҙ, үҙ персоналдарыбыҙҙы алға сығарабыҙ, иҫтәлек эйәһе автор күләгәһендә ҡала йә, киреһенсә, автор иҫтәлек эйәһе йылыһына йылыша, үҙен уға тиңләгәндәй, иң яҡын дуҫы иткәндәй булып ҡылана.

Иҫтәлек яҙыу үтә яуаплы һәм сетерекле эш икәнен онотабыҙ. Иҫтәлектәрҙең бит үҙ тәрбиәүи-эстетик әһәмиәте, үҙәге булырға тейеш. Мин миҫал итеп Мостай Кәримдең Александр Твардовский менән Константин Симонов хаҡындағы иҫтәлектәрен килтерер инем. Беҙгә эталон бар, тим. «Быға Туфан тураһындағы иҫтәлегемде лә әйтер инем», – тине Мостай ағай.

– «Яҙмышыма яҙғаны» (хәҙерге исеме «Автобиографиям». – **Ғ. Х.**) яҙмаларының ҡоро биография һөйләүгә, ваҡ-төйәк ваҡиғаларға төшөп китеүгә түгел, хәл-ваҡиғаларҙы һайлап һабаҡ рәүешлерәк яҙыуға ҡоролоуы яҡшы», – тине.

Мин был уңайҙа:

– Мостай ағай, был автобиографик яҙмаларымда үҙемсә мөһимерәк ваҡиғалар, күргән-кисергәндәрем аша рухи биографиямды ла байҡарғараҡ иткәйнем, килеп сыҡҡандармы-юҡмылыр, белмәйем, – тинем.

– Ул яҡ яҡшы тойола, шуныһы менән иғтибарҙы биләй ҙә, ҡыҙыҡ та. Яҙғандарың ылыҡтырып, үҙенә тарта бара».

Был минең өсөн бик мөһим баһа ине.

Икенсе фекерҙе шулай уҡ телефон аша Учалы ҡалаһынан ишеттем. Мәктәп-интернаттағы класташым Марат Фәйезов шылтыратты: «Йәш саҡтарҙы, иҫтәлекле ваҡиғаларҙы иҫкә төшөрҙөм, ҡыҙыҡ итеп яҙғанһың, ҙур рәхмәт», – тине. Ҡайһы бер факттарҙы деталләй төштө.

Шуныһы ҡыҙыҡ: мин ярым онотҡан ирмәк хәлдәрҙе һөйләп алды. Аҙаҡтан: «Мине лә, былай булғас, тарихҡа индерҙең инде», – тип ҡупырайҙы.

Өфөлә осрашҡанда иҫән-һау класташтарыбыҙ менән мәктәп йылдарын иҫкә алып, һағынып һөйләшкәндәр бар.

**2003 йыл, 8-се дәфтәр, 4 декабрь.**

Ошо йылдағы 4 декабрь көнөндә көндәлегемә «Мостай Кәрим – сәйәсмән» тигән һүрәтләмә-күсермә яҙып ҡуйғанмын:

«Һикһән йәшен артылғас, Мостай Кәрим ысын мәғәнәһендә сәйәсмәнгә әйләнеп китте шикелле. Шиғриәт менән шөғөлләнеүгә ҡарағанда йыш ҡына сәйәсәткә ҡайтты. Теге йәки был ижтимағи ваҡиға, дата, тантаналы йыйылыш айҡанлы трибунаға сыға, ниндәйҙер отклик йә интервьюлар бирә. Уҡытыусылар, ҡатын-ҡыҙҙар, мәктәп уҡыусылары, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә – ниндәйҙер дата йә байрамдары икән – ҡотлау һүҙҙәре әйтә. Оло түрәләргә маҡтау һүҙҙәре яуҙыра. Һәммәһе бик яҡшы. Оло, данлы кеше һүҙе. Шул уҡ ваҡытта үҙенең иҫәнһаулығын, уй-аҡылын йәмәғәтселек алдында белдерә, аңғарта тора.

Бына «Республика Башкортостан» гәзитендә кисәге, 3 декабрҙәге, интервьюһы менән танышам.

Мостай Кәрим сәйәсмәндән дә үҙенсә сәйәсмән. Үҙ һүҙе, ваҡиғаларға үҙ ҡарашы бар. Уларҙы, аҡыл эйәһе булараҡ, тапҡыр, килешле һәм иҫтә ҡалырлыҡ итеп әйтеп бирә.Ҡайһы бер һүҙҙәрен теркәп ҡуяйым әле, киләсәктә, бәлки, мөрәжәғәт итергә тура килер:

«Я – поэт. Все поэты всегда так или иначе спорят с действительностью. Поэт должен звать за собой, должен заразить людей верой в реальность горизонта, который недостижим, но все ровно существует. В этом аспекте я вступаю не в конфликт, а в дискуссию с действительностью.

Почему я долго живу? Потому что с родиной, отечеством своим всегда жил в ладу. Конфликтов не имел ни с кем.

А когда произошла перестройка, начался хаос: ни системы, ни лада, ни склада. Почему весь этот сыр-бор в стране? Потому что потеряны лад и гармония взаимодействия людей. Человек порой забывает, что он сам есть.

Великий философ Китая Конфуций, который жил в пятом веке до нашей эры, в назидание своим императорам писал: «Процветает то государство, в котором каждый выполняет свой долг и сообразно своему призванию, способностям совершенствует себя в этой области».

Теперь все перепутано.

И если банкир претендует на должность президента, он должен хорошо подумать, что это совсем другая забота...

Чем больше узнает человек другие культуры, тем больше ценит себя...»

Две вещи непоправимые, на мой взгляд, – это смерть и потеря совести. Все остальное поправимо».

Мостай Кәрим был интервьюһында беҙҙең эраға тиклем йәшәгән көнсығыш классиктарына, Конфуций тәғлимәтенә мөрәжәғәт итеп, кешелек йәмғиәтендәге әҙәп-әхлаҡ принциптарының хәҙерге заман өсөн дә өлгөлө тәғлимәт, әҙәпәхлаҡ ҡағиҙәләре икәнлеген аңлата. Ул үҙе лә сәйәсмән генә булып түгел, үҙенсә философ, аҡыл эйәһе булып сығыш яһай.

**2004 йыл, 9-сы дәфтәр, университет, М. Кәрим кисәһендә.**

Әҙибебеҙҙең тыуыуына 85 йыл тулыу айҡанлы ойошторолғайны был кисә. Уны ректор Мөхәммәт Харрасов үҙе асты. Роберт Байымов алып барҙы. Студенттар концерт номерҙары күрһәтте.

Мостай Кәрим тураһында бер нисә кәлимә һүҙ менән сығыш яһаным. Уның XX быуаттағы башҡорт әҙәбиәтенең йөҙөн һәм кимәлен билдәләгән әҙип булыуы, элекке СССР, хәҙерге Рәсәй Федерацияһы халыҡтары әҙәбиәттәренең иң күренекле вәкиле дәрәжәһенә күтәрелеүен, тағы бер нисә мөһим һыҙаттарын атап үткәндән һуң, шундайыраҡ фекеремде лә залға ишеттерҙем:

– Мостай Кәрим ижады заман һынауҙарына бирешмәне, ул заманды үҙе әйҙәп алып барғандай ине. Ул төрлө яҡлы ижады менән поэзияла ла, драматургияла ла, проза жанрҙарында ла тос фекерҙәрен, заманалар һулышын эстетик зауыҡлы итеп аңыбыҙға, күңелдәребеҙгә һеңдерә алды. Мостай Кәрим ижады заманаларҙан алдараҡ әйҙәп барыусы поэтик ҡеүәткә эйә булды. Ул әҫәрҙәре үҙәгенә дөйөм кешелек проблемаларын оһолло ҡуя белеүе менән отто.

Совет осоро әҙәбиәтенә лә тоғро хеҙмәт итте. Ҙур түрәләр менән уртаҡ тел тапты, заманалар менән аҡыллы килешеп йәшәне».

Был фекерҙәремдең ҡайһы берҙәрен Мостай ағай хәтеренә һалып ҡуйған икән, аҙаҡ табында иҫкә алып, үҫтерә биреп тә үҙ мөнәсәбәтен билдәләне.

Залдан һорауҙар байтаҡ булды. Уларға ябай һәм фәһемле итеп Мостайса яуаптарын бирҙе. Кисә аҙағында хәҙерге әҙәби күренештәргә, заманаға мөнәсәбәте һәм ҡараштары хаҡында тос фекерҙәрен әйтте. Заманалар үҙгәреп торһа ла, донъяға ҡарашта, ижадта төп кредоларым үҙгәрмәне, тине.

Туҡһанынсы йылдар башында болғауырыраҡ саҡта бер аҙ аптырап ҡалыуын, һүрән уй-тойғоларға бирелгеләүен дә йомоп ҡалдырманы. Әммә улар тиҙ үтте, минең төп ижад принциптарым ҡаҡшаманы, киреһенсә, заман бер аҙ һелкетеп, мине донъяға абайыраҡ ҡарарға өйрәтте, тине».

**2008 йыл, 13-сө дәфтәр, 19 октябрь.**

«Бөгөн нигәләр эсем боша. Ҡулға эш бармай. Бер арала телевизор ҡабыҙҙым, гәзиттән программаны ҡарап, Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре буйынса ҡуйылған кинофильмды ҡараным. Әҫәр кино таҫмаһына айырым фрагменттар рәүешендә ойошторолған. Китап менән таныш кешегә уның шулай кинотаҫмаға күскән айырым фрагменттары кескәй тамашалар теҙмәһе рәүешле генә. Әҫәр менән таныш кешегә шул фрагменттар, монтаждар ҙа етә. Һағышлы фильм килеп сыҡҡан.

Ә мин тамашасы «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ»тың йөкмәткеһен, Мостай Кәрим ҡулы менән теркәлгән тамашалы, һағышлы, тетрәндергес биттәрен хәтеремдән үткәреп ултырам.

Мостай Кәрим, шәхес, шағир, прозаик, драматург булараҡ, бар бөтөн оҫталығын, ҡәләм, һәләт ҡеүәһенең асылын уйлап ултырам».

Бына көндәлек дәфтәрҙәремдән Мостай Кәрим, уның ижады хаҡында ҡәләм төрткән ҡайһы бер фрагменттар, уй-ҡараш ярсыҡтары. Улар минең көндәлек тормошомдан яҙмаларға күскән кескәй киҫәктәр генә. Әммә улар миңә Мостай Кәрим менән аралашыуымдың көндәлеккә теркәлеп ҡалған яҙмалары булыуы менән ҡәҙерле.

Мостай Кәрим тормошо һәм ижадын «Халыҡ шағиры Мостай Кәрим», (Өфө, 1965); «Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик» (Өфө, 1994) тигән монографик китаптарымда әҙәбиәтсе ғалим булараҡ системалы яҡтыртҡанмын. Яҙғас, шағирҙың үҙенә уҡытып, баҫтырып сығарырға фатихаһын алғанмын.

Көндәлектәр улар – һинең тормошоңдоң, уйланыуҙарыңдың ундан бер өлөшөнөң генә ҡағыҙға төшкәне. Хәтергә һеңеп ҡалғаны ғына башта, ярым-йорто хәтерҙә. Ә ҡағыҙға төшкәндәре, бәлки, юйылып та бармаҫ.

**2009, июнь.**

**Мостай**
**КӘРИМ**

# КӨНДӘЛЕКТӘР*

**15.II.2002.**

*Конфуций считал, что управлять — это значит ставить каждого на свое место в обществе в соответствии с его качествами. Он считал также, что каждый человек должен по возможности учиться и нравственно совершенствоваться.*

*Я полностью согласен особенно с его первым тезисом — ставить каждого на свое место.*

*Как злободневно это сейчас. Каждый, не зная своего места, претендует на место другого, включая место Президента страны.*

**18.II.2002.**

*Власть — это резвый, норовистый конь, обладателю его надобно держать повод крепко и коротко.*

* * *

*Һөйкөмлө генә бер ҡатынды:*
*— Һеҙ аҡыллыһығыҙ, — тип маҡтаным.*
*Уның хәтере ҡалды:*
*— Бары шул ғынамы? — ти.*

*Ахмаҡтарҙан көлмәгеҙ, әгәр улар аҡыл эйәләре булып ҡыланмаһа... Улар Хоҙай яһаған ғәриптәр бит (брак).*

* * *

*Никчемный человек всегда очаровывает чернь. (Еврипид) 4500 лет до нашей эры.*

---

*Дауамы. Башы журналдың 2006 йылғы 10-11-се, 2007 йылғы 10-сы, 2008 йылғы 10-сы, 2009 йылғы 10-сы, 2010 йылғы 11-се һандарында баҫылды. Матбуғатҡа балалары **Илгиз КӘРИМОВ** менән **Әлфиә КӘРИМОВА** әҙерләне.*

*От себя добавлю: ибо тот — ее отражение. Чернь всегда любуется своим отражением.*

* * *

*Мин ғүмер буйы боронғо йырҙарҙы яраттым. Теге донъяла йырлайҙармы икән? Йырламаһалар, бик ҡыҙғаныс. Күңелһеҙ булыр.*

* * *

*Алькуин (735 — 804). Англия.*
*Историк.*
*Согласен. Мустай Карим.*
*(1919 — ... )*
*Тот, кто хочет действовать на толпу, нуждается в шарлатанской приправе.*
*Генрих Гейне: (1797 — 1856)*
*Это, видимо, сказано про нашего В. В. Жириновского (еще полтора века назад).*

**19.II.2002.**

*Мне часто говорят: «У тебя неплохая память. Отчего это?»*
*«Не от чего, а для чего, — отвечаю я про себя: — Мне нельзя забывать о том, что я родом всего-навсего из Чишминского района». За последние годы я это стал больше ощущать — интуитивно. Не касательно лично себя. Касательно многого остального.*

**21.II.2002.**

*Искусство для меня начинается с нравственности творца, искусства и содержания и сути самого искусства . Нравственно ли?*
*Когда беснуются вокруг имени танцовщика Нуриева, меня это настораживает. Меня не интересует с кем он там интимно — с женщиной или мужчиной. Это его дело.*
*Этот человек променял Родину на деньги.*
*Этого Нуриева я на дух не принимаю. Какое он имеет отношение к нашему национальному искусству? Возможно, Бетховен, Чайковский, Гете имеют больше отношения к нашему духовному развитию.*

**27.II 2002.**

*Сегодня по Центральному телевидению показали, как в Индии мусульмане убивают мусульман (сунниты и шииты воюют в мечети). Смертельно враждует Ватикан с русской православной церковью. Папа Римский ездит в бронированном автомобиле с охраной. А Иисус имел ли телохранителей? Богословы всегда утверждали, что Бог един. На деле его давно расчленили.*
*Поэтому он не может управлять всем человечеством единой властью.*

*Еще раз убедился, что я свободен от вражды к людям на религиозной почве. У меня нет антипатии ни к шиитам, ни к православланым, ни к католикам, ни к буддистам, ни к иудеям. Какой я свободный человек!*

*Когда в городе первый раз услышал утренний перезвон церковных колоколов, очень хотел, чтобы на минарете нашей мечети тоже были колокола. Тогда мне было 9 лет. И сейчас я недалеко ушел от своего детского восприятия. Тогда было морозное утро. Февраль. Звон колоколов будто согревал воздух.*

*Еще не менее свободен в том отношении, что нет во мне неприязни к людям по национальным различиям, т. е. человек другой нации для меня не есть потенциально чужой. Вся моя жизнь: и учеба в молодости, и война, и многолетняя работа в многонациональной советской литературе сделали меня таким. Огромное богатство мое — это моя дружба с великими сынами и дочерьми разных народов — с лучшими людьми XX столетия. Мне в голову не приходила мысль о том, какого вероисповедания представляются они. Я свободен.*

*Власть религии над человеком, убежденным, что он, только он ближе всех к Богу, — жестокая власть, беспощадная власть.*

*Резвыму коню, пока он в конюшне, принадлежит только стойло. Когда он выпущен на волю, ему принадлежат необъятные просторы.*

*Человек не должен заключить себя в собственное стойбище — стойбище для тела и духа. Это — самая худшая форма рабства.*

**1.III.2002.**

*Бер районда ултырыш бара. Республикала халыҡ һанының кәмеү мәсьәләһен ҡарайҙар. Хәл һәйбәт түгел. Етәксе үҙенең хеҙмәткәрҙәрен әрләй:*

*— Халыҡ һаны кәмей, һеҙ уйлап та ҡарамайһығыҙ был хаҡта! — ти.*

*Бер ҡатын тороп әйтә һала:*

*— Уйламаған ҡайҙа ул?! Бик уйлайбыҙ, тик уйлауҙан ғына бала тыумай шул. Был эште артыҡ уйлап тормай эшләйҙәр ул.*

*Ирҙәр ҡысҡырып көлөп ебәрә. Ҡатындың асыуына тейә:*

*— Кешнәгән булалар тағы... Алашалар!*

* * *

*— Мне всегда нужно было быть золотом, чтобы принимали хоть за серебро, ибо я добыт не в тех рудниках. Добывая в иных местах медь, порою его выдают за золото... — сказал один ученый человек.*

**8.III.2002.**

## *О зависти*

*За долгую жизнь свою не помню того, чтобы я себя терзал завситью — ни белой, ни черной. Случилось так, что за последнее 50 лет, говоря без ложной скромности, некому было серьезно завидовать в нашей литературной среде. Я не скажу, что я по природе такой уж блаженный, просто не было причин подвергать себя испытанию в этом отношении.*

*Я был в среде ряда замечательных писателей, но по нашим местным, башкирским нормам, не превосходивших меня. Что касается материальной стороны бытия, то никто из нас не мог быть объектом зависти по этим соображениям. Были совсем не богатыми, но жили не прибедняясь.*

*Хотя один случай остался в памяти.*

*С войны вернулся больной туберкулезом, харкал кровью. Ильгиза, чтобы он не заразился, держали в круглосуточном детсаде. Рауза иногда выводила гулять меня на улицу, держа под руку. Идем по улице Социалистической (мы жили на углу Социалистической и Достоевского, у родной тетки Раузы). Остановились возле одного дома (он еще цел), и через окно, которое было возле наших ног, вдруг увидели в подвале идеальную жизнь. Стоит стол. На столе самовар, чашки расставлены, у стены кровать (железная), на кровати цветастые подушки, кровать покрыта лоскутным одеялом, в углу висит умывальник. Под ним — тазик. В помещении еще немало хороших вещей. Живут же люди!*

*Своя кровать, свой стол, свои стулья, свой умывальник. Все это — их. «Вот бы так жить!..» — подумал с завистью.*

**16.III.2002.**

*Биш көн әүәл ауыр хәлдә больницаға килтереп һалдылар. Реанимацияла ятам. Үпкә менән йөрәк икеһе лә хәлдән тайып, тын алыуҙы көрсөккә килтереп терәнеләр (легочно-сердечная недостаточность). Әлегә тиклем кислород биреп торалар. Юғиһә тын етмәй.*

*Шулай ҙа бөгөн кәйефем төҙәлә төштө. Бүлмә буйлап ике тапҡыр урап та сыҡтым. Бихисап капельница, укол, төрлө дарыу бирәләр. Хатта башым томалана.*

*Тышҡы донъя менән бәйләнеш юҡ. Ординаторскаяға шылтыратып хәл белеүсе юҡ — яҙыусыларҙан да, түрә-ҡаранан да. Хәйер, кемдә кеше ҡайғыһы хәҙер? Кәрәгем шул самалыр, күрәһең. Бындай хәлгә күнегергә күптән ваҡыт инде миңә. Асылда мине, моғайын, бер шут итеп кенә күрәләрҙер. Кәрәк ваҡытта кемгәлер этәргес көс йәки бер ҡатлы адвокат вазифаһын үтәйем. Минең кеүектәрҙе рустар «подсадная утка» тиҙәр. Кисә*

*Президент ветерандарҙы йыйған. Газетала фотолары бар.*

*Мин, диуана, былай уйлаған булам. Түрәләрҙән кемдер берәү: «Мостай Кәрим ҡайҙа ул?» — тип һорарға тейеш. Кемдер берәү минең реанимацияла ятҡанды белергә тейеш, имеш. Бында ятҡанда мине Ғилман Яҡупов бик ауыр хәлдә күреп ҡалғайны. Ул осрашыуҙа, моғайын, булмағандыр. Минең юҡлыҡты берәү ҙә шәйләмәгән ветерандар араһында ла — нимә тиһәң дә, республикала мин иң ҡарт яҙыусы бит әле. Ярай әле, Әлфиәм, урыҫ кейәүем Олег иманлылар.*

*Зарым ошонда бөттө.*

* * *

*Санитарка булып бында Фатима исемле ҡатын эшләй. Асҡындан. Ире беҙҙең Шишмәнән (Ябалаҡлынан) икән. Фатимаға ошо таҡмаҡты яҙып бирҙем.*

### *Ябалаҡлы егете Анурҙың Фатимаға әйткәне*

*Эй, дуҫтарым, бер йыр әйтәм,*
*Ултырығыҙ атыма:*
*Йөрәгемде һурып алды*
*Асҡын ҡыҙы Фатима.*

*Йөрәгем бит берәү генә,*
*Ҡайтарып бир, Фатима.*
*Юҡ, ҡайтарма, ғүмерлеккә*
*Ҡалдыр Хоҙай хаҡына.*

*Икәү булғас, беҙ ашырбыҙ*
*Күктең ете ҡатына.*
*Йөрәгемде йөрәгеңдән*
*Ысҡындырма, Фатима.*

*Анурҙың уйҙарын ҡағыҙға төшөрҙө Келәш ҡарты Мостай Кәрим.* **17.III.2002.**

*P.S. Был таҡмаҡты Фатима открыткаға яҙҙырып алды.*

**22.III.2002.**

*Бөгөн консилиум кеүек нәмә булды. Ҡасан сығарырҙарын әле әйтмәнеләр. Хәлем яйлап арыулана кеүек. Тик һаман тын ҡыҫыла. Күп йөрөп булмай. Коридорға сығам да тиҙ үк инеп ултырам.*

*Был юлы сигнал ныҡ ҡына булды.*

*Кисә Мәргән Мырҙабәков килгәйне.*

*— Нимә эшләп реанимацияға эләктең? — ти.*

*— Ожмахҡа сиратҡа яҙылып ҡуяйым тип барғайным да, яҙманылар. «Алдан яҙылыу юҡ, сиратыңды көт, «живая очередь беҙҙә», — тинеләр ожмах вәкилдәре.*

*Ярай, ашыҡмайыҡ әле. Хәйер, тамуҡҡа эләкһәң дә — көтөлмәгән хәл түгел. Унда халыҡ оторо күп буласаҡ. Яңғыҙ түгелһең, кеше ни күрә — шуны күрерһең.*

**25.III.2002. Дауаханала.**

*1955 — 56 йылдар тирәһе булғандыр. Ленин урамында трамвай йөрөй ине әле. Яҙыусылар союзынан сыҡтыҡ та «кольцо»лағы трамвай туҡталышына йүнәлдек — Ҡадир Даян, Хәниф Кәрим, Сәләх Кулибай, мин. Хәниф менән беҙ Ленин урамы, 65-тә торабыҙ. Беҙ китәбеҙ, тегеләр тороп ҡаласаҡ. Трамвай килеп етәрәк, Даян Хәнифкә былай тине:*

*— Ҡайтҡас та, Хәниф, Мәрзиәне минең өсөн үп.*

*Хәнифтең кәйефе китте:*

*— Быны нисек аңларға, иптәш Даянов? — ти ҡоро ғына тауыш менән.*

*— Нисек әйтелгән, шулай аңла. Әгәр аңлап етмәһәң, ҡайтҡас Мәрзиәнән һора. Ул төшөндөрөп бирер.*

*— Дурак! — тине Хәниф, ныҡ асыуланып.*

*— Ғүмереңдә бер дөрөҫ һүҙ әйттең. Молодец! — тип маҡтаны Даян.*

*Трамвай килеп туҡтаны. Хәниф менән беҙ ултырып киттек.*

*Даян, шаярып, Раузаға «мөхәббәт хаты» яҙып, беҙҙең почта йәшнигенә һалып киткән. Почтаны мин алдым. Конверт тышында Даян почеркын күрҙем дә, артабан адресатҡа иғтибар итмәй, конвертты астым, миңә тип уйланым. Хат былай башлана. «Минең мөхәббәт ҡошом Р., башта уҡ әйтеп ҡуяйым. Был хат теге дурагыңдың (теге дурак — мин булам инде) ҡулына төшә күрмәһен...» Артабан бәйнә-бәйнә яҙғандары онотолған инде. Бөткәне менән ғашиҡ хаты ине. Унда таңғы һандуастар ҙа, түңәрәк ай ҙа бар... Ул саҡ беҙҙең арала «Даянса шаярыу» тигән ирмәк төшөнсә йөрөй ине. Даян, мәҫәлән, әйтер ине: «Ахун ишан әйтмешләй, кит әле, инәңдең фәлән ере...» Ул быны туранан ебәрә ине.*

*Үҙен дә бер яман шаярттыҡ. Мин Союзда эшләйем. 1952—53-тәр тирәһе. Назар — журналда. Даяндың һуғыш ваҡытында фронттан отпускыға ҡайтып, кире һуңлап барыуы тураһында нисектер һүҙ сыҡты. Ул саҡ ҡына хәрби трибуналға эләкмәй, ҡурсалап ҡалалар. Әммә Ҡадир был хаҡта байтаҡ йылдар ҡурҡып йөрөй.*

*Ҙур, матур конвертҡа машинкала адрес яҙҙырҙыҡ Назар*

*менән: «Уфа, Союз писателей, гражданину Даянову К. Х». Кире адресы: «Москва, Ревтрибунал Советской Армии».*

*Конверт эсенә ҡалын ғына итеп аҡ ҡағыҙ һалдыҡ. Назар аҫҡа, почтаға, төшөп, конвертҡа (Союз Совмин йортоноң 1-се ҡатында ине) күп иттереп төрлө мөһөрҙәр һуҡтырып менде. Шунан йомошсо ҡатын Люсяны ебәреп, Даянды саҡырттыҡ. Килде. Бүлмәлә 5-6 кеше бар инек.*

*— Бына, Ҡадир Хәкимович, бер хат килеп төштө. Люся аша ебәрмәй, үҙ ҡулыңа тапшырырға булдыҡ. Военный трибуналдан... — Был һүҙҙәрҙе мөмкин тиклем рәсми тонда әйтергә тырыштым. Ғүмер әйтмәгән «Ҡадир Хәкимович» та телемә килде. Юғиһә, Ҡадир ағай тип өндәшә торғайным.*

*Ҡадир ағай конвертты алды. Тәүҙә ағарынды, унан маңлайына тир бәреп сыҡты. Конвертты аса башланы, ҡулдары тыңламай.*

*Тапҡанбыҙ шаярыу! Йәш инек шул, — йәнәһе, «Даянса шаярабыҙ» беҙ ҙә. Тәүҙә Назар ҡысҡырып көлөп ебәрҙе, уға беҙ ҙә ҡушылдыҡ. Ул арала Даян конвертты асып, ап-аҡ ҡағыҙ биттәрен ҡулына алғайны. Хаттың буш нәмә икәнен күреп, ҡыуанысынан ағайыбыҙ беҙгә асыуланырға ла онотто.*

*— Ошондай фантазия менән әҫәр яҙа алһағыҙ, файҙалыраҡ булыр ине. Шулай ҙа маҡтайым: «Даянса» булдыра алғанһығыҙ... — тине. — Ишмырҙа кантон әйтмешләй, тә-тә-тә...*

**26.III.2002.**

*Глава страны (царь, шах, император, президент и т.д.) не должен быть всегда на виду у народа. Даже солнце, если бы, к примеру, безотлучно находилось на небе, то люди его просто не замечали бы.*

*Толпе нужно зрелище. Ему это интересно, а мыслящим индивидиумам надо деяние не на показ.*

*Нередко у нас занимаются деянием на показ — при помощи СМИ — тем более.*

**27.III.2002. Дауаханала.**

*Тарихта ҡыҙыҡ хәлдәр бар. Коляскала ултырған ике аяҡһыҙ Рузвельт ун йыл эсендә бөтөнләй таралып төшкән Американы аяҡҡа баҫтырҙы. Борис Ельцин, ике аяғы менән танкыға менеп баҫып, ун йыл эсендә бөйөк, ҡеүәтле Рәсәйҙе аяҡтан йыҡты. Һәр ҡайһыһы үҙ миссияһын шәп башҡарҙы. Еренә еткереп башҡарҙы.*

**28.III.2002.**

*В соседней палате лечится Мансур Аюпов. За два дня дважды просил у меня совета по двум вопросам. (Беҙҙеңсә әйткәндә, аҡыл һораны.) Он, конечно, человек умный, если нуждается в уме*

*других. Есть такая простая истина: умный прибегает к совету других, тупица и дурак довольствуется своим «умишком».*

**29.III.2002.**

*Бөгөн бынан сығаралар. Тыным әлегә нык ҡыҫыла. Өйгә ҡайтҡас, яйлап кәмер әле. Һауаға ла йышыраҡ сығырға тырышырмын.*

**11.IV.2002.**

*Ҡағыҙҙар араһынан бынау ирмәк яҙыу килеп сыҡты. 1961 йылды Кирәй Мәргәндәрҙә ҡаршыланыҡ. Шунда һөйләгән телмәрем ошо куплеттар менән әйтелгән:*

*Кирәй кеүек ҡабалан[1],*
*Назар кеүек шым ғына[2],*
*Муса кеүек шик-шомһоҙ[3],*
*Гулин[4] кеүек типтереп,*
*Рамай кеүек иҫереп[5],*
*Килде Яңы йыл бына.*
*Ура!*
*Рамай әйтер: «Не типично!»*
*Кирәй әйтер: «Виноват!»[6]*
*Муса әйтер: «Был ужасно!» —*
*Тәнҡитте не миновать.*
*Виноват, так виноват.*
*Караул!*

*Телгә алдым ирҙәрҙе —*
*Бармы алыр ерҙәре?*
*Вәт, исмаһам, бисәләр! —*
*Ҡырҡалар ҙа киҫәләр,*
*«Виноват!» — тип торабыҙ,*
*Ишәкте фил тиһәләр.*

*Күҙҙәренән нур аға,*
*Телдәренән бал тама,*
*Улар һайрап ебәрһә,*
*Эш юҡ бысаҡ-балтаға...*
*— Йәшәһен!*

*Шулай донъя көтәбеҙ.*
*Ике донъя — бер мөрйә.*
*Ҡором ҡунмай мөрйәгә, —*
*Гөжгөп торабыҙ бергә.*
*Амин!*

---

[1]*Кирәй бик яй йөрөй. Даян уны күргән һайын: „Ҡайҙа саптың былай йән-фарман?"— тиер ине.*
[2]*Назар гел шаулы.*
[3]*Муса гел шикле, зарлы.*
[4]*Гулин Ибраһим йомоҡ, шым.*
[5]*Рамазанов ул саҡ бөтөнләй эсмәй ине.*
[6]*Ул Мәғфирәгә гел:"Виноват, бисәкәй! Виноват бисәкәй!"— тип торор ине.*

**21.V.2002.**

*Мы в обществе, политике и совместно, и персонально делаем ошибки и утешаем себя, что на них учимся, вновь и вновь повторяем их, чтобы продолжать учебу и развиваться дальше.*

*Есть стимул!*

**25.V.2002.**

*Беҙҙең ауылдың 30 — 35-тәр тирәһендәге ике ҡатыны әүәл йылдарҙа Семеновка больницаһына барғандар. Береһенең эсе ауырта, икенсеһе башына зарлана. Рус врач һорай береһенән:*

*— Апайка, ҡайһы ерең ауырта?*

*— Сама духтыр, сама знай, — ти Миңлекәй.*

*Врач быны шаяртыуға ғына ала. Ҡарай башлай.*

*Ҡайтҡанда былар һөйләшеп ҡайта.*

*— Бер нәмә лә белмәй икән был нәмәҫтәкәй, беҙҙән һорашып ултыра, — ти Миңлекәй.*

*Гөлзәғифә лә шик белдерә:*

*— Әллә духтырына эләкмәнек инде... Былай һорашып ултырмаҫ ине духтыр булһа, улай тиһәң, аҡ сапан кейгән.*

*— Сисендермәһә тағы, шәрә бисә күргәне юҡ микән ни?*

*— Күрһә лә... Ирҙәр күҙе унан туямы ни? — тип һығымта яһай йыуаш Гөлзәғифә.*

**10.VII.2002.**

*Германияла һәләк булған балаларҙың ата-әсәләре һорауы буйынса, һәләк булғандарҙың ҡәбер ташына яҙыр өсөн ошо һүҙҙәрҙе яҙҙым:*

*Тәндәрегеҙ ер ҡуйынына инде,*
*Йәндәрегеҙ балҡый һауала.*
*Өҫтөбөҙгә ҡара ҡайғы ауҙы,*
*Был ҡайғынан юҡ шул дауалар.*
*...Күҙ йәштәре күктән яуалар.*

Подстрочник:

*Тела ваши приняла земля.*
*Души ваши светятся в небесах.*
*На нас обрушилось черное горе,*
*Нам нет исцеления от него.*
*...Слезы льют и льют небеса.*

**5.VIII.2002.**

*Булаттың бер һүҙе, дөрөҫөрәге, фекер йөрөтөүе иҫемә килеп төштө. (Бәлки, был хаҡта яҙғанмындыр ҙа.) Ул әсәһенән һорай икән:*

*— Ниңә Лениндың балалары юҡ?*

*Әлфиә аңлата:*

*— Уның дәүләт эштәре бик күп булған, балалар тәрбиәләргә ваҡыты ҡалмаған.*

*— Ниңә Карл Маркстыҡы күп?! Ә-ә... бының өсөн уны, моғайын, партиянан сығарғандарҙыр...*

*Философҡа ете йәш тә тулмаған.*

**28.VIII.2002.**

*Телевизорҙан күреүемсә, хәҙерге заман киноһында, эстрадаһында, хатта театрында бөтәһе лә бар: выжданһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, уйнаш, үлтереш-ҡырылыш, ватанһыҙлыҡ һ.б. Тик ике генә нәмә юҡ: матурлыҡ һәм фекер (идея).*

* * *

*— Как поживаете? — спрашивает меня встречный на улице.*
*Отвечаю:*
*— Живу как памятник старины — в основном для публичного обозрения.*

**9.XII.2002.**

*Биш йәшлек ҡыҙ бала, урамда буксирға тағылып барған машинаны күреп, әсәһенән һорай:*
*— Ниңә анау бәләкәй машинаны ҙурыһы тағып алған? Үҙе генә барырға юл белмәйме ни?*

**26.XI.2002.**

*Беҙҙең этажда Гөлнара исемле ике медсестра бар. «Тәҡдимдәр дәфтәре»нә ошоно яҙҙым:*

*Бер үҙемә ике Гөлнара,*
*Гөлнаралар булғас, эш бара.*
*Ышанмаһаң, Нурия[1], кил, ҡара.*

* * *

*«Бар» һүҙе һәм «Бардак» һүҙе*
*Бер тамырҙан.*
*Береһенә лә инә алмай бик ҡаңғырған*
*Кеше мин,*
*Бер суфыйҙың ише мин.*

**3.XII.2002.**

*Бик сибәр һәм алсаҡ сестрабыҙ Рүзиләгә күстәнәс бирәм. Алмай, нығытып ҡарыша. «Ниңә улай итәһегеҙ?» — ти. «Шуның өсөн, — тим, — Һеҙ минең палатама ҡояш кеүек балҡып килеп инәһегеҙ, — тим. — Мин яҡтылыҡ, йылылыҡ биргән өсөн Ҡояшты көн дә һыйлап торор инем. Был мөмкин түгел. Ҡояш урынына, исмаһам, Һеҙҙе һыйлайым»,— тим...*
*Был һүҙҙәрҙе ихлас әйттем.*

**15.XII.2002.**

*20 сәғәт 10 минут. Рауза беҙҙе мәңгелеккә ташлап китте.*
*Ғазапланмай ғына, тыныс үтте.*
*Үтер алдынан:*
*— Рауза! — тинем.*
*— Әү, — тине ул. Һуңғы ауазы шул булды.*

---

[1]*Нурия Нурулловна — бүлек мөдире.*

**24.XII.2002.**

*Рафаил Сафинды оҙаттыҡ. Ҡыйғыға алып киттеләр. Йыназа Академтеатрҙа булды, халыҡ байтаҡ ине. Зарланмай йәшәне, зарланмай сирләне, зарланмай үлеп китте. Ә бит ул күп рәхәттәр күреп йәшәмәне. Ғаиләһенең дә рәте булманы. Шиғырға табынды. Хатта Салауат премияһы ла биреп өлгөрмәнеләр. Ә лайыҡлы ине.*

**25.XII.2002.**

*Раузаның китеүенә 10 көн тулды.*

*— Ҡайғың ауыр, әммә иламайһың,*
*Һинең кеүек түҙем ир һирәк.*
*— Иламауым сабырлыҡтан түгел,*
*Иларға ла, дуҫым, көс кәрәк.*

**8.II.2003.**

*Күпме ваҡыт был дәфтәргә ҡағылманым. Рауза киткәндән һуң ваҡиғаларҙың, төрлө хәлдәрҙең мәғәнәһе кәмене. Шуға күрә ҡулға ҡәләм алыуҙары ауырлашты. Ҡәләм түгел, әйтерһең, тимер ҡаҙыҡ күтәрәм.*

*Уҙған төндә ул тәү тапҡыр төшөмә инде. Ниндәйҙер урман аҡланында осраштыҡ. Ул шундай тыныс, мин дә борсолоуһыҙмын, эсемдә һағыш ҡына, имеш. Ул, әйтерһең, бик ябай хәбәр һала миңә:*

*— Мостай, мин бит икенсе иргә сыҡтым, — ти.*

*Мин дә артыҡ хафаланмай ғына һорайым:*

*— Һәйбәт кешеме?*

*— Һәйбәт кеше. Подполковник, — ти.*

*— Бәлки, кире ҡайтырһың...*

*— Юҡ инде, Мостай, минән башҡа йәшәргә тырышығыҙ инде, — ти.*

*Мин урман буйлап киттем. Өҫтөмдә һалдат шинеле. Эҫе. Йәш сағыбыҙ, имеш. Ир менән ҡатын икәнебеҙҙе беләбеҙ.*

*Бер аҙ барғас, ул йәнә миңә тап булды. Тағы саҡырҙым.*

*— Юҡ инде, — тине.*

*Башҡаса һүҙ булманы. Илау-һыҡтауһыҙ айырылыштыҡ.*

*Ҡасандыр Прометей ауыҙынан әйттергән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе яңынан аңыма килде:*

*Көндәремдең ҡанаттары һынды,*
*Һүнде беҙҙең оя.*
*Йондоҙҙар ҙа йым-йым нурҙар түгел,*
*Йомма йәштәр ҡоя.*

*(Бынан һуң 23 йыл уҙған.)*

**6.IV.2003.**

*Арлы-бирле таҡмаҡ сығарам шунда.*

*Процедура сестраһына:*

*Әлифәкәй уйнап-көлөп кенә*
*Бирҙе миңә татлы язаны:*
*«Укол ғына был», — тип алданы ла*
*Мөхәббәттең уғын ҡаҙаны.*

*Палата сестраһына:*

*Рәшиҙәнең күҙҙәрендә нурҙар,*
*Күңелдәре тулы нескәлек.*
*Ул яһаған тоҙло бер клизма —*
*Ғүмерлеккә етер иҫтәлек.*

**7.IV.2003.**

*Бүлек мөдиренә:*

*Килеп инһә Флүрә,*
*Ҡаршы алам аяғүрә.*

*Яҙылып китә билем,*
*Асылып китә телем.*

*Күккә сөйөлә башым,*
*Һикереп ҡуя ҡашым.*

*Ул бит шундай мөләйем —*
*Серен нисек беләйем?*

*Белмәйерәк тор. Сер булһын.*
*Үҙе — берҙән-бер булһын.*

**12.IV.2003. Дауаханала.**

*Я согласен, когда говорят, что все на свете создал Бог, в том числе само мироздание. Только у меня неизменно возникает вопрос: «Кто же создал самого Бога?»*

*Наверное, это сделали люди себе в надежду и на страх.*

**13.IV.2003**.

*Раузаның ҡәберенә барҙым. Оҙаҡ торҙом. Һағышым бөркөлөп сыҡмай, ҡайҙалыр тәрәндә көйрәй башланы хәҙер. Быныһы ғүмерлеккәлер инде. Көн аяҙ, йылы. Ниндәйҙер ҡоштар бер-береһенә тауыш бирә. Зыяратта был өндәрҙе ишетеү сәйер. Ер өҫтөндәге тормош, тимәк, үҙ көйөнә, үҙ яйына бара.*

*Шундай көнгә килеп еттем: таныштарымдың күпселеге хәҙер бында. Ҡайҙа ҡарама — таныш исемдәр...*

**1.VI.2003.**

*Заһир Исмәғилевты ерләнек. Бик ауыр булды. Мин дә телмәр һөйләнем. Һөйләгәндә башым әйләнеп китте. Кешеләр һиҙмәне, буғай. Йәш саҡта ул исемдәребеҙ яҡын килеүгә ҡыуана торғайны: «Мостай — Исмай» бит беҙ», — тиер ине.*

*60 йылдан ашыу дуҫ булып йәшәнек. Һуңғы утыҙ йылда дачалар буйынса күрше булып ғүмер иттек. Һуңғы өс йылда бер йортта торҙоҡ. Ҡәбере уның Раузанан 15 — 20 аҙым ғына арыраҡ. Мәғсүфәгә лә урын ҡалдырылған. Рауза эргәһендә минең дә урыным бар. Тимәк, мәңгелек төйәктәребеҙ ҙә күршелә генә буласаҡ.*

*Йыназа ваҡытында өс тапҡыр мулланан Ҡөрьән уҡыттылар: иртән — өйөндә, унан —зыярат ҡапҡаһы төбөндә, аҙаҡтан — поминкала. Мулла байтаҡ ултырҙы, шунан һуң оҙаҡ итеп бер нисә аят уҡыны. Поминкала 200-ләп кеше ултыра. Алдарында буш рюмкалар. «Был мулла егет ҡасан китер икән?» — тип уйлай башланыҡ. Телмәр һөйләйҙәр ҙә һыу ҡойолған бокалдарҙы күтәрәләр.*

*Заһирға был бер ҙә генә оҡшамаҫ ине. Мулла киткәс, иркен тын алып ҡалды йәмәғәт.*

*Өс тапҡыр уҡыттылар, өс тапҡыр мул-мул итеп хәйер бирҙеләр. Был әллә нисек килеп сыҡты. Әйтерһең дә, ожмахҡа инеү хоҡуғын мулланан һатып алдыҡ.*

*Ожмахҡа инеү түләүһеҙҙер ул. Унда донъялыҡта ҡылған изгелеккә ҡарап индерәләрҙер, тим, ә хәйерҙең муллығына ҡарап түгелдер.*

*Мин Тәңре менән туранан-тура, талмасһыҙ (без посредника) аңлашырға тырышам. Уға бит мал да, аҡса ла кәрәкмәй. Ошоларҙы уйланым да, әллә нисек булып китте: әҙәм балалары гонаһтарын ярлыҡатыу өсөн Хоҙайға ришүәт (взятка) бирергә маташалар түгелме?*

*...Бына Заһирһыҙ ҙа тороп ҡалдыҡ. Хәҙер сәнғәттә иң өлкәне, йәғни иң ҡарты мин булып сығам. Мәғәфүр барын-бар ҙа, уның аңы үҙгәреберәк китте.*

**21.VI.2003.**

*Молитва*

*Не дай, Бог, мне всего того, что я прошу у тебя. Дай то, что можешь, что пожелаешь. Ты же мне плохого желать не можешь.*

**21.VI.2003.**

*Тормошта беҙ бигерәк күп нәмәне тантаналы рәүештә билдәләргә яратабыҙ. Тауыҡ һалған һәр йомортҡаны алҡышлап ҡаршылайбыҙ. Бер йомортҡа һалыу тауыҡтың көндәлек эше, уның төп вазифаһы түгелме ни? Әгәр көн һайын икене һалһа — бер хәл...*

**23.VI.2003.**

*Вероломные люди пользуются легковерием честных людей.*

* * *

*Минең ғүмер буйы йәнем әрнене — сәбәпһеҙ әрнене. Әммә әлегәсә тәнем һыҙлау кисермәне. Ә бит гел ауыртынып, һыҙланып йәшәүселәр ҙә күп.*

*Ҡайһыһы ауырыраҡ икән?*

**14.VII.2003.**

*Әле З. Нурғәлиндың «Театрҙың шиңмәҫ шишмәһе»тигән китабын ҡарап ултырам. 391-се биттә шундай материал баҫылған: «28 март — 1 апрель, 1937 йыл. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының икенсе пленумы. А. Таһиров идара председателе вазифаһынан бушатыла. Пленум «Идара председателе вазифаһын һаҡларға» тигән ҡарарға килә. Был вазифаға Т. Йәнәби һайлана».*

*Пленумда А. Таһировты тәнҡитләмәгән бер генә сығыш яһаусы ла булмай. Х. Кәрим, Б. Ишемғол, Д. Юлтый, Ғ. Шамуҡов, Б. Имашев, Ә. Вәли, Ә. Чаныш, С. Мифтахов, Й. Гәрәй һ.б. (Минеңсә, Буранғол да сығыш яһаны. —* ***М. К.****) Бығаса Афзал Таһировты бөтәһе лә «Афзал аға» тип кенә йөрөтә ине. Ах итеп, өф итеп кенә торалар ине.*

*Ике-өс йәш яҙыусыны ла ошо пленумға саҡырҙылар (кемдәр икәнен хәтерләмәйем).*

*Беренсе һәм икенсе көндәрҙә мине саҡырыу ҡағыҙы буйынса пленумға индерҙеләр. Тәүге көндә доклад булды. Сығыштар ҙа булғандыр. Икенсе көндө яман тәнҡит башланды. Таһировты тетеп һалдылар, уның драмаларын тәнҡитләгәндә Йософ Гәрәй (бынығын асыҡ хәтерләйем) Академтеатрҙың баш режиссеры Мәһәҙиевты ла элеп алып һелкеп һалды. Телмәрен былай тип тамамланы:*

*— Долой подхалимство Магадеевых!*

*Әүәлерәк күргәндәремдә Таһировтың таҡыр итеп ҡырылған башы алыҫтан ялтырап тора торғайны. (Бер-ике йыйылышта күҙәткәйнем.) Ошо уҡ баш минең күҙ алдымда ҡараға әйләнә барҙы. Шулай һиҙҙем. Бөтәһенең дә бер кешегә ташланыуы минең, үҫмер малайҙың, башына һыйманы. Быға тиклем бит был кешеләр ошо тиклем үк ҡаты бәғерле түгел инеләр. Мин шомға төштөм.*

*Бынан һуң мин ошоға хас нәмәләрҙе байтаҡ күҙәттем. Әллә нисә мең делегат алдында Н. Хрущев Сталиндың ҡәберен менеп тапаны. Унан һуң сығыштар булманы. Әгәр Хрущевтың докладынан һуң прениялар булһа, Сталиндың ярандары мотлаҡ Хрущевҡа ҡушылыр ине. Сөнки һәр береһе хәтере төбөндә ятҡан рәнйешен, Сталинға булған асыуын ҡапшап сығарыр ине.*

*Таһировҡа ҡарата ла шулайыраҡ булғандыр: ҡасандыр кемгәлер нимәлер биреп еткермәгәндер, ҡасандыр кемгәлер ҡырыныраҡ ҡарағандыр. Ҡыҙған обстановкала был хәтер ҡалыуҙар ҡалҡып сығып, ораторҙарға дәрт биргәндер. Бында икенсе нәмә лә бар: өндәшмәй ҡалыу яҡлау менән бер тигеҙ. Әммә шул уҡ пленумда бөтә яҙыусыларҙы ла һөйләргә мәжбүр итмәнеләр бит.*

*30 — 40 яҙыусының бөтәһе лә телмәр тотманы. Ҡалғандары (сығыш яһағандар) өсөн үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты ла ныҡ роль уйнағандыр: әгәр аҙаҡтан кемдең ни өсөн өндәшмәй ҡалыуын тикшерә китһәләр?..*

*Ул саҡ ни тип яуап бирергә?.. Һөйләп ҡалыуың хәйерле.*

*Пленум «ҡунаҡтар»ын өсөнсө көндө ултырыш залына индермәнеләр. Күрәһең, ыҙғыш-талаш яманая барасағын һиҙгәндәрҙер. Ул әлеге Офицерҙар йортонда (К. Маркс менән Коммунистическая урамдары мөйөшөндә) барҙы. Кире бороп сығарғас, байтаҡ урамда йөрөнөм. Ҡыуып ебәреүҙәренә хәтерем ҡалды, ныҡ итеп ҡалды. Туфансараҡ, Сәләмсәрәк рифмалар менән бер нисә строфа шиғыр сығарҙым. Ул шулай башлана ине. (Хатта ҡайҙалыр архивымда ҡульяҙмаһы ла булырға тейеш.)*

*Пленум иптәш мине*
*Ҡунаҡ итеп үҙенә саҡырҙы.*

*Ошондай һүҙҙәр менән бөтә:*

*Ел дә урамда йөрөй ҡар кимереп,*
*Мин дә йөрөйөм шунда тилереп.*
*Ҡайғырма, баш, килер йылдар бирер*
*Шунда керә торған билетын.*

*Ҡалайыраҡ рифмаһы:*

*тилереп,*
*билетын.*

*Сөнки ул көндө Яҙыусылар союзы билеты менән генә индерҙеләр.*

* * *

*Нурғәлиндың китабында Таһир Баишев тураһында байтаҡ мәғлүмәт бирелә. Мин Баишевты яҡшы хәтерләйем. Ул миңә бер хат та яҙҙы. Уның төп теләге Көнбайыш башҡорттарының әҙәби телен булдырыу ине. «Әгәр башҡорт теле ике булһа, әле йәшәп килгән әҙәбиәткә, сәнғәткә ҙур зыян киләсәк», — тип мин был концепцияны ҡабул итмәнем. Яуабымда шуны аңлаттым. Уны әле лә ҡабул итмәйем. Йәшәп килгән әҙәби тел рамкаларында уның лексикаһын байытыу, фонетикаһына үҙгәрештәр йәки өҫтәмәләр индереү яғында булдым. Әле лә шулай уйлайым. Әгәр, тинем, Көнбайыш башҡорт телен үҙ аллы күренешкә әйләндерһәк, әҙәбиәтебеҙҙең дә, театрыбыҙҙың да, матбуғатыбыҙҙың да көстәре таралasaҡ. Зәйтүнә Бикбулатова, Рим Сыртланов, Әмин Зөбәйеров, Ғәзим Туҡаев, Рәғиҙә Янбулатова, Әҡлимә Садиҡова, Тәлиғә Бикташева һ.б.һ.б. ҡайһы театрҙа уйнаясаҡ? Ниндәй телдә?*

*Таһир Баишевтың төп концепцияһы — Көнбайышты Көньяҡтан һәм Төньяк-Көнсығыштан айырыу ине. Йәнәһе, ул саҡта саф башҡорт культураһы үҙе генә булып ҡала. Был тенденция экономик яҡтан да ҡурҡыныслы ине. Әгәр шул саҡта көнбайыш башҡорт теле барлыҡҡа килһә, бөгөн «Көнбайыш башҡорт иле»*

*лә барлыҡҡа килеү мөмкин ине. «Теле барҙың — иле бар». Кем отор ине? «Көнбайыш Башҡортостан» бер килеп Татарстанға ылығыуы ла ихтимал ине. Бына нимәгә килтерер ине Т. Баишевтың «теорияһы».*

**5.VIII.2003.**

*Вчера низкопробную ложь о Башкортостане показал в своей программе Андрей Караулов. Называется она «Момент истины». Когда-то она была такой. Караулов превратил ее в «Поток вранья». Значит, дорого платят.*

*Во времена простодушной демократии он разговаривал с собеседниками глядя им в глаза, не прятал свои жаждущие правды очи от телезрителей. Теперь он ушел в теневое пространство, оттуда вкрадчивым голосом натравливает одних людей на других. Видимо, это соответствует его теневому гонорару. Тут правила единые.*

*А мы, Андрей Викторович, тоскуем по вашему прежнему честно возмущенному, честно сострадающему взору. В последнее время, постоянно роясь в заднем дворе, вы изрядно заврались, испачкались.*

*А все-таки глаза прячете. Значит, у вас еще тлеет совесть. Поэтому-то от нас отворачиваетесь.*

*Стыдно да, Андрей Викторович.*

*Года два назад вам даже хорошее письмо написал. Как положено, вы, конечно, мне не ответили.*

**8.VIII.2003.**

*Әлфиә менән икәү Рауза янына барып килдек. Ҡәбере өҫтөндә ике венок ҡалған. Бүтәндәрен, минең үтенесем буйынса, зыярат һаҡсыһы Фәнил алып ҡуйған. «Ҡәҙерҙәре китеп бара ине», — ти. Яһалма сәскәләрҙең дә ҡәҙере оҙаҡҡа бармай икән. Күңелдә әрнеү түгел, һағыш хәҙер. Гел йәш сағын хәтерләйем. Тимәк, ул минең өсөн гел йәш булып ҡалды.*

*Зыярат тынлығы һағышты оторо көсәйтә.*

**11-12.VIII.2003.**

*Әлфиә менән икәү Красноусольский санаторийында йәшәнек. Бик һәйбәт булды. 1982 йылдан бирле курортта дауаланғаным юҡ ине. Һуңғы тапҡыр Рауза менән икәү Байкал буйындағы санаторийға барғайныҡ. Ул саҡ беҙҙе күрергә Валентин Распутин килгәйне. «Ҡоро закон»ға ҡарамаҫтан, бер шешә араҡы килтергәйне. Үтә танһыҡ һый булды.*

**22.VIII.2003.**

*Телевизорҙа Факиһа йәки Йомабикә күренеп ҡалһа, экран яҡтырып китә, хатта ниндәйҙер үләндәрҙең, сәскәләрҙең хуш еҫе аңҡып ҡала төҫлө.*

**31.VIII.2003.**

*Подчиненный своему начальнику:*

*— Я вынужден признаться, Иван Имамович, я о вас был совсем другого мнения: я думал, вы умный человек, вы, оказывается... (тут он громко чихнул) мудрейший человек.*

**31.VIII.2003.**

*Минең Фатих исемле бабайым бар ине (инәйҙең ағаһы). Ул йылына бер тапҡыр Өфөгә килеп, миндә ҡунаҡ була торғайны.*

*Бер килгәнендә, ашап-эсеп алғас, был һүҙ ҡуҙғата:*

*— Беҙ, Мостафа, әбейең менән кәзә алырға булдыҡ әле. Шул йәһәттән бер кәңәш һорамаҡсымын. Кәзәнең ни уның бәйәһе йөҙ тирәһе хәҙер. Һин, аҡыллы кеше, кәңәш ит — шул йөҙ тәңкәне ҡайҙан алайым икән?*

*Башын был ситкә бора төштө. Мин, аптыраған кеше булып, көрһөнөп ҡуйҙым.*

*— Мостай Кәримгә ымлап ҡараһаҡ, нисек булыр икән?*

*— Кәттә булыр. Иллә зирәк кешеһең дә инде, Мостай Кәрим!*

*Быны ни өсөн хәтерләнем? Хәҙер миңә йыш ҡына Фатих бабайса кәңәш һорап киләләр. Аҡса һорамайҙар — фатир, университетҡа урын, малайына, ҡыҙына эш һ.б. һорайҙар.«Һинең бер һүҙең етә», — тиҙәр.*

*Етер бер һүҙең?..*

*Фатих бабайҙың бер ҡылығы бар ине: өс рюмканы эскәнсе миңә «Мостафа» тип өндәшә лә шунан һуң: «Ҡой әле тағы берҙе, Мостай Кәрим!» — тип ҡулын һелтәп ебәрә.*

*Ул саҡта бабайым 80-де үткәйне инде.*

**1.IX.2003.**

*Ризыҡ киңлегендә ни шатлыҡ бар,*
*Сығыр еркәйҙәре тар булғас,*
*Эсәктәрең тулы «зар» булғас?..*

**18.IX.2003.**

*Иногда я перелистываю географический атлас. Вспоминаю страны, города, где я бывал.*

*Передо мной страны Европы. Глаза остановились на Венгрии. Там я в качестве военного корреспондента участвовал в боях. Вот озеро Балатон. На берегу его небольшой курортный городок. Балатонферед. Было самое начало апреля 1945 г. В этом городке остановилась наша редакция. Квартирмейстер наш — азербайджанец Мамедов — поставил меня на постой в небольшой домик, предупредив:*

*— Не обижайся только, там сильно больная женщина. Другого места нет.*

*Куда же денешься. Уже вечер наступает. Я согласился. Действительно, в небольшой комнатке лежит больная, беспрестанно стонет. В передней сидит старуха. Больная лежит лицом к*

*стене. Как мог на полунемецком, полумадьярском объяснился со старухой: «Дескать, не беспокойтесь, я вас стеснять не буду, займу уголок в передней». Все, что было в мешке, выложил на стол, руками показал, что будем ужинать вместе (тогда в городах Венгрии люди почти голодали).*

*Старуха вскипятила воду, сделала что-то вроде чая. Как мог рассказал ей, что у меня тоже есть мать, чем-то похожая на нее. Тем временем больная стала реже стонать. Даже присела и выпила несколько голотков чая. Я на ее сторону не смотрел — не от отвращения, а от жалости, вернее, от неловкости.*

*Старая хозяйка оказалась общительной. Очень сокрушалась о дочери.*

*Уже наступила ночь. Вдруг связной редакции прибежал ко мне.*

*— Быстро соберитесь! Уезжаем дальше. Все уже в сборе, — сказал и убежал.*

*Я быстро собрался, что собраться-то! Затянул ремень и одел шинель.*

*— Спасибо, көсенем! — сказал и пошел к двери.*

*Вдруг с постели выскочила больная и бросилась ко мне:*

*— Молим, не уходи, капитан! — сказала она. — Я полька. Русский трошка разумею. Не уходи, капитан. Я не больная. Мне страшно. Ваши солдаты насильничают, говорят. Я поняла, вы не такой, вы добрый. Если вы останетесь, меня трогать не будут. Я лукаво больна. От страха больна, чтобы меня не трогали.*

*При тусклом свете я заметил стройную фигуру женщины, а лицо ее было очень молодое и очень красивое.*

*— Не бойся, это брехня, что русские солдаты плохие.*

*— Правда?*

*— Правда! Что я похож на насильника? Я ведь тоже русский солдат.*

*— Нет! Спасибо! Вы добрый.*

*Она крепко обняла меня за шею и дрожащими губами коснулась моей небритой щеки.*

*— Да хранит вас бог, капитан. (В Венгрии каждого офицера называли «капитан».)*

*Сказала и отпустила меня.*

*Я выбежал в ночь. Сам шепчу: «Да хранит тебя судьба, милое, бедное создание. Да будет оправдано утешение, которым обнадеживал я тебя...»*

* * *

*Йомағужин ағайҙың мәрәкәләренән:*

*Ашаһаң — туҡ булырһың,*
*Ашамаһаң — ҡыуыҡ булырһың.*
*Байыҡһаң — ҙур булырһың,*
*Белһәң — хур булырһың,*
*Юғалһаң — ғәйеп булырһың,*
*Үлһәң — мәйет булырһың.*

**27.X.2003.**

*Тағы дауаханаға килеп эләктем. Һул аяғым шеште. Унын бер үҙен генә ебәреп булмай бит инде, шуға күрә уңын да алып килдем, иҫән булһа ла.*

*Шаярған булам тағы. Бөтә тәнем ҡойолоп төшөп бара. БыҒаса өс көн 38 градус температурам булды. Рухым да талпынып тормай.*

*Ҡыуанысым да бар.*

*84 йәшемде бик матур үткәрҙеләр. Президент Салауат ордены тапшырҙы. Уны тәмләп телевизорҙан күрһәттеләр, радионан һөйләнеләр, гәзеталар яҙҙы. Рәхимовтан, Байдәүләтовтан шәхси телеграммалар килде. 1—21-ҙәрендә бик күп халыҡ килә-килә торҙо, ҡала башлығы, район башлыҡтары, министрҙар өйөмдө күреп, ҡулымды ҡыҫып сыҡтылар. «Сыҡтылар» тигәс тә, былай ғына сығып китмәнеләр. Өс көн буйы Әлфиәнең табыны тулы булды. Ҡунаҡтары өҙөлмәне.*

**29.X.2003.**

*Ил бәхете — тыныслыҡта һәм туҡлыҡта. Кеше бәхете — һәр кемдең үҙенеке. Уны бүтәндәрҙән көтөргә алып та, аҡсаға алып та булмай. Туҡлыҡ һәм тыныслыҡ унын өсөн бәхеттең бер өлөшө генә.*

* * *

*Малай саҡта яҙған бер шиғырым шулай бөтә ине:*

*Ватаныма булған һөйөүемдән*
*Йөҙ егерме тибә йөрәгем.*

* * *

*Какие пришли предвыборные времена! Раньше на заборах писали короткое, очень короткое слово, теперь на заборах пишут полное имя и отчество кандидата. Говорят, пишут это за плату. Раньше писали даром.*

**29.XI.2003.**

*Народ, поддавшийся подстрекательствам и провокации, потеряв чувство реальности и собственного достоинства, превращается в неразумную толпу. А ее, толпу, очаруют проходимцы.*

*Агитаторы некоторых претендов на высокое кресло в Башкортостане хотят превратить монолитный, гордый наш народ в толпу, чтобы ее вести за собой.*

*О поведении толпы есть высказывания мудрецов древности и поздних времен. Некоторые из них в начале этой тетради.*

*Вот одно изречение Г. Гейне (повторяю): «Тому, кто хочет воздействовать на толпу, нужна шарлатанская приправа».*

МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫҠТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ
ГОД УКРЕПЛЕНИЯ МЕЖНАЦИОНАЛЬНОГО СОГЛАСИЯ

# ЭСКЕРҺЕҘЛЕК ҺӘМ МӘКЕР

*Республикала титуллы милләттең киләсәгендә проблемалар тыуҙырыу ихтималлығы булған күренештәр йышайҙы. Әлегә уны ике өлкәлә күҙәтергә мөмкин: кадрҙар сәйәсәтендә йәки башҡорттарҙы идара органдарында эшләүҙән күпләп ситләштереүҙә һәм башҡорт тарихына, мәҙәниәтенә ревизия үткәреп хурларға маташыуҙа. Һуңғы осорҙа Интернет селтәрендә, мәҫәлән, республиканың дәүләт теле булараҡ мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеүгә, Өфөгә 1500 йылдар элек үк нигеҙ һалыныуға бәйле туранан-тура шик, хатта кире мөнәсәбәт белдерелгән материалдар йыш осрай. Йәнәһе, «башҡорт теле үлеп барыусы телдәр исемлегенә индерелгән», уны өйрәнергә мәжбүр итеү – кеше хоҡуҡтарын боҙоу, һәм ул – тиҙ арала хәл ителергә тейешле проблема. Былдай бер яҡлы ҡараш белдереүселәр, күренеүенсә, сайтты ошондай фекерҙе башҡаларҙа ла тыуҙырыу өсөн файҙалана.*

## Дәлилдәр нимә һөйләй?

Башҡортостандың титуллы милләте мәҙәниәтенә, шул иҫәптән теленә һәм тарихына, «юғары»нан тороп ҡарарға маташыусылар бер ниҙән дә тартынмай. Өфөнөң Дуҫлыҡ монументы тирәһендә боронғо замандарҙа ла кешеләр йәшәгәнлеге хаҡында Өфө-II урынында археологик ҡомартҡылар күп йылдар дауамында табылыуы хаҡында мәғлүмәт ваҡытлы матбуғатта бер нисә йыл күренеүгә ҡарамаҫтан, Интернетта, шул иҫәптән «Уфимский журнал»да, сығыш яһаған авторҙар был факттарҙы инҡар итеүен ҡуймай. Йәнәһе, бер ниндәй дәлилһеҙ академик Нияз Мәжитов йәмәғәтселекте әлеге Өфө урынында Башҡорт ҡалаһы булыуына, «башҡорттарҙың меңәр йылдар Көньяҡ Уралда йәшәүенә, юғары үҫешкән цивилизацияға эйә булыуына, бер нисә мең йыл элек һоҡланғыс ҡалалар төҙөүенә ышандырырға тырыша». «Смешно, да не до смеху» тип аталған хәбәрҙәге башҡорт тарихы, мәҙәниәтенә ҡарата кире хис-тойғолар бының менән генә сикләнмәй. «Сказка», «квазибашкирское государство», «подпорка», «вещдок», «достаточно сумбурно», «крапленая карта», «дурной пример заразителен», «древних башкир», «полудикие существа» һ.б. кире экспрессиялар авторҙа әҙәп-әхлаҡтың самалы булыуын күрһәтә. Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙе «ярым ҡырағай» йән эйәләре төшөрөүе тураһындағы ишараны белемле кеше ыңғай ҡабул итә алмай, сөнки ҡырағайҙарҙың ундай сәнғәткә эйә булыуы тарихта билдәһеҙ.

Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың Арҡайым, сарматтар алтынына мөнәсәбәте

мәсьәләһенә төшөп китеп, автор башҡорттоң рухи донъяһына кире ҡарашта булыуын асып һала. Хикмәт, әлбиттә, кешенең нимәгә инаныуында, ниҙелер ҡабул итмәүендә түгел, хикмәт уны тиҫкәре мөнәсәбәт аша сағылдырып, уҡыған йәмәғәтселекте лә шуға саҡырыуҙа. Башҡорт ерендә тыуып үҫеп, белем алған, оло тормош юлына аяҡ баҫҡандарҙың ҡасандыр ата-бабаларына һыйыныр урын биргән аҫабаларҙың рухын түбәнһетергә маташыуы – бер хәл, башҡаларҙы ла ошо ҡылыҡҡа эйәрергә саҡырыу – икенсе. Был административ яуаплылыҡҡа торошло. Бәхеткә күрә, ундайҙар аҙ.

Етди «ғәйепләүҙәр»гә тотоноуҙан алда авторҙарға тарихи сығанаҡтар менән танышыу ҡамасауламаҫ ине. Мәҫәлән, Өфө-II урынында табылған ҡомартҡылар буйынса Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының юғары әҙерлекле белгестәре биргән һығымталарҙан күренеүенсә, кәм тигәндә мең ярым йыл элек кешеләр ошонда төйәк ҡороп, быуаттар буйына ғүмер иткән. Археология фәнендә «теше төшкән» был тарихсыларҙың мәғлүмәтлелеге, тәжрибәһе, моғайын, «Уфимский журнал» сайтында сығыш яһағандарҙыҡынан кәм түгелдер. Әйткәндәй, ул документ академик Н. Мәжитовта һаҡлана, күсермәһе «Ағиҙел»дә лә бар. Һүҙ ҙә бит «меңәр йылдар» түгел, мең ярым йыл тураһында бара. Әгәр академик, бында башҡорттарҙың ата-бабалары көн иткән, ти икән, ул фекерҙә нәфрәтләнерлек бер ни ҙә юҡ, сөнки ҡаҙыныу эштәре башҡорттар борондан ғүмер иткән ерҙә алып барыла. Әммә авторға был документтарҙың да, башҡа логик иҫбатламаларҙың да кәрәге юҡ, сөнки ул Өфөнөң боронғолоғон ғына түгел, башҡорттоҡо булыуын да инҡар итеү маҡсатын алға һөрә.

Ошо күҙлектән ҡарағанда, V быуатта һуғылған Византия аҡсаһының ҡайһы ҡатламда табылыуына Н. Мәжитовтың яуап бирә алмауы хәл иткес роль уйнаймы икән? Ҡатлам үҙе генә бер ни ҙә иҫбатламай. Авторҙың Көнсығыш, айырыуса Монголия, Ҡытай кеүек боронғо илдәрҙә атаһы менән бергә бәләкәйҙән ҡаҙыу эштәре алып барып, бай тәжрибә туплаған археолог Игорь Кызласовтың фекере менән иҫәпләшергә теләмәүе бер ҡалыпҡа ла һыймай.

Абруйлы белгестең «Башинформ» агентлығындағы матбуғат конференцияһында еткергән, Көнсығыш һәм Көнбайыш Европала ул саҡта Өфө-II кеүек ҡалалар булмаған, тигән фекере сайт вәкилдәрендә, күрәһең, көслө ризаһыҙлыҡ тыуҙырған: бының булыуы мөмкин түгел! «Уфимский журнал»дың 2010 йылдың декабрендә сыҡҡан «А был ли город?» тигән хәбәре быға теләмәһәң дә ышандыра. Өфө-II тураһындағы мәғлүмәтте «сәйәси спекуляция» тип атаған «бойондороҡһоҙ тарихсы Николай Швецов», йәнәһе, һәм ошо хаҡта белешмә һорап Рәсәй Фәндәр академияһына мөрәжәғәт иткән. Аңлайышлыраҡ булһын өсөн, Сергей Орловтың мәҡәләһенә лә туҡталайыҡ. «Һеҙ, бында V быуаттан XII быуатҡа тиклем ҡала торған, тип әйтәһегеҙ, – тип мөрәжәғәт итә ул Нияз Мәжитовҡа. – Артабан ул ҡайҙа булған?» Һорау археологты албырғатыу өсөн бирелгәнгә оҡшай. Яуап ҡайтарыу тарихсының бурысына инмәһә лә, әҙәпле академик мөрәжәғәтте яуапһыҙ ҡалдырмай: «Һеҙ провокацион һорау бирәһегеҙ», – ти ул. «Уға ярҙамға кейәүе (Сөнәғәтов. – **М.Х.**) килде», – тип дауам итә Орлов. «Урыҫтар уны штурм менән алған», – тип бөтәһенең дә һушын алды ҡаҙыу эштәрен алып барыусы».

Был, әлбиттә,– авторҙың бер ҡатлы һорауына шундай уҡ мәғәнәле яуап. Әммә Орлов үҙенсә һығымта яһай: «Саман ҡапҡалы Башҡорт Олегтың ауыр ҡалҡанын күтәрә алмаҫ ине». Автор, күрәһең, тарихты насар белә. Беренсенән, тарихта бер ниндәй ҙә Олег булмаған, ул – варяг Хельгтың урыҫлаштырып алынған

иseme. Икенсенән, был тарафтар барлығын Хельг, моғайын, башына ла килтермәгәндер, сөнки славяндар Ағиҙел буйында XV быуатта ғына күренә башлай. Өсөнсөнән, Орлов варяг кенәзенең көс-ғәйрәтен самаһыҙ арттырып ебәргән. Саман ҡапҡа күтәрмәçлек ҡалҡанды әкиәт геройы ғына йөрөтөүе ихтимал.

Ләкин автор үҙенекен ҡайыра: «Ҡала халҡы ҡайҙа булған? Ул саҡтағы иң эре ҡала халҡы? Бында кемдәр йәшәгән?» Ысынлап та, әҙәпһеҙ һорау, сөнки уның маҡсаты, күсмә башҡорттарҙың ҡала төҙөп йәшәүе мөмкин түгел, тигән фекергә ҡайтып ҡала. Ә матбуғат конференцияһына киләсәге Орлов хәбәрендә телгә алынған Владимир Ивановтың (уны автор Н. Мәжитовтың оппоненты тип атай. – **М.Х.**) саҡырылып та килмәй ҡалыуы осраҡлы түгелдер. Тимәк, әйтер, бәхәсләшер фекере юҡ.

«Мифический башкирский город продолжает жить» – Быйыл мартта шул уҡ сайтта донъя күргән хәбәрҙең авторы – А. Новиков. Ул Рәсәй Фәндәр академияһының Тарих институты биргән һығымтаны еткереү өсөн баçылғанға оҡшай. «Өфө урынында күп тигәндә Нуғай ханының күсмә ставкаһы булған» – һығымтаның төп мәғәнәһе шул. Ҡасан икәнлеген Новиков телгә алмаған. «Башкортостан с древнейших времен до наших дней» (Өфө, 2007 йыл) тигән китапта – Имәнҡала – шундай атама ла бар – 1489 йылда Нуғай Урҙаһының административ үҙәге булараҡ телгә алына, тип әйтелгән.

Авторҙың һығымтаһы буйынса, ставка Батый хан был яҡтарға хәрби сәфәргә сығырҙан бер нисә быуат алда нигеҙләнгән һәм баçҡынсыларҙың килеүен көтөп торған. Шул осорҙа үҙ артынан бик күп ҡәберлектәр ҡалдырған.

Бындай имеш-мимештәр, әлбиттә, Урал буйының аçаба халҡының тарихын белмәгән (сөнки ул совет осоронда бөтөнләй уҡытылманы. – **М.Х.**) кешеләр тарафынан һәм шундай уҡ уҡыусыға иçәп тотоп, ризаһыҙлыҡ тыуҙырыу өсөн ижад ителә. Боронғо Өфөгә ҡасан нигеҙ һалыныуға килгәндә, археология кеүек һирәк һөнәр кешеләренең эш һөҙөмтәһен юҡҡа сығарыу өсөн, моғайын, иң элек үҙеңә мәғлүмәтле, тимәк, бәхәскә ингән кешеңдән дә тәжрибәлерәк белгес булып, кире ҡаҡмаçлыҡ факттар менән эш итеү мотлаҡ. Ә сайтта ундайҙар күренмәй.

Темаға бәйле, Новости Mail.ru агентлығы сайтында ла шундай уҡ мөнәсәбәтле бер нисә хәбәр донъя күрҙе. Йәнәһе, башҡорт ғалимдарының фекеренсә, Башҡорт ҡалаһын боронғо ғәрәп тарихсылары ла теркәп ҡалдырған. Ул Европала иң эре административ, сауҙа һәм һөнәрселек үҙәге булған. Ҡаланы ЮНЕСКО белгестәре лә өйрәнергә йыйына. Ләкин, тиелә хәбәрҙең аҙағында, «ни өсөн йөҙ йылдан һуң ҡала халҡы төйәген ташлап китеп, күсмә тормошҡа күскән?» Был – компетентһыҙ кешеләр фекере. Башҡорт ҡәбиләләренең ысынлап та ултыраҡ тормошта йәшәүе мөмкин түгелме ни? Совет тарихында тиçтәләрсә йылдар буйы ныҡытылған, башҡорттар элек күсмә халыҡ булған, тигән фекерҙең ысынбарлыҡҡа өлөшләтә генә тап килеүен тарихсыларыбыҙ күптән иçбатланы. Ә ҡалала ҡасандыр тормош туҡтаған икән, тимәк, ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәлдәр мәжбүр иткән. Латин Америкаһында борон ғүмер иткән майяларҙың ҡалалары ни өсөн бушап ҡалғанын ғалимдар һаман асыҡлай алмай бит.

Ә хәҙер тарих фәне күптән асыҡлаған сығанаҡтарға мөрәжәғәт итәйек. Көньяҡ Уралда кешеләр беҙҙең эраға тиклемге IV меңенсе йыллыкта уҡ күренә башлай, тип яҙыла үрҙә аталған тарихи йыйынтыҡта. VII – II быуаттарҙа бында дахо-массагет ҡәбиләләре, йәғни башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары көн иткән. Яңы эраның 90 – 160 йылдарында грек ғалимы Клавдий Птоломей картаһында «пасиртай» (уны тарихсылар башҡорт тип атай. – **М.Х.**) халҡы телгә

алына. Волга һәм Урал буйҙарында табивой, боровой ҡәбиләләре йәшәүе тураһында әйтелә. Көнсығыш тарихы буйынса бөтә донъяла абруйлы белгес, милләттәшебеҙ Зәки Вәлиди был ҡәбиләләрҙе Ғәйнә, Табын һәм Бөрйән ырыуҙарының ата-бабалары тип атаған.

Академик Нияз Мәжитов үҙе тапҡан сығанаҡтарға ҡарағанда, боронғо башҡорт ҡәбиләләре VII – VIII быуаттарҙа 600-ҙән ашыу ҡала һәм ауылдарҙа бөтә Көньяҡ Уралды биләгән Бахмут, Турбаҫлы һәм Ҡара Яҡуп ҡәбиләләренең мәҙәниәтен мираҫ итеп алып, берҙәм халыҡ булып формалаша. Күп кенә археологик материалдарҙан күренеүенсә, IX – XII быуаттарҙа ата-бабаларыбыҙ Урта Азия менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан. Иҫәнғол ауылы янындағы Ямантау курганында табылған ебәк ҡалдыҡтары ошо турала һөйләй. Нияз Абдулхаҡ улы Өфө-II ҡалаһын тап ошо тарафтарҙан сыҡҡан кешеләр нигеҙләү ихтималлығын да әйтә. Был да ғәжәп түгел, цивилизация Урта Азияла меңәр йылдар элек үк сәскә атҡан, мәҫәлән, Сәмәрҡәнд ҡалаһына оҙаҡламай 3000 йыл тула. Урта Азия менән башҡорттарҙың тығыҙ бәйләнештә булыуы хаҡында Башҡортостанда шул яҡтарҙан күсеп ултырған Һарт ырыуы вариҫтарының күпләп йәшәүе лә раҫлай.

Аталған тарихи йыйынтыҡта башҡа сығанаҡ-даирәләрҙән дә миҫал килтерелә. VII быуатта ҡытайҙарҙың Һун династияһының генеалогик тарихында Тиеле төрки ҡәбиләһе телгә алына, тиелә унда. Көнбайыш Төркөстанда йәшәгән был халыҡтың бер өлөшө «Ба-шу-ки-ли» тип аталған. Профессор Чанг Манг фекеренсә, был – «башҡорт» этнонимының ҡытайса варианты. Ниңә аптырарға, Башҡорт тауҙары Иранда ла бар бит. Башҡорттар Әрмән географияһында ла эҙ ҡалдырған. Унда этнос «бутки», «бушки» тип атала. Төрки халыҡтар тарихы буйынса танылған белгес М. И. Артамонов уларҙы «башҡорттарҙың ата-бабалары» тигән фекер белдергән. Был халыҡтар Төньяҡ Каспий ярҙары буйына ҡышҡылыҡҡа малдарын ҡыуалап килтерә торған булған.

Китапта боронғо тарихсы Әбү-Зәйед әл-Бәлхиҙең IX быуатта уҡ башҡорттар тарихын, көнкүрешен һәм мәҙәниәтен өйрәнеп, үҙ яҙмаларын ҡалдырыуы ла телгә алына. Башҡорттарҙың Юрматы, Йәнәй һәм Кеси ырыуҙарының Паннонияға (хәҙерге Венгрия) килеп урынлашыуы хаҡында белешмәне Византия императоры Константин Багрянородный ҙа теркәп ҡуйған. Боронғо дәүер уйғыр ғалимы Мәхмүд Ҡашғари 1072 – 1074 йылдарҙа төҙөгән «Диуан лөғәт әттөрк» тигән хеҙмәтендә 20-ләгән төрки тел араһында башҡорт телен дә атай. Хатта үҙе эшләгән картала башҡорттар йәшәгән ерҙәрҙе лә күрһәтә. 1154 йылда ғәрәп географы Әл-Иҙриси, башҡорттар Каспий диңгеҙенең төньяғында йәшәй, Ҡараҡыя, Кастр, Мастр, Намжан, Биләр, Гүрхан исемле ҡалалары бар, тигән мәғлүмәт ҡалдыра. Иҙриси башҡорттарҙы «көслө рухлы, ҡыйыу кешеләр» тип атай. Күренеүенсә, милләтебеҙҙең боронғолоғон раҫлаған дәлилдәр баштан ашты. Уларҙы башҡорт булмаған кешеләрҙең теркәп ҡалдырыуы бәхәсһеҙ, моғайын, улар быны башҡорт тарихының баһаһын арттырыу өсөн эшләмәгәндәрҙер.

Ошо өлкәлә абруйлы белгестәрҙән иҫәпләнгән С. И. Руденконы ла башҡорт тарихын пропагандалаусы тип бер кем дә атамаҫ. «Тарихи әҙәбиәттә тәү тапҡыр «башҡорт» этнонимы IX быуат ғәрәп-фарсы авторҙары хеҙмәттәрендә осрай, – тип яҙа ул «Башкиры» тигән хеҙмәтендә. – X быуат тарихсыһы әл-Мәсүди, баутгарттар (башҡорттар) IX быуатта Арал диңгеҙе янындағы һуғышта ҡатнашҡан, тип яҙған». Тимәк, бөгөн ҡайһы берәүҙәр ҡоро һүҙ менән башҡаларҙы үҙенә ышандырырға маташыуына ҡарамаҫтан, ата-бабаларыбыҙҙың ваҡ йәки

бәләкәй, унан да бигерәк күскенсе булыуы раҫланмай. Күсмә халыҡтарҙың дәүләте булыуы мөмкин түгел, улар ҡала ла төҙөмәй, бик күп ырыу-ҡәбиләләрҙе уҡмаштырып, дөйөм мәҙәниәте булған халыҡ та ойоштора алмай.

XIII быуатта ғәрәп сәйәхәтсеһе Яҡут әл-Хәмәүи Иҙелдең түбәнге ағымында башҡорттарҙың Бөрйән исемле ҡалаһы булыуы тураһында ла әйткән. Ләкин, ни сәбәп менәндер, ул башҡорт ере Константинополь менән Булғария араһында тип иҫәпләгән. 1367 йылда Венеция сауҙагәрҙәре бер туған Франческо менән Доменико Пициганиҙар картаһында Кама менән Ағиҙел йылғалары буйындағы ҡалалар араһында Паскерти (Башҡорт) исемлеһе лә бар. Европала билдәле булып, картаға ингән ҡала, моғайын, бер нисә йыл элек кенә ҡалҡып сыҡмағандыр, сөнки ҡалаға үҙен танытыу өсөн күп йылдар тороу кәрәк. Ул саҡтарҙа әлеге кеүек транспорт та, элемтә лә булмаған.

Ә хәҙер башҡорт дәүләтенең ҡеүәтенә күҙ һалайыҡ. Тарихтан мәғлүм булыуынса, Батыйҙың ғәскәре урыҫтарҙы Калка янындағы тәүге бәрелештә үк ҡыйрата. 1236 йылда башҡорттар араһында булып киткән венгр монахы Юлиандың һүҙҙәренә ҡарағанда, башҡорттар татар-монгол баҫҡынсыларына 14 йыл ҡаршы тора. Бер нисә тапҡыр еңелмәҫ монголдарҙы ҡыйратып ташлай. Тарихсы С. А. Аннинскийҙың «Исторический архив» (1940 йыл) тигән хеҙмәтендә лә монгол-башҡорт һуғышы Хорезм солтаны менән һәм Көнбайыш походтарҙан күпкә оҙағыраҡ, йәғни 14 йыл дауам иткән, тип телгә алына. Был – үтә мөһим факт, һәм ул ата-бабаларыбыҙҙың көс-ғәйрәте, бер төптән эш итеүе хаҡында бәйән итә. Шулай уҡ Юлиандың, башҡорт иленә хан идара итә, әммә уны монголдар вәкиле күҙәтеп тора, тигән фекере үҙе үк үҙенсәлекле автономия хаҡында һөйләй. Ә бит урыҫ батшаһы менән дә башҡорттар ошондай уҡ мөнәсәбәт урынлаштыра алған. Көсһөҙ йәки күсмә халыҡ менән Мәскәү иҫәпләшер инеме ни!

Ата-бабаларыбыҙ тураһында XIX быуатта йәшәгән академик М. К. Любавский былай тип яҙған: «Рәсәй бойондороҡлоғонда булған халыҡтарҙың береһе лә үҙенең хәләл төйәген, ерен, милли көнкүрешен һаҡлап ҡалыу өсөн башҡорттар кеүек көс, ҡан сарыф итмәгән. Тигеҙ булмаған алышта улар бик күп кеше, матди, рухи юғалтыуҙар кисерә, ләкин шул һынауҙарҙа үҙенең этник тотороҡлолоғон, милли мираҫын һаҡлап ҡала». Һаҡлай, сөнки тарихи хәтере оҙон һәм ныҡ, ихтыяры көслө була. Ошондайыраҡ фекерҙе Пермь ҡалаһында тыуып үҫкән, университет тамамлап, земство табибы булып эшләгән, башҡорттар тормошон ғәрәп сығанаҡтарынан башлап ентекле өйрәнгән Дмитрий Никольский (1855 – 1918) ҙа әйтеп ҡалдырған. «Урыҫтар менән аралашыуҙан башҡорттар бер ни ҙә отмаған, сөнки тәүгеләре байлығын арттырыу өсөн бер ниҙән дә тартынмаған, – тип яҙған ул. – Шулай ҙа башҡорттар кешелек сифаттарын һаҡлай алған. Сит кешеләргә улар айырыуса ҡунаҡсыл. Иң элек ҡымыҙ менән һыйлай, һуңғы һарығын һуйып булһа ла ҡунаҡ итә. Былдай йомартлыҡ ҡунаҡсыл тип аталған урыҫтар араһында ла осрамай. Ҡунағын һыйлағанда башҡорт ялағайланмай, үҙен лайыҡлы тота».

«Башҡорттар араһында хәйерселәр осрамай». 1854 – 1918 йылдарҙа ошонда йәшәгән Александр Дмитриев та ата-бабаларыбыҙ тураһында юғары фекерҙә булған. «Башҡорттар Исәт яғында борон-борондан йәшәй, был хаҡта топонимдар ҙа асыҡ һөйләй, – тигән ул. – Ә урыҫтар был яҡҡа хоҡуҡ боҙоу, көслөк нигеҙендә үтеп ингән».

Был юлдар Р. Буканова менән В. Фешкиндың «Башкиры» (Өфө, 2007 йыл) тигән китабынан алынды.

## Дан өсөн түгел, ирек хаҡына

Мәскәү батшалығына ҡушылғанда иҫәбе буйынса урыҫтарҙан аҙға ғына ҡалышҡан башҡорттарҙың, славян халыҡтары тиҫтәләрсә, хатта йөҙҙәрсә тапҡыр артҡан бер мәлдә, үҙ төйәгендә быуаттар буйы үрсей алмауының сәбәбе нимәлә һуң? Был һорауға яуапты XVI быуат урталарынан эҙләй башларға кәрәк. 1557 йылда Мәскәү батшаһы Иван IV Кремлдә башҡорт бейҙәре Айсыуаҡ (Ғәйнә ырыуы), Ҡәнзәфәр (Мең), Тәтегәс (Юрматы), Иҫке бейҙе (Бөрйән) һ.б. ҡабул итә. Хәл ителгәнсә, башҡорттарҙың бер өлөшө үҙ ихтыяры менән Мәскәү дәүләтенә ҡушыла («Мәжбүр булған» тигән ҡараштағы тороусылар ҙа бар, мәҫәлән, академик Н. Мәжитов). Килешеүгә ярашлы, урыҫ батшаһы Иван IV Грозный башҡорт ерҙәрен һаҡларға, ергә аҫабалыҡ хоҡуғына теймәҫкә, эске идараға ҡыҫылмаҫҡа йөкләмә алған. 1576 йылда шул уҡ батша башҡорт ерҙәрен баҫып алыуҙы тыйған указ да сығара. «Рәсәй властары башҡорттар өсөн иң изге аҫабалыҡ хоҡуғына ҡул һуҙмаған, – тип яҙа А. Горянин «Мифы о России и дух нации» (Мәскәү, 2002 йыл) китабында. – 1694 йылда Грозныйҙың грамоталары (һүҙ башҡорттарға ер биләү тураһында бирелгән документтар хаҡында. – **М.Х.**) ҡайтанан раҫланған». Ә бит Европаның ҡотон алып торған төрөк солтаны Баязит менән аяҡ терәп һөйләшкән батшаның былдай ихтыярын алыу өсөн, моғайын, хәтәр көс-ҡеүәт талап ителгәндер. Урыҫ батшаһы, бәлки, башҡорттарҙың монголдарға баш һалмауын да күҙ уңынан ысҡындырмағандыр. Рюриктар тәхеттә ултырғанда был хоҡуҡтар, ысынлап та, боҙолмаған, аҫаба ерҙәргә ҡул һуҙыу Рәсәй тәхетенә Романовтар менеп ултырғас ҡына ҡот осҡос тиҙлек ала.

Башҡортто тамам буйһондороу, үҙ хөкөмөндә йөрөтөү өсөн батша хөкүмәтенә уларҙың ерендә ҡәлғәләр төҙөү, үҙҙәренсә әйтһәк, «урыҫ элементын көсәйтеү» кәрәк була. Әммә былдай сәйәсәт ҡаты ҡаршылыҡҡа осрай. Килешеүҙең тупаҫ боҙолоуы арҡаһында 1616 йылда тәүге башҡорт ихтилалы ҡубып китә. Аҫабалар ер биләү буйынса хоҡуҡтарҙың боҙолоуына, һалымдарҙың ауырлығына, воеводаның башбаштаҡлығына күнергә теләмәй. 1645 йылда Ҡазан даруғаһының бер нисә олоҫо башҡорттары Минзәлә ҡәлғәһен төҙөүгә ҡаршы ихтилалға күтәрелә. 1662 – 1664 йылдарҙа ла ошондай уҡ талаптар менән Һары Мәргән баш күтәрә. Тарихта эреле-ваҡлы 80-дән ашыу башҡорт ихтилалы билдәле, уларҙа сама менән 250 мең кешенең ғүмере өҙөлгән, ти ҡайһы бер башҡорт тарихсылары. Батша хөкүмәте 1664 йылда аҫабаларҙың талабын ҡәнәғәтләндереү буйынса Өфө воеводаһы Ф. И. Сомовҡа наказ ебәреүгә ҡарамаҫтан, 1667 йылда Бөрө ҡәлғәһенә нигеҙ һалына. 1681 – 1684 йылдарҙа башҡорт ерҙәрен баҫып алыу, һалымдарҙы арттырыу һәм суҡындырыуға ҡаршы Сәйет ихтилалы көслө ҡойон булып үтә. Батша хакимиәте суҡындырыу сәйәсәтенән баш тартып торорға мәжбүр була.

1704 йылда Дөмәй Ишкәев, Иман батыр балыҡлы урындарҙы ҡаҙна ҡарамағына алыу, өҫтәмә һалым индереү, халыҡ иҫәбен алыуға ҡаршы күтәрелә. 1707 – 1708 йылдарҙа Алдар батыр ҙа ҡоралға тотона. Бик күп йән ҡыйыла, башҡорт ауылдары үртәлә. 1708 йылдың йәйендә, батша ярандарының хөсөтөнә эйәреп, ҡалмыҡтарҙың 10 меңлек ғәскәре Ыҡ йылғаһы башында йәшәгән башҡорт ерҙәренә бәреп инә, бик күп кешене ҡыра, мал-тыуарҙы ҡыуып алып китә. Өфөгә килеп, Швеция менән оҙайлы һуғыш алып барған ғәскәр өсөн 20 мең ат таптырған батша яраны А. Сергеев буйһонмағандарҙы, араҡы эсереп, һуҡтырырға тотона. Бер нисә кеше шунда уҡ үлә, асыуҙары ташҡан башҡорттар

тағы яуға күтәрелә. Ихтилал көсәйеп киткәс, тамам шашҡан Сергеев «10 йәштән өлкән башҡорттарҙың башын өҙөргә, кеселәренең эсен ярырға» ҡуша.

1734 йылда обер-секретарь И.Кирилов башҡорт мәсьәләһен отошло хәл итеү буйынса Сенатҡа үҙ тәҡдимдәрен тапшыра. Һигеҙ пункттан торған был документта башҡорт ерендә урыҫ ҡәлғәләрен күпләп төҙөү, урыҫ крәҫтиәндәрен меңәрләп күсереп ултыртыу, башҡорттарҙы кәметеү өсөн яу саптырыу, төрлө юлдарын табып, ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтар менән бәрелештереү, ҙур тырышлыҡ менән суҡындырыу эшен алып барырға тәҡдим ителә. Иван Грозный вәғәҙә иткәндәр тамам онотола, башҡорттарҙы «төп башына» ултырталар. Мәкер батша хакимиәтенең төп сәйәсәтенә әүерелә.

Телсе ғалим һәм һәүәҫкәр тарихсы Ә. Бейештең «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» (Өфө, 1993 йыл) тигән китабында: «1736 йылдың март – майында дүрт карателдәр төркөмө Кирилов, Румянцев, Тевкелев, Татищевтар етәкселегендә 3 меңдән ашыу кеше үлтерелгән, 503 ауыл яндырылған, – тиелә. – Ә Соймонов етәкселегендәге язалаусылар –1738 йылдың яҙ-йәйендә меңдән ашыу башҡортто үлтергән, язалаған, ҡоллоҡҡа таратҡан». Күренекле полководецтарыбыҙҙың береһе Муса Мортазиндың «Башкирия и башкирские войска в гражданскую войну» (Мәскәү, «Инсан», 2007 йыл) тип аталған хеҙмәтендә телгә алыныуынса (автор тарихсы Покровскийҙың мәғлүмәтенә таяна. – **М.Х.**), 1735 – 1740 йылдарҙа 30 мең башҡорттоң ғүмере өҙөлгән. «Башкортостан с древнейших …» йыйынтығындағы мәғлүмәтте лә килтерәйек: «Ошо яуҙа 40 – 60 меңләп башҡорт юҡ ителә, һөргөнгә оҙатыла, ҡоллоҡҡа бирелә. 1740 йылдың июнь – сентябрендә генә 725 башҡорт ауылы яндырыла, 11 меңләп йылҡы һәм һыйыр малы ҡыуып алып кителә» Ләкин башҡорт яуҙары баҫҡынсыларҙы Минзәлә ҡәлғәһен төҙөү уйынан сигендерә алмай, 1736 йылдың ғинуарында уға нигеҙ һалыу тураһында указ сыға. 1737 йылда Яйыҡ йылғаһының уң ярында Ырымбур ҡәлғәһе күтәрелеп, совет осоронда ут күршеләр булған башҡорт менән ҡаҙаҡтар араһын тамам бикләп ҡуя.

Ә. Бейештең ошо ваҡиғаларға бәйле мәғлүмәте хәтәрерәк: 1735 – 1740 йылдарҙағы ихтилалда 90 меңдән артыҡ башҡорт үлтерелгән, тип һис шикһеҙ әйтергә мөмкин, тип яҙа ул аталған китабында. Аҫабаларҙың Мәскәү батшалығына ҡушылғанда килешелгән шарттарҙың тупаҫ боҙолоуына ҡаршы үҙ хоҡуҡтарын яҡлап баш күтәрергә мәжбүр булыуына яуап итеп, татар мырҙаһы кенәз Урусов ҡыуалап килтерелгән халыҡҡа былай тигән: «Һеҙҙең ырыуығыҙҙы әҫәре лә ҡалмаҫлыҡ итеп тамыры менән юҡ итергә кәрәк». Был юлдарҙы автор Руф Игнатьевтың «Карасакал – лжехан Башкирии» тигән хеҙмәтенән алған. Каратель Урусовтың рәсми ҡараш белдереүе шик тыуҙырмай, сөнки Петр I үҙе үк баш күтәргән башҡорттарҙы «дошман кеүек ҡырырға» ҡушҡан. Муса Мортазиндың мәғлүмәте буйынса, 1755 йылғы ихтилалда тағы ла 30 мең башҡорттоң ғүмере өҙөлә.

1873-1874 йылдарҙа Пермь губернаһының Уса өйәҙе башҡорттары регуляр хеҙмәткә алыуға ҡаршы күтәрелгәс, уларҙы батша Карелияға һәм Яҡутстанға һөрә. Яҡут еренә, эйәргән ҡатындарҙы иҫәпләмәй, 3 мең ир оҙатыла. Төньяҡ Кавказ халыҡтарын гитлерсыларға хеҙмәт итеүҙә ғәйепләп илдәренән ҡыуғанда ошо тарихи өлгөнө иҫтәренә төшөрмәнеләрме икән? «Башҡорттар – Рәсәйгә ҡушылғандан һуң иң күп яфа күргән халыҡтарҙың береһе, – тип яҙа А. Горянин аталған хеҙмәтендә. – Ерҙәрен күпләп тартып алыуҙан башлап Петр I осоронда күҙҙәре ҡара булған өсөн түләгән һалымға тиклем…»

Кантонлыҡ системаһы башҡорттар өҫтөнә ауыр йөк булып ята, ти Ә. Бейеш. Ырымбур һыҙығында хеҙмәт иткән башҡорттар янында булып киткән

(1828 йыл) подполковник Прянишников: «Ҡыш еткәс, ауыр эштән интегеп бөткән башҡорттар, саҡ ҡуҙғалып йөрөгәнябыҡ аттарына атланып, ауылдарына ҡайтып китә. Башҡорттарҙы иҙеү, ғөмүмән, бер ниндәй самаға ла һыймай. Мин ҡомһоҙ өҙгөстәрҙең ошо меҫкен ҡорбандарына түрәләр иғтибарын йәлеп итеүҙе изге бурысым тип һанайым», – тип яҙған. Ошо китаптан тағы ла бер өҙөк: 1850 йылда башҡорттар губернатор ҡушыуы буйынса ҡаҙна эшенә 35 мең кеше, 311 меңдән күберәк ат биргән. 1852 йылда юл төҙәтеү һәм юл һалыуға башҡорттарҙан 162 меңдән ашыу кеше, 102 мең ат алғандар. Ырымбур губернаторы А. Катенин «башҡорттар бөтә Ырымбур төбәгенең эшсе көсөнә әйләндерелгән» тип әйтергә мәжбүр булған.

Батша хөкүмәтенең урыҫлаштырыу сәйәсәтен нисек алып барыуы тураһында аталған хеҙмәтендә Муса Мортазин былай тип яҙа: «Систематическое устроение края» был начато при Анне Иоанновне. Правительством были приняты меры к скорейшему *обрусению края и прочному заселению его русскими* (курсив минеке. – **М.Х.**). В этом отношении особенно потрудились начальники Оренбургского края Кирилов, князь Урусов и Неплюев». 1681 йылда уҡ эш башлаған Өфө епархияһы ла ошо сәйәсәтте атҡарыуға күп көс һала. Әйткәндәй, мосолмандарҙың аҫаба төйәге булған төбәктә тәүге мәсет 1830 йылда ғына барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуы «прогрессив күренеш» булған, тигән ҡараш яҡлылар үрҙә килтерелгән йән өшөткөс факттарҙы белдеме икән?

1906 – 1907 йылдарҙа урыҫлаштырыу сәйәсәте тағы ла көсәйә. Өсөнсө Дәүләт думаһында сығыш яһап, епископ Н. Варшавский «рус булмаған бөтә халыҡты руслаштырырға, суҡынмаған бөтә элементты суҡындырырға» саҡыра. 1912 йылда халыҡ мәғарифы буйынса үткәрелгән кәңәшмәлә Ырымбур уҡыу-уҡытыу йорто нәзире Владимировтың: «Инород мәктәптәренең бурысы инородецтарҙың мәҙәниәтен үҫтереү һәм камиллаштырыуҙан ғибәрәт түгел. Ә уларҙы мәҙәни яҡтан юғары торған һәм *илдең хужалары булған рус халҡының руслаштырыуынан* ғибәрәт. Шул маҡсатҡа өлгәшелмәй икән, халыҡ аҡсаһын түгеүҙән мәғәнә юҡ», – тип әйтеүе лә был сәйәсәттең ниндәй көс менән алып барылыуы тураһында һөйләй. Тарих шаһит: улар маҡсатына өлгәшә алмай, башҡорттар барыбер мосолманлығынан ваз кисмәй, телен дә ташламай. Үкенескә ҡаршы, Башҡорт автономияһын ҡабул иткән Совет власы ла ошо уҡ сәйәсәтте дауам итте. 1972 йылда КПСС өлкә комитеты башҡорт телендә дәреслектәр сығарыуҙы туҡтатырға ҡуша, тип яҙа Ә. Бейеш күрһәтелгән хеҙмәтендә. Социологик тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан кешеләрҙең 75 проценты милли мәктәпте һаҡлау теләге белдереүгә ҡарамаҫтан, 1975 йылда БАССР Мәғариф министрлығы мәктәптәрҙе урыҫ теленә күсереү тураһында күрһәтмә сығара. Ошоларҙан һуң да, Рәсәйгә ҡушылыу ваҡ халыҡтарға үҙен һаҡларға, мәҙәниәтен үҫтерергә мөмкинлек биргән, тип әйтеп буламы?

**Тарихи белешмә.** *Ә. Әсфәндиәровтың «Олатайҙарҙың бар тарихы» (Өфө, 2005) китабында иҫкә алыныуынса, Мәскәү батшалығына ҡушылғанға тиклем аҫабалар Ырымбур губернаһында ғына 28 миллион, Пермдә 10 миллион дисәтинә ер биләгән.*

XVI быуат урталарында башҡорт бейҙәренең эскерһеҙ ихтыярына батша ярандары яңынан-яңы мәкер ҡороуын дауам итә. Тарих фәндәре докторы Р. Кузеевтың «Историческая этнография башкирского народа» (Өфө, 2009) китабында, XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Рәсәй дәүләтенең Көнсығышҡа хәрәкәте әүҙемләшә, тип әйтелә. Бер нисә тиҫтә йылда Башҡортостан ҡәлғәләр менән уратып алына. Мәғдән сығарыу буйынса 1735 – 1773 йылдарҙа ғына

80-дән ашыу завод ҡалҡып сыға. Уларҙа эшләү өсөн эске губерналарҙан урыҫ крәҫтиәндәрен меңәрләп күсерәләр. Ҡаҙна ихтыяжына аҫабаларҙың 11 миллион дисәтинә ере тартып алына. 1873 йылда Өфө губернаторы Ушаковтың «эске губерналарҙан ағылған иҫәпһеҙ күскенселәр генә урындағы халыҡ араһында урыҫ элементына өҫтөнлөк бирәсәк» тигән белдереүе тап шул хаҡта һөйләй. «Башҡорт халҡының тарихы…»нда билдәләнеүенсә, 1875 йылда Өфө губернаһының земство идараһы етәксеһе Дашков менән сауҙагәр Сафронов, Стәрлетамаҡ өйәҙенең Ҡумырыҡ-Табын олоҫо башҡорттарын ҡурҡытып, дисәтинәһен 1 һумдан 15 мең дисәтинә ер «һатып ала» тип яҙған крайҙы өйрәнеүсе Н. Ремезов. Сауҙагәрҙәр Кожевников, Треумов, Уткин 1873 йылда 30 мең урынына 60 мең дисәтинә эләктерә. Дисәтинәһе ни бары 30 тингә төшә. 1871 – 1882 йылдарҙа 500 мең дисәтинә аҫаба ере алыпһатарҙар ҡулына күсә. Н. Ремезовса, «күсенеү хәрәкәте – урыҫ халҡының Көнсығышҡа һөжүме»нә әүерелә. 1891 – 1895 йылдарҙа, Һамар – Златоуст тимер юлы сафҡа инеү менән, күскенселәр ташҡыны бөтә Башҡортостанды баҫып китә. XIX быуат башында Ырымбур губернаһында 884 мең кеше йәшәгән булһа, 1851 йылдан 2,4 миллионға етә. Шул иҫәптән урыҫтар – 1,3 миллион! Ысынлап та «урыҫ элементының өҫтөнлөк алыуына» өлгәшелә. 1877 – 1905 йылдарҙа күскенселәр биләгән элекке башҡорт ерҙәре 35 тапҡырға арта, тип яҙа Ә. Бейеш. 1899 йылда Пермь ҡалаһында нәшер ителгән «Волжский вестник» гәзите «1863 – 1878 йылдарҙа 2 миллион дисәтинә башҡорт ере таланған» тип яҙырға мәжбүр булған. 1898 йылдың 20 апрелендәге батша указы буйынса, ҡуртымға алынған ерҙәрҙә ауыл ҡорорға рөхсәт биреү аҫаба ерҙәрҙе баҫып алыуҙың иң юғары нөктәһенә әүерелә, сөнки ул ерҙәрҙе артабан ҡайтарып алыу мөмкинлеге юҡҡа сыға. 1905 – 1915 йылдарҙа Өфөлә һәм Ырымбурҙа крәҫтиән банкылары асылыу менән, аҫабалар тағы ла бер миллион дисәтинә ер юғалта.

Башҡорт ерен үҙәк губерналарҙан ағылған славяндар ғына үҙләштермәй, өлөш урыҫ булмағандарға ла эләгә. XIX быуат аҙағына Ырымбур губернаһында ғына 1,5 миллион, шул иҫәптән 500 мең дисәтинә ер алтын сәнәғәтселәре Рәмиевтар ҡулына эләгә. Татар сауҙагәре Хөсәйенов дисәтинәһен 6,6 тиндән 73745 дисәтинә ергә хужа булып ала. М. Мортазиндың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1868 – 1878 йылдарҙа «һатып алынған» 1 миллион дисәтинә ерҙең 140 меңе законһыҙ үҙләштерелгән тип табыла. Күрәһең, батша замандарында ла намыҫлы чиновниктар булғылаған.

Башҡорттарҙың үҙ дәүләтселеге булмаған, улар күсмә тормошта йәшәгән, тигән ҡарашты алға һөрөүселәр ата-бабаларыбыҙҙың бик күп ҡәбиләләрҙе башҡортлаштырыуын, ә быны дәүләтселек булмай тороп эшләп булмағанын, күрәһең, уйлап еткермәй. Тарихсы Ә. Әсфәндиәровтың мәғлүмәте буйынса, хәҙерге Краснокама районында йәшәгән башҡорттарҙың сығышы – Гәрә ҡәбиләһенән. Ҡыпсаҡлашҡан төрки йәки кераиттарҙан сыҡҡан был төрки-монгол халыҡ Урал тарафтарына ҡыпсаҡтарға эйәреп килгән. Легенда буйынса Гәрә – монголдар ырыуынан. Ағиҙел буйҙарына урынлашып, улар йәнәйҙәрҙе ҡыҫырыҡлаған. Хәҙерге вариҫтары – Илеш һәм Татарстандың Аҡтаныш районында күпләп йәшәгән Ҡырғыҙ ҡәбиләһе башҡорттары VII – X быуаттарҙа Оғуз мөхитендә була. Иҙел аша сығып, улар Алтын Урҙа дәүерендә Бәләбәй ҡалҡыулығына килеп төпләнә. Р. Кузеевтың аталған хеҙмәтендә билдәләнеүенсә, ата-бабаларыбыҙҙың үҙ мөхитенә ылыҡҡан нуғай, ҡалмыҡтарҙы башҡортлаштырыуы ла яҡшы билдәле. Ә бит нуғайҙар аҙ һанлы халыҡ булмаған.

## Дәүләт телен... теләк буйынса

Мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында республика теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеүҙе инҡар иткән яҙмалар Интернет селтәрендә күптән йөрөй. РФ Конституцияһына, ғөмүмән, законлылыҡҡа ҡаршы эшмәкәрлегенә ниндәйҙер көс биреү өсөн бындай авторҙар телевидениены ла эшкә егә. Быйыл июль аҙаҡтарында НТВ каналында Михаил Чернов Өфө ҡалаһының 161-се мәктәбе уҡыусыһы Владислав Мартинстың башҡорт теле дәрестәренә йөрөмәгән өсөн алтынсы класта икенсе йылға ҡалдырылыуы хаҡындағы хәбәрен бөтә илгә күрһәтте. Имеш, башҡорт теленең кәрәге юҡ, уны белмәһәң дә йәшәп була. Һәр хәлдә уҡыусының ата-әсәһе шундай фекерҙә. Был бер яҡлы фекерҙә «тәрән» мәғәнә, хатта мәкер шәйләнә. Башҡорт теле дәрестәренә йөрөмәгән өсөн генә уҡыусыны бер класта икенсе йылға ҡалдырырға ярамай! Был бит – хоҡуҡ боҙоу! Ошондай маҡсат ҡуйылмаһа, Һамар ҡалаһында йәшәгән тележурналисты Өфөгә саҡырып, «сенсация»ны бөтә илгә күрһәтеп аҙапланмаҫтар ине. Әйтәйек, уҡыусы сит тел йәки тәбиғи фәндәр буйынса өлгәшмәһә…

Был «сенсация»ла Рәсәй Федерацияһы Конституцияһындағы республикаларҙың үҙ дәүләт теле булыуы тураһындағы положениеның (68-се статья, 2-се пункт) иҫкә алынмауы тиктәҫкә түгел. Мәғариф министрының БР Конституцияһында (1-се статья) башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ нығытылыуы, тимәк, мәктәп программаһына законлы индерелеүе, уҡыусыларҙың да, милләтенә ҡарамаҫтан, уны өйрәнергә бурыслы икәнлеген асыҡ итеп аңлата алмауы – етди етешһеҙлек. Министр ҙа законды телгә алмаҒас, башҡаларға ни һан! Шул уҡ ваҡытта ошондай уҡ проблема буйынса РФ Конституцион мәхкәмәһенең Татарстанда дәүләт теле булараҡ татар телен мәжбүри өйрәнеүҙең законлылығын раҫлаған билдәләмәһе бөтөнләй иҫкә алынмай. Тимәк, ҡайһы берәүҙәр әйтмешләй, «милли телдәр»ҙе (титуллы милләт. – **М.Х.**) мәжбүри уҡытыу – законлы күренеш. Уны юҡҡа сығарыу өсөн Страсбургтағы Кеше хоҡуҡтарын яҡлау буйынса Европа мәхкәмәһенә мөрәжәғәт итеү ҙә һөҙөмтә бирмәйәсәк, сөнки был положение халыҡ-ара хоҡуҡ нормаһынан сығып эш итә. Демократик илдәрҙә телдәр сәйәсәтен өйрәнгән филология фәндәре кандидаты И. Илешевтың «Языковые права в европейском измерении» (Өфө, «Ғилем» нәшриәте, 2002 йыл) тигән хеҙмәтендә телгә алыныуынса, «многие положения международно-правовых документов, затрагивающих языковые права, содержат оговорки типа: защита и поддержка региональных языков национальных меньшинств не должны осуществляться в ущерб развитию официальных языков и препятствовать их изучению. Иными словами, предполагается, что *обязанностью самих граждан является изучение государственного (официального) языка той страны или республики, где они проживают*».

Быйыл апрелдә Өфөлә урыҫ телен яҡлап (башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы, тип ҡабул итергә кәрәк. – **М.Х.**) пикет үткәреүселәрҙең эшмәкәрлеге күңелһеҙ йылмайыу ғына уята. Ҡуяндарҙың бүрене яҡлап сығыш яһағанын хәтерләтә ул. «Регнум» агентлығы хатта, В. Жириновский Дәүләт Думаһы ҡарауына «милли телдәрҙе өйрәнеүҙе тыйыу тураһында» закон проекты индерҙе, тип яҙып та сыҡты. Тимәк, кемдәрҙер федератив ҡоролошто бөтөрөп, унитарлыҡҡа күсеү тураһында РФ Конституцияһына етди төҙәтмә индерергә маташа. Ләкин бындай аҙым халыҡ-ара хоҡуҡ нормалары буйынса тыйыла. Хатта урыҫ халҡының «конституцион хоҡуҡтары»н яҡлау лозунгыһына ышыҡланыу ҙа ярҙам итмәйәсәк. Шундай һорау урынлы: ә ни өсөн либераль-демократтар башлығы сит телдәр уҡытыуға ҡаршы сыҡмай? Бәлки, ул, инглиз, француз йәки немец

телдәрен өйрәнгән һәр уҡыусы сит илдә эш табыр, тигән уйҙалыр? Урыҫ һ.б. халыҡтарҙы үҙҙәре йәшәгән республикалағы титуллы милләт телдәрен инҡар итергә саҡыра икән, тимәк, депутат аңлы рәүештә автохтон халыҡтың абруйын төшөрә. Шуны ла иҫкә төшөрөп үтәйек: Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 29-сы статьяһы буйынса теге йәки был телдең башҡаларҙан өҫтөнлөгөн пропагандалау тыйыла. Милли ерлектә ыҙғыш сығарырға маташҡан өсөн енәйәт яуаплылығы ла ҡаралған (РФ Енәйәт кодексы, 282-се статья).

Август баштарында «Ревинформ» сайтында баҫылған «Учить или не учить» тигән хәбәрҙә лә дәүләт телдәрен өйрәнеүҙең конституцион нигеҙҙәре тураһында бөтөнләй телгә алынмай. Хатта республика Президенты ла, был турала етди уйланырға кәрәк, тиеүҙән ары китмәне. Ул да, илдең Төп законы буйынса фекер алышырға мөмкин, тигән ҡараштa тормайҙыр бит? Конституция положениеһы тураһында уйланмайҙар, уны үтәйҙәр һәм дәүләт тә граждандарҙы шуға мәжбүр итергә бурыслы. Һәр кем үҙ ихтыярына закон көсө биреүҙе талап итә башлай икән, тимәк, беҙ бер ҡасан да хоҡуҡи йәмғиәттә йәшәй алмаясаҡбыҙ.

Йәмәғәтселектәге ошондай кәйефтәр менән, әлбиттә, Д. Медведев уңайы килгән һайын иҫкә төшөргән хоҡуҡи нигилизмдан арыныу мөмкин түгел. Башҡорт теленә ҡаршы көстәрҙең «дәлил»е бирәү – башҡорттар аҙ һәм бөтөүгә барған халыҡ, шуға күрә уларҙың телен өйрәнеүҙең хәжәте юҡ. Аҙ һанлы тигәндә, хоҡуҡтарҙы бер ҡасан да иҫәпкә ҡарап өләшмәйҙәр, беҙ бүреләр өйөрөндә түгел һәм урта быуаттарҙа ғүмер итмәйбеҙ бит. Ә бына башҡорттарҙың XXI быуатта ла ишәйеп китә алмауы, – һис шикһеҙ, Рәсәй империяһы намыҫында. Беҙҙә дүрт йыл элек башҡорт ҡәбиләләренең Мәскәү батшалығына үҙ ихтыяры менән ҡушылыуының 450 йыллығы байрам ителде. Уны элек башҡортто‌ҡо ғына булған ерҙәрҙең йыртҡыстарса баҫып алыныуы айҡанлы тантана ойоштороусыларҙың ата-бабаларҙың ирек яҡлап күтәрелгән рухына тап төшөрөүе хаҡында тамсы ла уйланмауы тип ҡабул итергә кәрәк.

Ә хәҙер 1905 йылда Т. Хитров төҙөгән белешмәгә (ул Р. Буканова һәм В. Фешкиндың аталған китабында) күҙ һалайыҡ. *«Хәҙерге башҡорттарға ҡарап, ҡасандыр уларҙың ғәйрәтле, ҡыйыу, көслө һәм һуғышсан булыуына ышанғы килмәй… 100 – 200 йыллыҡ урыҫ йоғонтоһо уларҙы танымаҫлыҡ итеп үҙгәрткән».* Был ҡыҫҡа ғына юлдарҙа башҡорттарҙың ҡот осҡос трагедияһы йәшеренгән.

Ысынлап та башҡорттар һәр дәүерҙәрҙә лә бәләкәй йәки аҙ һанлы булғанмы? Әллә улар системалы үткәрелгән мәкерле сәйәсәт ҡорбандарымы? Башҡорт тарихы буйынса абруйлы белгестәрҙең береһе, тарих фәндәре докторы Р. Кузеевтың күрһәтелгән китабына мөрәжәғәт итәйек. XIV быуаттағы демографик белешмә булмағанлыҡтан, сағыштырып ҡарау һәм логик иҫбатламалар аша автор, башҡорт ҡәбиләләре Мәскәү батшалығына ҡушылған осорҙа 180 – 240 меңләп булған, тигән фекер белдерә. 1631 – 1632 йылдарҙа батша чиновниктарының яһаҡ түләүселәр буйынса мәғлүмәте менән сағыштырып, тарихсы, һуңғы 70 – 80 йылда башҡорттар иҫәбе әллә ни артмаған, тигән һығымта яһай. XVIII быуатта башҡорт тарихы һәм тормошо буйынса мәғлүмәтле шәхестәрҙең береһе П. Рычков, 50-се йылдарҙа башҡорттар 106,1 меңдән ашыу булған, тигән мәғлүмәт ҡалдырған. Ырымбур губерна канцелярияһының III рәүиз мәғлүмәттәре буйынса башҡорттар 105,9 мең күренә. 1782 йылғы IV рәүиздә иһә аҫабалар 137,7 мең булып китә. Р. Кузеевтың, башҡорттарҙың аҡрын үрсеүе етештереү көстәренең насар үҫеше менән бәйле, тигән ҡарашы менән килешеүе ауыр. Ул, күрәһең, А. Дмитриевтың «башҡорттар араһында хәйерселәр осрамай» тигән фекере менән таныш булмаған. V рәүиз материалдарынан күренеүенсә, башҡорттар 177 меңдән күберәк. Быны Ырымбур губернаһы халҡының

иҫәбен алыу мәғлүмәттәрен тикшергән М. Спиридонов менән И. Лопухин да раҫлай, ти Кузеев. Ә. Әсфәндиәровтың аталған хеҙмәтендә телгә алыныуынса, 1795 йылғы рәүиз буйынса 16 өйәҙҙең 1548 ауылында 30574 йортта 184560 башҡорт ғүмер иткән. Ихтилалдар мәлендә күпләп ҡаҙаҡ далаларына ҡасҡан башҡорттар был иҫәпкә инмәй. 1755 йылда, мәҫәлән, 10 меңләп башҡорттоң үҙ илен ташлап китеүе билдәле.

VII рәүиз (1815 – 1817) мәғлүмәттәренә ҡарағанда, башҡорттар 260 меңләп күренә. Тарихсы Х. Усманов фекеренсә, иҫәпкә аҫабалыҡ хоҡуғын юғалтҡан 50 – 60 мең башҡорт индерелмәгән. Был фекер дөрөҫләнә, ти Р. Кузеев, тимәк, башҡорттар иҫәбе 310 – 320 меңләп булған. 1834 йылда (VIII рәүиз) башҡорттар 392 меңдән артып китә. XIX быуат уртаһына 13 башҡорт кантонында 490 меңдән күберәк кеше йәшәгәне теркәлә. Быны, ти Р. Кузеев, В. Черемшанский, Н. Макеев, П. Небольсиндарҙың сығанаҡтары ла раҫлай. IX рәүиздә башҡорттар 508 меңдән арта, ә унынсыһында (1857) 545 меңгә яҡынлай. П. Небольсин фекеренсә, улар араһында башҡорттар менән бергә йәшәп хеҙмәт иткән татар, ҡырғыҙ, мишәр, ҡалмыҡ, хатта ҡасандыр Урта Азия тарафтарынан күсеп килгән, тимәк, башҡортлашҡан халыҡтарҙың вариҫтары ла булған. Күренеүенсә, өс быуат эсендә башҡорттар ни бары ике тапҡыр артҡан. Сағыштырыу өсөн. Ә. Әсфәндиәровтың китабында, Р. Кузеевҡа һылтанып, 1743 –1747 йылдарҙа Өфө губернаһында мишәрҙәр 10,1 мең самаһы булһа, 1851 йылда 105 меңгә еткән, тиелә, тип әйтелә. Тимәк, улар 10 тапҡыр артҡан. 1926 йылда Башҡортостанда мишәрҙәр иҫәбе 136 меңгә еткән.

Ошо урында урыҫ яҙыусыһы Д. Мамин-Сибиряктың Ә. Бейеш китабында телгә алынған «Икмәк» романынан өҙөк килтереү урынлы булыр. *«Башҡорт ауылдары тетрәткес хәлдә. Башҡорттарҙың ҡыш һайын астан ҡырылыуы ғәҙәти хәл булып бөткән. Башҡорт өйҙәренең яртыһы буш – хужалары йә үлгән, йә баш һуҡҡан яҡҡа сығып киткән. Староста ҡарттарҙы уртаҡ мөгәзәйгә килтереп, ишеген асып ебәрҙе. Скитниктар, ҡоттары осоп, артҡа сигенде: иген урынына туңып ҡатҡан башҡорт мәйеттәре өйөп һалынғайны».*

1897 йылғы Бөтә Рәсәй империяһы халҡын иҫәпкә алыуҙа башҡорттар 1,3 миллион булып китә. Өфө губернаһында улар – 900 мең самаһы, Ырымбурҙа – 254,5 мең, Пермдә – 84,3 мең, Вяткала – 13,9 мең, Һамарҙа 57,2 мең теркәлгән. Пермдә хәҙер башҡорттар яртылаш кәм, Вяткала юҡ иҫәбендә, Һамарҙа ла бер нисә тапҡырға аҙыраҡ. Был иҫәпте демографик процесс менән генә аңлатыу мөмкинме?

Әйткәндәй, Бөтә Рәсәй империяһы халыҡтарының иҫәбен милли сығышы буйынса түгел, ә туған теленә ҡарап алғандар. Ул замандарҙа башҡорттарҙың ҙур өлөшөн «татар телле» тип ҡарау уйлап табылмаған. Өфө губернаһынан иҫәпкә ингән 900 мең ир һәм ҡатын-ҡыҙ өсөн туған тел булып башҡорт теле теркәлә. Ундайҙар Бәләбәй өйәҙендә 232,9 мең кеше иҫәпләнһә, Бөрөлә – 262 меңдән ашыу. Минзәлә өйәҙендә лә 123 меңдән күберәк кеше үҙен, башҡортса һөйләшәм, тип белгән. Әйткәндәй, православие динендәге 3,4 меңләп ир һәм 10 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙ ҙа туған теле итеп башҡорт телен атаған.

Беренсе Бөтә Союз халыҡ иҫәбен алған 1926 йылда республикала башҡорттар 625,8 мең булған, ә Арғаяш, Ялан Ҡатай, Туҡ-Соран кантондарын да ҡушып, 901 меңгә тулған. Һуңғы 30 йылда халыҡ 400 меңгә кәмегән. Тағы ла Әкрәм Бейешкә мөрәжәғәт итәйек. «1917 – 1920 йылдарҙа башкиҫәрҙәр тарафынан, тифтан, аслыҡтан 200 меңдән ашыу башҡорттоң ғүмере өҙөлгән, – тиелә унда. – 1922 йылда тағы ла башҡорттоң 45 – 50 проценты аслыҡтан һәләк булған, 600

меңдән саҡ ҡына күберәге иҫән ҡалған. 1917 – 1922 йылдарҙа бөтәһе 800 меңләп, йәғни башҡорттарҙың 57 проценты юҡҡа сыҡҡан».

1959 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙа башҡорттарҙың 200 мең самаһына артыуы күренә. Ләкин 737 мең кешенең 305,2 меңе, имеш, туған теле итеп татар телен атай. Рәсми Өфө төньяҡ-көнбайыш башҡорттар һөйләшен башҡорт теле тип һанауҙан 20 йылдан ашыу баш тартып килә. Фекерҙе раҫлау өсөн, татар телен туған тел итеп иҫәпләүселәргә ҡаҙаҡ, мари, удмурт, сыуаштарҙың да индерелеүен атарға кәрәк. Ундайҙар урыҫ, украин, әзербайжан, мордва, немец араһында ла осрай.

1970 йылғы иҫәптә башҡорттар 1897 йылда Өфө губернаһында булған кимәлгә яҡынлай – 892 мең. 175,9 мең башҡорт ҡалаларҙа көн итә. Был осорға урыҫ диаспораһы башлыса ҡала милләтенә әүерелә – 1,1 миллион. Татарҙарҙың да яртыһы самаһы – 408 мең – ҡалала төйәкләнгән. Туған теле итеп татар телен атаған башҡорттар – 314,7 мең, тимәк, уларҙы ике иҫәп араһында 9,5 меңгә арттырғандар. 1979 йылда Өфөлә төйәкләнгән башҡорттар 92 меңдән күберәк күренә. Белорет, Ишембай, Нефтекама, Салауат, Сибай, Учалы ҡалаларында ла төп халыҡ вәкилдәре һиҙелерлек арта. Мәҫәлән, Ишембайҙа һәр бишенсе, Сибай һәм Учалыла һәр өсөнсө үҙен башҡорт тип иҫәпләй. Республикала башҡорттар иҫәбе 935,8 меңгә етә.

1989 йылғы иҫәп алыу башҡорттар өсөн демографик йәһәттән иң юғалтыулыһы булды. КПСС өлкә комитетына беренсе секретарь итеп Мәскәү тарафынан ебәрелгән Р. Хәбибуллиндың «Кончайте башкиризацию!» тигән бойороғо аҫтында барҙы ул. Иҫәп һуңында республикала төп халыҡты 863,8 меңгә ҡалдырҙылар. Тарихсылар фекеренсә, был кампанияла башҡорттар 250 мең милләттәшен юғалтты. Төньяҡ-көнбайыш райондарҙың күбеһендә башҡорттар менән татарҙар таблицала урындарын алмашты. Бөрө районында ни бары 815 башҡорт йәшәй булып сыҡты.

2002 йылда титуллы милләт иҫәбе, ниһайәт, 1,2 миллиондан ашып китте, йәғни XX быуат аҙағындағы кимәлгә яҡынлашты. Төньяҡ-көнбайыш райондарҙа ғүмер иткән элекке аҫабаларҙың байтағының, ниһайәт, ата-бабалары мөхитенә ҡайтыу һөҙөмтәһе ине был. Ләкин был процесты тотороҡло тип әйтеп булмай, сөнки уның билдәле кәйефтәр арҡаһында бөгөн дә үҙгәреүе ихтимал.

XXI быуат башында милләттәштәребеҙҙең яртыһы ҡалаларҙа йәшәүе асыҡланды. Баймаҡта, мәҫәлән, улар күпселекте тәшкил итә. Яңауыл, Учалы, Сибай, Мәләүез, Ишембай, Белорет ҡалаларында башҡорттарҙың артыуын ыңғай күренеш тип баһаларға кәрәк. Ләкин Өфөлә йәшәгән милләттәштәребеҙ 154,9 меңдән артмай, Бөрө, Благовещен, Дәүләкән, Күмертау, Стәрлетамаҡта ла төп халыҡ вәкилдәре аҙсылыҡта.

Был иҫәптә 1 миллиондан ашыу кешенең, шул иҫәптән 14,7 мең урыҫтың, 9,5 мең сыуаштың, 3,5 мең мариҙың, 2,9 мең удмурттың башҡорт телен белеүе асыҡлана.

Башҡортостандың титуллы милләтенең мәҙәниәтен етди тотҡарлаусы күренеш – ул күп милләтлелек. Тап ошо хәл ҡасандыр, образлы итеп әйткәндә, йорт хужаһы башҡортто түрҙән тупһа төбөнә күсерә. Төбәктең башҡа халыҡтар тарафынан колонизацияланыуы оҙайлы процесс булған. 1743 йылда, мәҫәлән, Ырымбур губернаһында 412 мең самаһы кеше йәшәһә, 1767 йылда – 421 мең, 1781 – 520 мең, 1794 – 692 мең, 1800 – 740 меңләп, 1811 – 788 мең, 1838 – 1,7 миллион, 1863 – 1,8 миллиондан да күберәк. Шуларҙың өстән беренең генә башҡорт булыуы күренә, тип яҙа Р. Кузеев аталған хеҙмәтендә. Мишәр, типтәр, татарҙар 120 – 130 мең булған. Совет власы осоронда дуҫлыҡ лозунгыһы аҫтында

Башҡортостанға башҡа халыҡтарҙы батша заманына ҡарағанда ла күберәк күсереп ултыртыу башлана. Мәҫәлән, Беренсе совет иҫәбендә (1926 й.) украиндар – 76 меңдән, белорустар 18 меңдән күберәк булып сыға. (Былары, моғайын, 1914 йылда башланған Беренсе Донъя һуғышынан ҡасып килеп ултырыусыларҙыр, сөнки 1897 йылда Өфө губернаһында малорустар (украин) 5 мең самаһы, ә белорустар 500-ләп теркәлгән. Йәш Башҡорт хөкүмәте тыуған яҡтарына ҡайтып китеүен хәстәрләй башлағас, күскенселәр ҡоралға тотона һәм ҡыҙыл частар менән берлектә башҡорттарҙы талай, ҡыра. Ә. Бейештең «Ил аҙабы» тигән романында ошоға бәйле ҡот осҡос картиналар һүрәтләнә.) Башҡа халыҡтар диаспоралары ла йылдам арта: латыштар – 7 мең, немецтар – 6,4 мең, йәһүдтәр – 2,1 мең һ.б.

Бөйөк Ватан һуғышы тоҡаныу менән Башҡортостанға көнбайыш өлкәләрҙән 247 мең кеше күсерелеп, 104 меңе Өфөлә урынлаша. Билдәле, күбеһе шунда төпләнеп ҡала. 1949 – 1955 йылдарҙа республикаға, ғаилә ағзаларын иҫәпләмәгәндә, 70 мең эшсе күсеп килә. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереүгә килгәндәр тураһында мәғлүмәт юҡ, шул уҡ ваҡытта был осорҙа Урал аръяғы райондарында сиҙәмселәр ҡасабаларының ямғырҙан һуң бәшмәк кеүек ҡалҡып сығыуы күскенселәрҙең меңәрләп иҫәпләнеүе хаҡында һөйләй.

1959 йылда Башҡортостан халҡының милли составы тағы ла сыбарлана төшә. Грек, осетин, ҡырғыҙ, молдован һ.б. тәү тапҡыр теркәлә. Әрмән, үзбәк, поляк һ.б. диаспоралары күбәйә. Ҡалаларҙа йәшәгән украиндар иҫәбе 15131-гә етә. Улар айырыуса Әлшәй, Шишмә, Стәрлетамаҡ, Дәүләкән, Благовещен кеүек ҡалаларға яҡын райондарҙа урынлаша. Өфө урыҫтар күберәк йәшәгән төйәк булып ҡала. Ярты миллиондан ашыу халыҡтың ни бары 30 меңләбе, ә юрматылар төйәге Ишембайҙа 46,5 мең кешенең һәр унынсыһы ғына башҡорт булып йөрөй. Күмертау, Октябрьский, Салауат, хатта Сибай ҙа башҡорттар иң аҙ иҫәпләнгән ҡалалар рәтендә. 70-се йылдарҙа алынған ике иҫәп республиканың милли составын тажиҡ, төркмән, кореялылар, ингуштар, бүрәттәр, абхаз, ҡалмыҡ, карел, коми, тува, чечен, яҡут, хакас һ.б. ялан сәскәләре букетына әйләндерә.

Бына ошондай сыбарлыҡ титуллы милләт вәкилдәренең аҫаба ерҙәрендә тыуған телендә аралашыу мөхитен ҡыҫа, ә күпселек ҡалаларҙа юҡҡа сығара. Ә бит Башҡортостан – төп халҡының тап ошондай хоҡуҡтарын һаҡларға, файҙаланырға булышлыҡ итеү өсөн ойошторолған дәүләт. Ҡыҙғаныска ҡаршы, халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларын ғына түгел, хатта Рәсәй Конституцияһын да белмәгән йәки инҡар иткән вазифалы кешеләр был проблеманы күрмәҫкә тырыша. Тырыша, сөнки башҡорт йәмәғәтселеге талап итмәй.

## Күрше хаҡы – тәңре хаҡымы?

Аҫаба халыҡтың демографияһына емергес йоғонто яһаған проблема булып яһалма рәүештә уйлап сығарылған башҡорт-татар мөнәсәбәттәре лә тора. Уның тамырҙары үтә тәрәндә, ҡайһы бер тарихсылар фекеренсә, Алтын Урҙа дәүерҙәренән килә. Беҙ ҙә тарихҡа күҙ һалайыҡ. Ҡазан походында ҡатнашҡан кенәз А. Курбский (1528 – 1583), ул батшалыҡта биш тел: мордва, сыуаш, сирмеш, ар, башҡорт телдәре бар, тип билдәләгән, тип яҙа «Западный регион Башкортостана» (Өфө, 2001) тигән хеҙмәтендә тарих фәндәре кандидаты М. Мырҙабулатов. Күренеүенсә, исемлектә татар теле аталмаған. Авторҙар мәғлүмәттәре буйынса, 1795 йылда хәҙерге Йәрмәкәй районы биләмәләрендә башҡорттар менән типтәрҙәр ғүмер иткән. Ҡоръятмаҫ, Усман-Ташлы, Турай – саф башҡорт ауылдары. Татар ауылдары рәсми сығанаҡтарҙа күренмәй. Хәҙерге Туймазы районына ҡараған 16 ауылда – Яҡшый, Ҡарат, Уяҙытамаҡ, Нарыш, Туймазы,

Ҡарамлы-Вәлит һ.б. башҡорттар йәшәүе күренә. 1989 йылғы иҫәп буйынса, Йәрмәкәйҙә 10 меңләп татар һәм 2 мең башҡорт, Туймазыла башҡорттарҙың татарҙан ике тапҡыр кәмерәк күренеүен бер нисек тә дәлилләп булмай.

Р. Кузеевтың аталған китабында әйтелеүенсә, 1850 йылда Өфө губернаһында татарҙар 118,4 меңдән ашып китә. Типтәр һәм мишәрҙәр – 100-әр мең. Татарҙар тураһында иҫкерәк мәғлүмәттәр табып булманы, ти тарихсы. Күрәһең, улар крәҫтиәндәр, типтәр-бобылдәр рәтенә индерелеп йөрөтөлгән. Шул уҡ ваҡытта тарихсы был ҡатлам араһында татарҙарҙың 40 проценттан артмауын да таный. XIX быуат урталарына Башҡортостанда башҡорт булмаған төркиҙәр 415 меңгә етә һәм иҫәбе буйынса башҡорттарға яҡынлай, ти автор. Әммә ул типтәрҙәр араһында башҡорттарҙың да аҙ булмауын онотоп ебәрә. Ә. Әсфәндиәровтың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Өфө губернаһының 1075 ауылында көн иткән типтәрҙәр араһында башҡорттар ҙа күп булған.

1897 йылғы иҫәптә Өфө губернаһында йәшәгән 186 меңдән ашыу ир һәм ҡатын-ҡыҙ туған теле итеп татар телен атаған, ти Р. Кузеев. Әммә үрҙә килтерелгән «Башкортостан с древнейших времен…» йыйынтығындағы мәғлүмәт ғалимдыҡынан айырыла: татар телендә һөйләшкәндәр Өфө губернаһында 150 меңгә лә тулмай.

Ләкин XIX быуат аҙағында башҡорттарҙың иҫәбе 1,3 миллионға етеү башҡорт тарихы буйынса абруйлы белгестә шик тыуҙыра, сөнки, уның иҫәбенсә, аҫабалар 960 мең – 1 миллиондан артмай. Башҡорттар составына типтәрҙәр һәм мишәрҙәр ҙә индерелгәндер, ти Кузеев. Башҡорт этнонимы ул саҡта төплө йөкмәткегә эйә булмай, административ ҡатлам булараҡ иҫәпләнеп йөрөтөлә. Ғәжәп, ошо уҡ фекерҙе бөгөн ҡайһы бер Ҡазан ғалимдары ла алға һөрә бит.

Ысынбарлыҡта башҡорттарҙы туранан-тура татарлаштырыу сәйәсәтенең алып барылыуын инҡар итеү мөмкин түгел. Ә. Бейештең мәғлүмәттәре буйынса, «1923/24 уҡыу йылында башҡорт башланғыс мәктәптәрендә 475 уҡытыусы һәм 23461 уҡыусы иҫәпләнһә, 1925/26 уҡыу йылында иһә тәүге төркөм 453-кә, икенсеhе 20138-гә ҡала. Татар уҡытыусылары «дөйөм милли тел» тип башҡорт мәктәптәрендә бөтә фәндәрҙе татарса алып барған. 1927/28 уҡыу йылында башҡорт башланғыс мәктәптәренең яртыһында белем шулай бирелгән. Кадрҙар, уҡытыусылар етмәү арҡаһында, башҡорт халҡы быға ҡаршы тора алмаған». Башҡортостанда урыҫ һәм татар шовинизмының көсәйеүе ВКП (б) өлкә комитетының 1931 йылдың 20 июлендә үткән пленумында ла тәнҡитләнә, ти Ә. Бейеш.

1926 йылғы иҫәптә туған теле татар булғандар XIX быуат аҙағындағы 150 меңдән 461 меңгә еткерелә. 1939 йылғы иҫәптә, боронғо башҡорт ауылы Мәскәү (хәҙерге Дүртөйлө районы) кантонының тирә-яҡ ауылдарын индереп, 14 меңдән ашыу татар теркәлә. Һөҙөмтәлә татар диаспораһы рекордлы күрһәткес – 777 меңгә еткерелә! Этник төркөмгә был юлы типтәр менән мишәрҙәр ҙә инеп китә.

1979 йылда туған телем татар тип иҫәпләгән башҡорттар бер аҙ кәмей –- 307,6 мең. Уның ҡарауы, партияның яҡлауын тойған иҫәп алыусылар «татар теллеләр»ҙе 1,1 миллионға еткерә. Бер ниндәй ғилми нигеҙһеҙ башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектын татар теленә индереп, шул яҡта йәшәгән милләттәштәребеҙҙе татар теллегә һанау тотош совет осороноң традицияһына әүерелә. Имеш, 287 меңдән күберәк башҡорт туған теле итеп татар телен иҫәпләй. Ҡайһы бер шовинистик даирәләр тарафынан күптән алып барылған сәйәсәт була ул. Тарих фәндәре кандидаты F. Ирғәлиндың 2010 йылда халыҡ иҫәбен алыу менән бәйле яҙылған мәҡәләһенән күренеүенсә (ул Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының (БДБҠБК) Бишбүләк районы буйынса

әҙерләнгән брошюрала баҫылды), 1910 йылда Ҡазан ҡалаһында «О татаризации инородцев Поволжья» тигән китап донъя күрә. Унда татар руханиҙары, татар зыялыларының Волга буйы халыҡтары – сыуаш, сирмеш (мари), вотяктар (удмурт) араһында татарлаштырыу эшен алып барыуы хаҡында әйтелә. «Ҡасандыр ҡырғыҙ һәм башҡорттар ҙа ошо инородтар (урыҫ булмағандар. – **М.Х.**) хәлендә ине, ә хәҙер үҙҙәрен татарҙан айырмайҙар, бергәләп эш итәләр, тиелә китапта. Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендә йәшәгән сирмеш һәм башҡорттарҙы татарҙан айырыуы ҡыйын, бөтәһе лә татар булып күренә. Бөгөн башҡа инородтар ҙа улар хәлендә ҡалып, тамам татарлашыуы ихтимал. Шуға күрә, артабан һуң булмаһын өсөн, инородтарҙың татар йоғонтоһона бирелеүенә сик ҡуйырға кәрәк. Дәүләт һәм йәмғәтселек көсһөҙ инородтарҙы ислам һәм татаризмдан йотолоуҙан һаҡлауға баҫырға бурыслы».

Дөрөҫ, был йәһәттән батша хакимиәтенең үҙ сәйәсәте булған, ләкин беҙгә был факт булараҡ ҡына әһәмиәтле. Башҡорт филологияһында яҡты эҙ ҡалдырған ғалим Н. Дмитриевтың да ошо хаҡтағы фекере иғтибарға лайыҡ. 1955 йылда Мәскәүҙә сыҡҡан «Туған тел дәреслектәрендә грамматик терминология» китабында ул түбәндәгесә яҙа: «Рәсәйҙә башҡорт теле бер ҡайҙа һәм бер ҡасан да уҡытылманы. Мосолман мәктәптәрендә һабаҡ алған аҙ ғына башҡорттар унда асылда татар телен йәки татар буржуазияһы һәм руханиҙарының яһалма телен – төркиҙе өйрәнде. Уҡытыусылар, татар муллалары ул мәктәптәрҙе үҙ яйына борҙо. Мәктәптә һәм иҡтисади мөнәсәбәттәрҙә *башҡорттарҙы татарлаштырыу татар милләтселәре программаһына инде*. Башҡорттарға, бер ниндәй ҙә башҡорт мәҙәниәте һәм теле юҡ, башҡорт теле – тел түгел, ә татар теленең боҙолған диалекты ғына, ул телдә халыҡтың томана ҡатламы ғына һөйләшә, яҙыу иһә бөтөнләй мөмкин түгел, бары татарса ғына яҙырға була, барлыҡ мәктәптәрҙә лә уҡытыу шул телдә алып барыла, тип туҡылды».

Бөгөн был хаҡта һөйләүҙән ни мәғәнә, тиер ҡайһы берәүҙәр. Ә бит «туған телем – татар» тип йөрөгән башҡорттар әле лә бар. Билдәле булыуынса, Батша Рәсәйендә Иҙел һәм Кавказ буйы төркиҙәрен, хатта әзербайжандарҙы ла, «татар» тип йөрөткәндәр. Столыпин заманында Эриван (хәҙер Ереван) ҡалаһында урыҫ-татар гимназияһы ла асылған. Иҙел тарафтарына Батый яуы менән килеүен иҫкә алғанда, аҙ һанлы татарҙар урындағы халыҡҡа үҙ телен тағы алмауы тәбиғи. Хатта XIX быуатта ла. Уның хәҙерге башҡорт теленә ике тамсы һыу кеүек оҡшауын нисек аңлатырға? Билдәле даирәләр татар теле итеп башҡорттарға көсләп тағырға маташҡан тел башҡорт һөйләше нигеҙендә бер аҙ үҙгәреш кисереп барлыҡҡа килмәнеме икән? Минеңсә, был күренешкә башҡаса аңлатма юҡ. Ҡайһы традиция йәки закон-күрһәтмә нигеҙендә кисәге аҫаба халыҡ вәкилдәре күршелегенән тыш милли сығышына бер ҡатнашы булмаған этнос иҫәбенә күсерелде икән? 43 йыл элек кенә үҙен башҡортса һөйләшәм тип белгән кешеләрҙең тиҙ арала туған телен ташлауы ышандырмай. Хатта бөгөн дә Ыҡ йылғаһының һул ярында көн иткән Уяҙытамаҡ, Ҡарат ауылдары башҡорттарының һөйләше уң ярҙағы Татарстан Республикаһына ҡараған Ҡыҙыл Яр кешеләренекенән бер яғы менән дә айырылмай. Ә. Әсфәндиәровтың «Аулы мензелинских башкир» тип аталған хеҙмәтендә, Ҡыҙыл Яр ауылында башҡорт типтәрҙәре йәшәй, тип теркәлгән.

1989 йылда «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Яшәүгә хокук» тигән китапта филология фәндәре докторы Н. Мәксүтова күренекле башҡорт телсеһе F. Дәүләтшиндың түбәндәге һүҙҙәре менән уның технологияһын аңлата. «Хәҙерге көндә Яңауыл районында 71140 йән иҫәпләнеп, шуларҙың 44081-е – башҡорттар, 9632-һе – урыҫ, 11099-ы – татар һ.б. Ләкин эш ҡағыҙҙары яртылаш русса һәм

татарса йөрөтөлә. Бөтөн татар һәм башҡорт мәктәптәрендә уҡытыу татар телендә алып барыла. Яңауыл, Ямаҙы, Аҡсәйет мәктәптәрендә башҡорт теле айырым предмет рәүешендә индерелгән булһа ла, ул да иҫәпкә бар – һанға юҡ».

Туймазы районына ойошторолған ошондай хөкүмәт экспедицияһы унда 29 меңдән күберәк башҡорт йәшәп тә, ВКП (б) район комитетының ҡарары буйынса татарса уҡытырға ҡушылыуы хаҡында бәйән итә. Хатта сыуаш ауылы Баҙғыяла ла татар теле индерелә (1910 йылда Ҡазанда юҡҡа ғына борсолмағандар икән). Ҡариҙел районында ике тиҫтәгә яҡын башҡорт ауылы иҫәпләнеп тә, эскпедиция ағзаларының башҡорт телендә уҡытыуҙың бер ниндәй ҙә нигеҙе юҡ, тигән ҡарарға килеүен башҡортса нәшер ителгән «Алға» гәзитен татар теленә күсерергә тәҡдим итеүен башҡорттарҙы яһалма юл менән ассимиляциялаштырырға маташыу тип кенә ҡабул итергә мөмкин. Әгәр ҙә ВКП (б) өлкә комитетында ошондай сәйәсәт яҡлылар күпселек булмаһа, башҡортто үҙ илендә туған теленән мәхрүм итергә мөмкин булыр инеме икән? «1927 йылда, – тиелә Әкрәм Бейештең аталған китабында, – башҡорттар дәүләт аппаратында 7,9 процент булһа, 1928 йылда – 7,7, 1930 йылда 6,3 процентҡа тороп ҡалған». Был мәғлүмәт аңлатмаға мохтаж түгел.

1926 йылғы СССР халыҡтарының иҫәбен алыу башланғас, татарлаштырыусылар өсөн көн тыуған. Был кампанияла татар телен туған тел тип атағандар 461 меңгә етә, йәғни 1897 йылғы иҫәп менән сағыштырғанда дүрт тапҡырға арта. Нисек кенә борғоларға тырышһаң да, быны тәбиғи хәл тип атау мөмкин түгел. Дөрөҫ, әлегә мишәр (135,9 мең), типтәрҙе (23,9 меңдән күберәк) был этник төркөмгә индермәй торалар.

Төп халыҡ вәкилдәренең бик аҙ артыуы урынлы шик тыуҙыра. 1897 йылда Өфө өйәҙендә, мәҫәлән, 114 меңдән ашыу башҡорт теркәлһә, 1926 йылғы иҫәпкә Өфө кантонынан ни бары 57 меңләп кенә ингән. Уның ҡарауы, татар диаспораһы 20 тапҡырға артып, 90 меңдән күберәк булып киткән. Бәләбәй кантонында башҡорттар 118 меңгә тороп ҡалған. Бөрө кантонындағы иҫәп иһә мөғжизәгә торошло: татар диаспораһы 30 тапҡырға ишәйеп, 70 меңлегә әүерелгән. Был хәтле халыҡ ҡайҙан һәм ҡасан күсеп килгән һәм был «мәғлүмәт»те һуңынан кемдәр раҫланы икән?

Ары китәйек. Стәрлетамаҡ өйәҙендә 30 йыл элек 115,7 мең башҡорт теркәлһә, был юлы яртылаш кәм күренә. Әлбиттә, был хәлде бер ниндәй ҙә демографик процесс менән аңлатып булмай.

1930 йылда Башҡортостанда элекке кантондар урынына районлар системаһы индерелеү этностар составын сағыштырып ҡарауҙы ауырлаштыра. Ләкин шуныһы асыҡ: татарҙар төньяҡ-көнбайыш районларҙа әҙәм ышанмаҫлыҡ дәрәжәлә арта. Мәҫәлән, Благовар районында уларҙы төп халыҡ вәкилдәренән дүрт тапҡырға күберәк иҫәпләп сығаралар. Ә бит был төбәктәге ауылдарҙың күпселеге ҡатнаш һәм уларҙың барыһында ла башҡорттар өҫтөнлөк итә. Ауырғазы районында ла татарҙар – күпселек. Ошо район буйынса сыҡҡан БДБҠБК брошюраһына күҙ һалайыҡ. Башҡорт ауылы Абдулла элекке биш рәүиздә үҙенең этник сығышын дөрөҫләп килеүгә ҡарамаҫтан, 1989 йылда сыуаш тип теркәлә. Әхмәт, Төбәк, Хәсән кеүек башҡорт ауылдары шул уҡ йылда татар ауылдарына әүерелә. Башҡорттар көн иткән Минебай татар-башҡорт ауылы булып китә. Иҫке һәм Яңы Итекәй, Яңы Мостафа, Ишле, Кәлсер-Буран ауылдарында көн иткән типтәрҙәр татар иҫәбенә индерелә. Туҡай ауылының башҡорт һәм мишәрҙәре лә ошо этносты ишәйтә. Был башбаштаҡлыҡты Ауырғазы районында башҡорттарҙың тиҫтә йылдар буйы етәксе органдарында эшләмәүе, тимәк, үҙ милләте яҙмышын хәстәрләүҙән ситләштерелеүе менән генә аңлатырға мөмкин.

Стәрлебаш районының милли составына ла шундай уҡ төҙәтмә индерәләр.

1859 йылда Баҡый ауылында, мәҫәлән, 100 башҡорт теркәлһә, 1920 йылда 716 башҡорт һәм типтәр күренә, ә 1989 йылда ауыл тулыһынса татар булып китә. Тәтер-Арыҫлан ауылында 1859 йылғы иҫәп буйынса 387 башҡорт күренә, улар 1920 йылғы иҫәптә лә бар, ә бына 1959 йылда тик татарҙар ғына теркәлә. Ямғырсы, Ибрай, Хәлекәй, Ҡуғанаҡбаш кеүек ауылдарҙа ла башҡорттарҙы иҫәптән алып ташлайҙар. Бындай мөғжизәләрҙе башҡа райондарҙа ла табырға мөмкин.

Әйтергә кәрәк, М. Рәхимов Башҡортостанға етәкселек иткәндә, башҡорттар өсөн борсолорлоҡ мәлдәр булманы. Ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй, тигәндәй, башҡорт йәмәғәтселеге республика башлығына ниндәйҙер дәрәжәлә ышаныс менән ҡараны һәм ул тойғо шундай уҡ дәрәжәлә аҡлана килде. Бөгөн иһә ундай тойғо юғалып бара. Республика һәм муниципалитет кимәлдәрендә бик күп милләттәштәребеҙ вазифаһынан алынып, улар урынына башҡа халыҡтар вәкилдәре үрләтелде. Хәйер, быға ғәжәпләнергә лә түгел, сөнки Мәскәү күптән инде, урындағы элита урыҫтарҙы ҡыҫырыҡлай, быға сик ҡуйырға кәрәк, тип әйтә килә ине. Шулай уҡ Р. Хәмитовтың республика башлығы булырға ынтылмауын («у меня выбора не было» тине ул) да иҫәптән сығарырға ярамай. Теләп эшләгән кеше менән мәжбүр ителгәндең эш һөҙөмтәһе бер үк булмай.

Шул уҡ ваҡытта быйыл февралдә Дәүләт Советының милләт-ара хәлгә ҡағылышлы ултырышын Өфөлә үткәреү ҙә ниндәйҙер мәғәнәгә эйә. Уны, беҙ башҡорттарҙың милли сәйәсәттәге хаталарын төҙәттек һәм быны ыңғай ҡабул иттеләр, тип тә аңларға мөмкин. Был, әлбиттә, хата ҡараш. Башҡорт йәмәғәтселеге яңы кадрҙар сәйәсәтен ҡабул итмәне һәм итеүе лә мөмкин түгел. Был фекерҙе раҫлау өсөн Башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең XVI быуат урталарында Мәскәү батшалығына эске идараны үҙ ҡулында тотоу (автономия) шарты менән ҡушылыуын, 1919 йылда йәш Совет хөкүмәте менән дә ошо хаҡта килешеү төҙөүен атау ҙа етә. Хоҡуҡ боҙоуҙарҙа дәлил итеп башҡорт халҡының демографик хәле ҡутәрелә икән, беҙ юғарыла уның сәбәптәрен аңлаттыҡ.

Республиканың төп халҡының конституцион хоҡуҡтарына ҡаршылыҡтар булмаһын өсөн, илдә федератив дәүләт ҡанундарының һаҡланыуына өлгәшеү зарур. Бөгөн иһә был принцип боҙола, республика етәксеһенең РФ Президенты тарафынан тәғәйенләнеүе уның дәүләт (РФ Конституцияһының 5-се статьяһы) башлығы булыуы менән иҫәпләшмәй. Шулай уҡ Башҡортостанда урындағы үҙидара етәкселәренең һайлаусылар тарафынан түгел, ә тәғәйенләп ҡуйылыуы ла илдең Төп законына ҡаршы килә (12-се статья). Сөнки урындағы үҙидара – дәүләт власының бер тармағы түгел, ә унан бойондороҡһоҙ власть.

Тел мәсьәләһе лә ни өсөндөр тейешле даирәләрҙә хәл ителмәй. «Үҙем – башҡорт, телем татар» тигән мәғәнәһеҙлеккә сик ҡуйылмай тороп, был өлкәлә законлы сиселешкә өмөтләнеү урынһыҙ. Фән үҙ һүҙен күптән әйтте, хәҙер сират – власть даирәләренә.

2011 йыл Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы тип иғлан ителде. Ә бит күрелгән саралар бының ысынлап та шулай буласағына ышандырмай. Ошо айҙанлы Рәсәйҙең НАТО-лағы вәкиле Д. Рогозиндың, Афғанстанды пуштундарҙан башҡа ҡорорға ынтылыу ул Рәсәйҙе мордва һәм татарҙан ҡорорға маташыуға тиң, тигәнен нисек иҫкә төшөрмәйһең. Башҡортостанда милләттәрҙең килешеп йәшәүе башҡорт халҡының кәйефенә бәйлелеге иҫбатлауға мохтаж түгел. «Был төбәктә милли ерлектә ыҙғыштар тыуымаһын» тигән кешенең тап ошо фекерҙән сығып эш итеүе мотлаҡ. Ә башҡорт – быға тарих шаһит,– үҙ сиратында, башҡа халыҡтар өлөшөнә ҡул да һуҙмаған, тыныслығын да боҙмаған.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

---

# Туйҙар әле үтмәгән...

Тәлғәт Шаһмановтың «Ҡалала башҡорт булыуы еңелме?»
*("Ағиҙел" № 7, 2011 йыл)* мәҡәләһен уҡығас...

Башҡортҡа бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла еңел булмаған. Был халҡыбыҙ араһына быуаттар дауамында килеп ултырып, уны үтә ныҡ тарҡатып ебәргән башҡа милләттәрҙең йоғонтоһона бәйле. Асылда хәҙер республикала, Бөрйән районынан башҡа, башҡорттар тупланып йәшәгән бер төбәк тә юҡ. Дөрөҫ, был мәсьәләгә бик алыҫтан да, яҡын осор күҙлегенән дә сығып ҡарарға мөмкин. Быуаттар төпкөлөнә китһәк, башҡорт ырыуҙарының үҙ-ара ла ығы-зығыла йәшәүен күрергә мөмкин. Тағы ла йырағыраҡҡа ҡараш ташлаһаҡ, халыҡтың төрлө ҡәбиләләрҙән ойоша башлау осорона юлығыр инек. Этногенез, шайтан алғыры!

Үткән эштән төш яҡшы, тиҙәр. Хәҙер беҙгә бөгөнгөһө һәм киләсәге ҡиммәтерәк. Башҡортто милләт итеүсе һыҙаттарҙы барлап ҡараһаҡ, унда иң тәүҙә уртаҡ мәҙәниәтте, мәғариф системаһын, матбуғат сараларын алырға мөмкин. Тәүгеһе менән ауырлыҡ юҡ, шикелле. Һуңғы тиҫтә йыл эсендә генә үҙебеҙҙең милли эстрада, театрҙарыбыҙ, һынлы сәнғәт, классик музыка, кино сәнғәтебеҙ ярайһы уҡ үҫеште. Әллә нисә телевидение, радио каналдары тәүлек әйләнәһенә эшләй. Әлбиттә, был өлкәлә лә етешһеҙлектәр, уйланмаған урындар барҙыр, әммә барҙы «юҡ» тип әйтеп булмай. Беҙҙең быуын, 60-сы йылдарҙа тыуғандар, мәҙәниәтте клубтағы «Ритайым» уйындары тип кенә белә ине. Тәбиғәте менән йыр-моңға әүәҫ халыҡтың айырылғыһыҙ сифаты был.

Мәғарифта мәсьәләләр күберәк. Ул Рәсәйҙең дөйөм мәғариф системаһын бер епкә теҙергә тырышыуҙан килеп сыға. Асылда юҡҡа сыҡҡан бушлай урта белем биреүгә хәҙер инде мәктәптәрҙе аҫырауға мөмкин тиклем әҙерәк аҡса бүлергә тырышыу ҙа өҫтәлде. Шул сәбәпле «оптималләштереү» тигән яңылыҡ килеп керҙе, штат ҡыҫҡартыуҙар башланды (быйыл ғына Башҡортостанда 112 мәктәп ябылған), ә берҙәм дәүләт имтиханы (БДИ), уның артынса IX синыфтан һуң ГИА индереү асылда мәктәптә уҡытылған предметтарҙы «кәрәк»кә һәм «кәрәкмәй»гә бүлеп, балаларҙа – уҡыуға ынтылышты һүреп, ата-әсәләр һәм уҡытыусыларҙа һайлап ҡарауға ынтылышты арттырҙы. Шул арҡала «Башҡорт телен уҡытыу нимәгә кәрәк?» тигән һорауҙы иң тәүҙә әләм итеп күтәрҙеләр ҙә инде. Әйтте тиерһегеҙ, унан һуң хеҙмәт, йыр, физкультура дәрестәренә лә сират етәсәк. Башлауы ғына – көс.

Инглиздәрҙән күсереп алынған был системанан баш тартыу уйы әлегә берегендә лә юҡ. Етешһеҙлектәре асыла барған һайын, уларҙы төҙәтергә вәғәҙә бирәләр, тикшереү һәм яза биреү, һәр яҡлап контролдә тотоу тәртибен яйға һалырға маташалар – барыһы ла шул бер, барлыҡ юлдар киҫешкән төйөндө

нығыраҡ һәм ышаныслыраҡ бәйләү өсөн атҡарыла: мәктәпте тамамлау һәм вузға кереү имтихандары бер үк булырға тейеш. Ә етешһеҙлектәр аҙым һайын тиерлек килеп сығып тора. Иң ҙуры, әлбиттә, мәктәптә үк былай ҙа күпселекте тәшкил итмәгән яҡшы өлгәшеүсе балалар алдына «был предмет һеҙгә кәрәк, ә быныһы – юҡ» тигән һайлау шарты ҡуйыу. Ә алдан уҡ вузда уҡыу маҡсатын ҡуймаған «урта ҡулдар»ға иһә тағы ла анһатыраҡ: улар мотлаҡ булған ике предметтан башҡаһын һуңғы ике йылда бөтөнләй өйрәнмәһә лә була! Ошоноһо, моғайын, БДИ системаһының төп бәләһелер.

АҠШ-та, былай, балаларҙың мәктәптә үк предметтарҙы үҙҙәре һайлап уҡыу системаһы бар. Тик беҙҙә бит тотош программаны үтеп бөткәс, имтихан алдынан ғына һайлайһың. Ә уға тиклем бөтөнләй моңо-тауышы булмаған бала ла тырышып-тырмашып йыр дәрестәрендә мөңрәп ултырырға тейеш. Күҙ алдына килтерәйек: мәктәптә икешәр параллель кластарҙа (22 класс) сит телдәр уҡытылып, ахыр сиктә шуларҙан береһе лә БДИ-ны сит телдән һайламаны икән, ти. Булыуы бик ихтимал хәл был, һайлау уҡыуҙар тамамланыр алдынан ғына башҡарыла бит. Инде һанап ҡарайыҡ: ул береһенә лә хәжәте булмаған сит телде уҡытырға мәктәптә нисә уҡытыусы йәлеп ителде һәм балалар күпме ваҡытын үҙҙәренә файҙаһы теймәйәсәк телде өйрәнеп үткәрҙе? Иң мөһиме – уға күпме ҡаҙна аҡсаһы сарыф ителде? Мин быны йәмғеһе һигеҙ (!) йыл аҙнаһына ике дәрес немец телен өйрәнгән һәм ғүмеремдә бер немецты ла күрмәгән кеше буларак әйтәм (ә шулай ҙа мин мәктәптә лә, институтта ла немец теле курсынан һуң имтихан тапшырҙым – шулай тейеш ине, уҡытыусыла эшләнгән эш тойғоһо ҡалһын өсөндөр).

Шулай итеп, беҙҙең хәҙерге мәктәп системаһы әле тормошҡа аяҡ та баҫмаған балаларға алдан уҡ уларға ниндәй дәрестәрҙә һабаҡ алырға, ә ҡайһыһына ҡул һелтәргә (йәғни, «уларҙың һеҙгә файҙаһы теймәйәсәк») кәрәк икәнен күрһәтеп тә ҡуя. Хәйер, минең миҫалға әйләнеп ҡайтҡанда, башҡорт телен беҙ һигеҙенсегә тиклем шулай уҡ аҙнаһына ике тапҡыр өйрәндек, имтихан да тапшырҙыҡ. Һөҙөмтәлә башҡорт телен беләм, ә немец телен – юҡ. Ә бит тап шул ваҡытта беҙгә (әле лә иҫләйем):«Һеҙгә башҡорт теле кәрәкмәйәсәк, рус һәм немец теленә баҫым яһағыҙ!» – тип ирекһеҙләүселәр булманы түгел... Ғәжәп, хәҙер рус халҡы ни өсөндөр мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы сыға. Әйтерһең дә, уҡыусы киләсәктә үҙенә нимә кәрәк буласағын белеп тыуа.

Килеп сығып торған ҡырын яҡтары (йә уҡыусылар өсөн студенттар килеп БДИ тапшыра, йә уҡыу йортона тәғәйенләү исемлегендә «үле йәндәр» теҙелешеп тора, йә, Интернетты файҙаланып, артта һөйрәлеүсе «отличник» булып китә һ. б.) яйлап төҙәтелә килеп, технологик йәһәттән БДИ системаһы берәй ҡасан яйға һалыныр, тип ҡарайыҡ. Әлбиттә, ҙур илдең белем биреү системаһын тотош бер маҡсатҡа – ахырҙа өс кенә предметтан йөҙ балл алыуға бороп ебәреү ҙә шәп нәмә түгел, тик уныһы – тиҙ һәм беҙ хәл итә торған мәсьәлә түгел.

«Оҙаҡ уйланып йөрөй, күп йылдар башҡорт ғаиләләренең тормошон ентекле күҙәтә торғас, мин үҙемдең хаталанғанымды аңланым: башҡорт балаларын туған теленән мәхрүм итеүселәр уларҙың ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәре икән, – ти Тәлғәт Шаһманов. – Быға дәлилдәрҙе аҙым һайын осратырға мөмкин. Хатта ауыл балаларына тиклем туған телендә һөйләшергә ғәрләнә бит хәҙер. Мәктәпте тамамлап, тыуған ауылдарынан ситкә сығыу менән сит телгә күсә һалалар». Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ. Тик шуны ла танымай

булмай: улар башҡорт телен онотһа ла, ни русса, ни инглиз телендә йүнләп аралашырға өйрәнә алмай. Сөнки мәктәптәрҙә балаларҙы һөйләшергә өйрәтмәйҙәр, улар дәрестәрҙә бер кемгә кәрәкмәгән ҡағыҙәләрҙе ятлап ултыра. Ә матур һөйләшә белеү ул грамматика түгел, «риторика» тип атала, уны беҙҙең уҡытыусылар ҙа белмәйҙәр әле. БДИ системаһы ла, әйткәндәй, шул юлды ҡыуа: балалар алдан уҡ тестарҙың стандарт һорауҙарына яҙма яуап бирергә өйрәнергә мәжбүр. Шулай булғас, нимәгә уларға үҙ фекерҙәрен еренә еткереп телдән аңлатырға өйрәнеү?

Мәктәптәрҙә осрашыуҙар ваҡытында мин йыш ҡына уҡыусыларҙың ваҡытлы матбуғатҡа һүлпән яҙышыуҙарының сәбәбен белешәм. Баҡтиһәң, быны аңлар өсөн уларҙың «В контакте», «ЖЖ» биттәрендә ниҙәр яҙып ебәреүҙәрен ҡарау ҙа етә икән. Сөнки хәҙерге балалар һөйләй генә түгел, яҙа ла белмәй! Хатта – рус телендә лә. Күрәһең, шундай хәлгә төшкән мәғариф системаһын үҙгәртеп, уны БДИ системаһына бормай сара юҡтыр инде. Ә ниҙәр күрһәтә һуң уның йомғаҡтары? Уҡыусыларҙың 4,1 проценты рус телен «икеле»гә тапшырған. Ил буйынса был 42845 уҡыусы тигән һүҙ. Күҙ алдына килтерәһегеҙме? 11 йыл буйына көн һайын шул телдә уҡып, һөйләшеп йөрө лә (һәр дәрестә!), ай һайын диктант йә инша яҙып белемеңде тикшерһендәр ҙә, ахыр сиктә һинең бөтөнләй наҙанлығың асыҡлана! Ошо үҙе үк уҡытыу системаһының камил түгеллеген аңлатмаймы ни? Ни өсөн уларҙы 11 йыл уҡытҡандар, ә IX синыфтан уҡ ҡыумағандар? Мәктәптәргә балалар иҫәбе кәрәк бит, шуға ҡыумайҙар.

Сағыштырыу шуны күрһәтә: дөйөм белемһеҙлек башҡорт балаларына ғына ҡағылмай, урыҫтарҙа ул хатта ҡырҡыуыраҡ та тора әле. Мәҫәлән, Башҡортостанда урыҫ теле буйынса имтиханды «икеле»гә тапшырыусылар 2,4 процент тәшкил итә. Быға илебеҙҙә ҙур сәйәсәт итеп алып барылған глобализация ла ярайһы йоғонто яһай: донъя кимәленә сығабыҙ, алдынғы илдәр менән тығыҙ бәйләнештәр урынлаштырабыҙ тип, телебеҙгә бихисап сленг, сит телдәрҙән үҙләштерелгән ят һүҙҙәр, үҙенә күрә халыҡ-ара «эсперанто» килеп керә. Һөйләш телендә ҡабул ителә әле ул, ә бына яҙмаларҙа – юҡ. Сөнки беҙҙең системала уҡытыусының ҡайһыһы ғына булмаһын, «башҡорт йәки рус телендә бындай һүҙ юҡ» тигән һығымтаға килеп, аныҡ билдәһен сәпәйәсәк.

Бына шундай беҙҙең «донъяла иң алдынғы белгестәр әҙерләүсе» мәғариф системаһындағы эштәр. Юғары уҡыу йорттары студенттарының белем кимәле бермә-бер төшөүен хәҙер уларҙы уҡытыусылар ҙа таный. Сөнки имтихан йә зачет алдынан төркөм старостаһының башта аҡса, унан зачеткалар йыйып алып, «оптом» баһа ҡуйҙырып йөрөүе тураһында кем белмәй? Хәйер, быға хәҙер өйрәнеп бөттөләр инде, шулай тейеш, тип кенә ҡарайҙарҙыр.

Матбуғатҡа килгәндә, шуны танымай сара юҡ: матбуғатыбыҙ яңы заман һулышына яраҡлаша алманы. Диагноз тип тә ҡабул итә алаһығыҙ быны. Гәзит-журналдар тираждарының өҙлөкһөҙ төшә барыуы хаҡында әйтмәйем, ул, – данлыҡлы Михайло Ломоносов әйтмешләй, «бер ерҙә кәмеһә, икенсе ерҙә шунсаға уҡ өҫтәлә» торған күренеш. Әлегәсә бер кем дә был хәлгә баһа биреп, шул уҡ мәғариф системаһындағы һымаҡ, ниҙер үҙгәртергә тырышмауы хәүефлерәк. Матбуғат тигәндә, әлбиттә, гәзит-журналдарҙы ғына түгел, ә китаптарҙы, барлыҡ электрон сараларҙы ла күҙ уңында тоторға кәрәк. Яңыраҡ ҡына беҙҙе «халыҡтың аҡсаһы юҡ бит» тигән һылтауға ышандыра инеләр. Тик, үкенескә ҡаршы, хәҙер быға береһе лә ышанмай. Улайһа ҡайҙан килеп сыға өй һайын

компьютерҙар, хатта уҡымаған балаларҙа ла ҡиммәтле телефондар, һәр йортта сит ил машиналары?

Компьютер һәм телефон булғанда, әлбиттә, почта аҙнаға бер килтергән гәзиттәрҙең кәрәге юҡ. Шуға бәйле, башҡорт теленең дә хәжәте ҡалмай кеүек. Әле, белеүемсә, башҡорт яҙыусыларынан бер минең генә Интернет сайтым бар. Ҡалғандарына уның кәрәге лә юҡ, шикелле. Китаптар баҫылмай, тип зарланып йөрөүе үтемлерәк сөнки, ғөмүмән, тормошобоҙға ярһыу тулҡын булып килеп кергән глобалләштереү башҡорт теленә ҡағылманы, Интернетта ул лайыҡлы урынын яулай алманы. Быныһы инде ҡала балаларына туранан-тура ҡағыла. Яңылышмаһам, хәҙер ноутбугы булмаған ҡала уҡыусыһы юҡтыр ҙа әле. Ә Интернеттың төп уңайлығы – үҙеңә кәрәк мәғлүмәтте мотлаҡ табаһың. Яндекстың эҙләү системаһы башҡортса аңлай, мәсьәлә – унда бөгөнгө уҡыусыға етерлек мәғлүмәттең булмауында.

Заман балаһына ата-әсәһенең дә күп нәмәне өйрәтеп ултырырға ваҡыты юҡ. «Нимәгә минең башты ҡатыраһың, ана, Интернеттан ҡара!» – тип кенә әйтәсәк улар. Балаға шул ғына кәрәк тә инде. Бына ошонда беҙ Тәлғәт Шаһманов күтәргән «ҡала балаларын тәрбиәләүҙә ата-әсә йоғонтоһо» мәсьәләһенә яҡынырак киләбеҙ. Баҡтиһәң, ҡала балаһы өсөн мәктәптә аҙнаһына ике дәрес башҡорт теле – уның төп белем сығанағы икән дә! Ул сығанаҡҡа «Киске Өфө» гәзите редакцияһында үткәрелгән «түңәрәк өҫтәл»дә уҡытыусылар үҙҙәре диагноз ҡуйҙы: телде өйрәнеү системаһы ифрат артта ҡалған... йә бөтөнләй дөрөҫ юлдан китмәгән.

Көнө-төнө уҡыу менән генә булған (сөнки ҡалала балаларҙың башҡа шөғөлө юҡ) баланың өс телде еңел үҙләштерә алыуына иманым камил. Үрҙә мин аҙнаға ике дәрес немец теле өйрәнеүем тураһында әйткәйнем. Талап һәм теләк булғанда, һигеҙ йыл уны бик яҡшы үҙләштерер өсөн буйтым етер ине лә. Ләкин эш шунда: дәрестән сығыу менән беҙ ни уҡығанды онота инек һәм киләһе дәрескә тиклем иҫкә лә төшөрмәй инек. Уҡытыусылары ла шундай ғына булғандыр инде, йәғни «минән киткәнсе – эйәһенә еткәнсе». Ләкин «көнө-төнө» тип мин юҡҡа ғына әйтмәнем, сөнки системалы уҡыу тап шуны талап итә: дәрестә уҡытыусы аңлатҡанын тыңлау, өйҙә икенсе дәрескә үҙаллы әҙерләнеү, радио-телевизор һәм Интернеттан да шуға бәйле мәғлүмәттәр аулау... Әгәр беҙ көнө-төнө русса аралашҡан балаларҙың рус телен «икеле»гә тапшырыуы тураһында һүҙ алып барабыҙ икән, тимәк, улар ҡайнаған «ҡаҙан»дар шул сама ғына һәм шунан һуң башҡа телдәргә ни һан? Бының өсөн башҡорт телен ҡулланыу даирәһен киңәйтергә кәрәк – был бәхәсһеҙ. Шул иҫәптән – мотлаҡ сараларҙы ла ҡулланып. Ысынлап та, әгәр хөкүмәтебеҙ шул тиклем сығымдар бүлеп ҙур мәғариф системаһын тота икән, унан тейешлеһен талап итергә лә хоҡуғы бар ҙаһа. Әйтәйек, «Беҙҙең мәктәптә ни өсөн балалар физика өйрәнергә бурыслы? » тигән мәсьәлә бер ҡасан да күтәрелгәне юҡ, был – аксиома тип ҡабул ителгән. Тырышып-тырмашып физиканан мәсьәлә сисеп ултырған балаһына атаһы ла бер һүҙ әйтмәй, ә бына йәбешеп ятып башҡортса китап уҡыһа? Йә, киреһенсә, берәй бала: «Мин киләсәктә Рәсәйҙә йәшәргә йыйынмайым, нимәгә миңә урыҫ теле?» – тигән һорау ҡуйһа... Шуға күрә, минеңсә, мәктәп программаһын «мотлаҡ» һәм «кәрәкмәгән» фәндәргә бүлергә ярамай. Ул предметтар юҡтан бар булмаған һәм һәр уҡытыусы үҙ предметын тулыһынса өйрәнеүҙе талап итергә бурыслы. Мин бында, әлбиттә, урыҫ балаларына башҡорт телен мотлаҡ өйрәтеүҙе күҙ уңында тотмайым – һыйырға

эйәр нимәгә кәрәк? Үҙ телдәрен белһәләр ҙә бик шәп әле. Башҡорт мәктәптәрендә уҡыған башҡорт балалары тураһында һүҙ барырға тейеш. Әгәр ата-әсәһе үҙе теләп шул мәктәпкә биргән икән, ул телде өйрәтеү системаһын да ҡабул итергә бурыслы. Балаларына математиканан, рус теленән, хатта технологиянан өйгә эштәрен эшләшеп ултырған әсәйҙәр аҙмы ни?

Был мәсьәләлә, күрәһең, башҡорт интеллигенцияһы баштан уҡ һәлкәүлек күрһәтте. Мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу проблемаһын йәмәғәт кимәлендә күтәргәндә үк һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйырға ине: «Әйҙәгеҙ әле, тикшереп сығайыҡ: хәҙерге мәктәп программаһынан тағы ҡайһы дәрестәрҙе бөтөнләй алып ташлап була?» Шикләнмәйем, әгәр БДИ һымаҡ «мотлаҡлыҡ» күҙлегенән ҡараһаҡ, улар байтаҡ табылыр ине. Ә зарурлыҡ күҙлегенән баҡһаҡ, тағы әллә күпме фәнде бөгөндән индерергә мөмкин. Хәтерләһәгеҙ, бөтә ығы-зығы ла шунан башланғайны: хәҙерге мәктәп балалары программаһы үтә лә тығыҙ, улар көнөнә алтышар дәрес уҡый, тимәк, артыҡтарын ҡыҫҡартырға кәрәк. Һәм шунда ниңәлер дәүләт теле статусына эйә булған башҡорт теле артыҡ булып күренде. Германияла немец телен өйрәнмәгән бала бармылыр, белмәйем. Был, һәр хәлдә, логикаға ла тап килмәй һымаҡ.

Ҡасандыр был идея менән сығыш яһағаным да булды: әгәр баланың үҙенә ҡалдырһаң, ул бөтөнләй уҡымауҙы һайлаясаҡ. Ана шуның өсөн уларҙы көн һайын төрткөләп, баш остарында айбалта урынына торған, ҡәҙерлеһен лайыҡлы уҡытыр өсөн бер нәмәһен йәлләмәгән ата-әсәләре бар. Мәктәптән тыш сараларға, музыка һәм спорт мәктәптәренә лә әйҙәйҙәр әле. Уҡытыу – ул дөйөм тәрбиәнең бер өлөшө генә, юҡһа элек бөтөнләй уҡый-яҙа белмәгән кешеләр ҙә йәмғиәттә үтә абруйлы булып йәшәй алыр инеме? Әллә һеҙ, ҡайһы илдә йәшәгәнегеҙҙе онотоп, беҙҙә һаман да бушлай һәм мотлаҡ (!) урта белем биреү бар, тип уйлайһығыҙмы? Рәсәйҙә бөгөн 2 миллиондан ашыу мәктәп йәшендәге бала бөтөнләй уҡырға йөрөмәй һәм уларҙың береһенә лә кәрәге юҡ! Улар асарбаҡ булып донъя гиҙеп сығып китә, йүнһеҙ ата-әсәһен ҡарар өсөн урлашып йә хәйер һорашып йөрөй...

Тәлғәт Шаһманов үҙенең башынан кисергән, күңеленән үткәргән һәм беҙҙең йәмғиәт өсөн үтә лә мөһим мәсьәләне күтәрә. Минең яҙмаларҙа ла «ҡара төҫтәр» өҫтөнлөк алып китте, ахыры. Ләкин «һуң булһа ла, уң булһын» тигән әйтем дә бар бит әле. Әлегә, күрәһең, беҙҙең башҡорт интеллигенцияһына «үҙ ҡаҙаны»нда ҡайнау ҡамасаулай. Башҡорт телен өйрәнеү һәм өйрәтеү мәсьәләләре башҡорттар араһында түгел, ә урыҫтар һәм башҡа халыҡтар телендә тикшереүгә ваҡытында сығарылһа, бөгөн был мәҡәләләрҙе яҙыуҙың кәрәге лә ҡалмаҫ ине. Хәйер, әле лә туйҙар үтеп бөтмәгән, дөмбөр ҡағырға ла һуң түгел.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

## ҠАЛМЫҠ НӘҪЕЛДӘРЕ

1980 йылдарҙан элекке Советтар Союзында халыҡтарҙың үҙ-ара дуҫ йәшәүенә, һәр милләттең боронғо ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм мәҙәниәтенә ыңғай ҡараш күҙәтелә башланы. 1983 йылда Йылайыр районының Матрай ауылында «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамын гөрләтеп үткәрҙеләр. Ойоштороусыһы ауыл Советы рәйесе Роза Саҙрыева булды. Ҡәҙерле ҡунаҡтар араһында билдәле шәхестәрҙең, шул иҫәптән Афғанстанда СССР илселеге кәңәшсеһе булып эшләгән Абрар Ярлыҡаповтың, ҡатнашыуы йыйындың бәҫен күтәрҙе.

1985 йылда Ҡашҡар ауылы халҡы һуғыш ветераны Хөрмәт Ҡашҡаровтың тәҡдиме менән «Ҡалмыҡтарҙың шәжәрә байрамы»на йыйылды. 2007 йылда иһә ҡашҡарҙар «Шәжәрә байрамы»нда дүртенсе мәртәбә осрашты. «Ҡалмыҡтар араһы»ның ҡор рәйесе итеп Әбделкәрим ауылында йәшәгән Йәмних Ҡашҡаровты һайланылар. Башҡа аралар ҙа үҙҙәренең ҡор башлыҡтарын билдәләне.

2008 йылдың майында башҡорт йырҙарын башҡарыусылар Сибай ҡалаһында «Ирәндек моңдары»ның IX төбәк-ара бәйгеһенә йыйылды. Ярышҡа Башҡортостандың 16 районынан, алты ҡалаһынан, шулай уҡ Ырымбур, Силәбе, Иркутск өлкәләренән 105 бәйгесе килгәйне. Ҡунаҡтар араһында Ҡалмыҡстандың халыҡ джанғарыһы (сәсәне) Владимир Каруев та бар ине. Ҡалмыҡ сәсәненең башҡорт халҡы өсөн дә бик әһәмиәтле тарихи һәм мәҙәни мәғлүмәттәргә бай булыуын мин ваҡытлы матбуғат аша уҡып белдем. Каруев – өс бала атаһы, инженер-төҙөүсе икән. 51 йәштә, дингә ныҡ бирелгән. Ул «Ирәндек моңдары» бәйгеһенә Австралияла үткән монгол-башҡорт фестивалендә ҡатнашып, унан һуң Ҡытайҙа монгол-башҡорт халыҡтары күп иткән ерҙәрҙә булып килгән. Моң бәйгеһендә ихлас ҡатнашып, Каруев ҙур абруй ҡаҙанды. Был хаҡта Сибай һәм Өфө телеэкрандары аша бер нисә тапшырыу ҙа күрһәтелде. В. Каруев ҡалмыҡтарҙың милли кейемендә (аҡ сапан, үҙенсәлекле баш һәм аяҡ кейемдәре, билғау), үҙе яһаған тумбыраһында уйнап һәм тамаҡ төбө менән өзләп, тыңлаусыларҙың иғтибарын йәлеп итте.

Каруев – өзләүе менән донъя күләмендә танылған шәхес. Сибай ҡалаһында ул филармония артистары, БДУ филиалы Сибай институты ғалимдары, студенттары, ҡала ветерандары менән осрашҡан, халыҡ йыры «Сибай»ҙы ла отоп алған. Ошондай осрашыуҙарҙы ҡунаҡ ҡалмыҡ батыры Мамынт тураһында тарихи мәғлүмәттәр эҙләү өсөн дә файҙалана икән. Мамынт батыр нәҫелдәренең Башҡорт илендә, бигерәк тә Урал аръяғының боронғо Алтын Урҙа, Нуғай урҙаһы биләмәләрендә, күп иткәнен яҡшы күҙаллай. Сибай ветерандар ойошмаһында эшләүсе Асия Ғәйнуллинаға эйәреп, Владимир Каруев Хәйбулла районында Мамынт тоҡомдарынан таралған Подольск, Кашкарск һәм Беренсе Мырҙа ауылдарына барып әйләнә. Был ауылдарҙа Ҡалмыҡ араһы шәжәрәһенә ингән Шәйәхмәтовтар, Ғәббәсовтар, Сабитовтар, Ҡашҡаровтар, Ғәбитовтар һ.б. – Мамынт батырҙың нәҫелдәре. Подольск ауылында ҡунаҡтар мәрхүм Сәйфулла Дилмөхәмәтовтан «Ҡалмыҡ көйө»н яҙып алған. Йылайыр ҡасабаһында йәшәгән Нәжиб Ҡашҡаровта

Мамынт гимны яҙылған пластинка әле лә һаҡлана. Сәфәр дауамында ҡунаҡтар Кашкарск ауылына ла инеп сыға. Таналыҡ йылғаһы буйында урынлашҡан был ауылға 1782 йылда тыуған Аблатиф ҡартатайыбыҙ 1810 йылда нигеҙ һалған. 1840 йылда был биләмәне Һамар староверы эшҡыуар Воздвиженко һатып ала. Был ауыл күп йылдар Хәйбулла районының «Маҡан» совхозы бүлексәһе булып иҫәпләнде.

Беренсе Мырҙа ауылында Вәкил Сабитовтан Түңгәүер ырыуы Юлдыбай ауылының ҡалмыҡ араһы башҡорттарының шәжәрәһен дә алғандар булһа кәрәк. Ул шәжәрә Мамынт ҡартатайҙан башлана ла инде. Владимир Каруевтың «Сибайский рабочий» гәзитенә интервьюһында түбәндәге юлдар бар: «Йылайыр районындағы Ҡашҡар ауылында Мамынт батырҙан зыярат ҡалған. Был мәсьәләне өйрәнергә кәрәк». Ошо ваҡиғанан һуң Сибай институты студенттары ошондай йомош менән миндә лә булып китте. Мәсьәләне өйрәнеү башланды, тиһәң дә була.

Ысынлап та, Мамынт ҡартатайыбыҙҙың зыяраты ҡайҙа? Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, йөҙ башы Ҡашҡар Мамутов 1782 йылда Ҡашҡар ауылына урынлаша. Уға хәтлем был йәйләү Бүкәт ҡартатайыбыҙҙың Йылайыр йәйләүе булып йөрөгән. Ф. Ғ. Хисаметдинованың « Названия башкирских населенных пунктов XVI – XIX веков» (Өфө, 2005 й.) китабында 1816 йылда Ҡашҡар ауылының булыуы, унда отставкалағы йөҙ башы Ҡашҡар Мамутов (74 йәш) йәшәгәнлеге тураһында яҙма бар. Тимәк, Мамутов 1742 йылда тыуған. Ауылда Ҡашҡар ҡартатайыбыҙҙың зыяраты ла булыуы ихтимал, сөнки 1735 – 1740 йылдарҙа башҡорт халҡы бик көслө ихтилалға күтәрелә. Ул баҫтырылғандан һуң 50 мең башҡорт ғаиләһе, ҡаҙаҡ хандары менән һөйләшеп, Урал йылғаһы аша улар яғына сыға. Был төркөмдә Мамынт батырҙың ғаиләһе лә булған. Тарих фәндәре кандидаты Ғилман Ҡашҡаров Ҡашҡар Мамутовтың Ҡаҙағстандан имен-һау ҡайтыуы тураһында яҙып сыҡты. Ә уның атаһы Мамынт ҡартатайҙың әйләнеп ҡайтыуы тураһында хәбәр булманы. Хөрмәт Ҡашҡаров (1924 – 2003 йй.) Урал йылғаһы буйында, йәғни Орск менән Новотроицк ҡалалары араһында Мамынт ауылының булыуын белә ине. Был хәбәрҙе Юлдыбай ауылына Орск ҡалаһынан күсеп килгән күршем Аллабирҙе Әмирханов та иҫбатлай.

Мамынт исеме төрлө тарихи мәғлүмәттәрҙә: әҙәбиәттә, шәжәрәләрҙә, яҙма мәҡәләләрҙә һ.б. осрай. Мәҫәлән, Мамынт, Мамт, Мамут, Мамынт һ.б. варианттарҙа теркәлгән. Фамилиялары ла төрлөсә яҙыла. Бөйөк рус шағиры А. С. Пушкин Емельян Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр ихтилалы тарихын өйрәнеп, 1833 йылда ошо хаҡта китап сығара. Унда монголдар Урал тауҙары аша дүрт мәртәбә уҙа: ике тапҡыр – көнбайышҡа, һәм артабан – көнсығышҡа. Алты монгол полководецының исеме лә бирелгән. Аранан бишенсеһе – Мамынт исемле. 1640 – 1680 йылдарҙа ул ғәскәре менән Башҡортостан биләмәләре аша үтеп, хәҙерге Дон йылғаһы башындағы Ҡалмыҡ Республикаһы ерҙәренә барып урынлаша. Хәҙерге Ҡалмығстандың 60 процентын Будда динендәге ҡалмыҡтар тәшкил итә, ә 40 проценты иһә башҡорттар булып, улар – Ислам динендә. Хәҙерге көндә был – үҙ-ара иң дуҫ йәшәгән халыҡтар республикаһы. Милли батырҙары Жонғыр һәм Салауат эпостарына тоғро, уларҙы яҡшы беләләр, донъя күләменә сығаралар. Туғандаш халыҡтар менән дуҫлыҡ ептәрен дә нығыта улар. Монголдарҙың Уралда, шул иҫәптән Башҡортостанда, тороп ҡалған вәкилдәрен борондан «ҡалмыҡтар» тип атағандар. Хәҙерге башҡорттар ҙа шул уҡ атаманы ҡуллана. Төп ҡалмыҡ ҡәбиләһе Түңгәүер заманында Алтын Урҙа империяһына нигеҙ һалған һәм артабан башҡортлашҡан. Шуға күрә лә мәктәп программаларында, Түңгәүер – монгол ҡәбиләһенә ҡарай, тип аңлаталар. Был ҡәбиләнән башҡалар ҙа башҡорт ерендә тороп ҡалған. Уларҙың исемдәрен килтереп үтәм: тургауттар, хашауыттар, шөрөстәр, дербиттар – бөтәһе лә тамам ассимиляцияға

дусар ителгән. Ләкин Ғ. Күскилдина, Йыһат Солтанов иптәштәр Үҫәргән ҡәбиләһенең, сығышы боронғо уйғырҙар булыуға ҡарамаҫтан, ҡалмыҡтар аша башҡортлашыуын инҡар итә. Ошондай уҡ хәл Бөрйән ҡәбиләһендә лә күренә. Башҡорт халҡы башҡа ҡәбиләләрҙе лә үҙ эсенә алған. Мамынт батыр нәҫеленән булған ҡалмыҡтар араһы (аймағы) шәжәрәһе Ялан түңгәүере, Юлдыбай ауылы башҡорттары шәжәрәһенә лә индерелгән. Был шәжәрәнең һыҙмаһы Юлдыбай ауылы мәҙәниәт йортонда һаҡлана.

Шәжәрәнең төҙөүсеһе һәм һаҡлаусыһы – Юлдыбай ауылының уҡымышлы шәхестәренең береһе мулла Рыҫкилде Ишкилдин (1896 – 1993 йй.). Түңгәүер шәжәрәһенең төҙөлөү тарихы түбәндәгесә. Р. Ишкилдин ағай 1902 – 1906 йылдарҙа Ҡарағас ауылының икенсе баҫҡыс дини мәҙрәсәһендә уҡығанда, унда Юлдыбай ауылынан аталы-уллы Иҙрис һәм Заһиҙулла Әпсәләмовтар белем биргән. Был хаҡта Мөслим Әпсәләмов «Хәлфә» исемле роман да баҫтырып сығарҙы. Ул шәжәрә 1937 йылға ҡәҙәр Суртанүҙәктә йәшәгән мулла Абдрахман Әптекәев ғаиләһендә һаҡланған. 1937 йылда был мулла ла сәйәси золомға эләгеп, шул уҡ йылда Р. Ишкилдин төрмәнән ҡайта һәм шәжәрәне абыстайҙан һорап ала. 1984 йылда ул шәжәрәне мин дә ҡулдан күсереп алдым. Артабан был ҡомартҡы Өфөлә Ауыл хужалығы министрлығында эшләгән Маҡсат Әптекәевҡа килеп эләгә. Заманалар үҙгәреп киткәс, Маҡсат та шәжәрәне етди өйрәнергә тотона.

Түңгәүер шәжәрәһенең олонон, Юлдыбай ауылының 500 йыллыҡ шәжәрәһен миңә Рыҫкилде ағай 1984 йылда хәтеренән әйтеп яҙҙырҙы. Ул шәжәрә хәҙерге көндә лә өйрәнелә, тултырыла, эшкәртелә. Исемдәре 6 меңдән ашыу, ә Юлдыбай ауылының аралар шәжәрәһе 50-гә яҡынлай. Был араларға ҡараған кешеләр Башҡортостанда һәм күрше өлкәләрҙә көн итә. Ҡашҡаровтар нәҫеле элекке Советтар Союзының бөтөн биләмәләренә, 16 сит илгә таралған.

Шәжәрәнең «Ҡалмыҡтар араһы» өлөшөнә иһә 300 йыл. Уның паспорты түбәндәгесә уҡыла: «Түңгәүер ырыуы Юлдыбай ауылы Ҡалмыҡтар араһы башҡорттарының шәжәрәһе. Олоно Күстәнә (1530 – 1581 йй.) исеменән башлана. Был шәхес Ялан Түңгәүере шәжәрәһенең 14 быуынына башланғыс биргән. Күстәнә бейҙең алты улы була: Туҡһары, Һарса, Һатыусал, Янбыраҡ, Туҡһары (шәжәрәһе юҡ) һәм Булансы (1570 й.). Булансының улы – Бүкәт (1609 й). Бүкәттең улдары: Үләй батыр (1665 й.), Йомағол, Ҡотош, Аҡкужа, Набай, Һыбай. Үләй батырҙың улы Мамынт (1705 – ? й.). Ҡатыны Байрагөл Мәмүтханова – ҡалмыҡ ҡыҙы. Ҡалмыҡ араһы шәжәрәһе Мамынттан башланып, уның тураһындағы риүәйәт түбәндәгесә тасуирлана: «Үләй батыр күп йылдар хеҙмәт итә, батыр исеме ала. Хеҙмәт осоронда ҡалмыҡ ҡыҙы Байрагөлгә өйләнә. Улдары тыуғас, уға Мамынт тип исем ҡушалар. 10-11 йәштәрҙә малайҙы ҡартатаһы Бүкәт тәрбиәгә ала. Ата-әсәләре килеп, хәлен белешеп, ярҙам итеп торған. Үҫә төшкәс, баланы алып ҡайтырға теләйҙәр ҙә, ләкин Мамынт ризалашмай. Ул был ваҡытта Бүкәт ҡартатаһында түгел, уның улы Һыбай тәрбиәһендә йәшәгән була».

Мамынт биш улға атай була. Ҡашғари (1742 й.), Мәхмүт (1748 й.), Рәим (1752 й.), Әхмәт һәм Ихсан исемлеләре ни сәбәптәндер шәжәрәгә индерелмәгән. Улар тураһында Һөйөндөк Сабитов (1928 йылғы) түбәндәгесә һөйләй. Кесе йәштән Әхмәте – Силәбе һәм Златоуст, ә Ихсаны Гурьев (хәҙерге Ҡаҙағстан) яғына сығып китеп, кире ҡайтмаған. Зәйнулла Рәимов 1920 – 1922 йылдарҙа Ихсандың тоҡомон Гурьев өлкәһендә эҙләп таба, ләкин улар Башҡортостанға ҡайтырға риза булмай. 1930 йылда Зәйнулла ағай ҡатыны Сәғирә менән сәйәси золомдан ҡасып киткән ерҙән эҙһеҙ юғала. Малдарын, башҡа мөлкәтен «Ҡыҙыл Йылайыр» колхозына ҡабул итәләр. Ике йортоноң береһенә – колхоз идараһы, икенсеһенә ауыл Советы урынлаша. Ул биналар хәҙер ҙә мәктәп уҡытыусылары өсөн квартира итеп файҙаланыла. Магазинын 1970 йылға хәтлем ҡулланыусылар кооперацияһы файҙаланды. Башҡа ҡаралтылары ла колхозға хеҙмәт итте.

Иң үкенеслеһе шунда: Зәйнулла ағай Рус-төрөк һуғышында ҡатнашып, унан Фатима исемле төрөк ҡыҙын кәләш итеп алып ҡайта. Ире өлкән ҡатыны менән ҡасып китеп, Фатима урамда тороп ҡалғас, уны Әхмәт мулла икенсе ҡатынлыҡҡа ала. Улдары тыуа. Ҡарт донъя ҡуйғас, әсәле-уллы Ҡашҡар ауылынан сығып китәләр. Һуғыштан һуң егеттең Күркәтауҙа өҫкө склад хужаһы булғанын, 1975 йылға ҡәҙәр Ефанкино ауылында йәшәүен урман ҡырҡыусылар Хәмзә Төлкөбаев, Ғәлим Алчинов, тракторсы Ғилметдин Нәҙерғоловтар яҡшы белә.

Башҡорт халҡында бер-береһен төрлө лаҡап исемдәр, ҡушаматтар менән атау ғәҙәте бар. Ҡашғар – Ҡашҡар ҡалмыҡ. Мәхмүт – Ҡабан ҡалмыҡ, Рәим – Рекс ҡалмыҡ, Таҙлар ҡалмығы һ.б. исемдәр аралар шәжәрәһендә лә урын алған. Мин, мәҫәлән, «Шырмыйҙар араһы ҡалмығы»на ингәнмен.

Ҡашҡар Мамутовтың улдары: Ғәббәс (1779 й.), Әбделмәзит (1778 й.) Баязит (1780 й.), Аблатиф (1783 й.). Ер биләмәләрен киңәйтеү өсөн Ғәббәс хәҙерге Ейәнсура районы Аҡҡондоҙ ауылына нигеҙ һала. Уның Утарбай, Вафа, Ҡотләхмәт, Сарар, Шәйәхмәт исемле улдары булған. Уларҙың алты-ете быуынынан 21 исемде эсенә алған шәжәрәһе тулы түгел. Әлегә Биктимеровтар, Уразаевтар фамилиялары билдәле. Әбделмәзит ошо уҡ райондың Өҫкәлек йылғаһы буйында Мәзит ауылына нигеҙ һала. Улдары Фәтхулла, Ишбулат теркәлгән. Был ауылда «Совет Башҡортостаны» гәзитенең элекке мөхәррире Абдулла Исмәғилев тыуған.

Баязит Ҡашҡар ауылында теркәлгән. Улдары – Зайна, Йосоп, Мосалин. Бөтәһе 14 исемде эсенә алған биш – ете быуын. Был шәжәрә лә тулы түгел. Аблатиф, әйтеп үтелеүенсә, Таналыҡ йылғаһы буйында Аблатиф утарын нигеҙләгән. Уның биләмәһе Урал йылғаһына ҡәҙәр йәйрәп ятҡан. Улдары Сабит (1814 й.), Ғәбит (1812 й), Хәлит (1816 й.), Сафиулла (1818 й.) Ҡашҡаровтар. Шәжәрәгә Ғәбиттең улдарынан Нәүширван (ете быуын, 12 исем), Шаһимарҙан (һигеҙ быуын, 30 исем), Рамазан (ете быуын, 71 исем), Мостафа (өс быуын, 4 исем); Сабит улдарынан Солтанморат (ете быуын, 17 исем), Мөхәммәттән (биш – туғыҙ быуын, 69 исем), Мырҙабулат (һигеҙ-туғыҙ быуын, 46 исем) теркәлгән. Улар Ырғыған ауылын башлап ебәргән. Сафиулла улдары (алты-ете быуын, 31 исем) Һултантимер ауылына нигеҙ һала. Аблатиф улы Хәлит (1816 й.) Ейәнсура районы Таҙлар ауылын нигеҙләй. Каруанһарайҙа белем алып, артабан мулла булып китә. Уның өс улы ла уҡып, мулла була.

Шәжәрәлә Әхмәт ахундың (1737 й.) балалары теркәлмәгән. Был документ Ейәнсура районында һаҡланыуы ла ихтимал. Рыҫкилде ағай, уларҙың балалары уҡыған, ғилемле кешеләр, ти торғайны. Хаммат мулла (1838 й.) Ейәнсура районы Муйнаҡ ауылы муллаһы булып торған. Уның тәүге улы Сәйфулла (1879 й.) – бик тә уҡымышлы әҙәм, Муйнаҡ мәҙрәсәһендә дәрес биргән. Улы Хәмзә (1929 й.), ҡыҙы Өммөгөлсөм (1925 й.) дә шәжәрәлә күренә. Хәмзә Ҡашҡаровтың Рафиҡ, Мирсәйет исемле улдары, Миңнур, Рәйсә, Гүзәл исемле ҡыҙҙары теркәлгән. Бөтәһе лә юғары белемле, уҡымышлы. Өммөгөлсөм апайҙың балалары Ғәбделхаҡ, Сания, Суфия, Сафия, Латифа, Ҡәнифә лә шәжәрәгә ингән.

Хаммат ҡартатайыбыҙҙың икенсе улы – Абдрахман Ҡашҡаров. Ул Башҡортостан мөхтәриәте (1917 – 1922 й.) өсөн көрәштә полк муллаһы булып ҡатнашҡан. Мәхмүт Ҡашҡаров (1840 й.) та муллаларҙан. Урындағы халыҡ уны Йәйәүле Мәхмүт тип йөрөткән. Ул – Ҡарағай туғай (хәҙерге Кинйәбулат) ауылы муллаһы. Ейәнсура районында ҡартатайыбыҙҙың 1870 йылда тыуған ҡыҙы Кәримә Юлдыбай ауылы старостаһы Шаһыбал Ишкилдинға кейәүгә сыға. Кәримә инәйҙең улдары Ырыҫкилде, Әбделғафар, Кинйәбулат «Шемпәтәйҙәр шәжәрәһе»нә теркәлгән. Уларҙың бөтәһен дә 1930 йылғы сәйәси золом юҡ иткән.

Икенсе ҡыҙы, 1873 йылғы Сабира, Һултантимер ауылында йәшәгән Сәғәҙиевҡа кейәүгә сыҡҡан. Хөснөтдин исемле улы Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була.

Сабира апай ике улы Әғзәм менән Карамды бер үҙе тәрбиәләй. 1943 йылдың майында 109-сы йылҡы заводының Батыр исемле айғыры апайыбыҙҙы, бейәләрен ҡыҙғаныптыр инде, юлда тибеп үлтерә. Балаларын артабан ҡаҙна йортона тәрбиәгә бирәләр. Сабирйән мулла Ҡашҡаров (1873 – 1937 й.) Ҡашҡар ауылында үҙ аллы көн иткән, мәсеттең мөәзине булған. 1937 йылда ҡулға алынып, кире ҡайтмаған.

Үҙебеҙҙең ғаиләне шәжәрәгә тулыһынса индерҙек. Рәхимйән ағай (1903 й.), улы Ғәлимйән (1928 й.), ҡыҙы Көнһылыу. Артабан Ғәйшә апай (1907 й.) килә, Һәҙиә (1942 й.), Ғәлиә (1953 й.), Зәбирә, Ғәли (1932 й.). Зәбирәнең яҙмышы тураһында бер нисә һүҙ. Мөхәмәтғәли Рәхимғолов еҙнәй менән Ғәйшә апай, уны һәм Ғәлиҙе алып, 1933 йылдың апрелендә Әбйәлил районының «Красная Башкирия» совхозы еренә башаҡ йыйырға сығып китәләр. Зәбирә апайҙы юл ыңғайында Баймаҡтағы балалар приютына тапшыралар. Ғәлиҙе Асҡар балалар приютына бирәләр. Балаларынан ҡотолған атай-әсәй 1943 йылға ҡәҙәр бергә донъя көтә. 1943 йыл еҙнәй вафат була. Мөхәмәтғәли еҙнәйҙең атаһы, йәғни ҡоҙабыҙ Йомабай Рәхимғолов – Йомағужа ауылы муллаһы. 1930 йылғы сәйәси золомдан улар ҡаҙаҡтар яғына ҡасып ҡотола. Был ғаиләләрҙең яҙмышы тураһындағы мәғлүмәт миндә әле лә һаҡлана.

1972 йылда «Башҡортостан ҡыҙы» журналына иғлан биреп, миңә Зәбирә апайҙы табырға насип булды. Ул Ҡасимова фамилияһында Белорет ҡалаһында йәшәй ине. Гөлйемеш һәм Марат исемле ике балаһы бар. Ҡыҙы Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған, улы – хәрби академияны. Күп йылдар аралашып, саҡырышып йәшәнек. Ғәлиҙең яҙмышы, үкенескә ҡаршы, билдәһеҙ.

Шәжәрәне дауам итеүсе Хәмитйән Ҡашҡаровтың (1927–1971 йй.) Рәйес (1953 йй.), Рәмил (1958 й.), Рауил (1960 й.), Илһам (1961 й.), Илдар (1963 – 1985 й.), Хәлит (1964 й.) исемле улдары теркәлгән. Рәмзиә (1957 й.) ҡыҙы ла бар. Бөтәһе лә юғары йәки урта белемлеләр. 28 балаларының ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләйҙәр. Артабан Кәримә (1931 й.) килә. Улы Рәшит Ҡаҙаҡҡолов (1949 – 1998 йй.), уның улдары – Иршат, Ринат, Радик. Ҡыҙҙары – Лена, Гөлнара, Гөлсәсәк. 14 бала тәрбиәләйҙәр.

Мин, Ғәбделхаҡ Ҡашҡаров (1936 й.), 1940 – 1993 йылдарҙа Ишкилдин фамилияһында йөрөнөм. Һөнәрем буйынса төҙөүсе һәм ветеринария врачы. Совет Ҡораллы Көстәре офицеры. Ҡатыным Минзифа – тегеүсе. Ҡыҙыбыҙ Рәфиә (1962 й.) – махсус урта белемле шәфҡәт туташы, кейәүебеҙ Ғәли Хәкимов – техникум директоры. Сибай ҡалаһында йәшәйҙәр.

Ҡартатайыбыҙ Хәлит Ҡашҡаров Ейәнсура районы Таҙлар ауылында көн итһә лә, 1910 –1915 йылдарҙа уның улдары Хаммат менән Мәхмүт (Йәйәүле Мәхмүт) үҙҙәренең улдары Сәйфулла менән Сабирйәнгә Ҡашҡар ауылында өй һалып, килен алып биргән. Күрәһең, Ҡашҡар борондан Ҡалмыҡ араһы башҡорттарының тарихи үҙәге булып иҫәпләнгән. Шуға күрә ҡалмыҡ сәсәне Владимир Каруев был ауыл, унда Мамынт батырҙың зыяраты булыуы хаҡында бушҡа ғына әйтмәгәндер.

Йәйәүле Мәхмүт ҡартатайыбыҙ, олоғайғас, Юлдыбай ауылынан Туңҡайҙар араһының йәш муллаһы Рәхмәтулла Ҡудашевты Кинйәбулат ауылы мәсетенә мулла итеп урынлаштыра. Исҡужа ауылында йәшәгән Ғәйзә апай (Рәхмәтулла ҡыҙы) – был ваҡиғаның тере шаһиты. Хаммат ҡартатайыбыҙ ҙа Бәләкәй Юлдыбай ауылынан йәш мулла Әғзәм Алчиновты Муйнаҡ ауылына алып килеп, мәсеткә урынлаштыра. Уның улы Камил Алчинов әле лә Ҡашҡар ауылында муллалыҡ эшен башҡара. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ул. 1996 йылда Урта Азиянан ҡайтып, халыҡҡа Ислам дине тәғлиməттәрен таратыу менән мәшғүл. Шулай итеп, Сабирйән һәм Сәйфулла Ҡашҡаровтар балаларының «Ҡалмыҡ

шәжәрәһе»нә теркәлеү тарихы, уларҙың Ҡашҡар ауылында йәшәүе ысынбарлыҡҡа тап килә.

Бер нисә йыл элек Ейәнсура районының Үрген ауылында «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамы үткәрелеп, унда Ҡашҡар исеменән башланған Азамат, Илдар һәм Юлдыбайҙа йәшәгән Рафаил Аҡъюлов ҡустының да шәжәрәһе иғлан ителде. Ул шәжәрәлә Мөхәмәтйән Ҡашҡаровтың улдары Аҡъюл (1775 й.), Балғазы (1765 й.), Аҡмалай (1773 й.), Әлмөхәмәт теркәлгән. Ейәнсура районында туғандарыбыҙҙың күплеге, шулай итеп, бәхәсһеҙ.

Артабан Мәхмүт Мамутов (1748 й.) – Ҡабандар араһы килә. Улы Ғайсаның ете быуыны (60 исем) теркәлгән. Моталлаповтар, Баһауетдин дүрт быуын (17 исем). Мәхмүтовтарҙан Муса һәм Мөхәмәтғәле – берәр исем. Рәим Мамутов (1752 й.) – Рекстар араһы. Улдары Рәимовтар: Солтанғәле – алты быуын (ете исем), Әхмәтғәле – ете быуын (һигеҙ исем), Ғайса – ете быуын (38 исем).

Юлдыбай ауылының «Ҡалмыҡтар араһы башҡорттары» шәжәрәһенә 12 –17 быуын һыйған. Үләй батыр улы Мамынттан 571 исем теркәлгән. 33 атай-олатайҙарҙың төрлө быуын бала-сағалары исеме бирелгән. Һуңғы 30 йылда тыуған балаларҙың исемдәрен дә тултырып яҙырға кәрәк.

Мамынт шәжәрәһендә түбәндәге фамилиялар күренә: Мамутов, Ҡашҡаров, Мәхмүтов, Рәимов, Ғәббәсов, Баязитов, Мәжитов, Ғәбитов, Сабитов, Хәмитов, Сафиуллин, Ғайсин, Моталлапов, Әлибаев, Абыҙгилдин, Шәрипов, Шәйәхмәтов, Хамматов, Ҡотләхмәтов, Солтанов. Шәжәрәгә өҫтәмәләр, төҙәтеүҙәр булһа, түбәндәге адрес менән хәбәр итеүегеҙҙе һорайым:

***453684, Йылайыр районы, Юлдыбай ауылы,***
***Салауат Юлаев урамы, 18.***
***Ғәбделхаҡ Ҡашҡаровҡа.***

Мамынт батыр нәҫелдәренең Башҡортостанда күп булыуы, районыбыҙ биләмәһендәге Аҡташ башына 2006 йылда Түңгәүер ырыуына арналған һәйкәл ҡуйылыуы берәүҙе лә битараф ҡалдырмай. Был һәйкәлдең нигеҙендә тарих ята. Башҡорт иленең Алтын Урҙа һәм Нуғай Урҙаһында 450 йыл йәшәүе – хәҡиҡәт. Беҙҙең Йылайыр һәм башҡа районларҙа ысын ҡалмыҡтарҙың йәшәүе лә билдәле. Оло Һаҙ, Һултантимер ауылдарында беҙҙең менән Батма Ботов ғаиләһе йәшәне. Ҡатыны Намша еңгәй ине. Ҡыҙҙары Зинаида менән беренсе класта бергә уҡыныҡ. Улдары – Доржа, ҡыҙҙары – Айһылыу, Таңһылыу. Был ғаиләләрҙең ҡасан һәм ҡайҙан килеүен мин 1996 йылда Төхвәт Сөләймәнов ағайҙан ишеттем.

1935 йыл Мәхмүт менән Йомабай Ҡашҡаровтар, совхоздың баш зоотехнигы Кейекбаев ағайға эйәреп, Краснодар крайына тоҡом һарыҡтары алып ҡайтырға бара. Һарыҡтарҙы көтөүселәр Дон ҡалмыҡтары булып, Мәхмүт, Йомабай ағайҙар «беҙ Урал ҡалмыҡтары бит» тигәс, танышып, туғанлашып киткәндәр. Дон ҡалмыҡтары һарыҡтары менән бергә Уралға килгән. Өлкән чабан Арсентий Ботов ике улы һәм килене, ҡыҙы Лиза менән 46-сы йылҡы заводының Аҡтау ауылына урынлаша. Сергей исемле улдары әле лә Аҡтауҙа йәшәй.

Икенсе улы Батма ғаиләһе менән Оло Һаҙ ауылында төпләнә. Иванск ауылында мәктәп тамамлап, Батма ағай ғүмер буйы ветфельдшер булып эшләй. Бөйөк Ватан һуғышына ла ул үҙе теләп киткән. Ҡайтҡас та яратып башҡарған эшенә тотона. Зинаида Әхмәт Мөхәмәтрәхимовҡа кейәүгә сығып, 13 бала тәрбиәләй. Бөтәһе лә имен-һау, башлы-күҙле булып, үҙҙәре 31 балаға ғүмер биргән. Дүрт балалары Һултантимер ауылында үҙ алдына донъя көтә. Улдары Рәфҡәт ағай – «Урта ер» хужалығының баш инженеры. Ул да Һултантимер ауылының иң бейек урынында йорт ҡорған.

Доржа (Евгений) мәрхүм ауылға эшкә килгән шәфҡәт туташы М. Амантаеваға өйләнеп, Йылайыр ауылында донъя көттө. Өс ул, ике ҡыҙ үҫтерҙеләр. Таңһылыу Баймаҡ районы Төйәләҫ ауылы егете Йәноҙаҡовҡа кейәүгә сығып, ике ул, ике ҡыҙ тапты. Айһылыу – Баймаҡ ҡалаһында, тормош иптәше Ярҡынбаев менән бер ул, дүрт ҡыҙ тәрбиәләй. Һултантимер халҡының Ботовтарҙан башланған «Дон ҡалмыҡтары» шәжәрәһенә 56 исем теркәлгән дә инде.

XVIII – XIX быуатта «Ҡалмыҡ араһы» башҡорттарынан бында 15 ғаилә көн күрә. Ауылдың исеме Сабит улы Солтанморатҡа бәйле, тигән фекер ҙә бар. Ләкин «Һултан» атамаһы монгол теленән ингән – был икенсе фекер. Уға ҡушылған «тимер» – башҡорт һүҙе. Шуға күрә Мамынт батырҙың йәйләүен, зыяратын да Һултантимер ауылы тирәһенән эҙләү дөрөҫ һымаҡ. Профессор Азат Камалов менән уҡытыусы Хәлил Бүләков раҫлауынса, Мамынт батырҙы тәрбиәгә алған Һыбай олатайҙың йәйләүе Һултантимер ауылы янынан башланған. Мәҫәлән, Туҡһанбай улының йәйләүе хәҙерге Яманһаҙ ауылынан бер саҡрымда ятҡан Туҡһанбай һаҙлығында. Ул урынды яманһаҙҙар ғүмер баҡый «Стан» тип йөрөтә. Һикһәнбай улының йәйләүе Быҙаулыҡ йылғаһы буйында «Иһәккүл» туғайында булды. Уға яҡын Һикһәнбай һаҙлығынан йырмаҡ ҡына һыу юлы бар. Ул йәйләү урынында беҙ 1949 – 1951 йылдарҙа йылҡыларҙы себенләтә торғайныҡ. Һыбай ҡартатайыбыҙҙың исеме бирелгән Сыбай тауынан башланған йырғанаҡ Һыулы йыры тип атала. Сыбай тауы менән Бәләкәй Билән ҡалҡыулығы араһындағы селек менән ҡапланған ерҙә – Әүлиә зыяраты. Аҡ таштар менән матур итеп буралған зыяратҡа тиңдәш зыярат Һултантимер ауылының Оло Һаҙ урамында ла бар. Ул урамдың тау яғында ла бәләкәй зыяраттарҙың булыуы ихтимал. Өсөнсө зыярат – Айҙар суҡа тауында. Уны ла аҡ таш менән бурағандар. Бында ҡара ҡайын ағастары үҫә.

2007 йылдың 26 октябрендә Өфө ҡалаһының Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында Түңгәүер ырыуының йыйыны үткәрелде. Унда хәҙерге Йылайыр, Баймаҡ, Хәйбулла, Әбйәлил, Учалы, Белорет, Бөрйән, Күгәрсен, Ейәнсура райондары һәм ҡалалары, Юрмый, Меңле ырыуҙары делегациялары ла ҡатнашты. Миңә лә унда сығыш яһарға насип булды. Мин Юлдыбай ауылының 800 йыллыҡ тарихын Түңгәүер ырыуына бәйләп һәм ете башҡорт ырыуҙарын берләштереп, 450 йыл элек Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуҙарын күҙаллап сығыш яһаным. Юлдыбайҙа «Аҡташ тауы» башына Европанан Урта Азияға барған юлда Түңгәүер ырыуына һәйкәл ҡуйылыуын, уның әһәмиәтен дәлилләнем. Юлдыбай ауылының 500 йыллыҡ шәжәрәһен төҙөүемде хәбәр иттем.

Йыйын ҡабул иткән резолюцияла ошондай юлдар бар: «Ырыу исеме VIII быуат Орхон-Йәнәсәй яҙмаларында теркәлгән ата-бабаларыбыҙҙың данлы эштәре менән ғорурланабыҙ (Орхон-Йәнәсәй тамғалары – 31. Шуларҙың 17-һе хәҙерге башҡорт яҙмалары тамғаһына тап килә. – **автор**). Түңгәүерҙәр боронғо төрки ҡәбиләләр менән берлектә үҙ ерҙәренең азатлығы өсөн изге көрәш рухын сыныҡтырған».

Йыйында сығыш яһаусылар Йылайыр районы хәкимиәтенең ул саҡтағы башлығы Юнир Вәлиевҡа Түңгәүер ырыуына ҙур иғтибар биргәне өсөн рәхмәт әйтте. Мамынт батырыбыҙға киләсәктә Юлдыбай мәҙәниәт йорто алдына йә Аҡташта һәйкәл, ә Ҡашҡар Мамутовҡа Ҡашҡар урта мәктәбендә таҡтаташ ҡуйылыр, тигән уйҙамын.

**Ғәбделхаҡ ҠАШҠАРОВ,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Йылайыр районы.**

# КЕШЕ БУЛҒЫҢ КИЛҺӘ, КИТАП УҠЫ!

Китапхана – иң бай информация сығанағы, белем ояһы. Ләкин хәҙер китап уҡымаған заттар күбәйҙе, күптәргә китап уҡыу мөмкинлеге тәтемәй, ә кемдәрҙеңдер ваҡыты етмәй. Китап магазиндарында ла хәлдәр үҙгәрҙе, кәрәкле китаптар ҙа күпләп күренде, нишләйһең, хаҡтар юғары, һәр китапҡа ынтылыу ҡыйын. Хәҙерге китапханала иһә үҙең теләгән информацияны тып-тыныс алып була. Стәрлетамаҡ ҡалаһының күп китапханаларына һуғылдым, барыһында ла һөйөнөслө күренештәр, һәр береһендә бына тигән тәртип. Эйе шул, ни тиһәң дә, был тармаҡта китап һөйөүселәр эшләй. Үкенеслеһе шунда: башҡорт телендәге китаптар аҙ, яңы яҙыусыларҙың китаптары – бигерәк тә. Шиғыр уҡыусылар тағы ла аҙыраҡ. Үҙемсә тәжрибә яһаным: «Даға сыңы» тип аталған шиғыр китабын билгеле урынға ҡуйҙым да һәр ай килеп ҡарап йөрөнөм. Өс йылда был китапҡа бер кем тотонманы. Авторын атап тормайым, был хәл ҡаланың үҙәк китапханаһында булды.

Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһының ҡала китапханаларында китап уҡыусылар менән үткәргән осрашыуҙары хәтерҙә ҡалырлыҡ йылы үтә. Тимәк, китап һөйөүселәр аҙ түгел. Иң ҡыуаныслы күренеш – студенттарҙың, уҡыусыларҙың күплеге. Абдулҡадир Инан исемендәге дәүләт китапханаһында миңә уның мөдире Нәзифә Исәнғужина менән әңгәмәләшергә насип булды. Китапхана фондында 45 меңләп китап иҫәпләнә,11-12 меңе – башҡорт телендә, өс меңләбе – татарса; сыуаш, мордва телдәрендәге китаптар ҙа бар. Тыуған яҡты өйрәнеү темаһына ҙур иғтибар бирелә, был йәһәттән студенттар ҙа әүҙем. Китапханала компьютер бар, Интернет селтәре менән бәйләнгән. Тик бер генә компьютер аҙ, ике-өс кәрәк. Ситтән тороп уҡыған студенттар өсөн был китапхана бик уңайлы. Бәйгеләр, конференциялар даими үтеп тора. Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы менән дә китапхана бәйләнеш тота. Юбилей даталары әүҙем үткәрелә, күптән түгел ҡала юбилейы үткәрелде. Балалар бүлеге айырыуса ихтирамға лайыҡ, бында айырым темаларға уҡыуҙар ҙа үткәрелеп тора. Китапхана ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу менән дә маҡтана ала, етмеш төрлө гәзит-журнал килә. Ҡыҫҡаһы, бында тормош ҡайнап тора, тиергә мөмкин.

«Ысын кеше булғың килһә – китап уҡы!» – Элгәре был теләк-өндәүҙе әйтеүселәр байтаҡ булғандыр, моғайын. Ә бөгөн уны башҡа төрлө әйтеү кәрәк: «Кеше булып ҡалғың килһә, китап уҡы!»

– Әптектә китапхана асыла.

– Кит әле, юҡты һөйләмә!

– Ысын, кәнсәләрҙә асалар.

– Ә-ә, кәнсәләрҙә? Анда нәмә генә асмайҙар, асалар ҙа ябып та ҡуялар, кәрәге булмағас.

– Үҙем күрҙем, китаптар килтергәндәр.

Минең кеүек ете йәшлек малай өсөн был хәбәр үтә ҡыҙыҡтырғыс тойолдо.

Иртәгә тигән төшөнсә юҡ, китап артынан әллә ҡайҙа сабырға әҙермен. Эйе, кәнсәләргә барырға бер аҙ ҡаушаһам да, тәүәккәлләнем. Ысынлап та, китаптар бар, таҡтанан кәштәләр ҙә яһап ҡуйылған. Әмир ағай Хәлилов китаптарҙы кәштәгә ҡуйып йөрөй.

– Китап кәрәкме? Иртәгә килерһең, – тине ул, эшенән айырылмай ғына.

Икенсе көн иртәрәк килеп, Әмир ағайҙы көтөп алдым. Китаптар кәштәлә арыу ғына күренә, тик китапханасы ағай мине уларға яҡын да ебәрмәне, таушалып бөткән, тышһыҙ, һуңғы биттәре йыртып алынған, бер нисә биттән генә торғанын һуҙҙы.

– Мә, уҡы! Яҙып ҡуйҙым, аҙна аҙағына килтерәһең! – Ағайҙың тауышы ҡатғи. – Белдеңме?

– Белдем, – тигән булдым, ә үҙем кәштәнән күҙ алмайым.

– Ә былары һинең өсөн түгел. Белдеңме?

Икенсегә «белдем» тип әйтергә килештермәнем, сығып тайҙым. Ә китапханасы биргән «китап»ты, йәғни ябай брошюраны, икенсе көн үк кире алып килдем.

– Китапты ни эшләттең, ҡайҙа һуңғы бите? – Әмир ағай асыуланды.

– Үҙең шундайҙы бирҙең бит, – тинем мин, бирешергә теләмәйенсә.

– Бирермен мин һиңә! Һиңә бүтән китап эләкмәй. Бар ҡайт!

Был китапхана тигән урынға бүтән килмәнем. Ни бысағыма, малайҙар етерлек, ә уларға Әмир ағай теләһә ниндәй китапты бирә. Минең дуҫтар бөтөнләй китап уҡымай, мин һораған өсөн генә алалар. Күп тә үтмәне, миндә тиҫтәнән артыҡ китап тупланды, ҡайһы бер малайҙар китапты урлап та килтергеләне.

Латин хәрефтәре менән яҙылған китаптарҙы үҙ алдыма өйрәндем. Уҡырға яратмаһа ла, атайым да китап алып ҡайтҡылай. Ул бик яй уҡығас, китабы өйҙә оҙаҡ ятты, уны мин дә уҡыштырҙым. Бер саҡ атайым «Фауст» тип аталған китап тотоп ҡайтты. Уҡыным, ләкин бер ни ҙә аңламаным. Бигерәк тә Мефистофель тигән геройҙың ҡыланыштары аптыратты. Ярай, ҙурая төшкәс тағы бер уҡып ҡарармын, тигән уйҙа ҡалдым.

Китапхана мөдире булһа ла, Әмир ағай китап уҡыу менән мауыҡманы. Һуңынан эскелеккә бирелеп, Салауат ҡалаһында асарбаҡ булып йөрөп донъя ҡуйҙы.

Әптек китапханаһындағы китаптар менән генә белем туплап булмай ине. Ауыл Советы урынлашҡан Сәлихтә «Ҡорос нисек сыныҡты?» тигән китап бар икән, уны сират тороп уҡынылар. Был китап Әптек китапханаһына килеп етмәне.

Китап тураһында һүҙҙе дауам итеү өсөн тарих биттәренә күҙ һалайыҡ. Көслө дәүләттәр нисек барлыҡҡа килгән? Ғәйрәтле булыу өсөн һәр дәүләт юғары сәнғәтле урындарҙы талауға ҙур иғтибар бирергә тейеш булған. XIV быуатта Сәмәрҡәндтә хакимлыҡ иткән Аҡһаҡ Тимер сәскә атҡан ҡалаларҙы юҡ иткән, иң гүзәл ҡалаларҙың береһе булған Һарайҙы талаған, емергән. Һәр ҡалалағы ҡорал тоторға һәләтле заттар үлтерелеп, һөнәрселәр Сәмәрҡәндте төҙөүгә алып кителгән. Ҡанһыҙ Тимер Ирандағы Исфахан ҡалаһында ғына ҡырҡ мең кешенең башын киҫеп, бер урынға өйөргә бойорған. Күрәһең, ул көнләшә белгән, сөнки Исфахан һөнәрселәре менән маҡтаулы булған. Ҡалала китап һөйөүселәр ҙә күп булғандыр.

Александр Македонский нәҫелендә башҡа этностарҙы «варвар» тип атағандар. Был император ҙа донъяның иң гүзәл ҡалаһы Персиполде утҡа тапшырып, ундағы янаһы нәмәләр юҡҡа сыҡҡан. Урыҫ батшаһы Иван Грозный Ҡазан ҡалаһын яулап алғас, урамдарҙа бер нисә көн китап яндырғандар. Китапһыҙ ҡалған

ҡала ла байтаҡ йылдар тормош һүнеү юлында була. Иван Грозныйҙың да шәхси китапханаһы булған, тигән һүҙ әле лә йөрөй. Йәнәһе, ул ер аҫтына йәшерелгән. Шулайҙыр, тирандарға донъя иркен булһын өсөн ғилемле заттар һәр саҡ китаптары менән ер аҫтына оҙатылған.

Тарих төпкөлдәре ҡаты көрәштәрҙән ғибәрәт. Совет осорона ла күҙ һалайыҡ. Эйе, совет кешеһе иң әүҙем китап уҡыусы тип һаналып, хөкүмәт үҙ китаптарын уҡығандарҙы юғары күтәрҙе. Ҡайһы бер китаптарҙы яттан белеүҙе лә талап иттеләр. Совет системаһы тарихҡа ла үтә иғтибарлы булды, иң ҡәҙерлеһе шулай ҙа «КПСС тарихы» ине.

Совет системаһы үҙ китабын уҡытыу менән генә сикләнмәне. Тар маңлайлы Сталин батшабикә Екатерина II-нең «эскеселәр менән идара итеү еңелерәк» тигән һүҙҙәрен һәр саҡ иҫендә тотҡан. Хәмер ярҙамында идара итеүгә сталинизм яңы йүнәлеш бирҙе, иҫерткес эсемлек күп урында китапты алмаштырҙы. Хәтеремдә, Бөйөк Ватан һуғышының икенсе көҙөндә мин олатайым менән ауыл магазинына барҙым. Шырпы, һабын кеүек кәрәкле нәмәләр унда юҡ, ә бына араҡыны мискә менән килтергәндәр. Быяла шешәләр дошман танкыларын яндырыу өсөн фронтта кәрәгерәк икән. Һатыусы араҡыны сүмескә һалып бирә, хаҡы ла ҡиммәт түгел. Бына шулай сталинизм халыҡты эскелек юлына баҫтырҙы.

Бөлгөнлөктә ыҙа сиккән Рәсәй империяһында марксизмды яҡын күрҙеләр. Был тәғлимәт тыуҙырған социализм Көнбайышҡа бармағы менән төбәп күрһәтте. Ә һуңғараҡ, социализмдан ҡурҡа төшөп, Көнбайыш Европа фашизмға юлыҡты. Артабан был ике система ҡаты бәрелеште, тиҫтәләрсә миллион кешенең ғүмерен киҫте. Был һуғыш быуындар тамырын ҡоротто, һуғыштан һуң тыуған балаларҙың һаулығы һуғыштан элгәре тыуып, ас йәшәгән балалар сәләмәтлегенән дә насарыраҡ булды. Әлбиттә, унда бер ил дә СССР кеүек бөлгөнлөккә төшмәне, хатта ике атом бомбаһы ташланған Япония ла тиҙ арала аяҡҡа баҫты. Ә ниңә шулай? Совет системаһы үҙ халҡын интектереү өсөн бар көсөн һалды. Эйе, хәлһеҙ халыҡты ла ышандырыу мотлаҡ, бына ни өсөн беҙҙә китап уҡыусылар күбәйҙе. Бала саҡта ҡулыма Лев Толстойҙың «Кавказ тотҡоно» тигән китабы эләкте. Анһат ҡына башҡорт ерен ҡулға төшөрөргә килгән урыҫ крәҫтиәне тураһындағы хикәйә мине аптыраште ҡалдырҙы.

Был әҫәрендә Лев Николаевич үҙенең ысын колонизатор тоҡомонан икәнлеген раҫлай. «Кавказ тотҡоно»н уҡығас, миндә был яҙыусы менән ҡыҙыҡһыныу юҡҡа сыҡты. «Война и мир» романы өҫтәлдә туҙанланып ятҡанда ла уҡып маташманым. Толстой дәүере – сабата кейеүселәр заманаһы. Ә яҙыусының әҫәрендә паровоз тәгәрмәсе аҫтына сабаталы мәхлүк түгел, бөхтә кейенгән, мөхәббәттән башҡа михнәт күрмәгән зат ташлана...

VIII класта уҡығанда ҙур ҡыйынлыҡтар менән Михаил Шолоховтың «Тымыҡ дон»ын эләктерҙем. Тиҙ арала уҡып сыҡтым, ә шулай ҙа күп уйланырға тура килде. Был китапты ни өсөн сығарғандар? Эйе шул – замана! Ул йылдарҙа ярым емерек ауыл клубтарында «Весна в Сакене», «Кубанские казаки», «Свинарка и пастух» һ. б. кеүек фильмдар күрһәтелде. Эйе шул, Кубань – икмәк биреүсе һанала, ә ул ваҡытта икмәк – Рәсәй өсөн иң ҙур байлыҡ ине. Серҙе мин X класта уҡығанда ғына систем. Юҡ, аптыраманым, совет системаһы кәрәк урынында стахановын да, шолоховын да таба белде. Нужа ҡалас ашата, тигән һүҙ ҙә бар ине. Шулай ҙа мәктәп йылдарында рус классикаһы минең өсөн әллә ни ҡыҙыҡлы булманы.

Әйтәйек, шәреҡ фәлсәфәһе менән һуғарылған китаптар беҙгә бөтөнләй тәтемәне. Иҫ китерлек ҡыйынлыҡтар менән француз яҙыусыһы Виктор Гюго әҫәрҙәрен табып уҡыным. Ул минең өсөн иң юғары баҫҡыс яҙыусыһы булып ҡалды,

сөнки минең күҙҙәремде асты. Эйе шул, Францияла Гаврош булған, бер Гаврош. Ә мин миллион Гаврош илендә йәшәгәнмен, үҙем дә шуларҙың береһе булам. Әгәр мин Лев Толстойҙың «Война и мир» китабы менән алданыраҡ танышһам, кем белә, бөтөнләй икенсе кеше лә булып китер инем, сөнки һәр китап үҙ тибын тыуҙыра, тәрбиәләй. Әйтәйек, Ҡөрьән серҙәрен аңлаған зат Аллаһы Тәғәләһеҙ йәшәй алмай.

Йәберләүҙәргә дусар булған беҙҙең быуын ҡайҙа барырға, кемгә ышанырға, кемгә һыйынырға белмәне. Аслыҡ-яланғаслыҡ менән генә интектермәнеләр, ленинизм тип аталған яҙмаларҙы яттан белергә ҡуштылар. Ысынлап та, Маркс-Энгельс әҫәрҙәрендә лә ҡыҙыҡлы күренештәр етерлек. Ә шулай ҙа Маркс донъя серен асыусы түгел, хакимдарҙы фашлау һәр саҡ булған. Ә Ленин? Маркс европаса әрләһә, Ленин русса һүгенгән.

«Уҡырға, уҡырға һәм уҡырға!» – Быныһын Ленин әйткән. Хәтеремдә – Лениндың һәр томын китап магазинында бер һумға һатып алырға була ине. Тик шуныһы ҡыҙыҡлы: Ленин әҫәрҙәрен уҡып маташҡан затты күрә алманым, был китаптарҙы декорация өсөн генә алдылар.

Шуны әйтеү мотлаҡ: совет осоронда халыҡ өсөн кәрәкле тауар сығарыу хәстәре күрелмәне. Кәрәге самалы китаптар күпләп сығарылды, ә кәрәклене эҙләп табыу ҡыйын булды. Ә китап һатыу нөктәләренең эш тәртибе ҡыҙыҡлы булды, баҫмаларға яҙылыу тәртибе затлы тауарҙар алыу тәртибенә тиңләнде. Әйтәйек, ябай һатып алыусы сит ил авторҙарының томдарына яҙыла алманы.

Шул уҡ хәлдәр ваҡытлы матбуғат өлкәһендә лә хөкөм һөрҙө. Мәҫәлән, «Литературная газета»ға яҙылыу анһат булманы. Әҙәм көлкөһө, бер «затлы» гәзиткә яҙылыу өсөн бер нисә тиҫтә «Агитатор блокноты»на яҙылыу кәрәк ине. Ә бит бындай эштәр бөгөн дә күҙәтелә: рекламалы гәзиттәрҙе бушлай килтереп бирәләр. Тик бушлаймы икән?

Көлкөлө осраҡтар ҙа булғыланы. Бер саҡ миңә, партия ағзаһына: «Һин «Агитатор блокноты»на яҙылырға бурыслыһың», – тинеләр. Мин үҙемсә:«Бәҙрәф ҡағыҙы миндә етерлек», – тип яуап бирҙем. Был хәбәр шул көндә үк партком секретарына барып еткән. Саҡырып алдылар, мин яуап тоттом: «Блокнот» авторҙары мин белгәндең биштән бер өлөшөн дә белмәй», – тинем. Аңланылар.

Ошо йылдың тәүге сирегендә миңә Стәрлетамаҡ ҡалаһының 4-се гимназияһында «Арт-старт» тип аталған бөтә ҡала конкурсында жюри ағзаһы булырға тура килде. Иҫ китерлек конкурс булды был, талантлы, тырыш балаларҙы һанап бөтөрөрлөк түгел. Бына ҡайҙа дәрт, алға ынтылыу! Тимәк, киләсәгебеҙ бар.

Останкино башняһынан ағылған алтмыштан артыҡ телепрограмма илебеҙҙе, халҡыбыҙҙы артҡа һөйрәгәндә, ошо «Арт-старт» конкурсы кеүек бына тигән сараларҙы экран аша күрһәтеүсе юҡ. Имеш, кешелек затын мутантлыҡ көтә. Эйе шул, мутантлыҡтан Аллаһы һаҡлаһын, китаптан айырылмайыҡ, туғандар. Ғүмәр Хайәмдәр, Абдулҡадир Инандар, Зәки Вәлидиҙәр китап уҡып бөйөклөк яулаған. Бөйөктәр юлы – изге юл.

**Ишғәле НУРҒӘЛИЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

*Журналыбыҙҙың быйылғы июнь – июль һандарында 80 йәше тулыу айҡанлы Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың „Хәтер шаңдауы“ исеме аҫтында хәтирәләре баҫылғайны. Автор унда башҡа ҡәләмдәштәре араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевты ла телгә ала.*

*Рауил Бикбаев үҙенә ҡарата әйтелгән фекерҙәр буйынса аңлатма бирергә теләк белдерҙе.*

*„Ағиҙел“, әлбиттә, тәү сиратта – башҡорт донъяһының рухи, художестволы сағылышы. Бер үк мәлдә ул әҙәбиәткә, рухиәткә бәйле фекер алышыу майҙаны ла. Ҡәләмдәштәр тарафынан яҙылған һәм яҙылмаған әхлаҡи ҡағиҙәләр, ҡанундар һаңға һуғыла икән – былдай „аңлашыуҙар“ҙа дөйөм әҙәбиәтебеҙ файҙаһына тигән фекерҙәбеҙ.*

*«Ағиҙел»селәр.*

**Рауил**
**БИКБАЕВ**

## АҢЛАТМА БИРЕҮ КӘРӘК

“Ағиҙел” журналының ике һанында (2011, 6-7) Ноғман Мусиндың “Фекерҙәрем тарҡау, ни тотоп, ни ҡуйырға белмәй йөрөгән саҡта тотондом был эшкә” тип башланып, “Хәтер шаңдауы” тип исемләнгән һәм жанры “эссе” тип билдәләнгән яҙмалары баҫылып сыҡты.

“Редакциянан” тигән иҫкәрмәлә ошо һүҙҙәр яҙылған: “Алтмыш йыл буйы әҙәбиәт ҡаҙанында ҡайнаусы буларaҡ, ҡайһы бер күҙәтеүҙәремде, баштан үткәндәрҙе ҡағыҙға теркәргә насип итте, – тине ҡулъяҙмаһын редакцияға тапшырғанда күренекле яҙыусы Ноғман Мусин. – Әгәр әлеге яҙмаларымда тәнҡит юсығында телгә алынған ҡайһы бер шәхестәр журналға үпкә-маҙар белдерҙениһә, мин уларға шәхсән үҙем яуап бирергә әҙермен, редакцияға дәғүә белдермәһендәр…” Беҙҙеңсә, был ҡәтғи фекергә ниндәйҙер аңлатма биреүҙең кәрәге юҡ”.

Мин иһә “аңлатма биреү мотлаҡ кәрәк” тигән принципиаль ҡараштамын. Әлеге яҙмаларҙа тәнҡит юсығында телгә алынған ҡайһы бер шәхестәр араһында исеме иң күп ҡабатланғаны мин буламдыр. Ул һүҙҙәр матбуғат аша әйтелгән икән, мин дә үҙемдең уйҙарымды уҡыусыларға журнал аша еткерергә теләйем һәм быға нигеҙле хоҡуғым бар тип иҫәпләйем.

Мин 1995 йылдың март аҙағынан 2011 йылдың апрель уртаһына тиклем,

йәғни ун алты йыл Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе булып эшләнем. Етмеште уҙған һәм шул тиклем оҙаҡ рәйеслек иткән етәксенең беҙҙең ижади ойошмала быға тиклем булғаны юҡ ине.

Ноғман Мусин үҙенең эссеһында мине Башҡортостан Яҙыусылар союзында рәйес урынына туҡтауһыҙ ынтылыусы итеп күрһәтмәксе. 1995 йылда һайланғанға тиклем мин ике тапҡыр – унынсы һәм ун беренсе съездарҙа рәйеслеккә альтернатив кандидат булғайным, икеһендә лә күпселек тауыш менән Динис Бүләков һайланды. Ул ваҡытта альтернативаның булыуы мотлаҡ ине. Динис Бүләковтың еңерен белһәм дә һәм шуны ихлас теләһәм дә, альтернатив итеп үҙемде исемлеккә индерҙем. Ике съезда ла яҡын дуҫым Динис Бүләков һайланғас, уны ихлас ҡосаҡлап ҡотланым. Шул йыйындарҙа ҡатнашҡандар быға үҙҙәре шаһит. Дуҫымдың вафатынан һуңғы һайлауға мин түрә урынын биләр өсөн түгел, әҙәбиәтебеҙҙә ижадым аша ла, шулай уҡ ҡатмарлы процестағы ойоштороу эштәре менән дә нығыраҡ ҡатнашырға тигән теләк менән барҙым.

Эш башлауым бик ҡатмарлы осорға тура килде. Илдәге ҡыйралыш, халыҡ байлығын урлау-талау заманы. Финанс хәлдәре бик мөшкөл. Яҙыусылар союзында эшләүселәрҙең эш хаҡтары бик аҙ, көндәлек эштәрҙе алып барыу өсөн юғары ойошмаларҙа теләнселәп йөрөргә тура килә. Яҙыусыларҙы командировкаға ебәрергә лә мөмкинлектәр бик сикләнгән. Машинаға яғыулыҡ табыуы – үҙе бер бәлә. Ваҡытында түләй алмаған өсөн утты һүндермәкселәр, телефондарҙы өҙмәкселәр. Беҙҙең ойошма ғына түгел, күпме ватандаштарыбыҙ ҙур ауырлыҡтар кисергән ҡытлыҡ йылдары.

Шулай булһа ла, яңы урындағы яуаплы хеҙмәтем оло-оло ижади ваҡиғаларҙан башланып китте. Яңы эшкә килеүемдең икенсе һәм өсөнсө көндәрендә үк йәш яҙыусыларҙың республика конференцияһы булып үтте. Ғилман Ишкининдың, Камил Йыһаншиндың, Хәйҙәр Тапаҡовтың ижады һәйбәт баһаланды. 31 мартта, йәштәр конференцияһының йомғаҡлау ултырышынан һуң, Яҙыусылар союзы идараһы залында әҙәби байрам үткәрелде, унда йәштәр ҙә, оло әҙиптәр ҙә сығыш яһаны. Уға тиклем Стәрлетамаҡ педагогия институтында Бабич кисәһендә ҡатнашып ҡайтырға ла өлгөрҙөк.

Тәүге көндән үк эштәр шулай етеҙ ритмда һәм ижади рухта барҙы. Яҙыусыларҙың байтаҡ йылдар онотолоп торған дөйөм йыйылышын үткәрергә әҙерләнә башланыҡ. Был осрашыу 20 апрелдә Актерҙар йортонда үтте. Минең инеш һүҙҙән һуң Тимерғәле Килмөхәмәтов "Бөгөнгө көн һәм башҡорт әҙәбиәте" тигән доклад һөйләне. Егермегә яҡын сығыш яһаусылар актуаль мәсьәләләрҙе күтәрҙеләр. Һөйләшеү етди, юғары кимәлдә барҙы. Мединститут ашханаһында төшкө аш ойошторҙоҡ. Әҙәбиәттең йыллыҡ йомғаҡтары тураһында һөйләшеүҙәр артабан ныҡлы традицияға әйләнде.

21 апрелдә шул уҡ Актерҙар йортонда фронтовик шағирҙарыбыҙ Назар Нәжми, Шәриф Биҡҡол, Муса Ғәли, Фәйзи Ғүмәров, Сөләймән Муллабаев, Файыҡ Мөхәмәтйәнов, шулай уҡ өлкән ҡәләмдәшебеҙ Кәтибә Кинйәбулатова ҡатнашлығында "Яуҙарҙан ҡалған шаңдауҙар" тигән кисә үткәрҙек. Уны Тамара Ғәниева менән Ирек Кинйәбулатов, мәргән-мәргән һүҙҙәр әйтеп, бик ихлас алып барҙы. Оло быуын шағирҙары илһамланып сығыш яһаны, Сөләймән ағай хатта йырлап та ебәрҙе.

Эш башлаған тәүге көндәрҙә уҙғарылған был йыйындар, кисәләр, осрашыуҙар тураһында мин ниңә һәр береһен атап һөйләйем әле? Ошолай башланып киткән эшем ун алты йыл буйына шул рухта дауам итте, ҡәләмдәштәрем быға үҙҙәре шаһит ҡына түгел, бик күптәре ошо йыл һайын биш йөҙгә еткән төрлө әҙәби сараларҙа, тынғыһыҙ эштәрҙә яҡындан ҡатнашып йәшәгән замандаштарым.

Шуныһын да әйтәм: Яҙыусылар союзында был яуаплы хеҙмәткә тотонғанда

мин бик борсоулы уйҙар, ҡатмарлы кисерештәр менән йәшәнем. Быға тиклем минең рәсми етәкселек итеү тәжрибәм юҡ ине: был эштең нескәлектәре менән таныш түгелмен, хатта бер генә приказға ла ҡул ҡуймағанмын, бер генә ҡағыҙға ла мисәт һуҡмағанмын.

Бында етәксе булып эш башлағансы Яҙыусылар союзында оҙаҡ йылдар шиғриәт секцияһы рәйесе, идара ағзаһы, “Ағиҙел” журналының редколлегия ағзаһы булараҡ туплаған тәжрибәм, Башҡортостандағы әҙәби тормошта ғына түгел, унан ситтәге республикаларҙа һәм өлкәләрҙә уҙғарыла торған ҙур-ҙур сараларҙа ла йыш ҡатнашыуым, хатта сит илдәрҙәге бик етди осрашыуҙарға башҡорт әҙәбиәте вәкиле рәүешендә барыуым һәм, иң мөһиме, утыҙ йыл буйына Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында байтаҡ фәнни хеҙмәттәр яҙыуым, ғалим булараҡ әҙәбиәтебеҙҙең уҙған тарихын да, хәҙерге хәлдәрен дә, төрлө жанрҙарҙың үткәндәге һәм бөгөнгө яҙмыштарын да, ҡәләмдәштәремдең ижад үҙенсәлектәрен, һәр береһенең тын алышын да тойоп-белеп йәшәүем, ғилми эштәремде башҡарғанда әҙәби күренештәрҙе ентекле өйрәнеүем миңә яңы яуаплы вазифамда ныҡлы нигеҙ булды.

Нимә генә тиһәң дә, Яҙыусылар союзы – иң элек ижади ойошма. Ижад мәсьәләләрендә иһә мин етерлек мәғлүмәт һәм ҙур тәжрибә туплағайным, ныҡлы ҡараштарым, талаптарым һәм принциптарым күптән нығынғайны. Ижади ойошманың етәксеһе өсөн был сифаттар бик мөһим, хатта зарури, тип уйлайым.

Һуңғы йылдарҙа беҙҙә иҫтәлектәр байтаҡ яҙылды. Оло ҡәләмдәштәребеҙ үҙҙәренең хәтирәләрендә әҙәбиәт һәм әҙиптәрҙең яҙмыштары тураһында һөйләгәндә иң элек ижад мәсьәләләренә иғтибар итәләр, һүҙ сәнғәтендәге ҡатмарлы күренештәр, үҙенсәлекле яҙмыштар тураһында уйланалар. Һәм уның шулай булыуы ижадсы өсөн бик тәбиғи.

“Әлбиттә, рәйес кешегә йәшәү һәм эшләү өсөн уңайлыҡтар бирелгән: шәхси машина, китаптарын республиканан ситтә лә сығарыуға юл асыҡ. Һуңғы мәлдә Рауил Бикбаев яйы сыҡҡан һайын сит өлкәләргә, яҡын һәм алыҫ сит илдәргә үҙе генә йөрөүҙе (әйтерһең, бүтән яҙыусыларҙың бындай сәфәрҙәргә хаҡы юҡ) ғәҙәт итеп алғайны”, – эсселағы был һүҙҙәргә ҡарата асыҡлау индереп үтәйем.

Яҙыусылар союзына эшкә килгәнсе үк мин Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры инем. Шәйехзада Бабич ижадын, Рәми Ғариповтың әҙәби мираҫын халыҡҡа тулыраҡ ҡайтарыуҙы хәстәрләп, байтаҡ эштәр эшләгәйнем. Торлаҡ мәсьәләһенә килгәндә, 1995 йылға тиклем йәшәгән фатирымда әле лә йәшәп ятам. Бәғзе әҙиптәр һымаҡ, ҡат-ҡат фатир алып торғаным юҡ. Рәйес кешегә эшләү өсөн өҫтәмә уңайлыҡтар бирелә икән, ниңә был вазифаны биләгән дәүерҙә ҡайһы бер рәйес бөтөнләй тиерлек ижад итә алманы? Был хаҡта Ноғман Мусин үҙенең иҫтәлектәрендә һөйләй.

Эссеның авторы уйлағанса, рәйес кешегә “китаптарын республиканан ситтә лә сығарыуға юл асыҡ икән”, мин, күрәһең, был юлдарҙы тейешенсә файҙалана алмағанмын.

Рәйес булғанға тиклем Мәскәүҙә минең дүрт шиғри һәм ғилми китабым баҫылғайны. Ә 1995 йылдан алып бөгөнгө көнгә тиклем унда бер генә китабым да донъя күргәне юҡ. Алмаш баҫмалар серияһынан татарса “Саҡ-суҡ” исемле шиғырҙар китабым 1994 йылда сыҡҡайны. Ун алты йыл дәүерендә минең республиканан ситтә “Степной родник” тигән русса шиғри йыйынтығым яҡташтарым ярҙамында Ырымбурҙа һис бер гонорарһыҙ баҫылды, етмеш йәшемә Татарстан китап нәшриәте “Оноторлоҡ булдымы ни?”тигән бик ыҡсым, күркәм китабым менән ҡыуандырҙы. Һуңғы ун алты йыл минең ижадым өсөн бик уңышлы йылдар булды. Рәйеслек эштәренең мәшәҡәттәре күп, әммә шиғырҙар яҙылды,

поэмалар тыуҙы. Сәйәхәтнамә китабы, Рәми Ғарипов тураһында ҙур хеҙмәтем донъя күрҙе. Публицистик мәҡәләләрем, сығыштарым матбуғатта даими сығып торҙо. Туплаһаң, тос китап булырлыҡ.

Сит яҡтарҙа юл йөрөүҙәр тураһында ла бер нисә һүҙ әйтәйем. Яҙыусылар союзында эшләй башлауыма күп тә үтмәне, 17– 24 июндә Якутскиҙа Рәсәй Яҙыусылар союзының пленумында ҡатнаштым һәм сығыш яһаным. Аҙаҡ минең телмәр махсус йыйынтыҡта урын алды. Ун алты йыл эсендә бындай байтаҡ пленумдарҙа, съездарҙа үҙ һүҙемде әйтергә тура килде. Ундай осрашыуҙарҙа Рәсәй төбәктәренең ойошмаларынан һәр ваҡыт мотлаҡ етәксе кеше ҡатнаша. Бының шулай икәнлеген барыбыҙ ҙа белә.

Сит илдәргә сәйәхәттәргә килгәндә, мин бер нисә тапҡыр Төркиәлә булдым, унда сыҡҡан “ДА” (“Диалог Авразии”) журналының, мөхәрририәт ағзаһы булараҡ, ултырыштарына саҡырылдым. Барлыҡ сығымдарҙы үҙҙәре түләп саҡырҙылар.

Төркиәнең төрлө ҡалаларында төрлө йылдарҙа үткән шиғри фестивалдәрҙә беҙҙең байтаҡ шағирҙарыбыҙ төрлө илдәрҙән килгән төрки телле һүҙ оҫталары менән аралашып ҡайтты. Минең урынбаҫарым булып эшләгән өс шағир ҙа был шиғри байрамдарҙа ҡатнашты. Ҡәләмдәштәребеҙ Рәсәй өлкәләрендәге, Кавказдағы, Ҡаҙағстандағы, Татарстандағы әҙәби сараларҙа үҙ һүҙҙәрен әйтә алды. Сит өлкәләргә килгәндә, ундағы осрашыуҙарға мин яңғыҙым ғына йөрөмәнем, һәр саҡ делегация булып барҙыҡ. Бындай сәфәрҙәр, байрам булыуҙан бигерәк, бик яуаплы һәм тынғыһыҙ эш ул. Юлда төрлө ауырлыҡтар күрергә лә тура килә. Ғайса Хөсәйенов менән Һамар башҡорттарына барып етер өсөн көҙгө бысраҡта автобус ватыла-ватыла оҙон юл үткәнебеҙ әле лә хәтерҙә.

1997 һәм 2007 йылдарҙа Мәскәүҙә уҙғарылған Башҡортостан тантаналарында ҙур төркөм башҡорт әҙиптәре ҡатнашты, Рәсәй Яҙыусылар союзында ике тапҡыр беҙҙең әҙәбиәт тураһындағы фекер алышыуҙарҙа үҙебеҙҙең ҡәләмдәштәр менән бергә күренекле рус әҙиптәре сығыш яһаны. Был ваҡиғалар унда ҡатнашҡан әҙиптәребеҙҙең, шул иҫәптән 2007 йылғы ҙур төркөмдә булған Ноғман Мусиндың да, иҫендәлер. Күпселек осрашыуҙарыбыҙ, әлбиттә, Башҡортостанда үтә. Ләкин ҡайһы саҡта, төркөм туплай башлаһаң, исемлекте тейешле күләмдә тултыра алмай яфаланаһың. Төрлө сәбәптәр табып, күптәр юлға сығыуҙан баш тарта. Ә ваҡытын йәлләмәйенсә йыш йөрөүселәрҙең сығыштары бәғзе берәүҙәргә артыҡ күп булып күренә башлай.

Тағы ла эссенан өҙөк килтерәм: “Иҫ китмәле бит, ирмен тигән ир шунса йылдар буйы вазифаһына йәбешеп ятып, теге саҡта уны тәүге һайлау мәлендә үҙе өсөн тауыш бирмәгәнгә үс һаҡлап йөрөһөн әле!.. Бикбаевтың холоҡһоҙланыуы, – һис шикһеҙ, уның етәксе вазифаһын оҙаҡ биләүенең касафаты ла”.

Ноғман Мусин иҫкә төшөрмәһә, идарала рәйес һайлау ваҡытында миңә ҡаршы тауыш биргәндәр хаҡында күптән уйлаған юҡ ине. Мин ҡырҡ йылдан ашыу көндәлектәр алып барам, уларҙа үҙемдең кисерештәр генә түгел, әҙәби тормошобоҙға бәйле ваҡиғалар ҙа сағыла. Әле уларҙы баҫырға әҙерләйем, хәҙерге йәштәр һәм киләсәк быуындар өсөн был яҙмаларҙың да кәрәге тейер әле.

Бына шул көндәлектәрҙе аҡтарһаң, Александр Филиппов та һайлау ваҡытында миңә ҡаршы телмәр тотҡан икән. Был хаҡта уның менән минең арала аҙаҡ бер ниндәй ҙә һөйләшеү булманы. Уға тиклем нисек дуҫ булһаҡ, мөнәсәбәттәребеҙ артабан да шулай ҡалды. Юлдарҙа бергә йөрөнөк, бергә күпме тапҡырҙар сығыштар яһаныҡ. Уның юбилейына мәҡәлә яҙҙым, кисәһендә һүҙ әйттем. Александр Филиппов миңә арнап шиғыр ҙа яҙҙы.

Мин эшкә килгән тәүге көндө үк яныма рәйес урынбаҫары Раил Байбулатов инде лә: “Мин ҡаршы тауыш бирҙем, Союздан китәйемме?” – ти. Мин әйтәм:

“Ағай, әйҙә, бергә эшләп ҡарайыҡ”. Минән бер йәшкә генә өлкән булһа ла, уға ағай тип өндәшә торғайным. Бик һәйбәт мөнәсәбәттәрҙә, бер-беребеҙҙе аңлап эшләп алып киттек. Раил Фәтхелислам улының ярҙамсыллығы, ихласлығы, бай хеҙмәт тәжрибәһе минең өсөн һәр саҡ ышаныслы таяныс булды. Уның һымаҡ эшенә мөкиббән киткән, вазифаһын юғары профессиональ кимәлдә башҡарған, кешелек сифаттары менән күңелде арбаған башҡа хеҙмәттәшемде мин Яҙыусылар союзы аппаратында күрмәнем.

Эссела телгә алынған 2001 йылдың сентябренә килгәндә, 7– 9 сентябрҙә бик ҙур делегация булып Һамар өлкәһе башҡорттарының ҡоролтайын үткәреп ҡайтҡанбыҙ. Ун берендә идара ултырышы булған, ун икеһендә ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы йыйып, “Заман-Башҡортостан” газетаһына, “ДА” журналына яҙылыу тураһында һөйләшкәнбеҙ. Ун дүртендә Агиш Ғирфановҡа таҡтаташ асҡанбыҙ. Ун етенсе сентябрҙән алып егерме бишенә тиклем Төркиәлә, “ДА” журналының ултырыштарында, әҙәби осрашыуҙарҙа булдым. Унда, бая әйткәнемсә, бер нисә тапҡыр барылды, Сыңғыҙ Айытматов, Анар, академик Ростислав Рыбаков, шағирҙар Олжас Сөләйманов, Мөьмин Ҡәнәғәт, Мөхтәр Шахановтар менән аралашырға, бергә сығыш яһарға насип булды.

27 сентябрҙә Яныбай Хамматовтың ҡәберенә сәскәләр һалдыҡ, йыллығына йыйылдыҡ. Егерме туғыҙында Рәсәй Мәҙәниәт министрлығының координацион советы ултырышы үтте, кисен барлыҡ республикаларҙан һәм өлкәләрҙән мәҙәниәт етәкселәре Опера һәм балет театрында, Аксаковтың 210 йыллығына арналған кисәлә, булды. Унда мин дә һөйләнем. Утыҙында, йәкшәмбе көн, Яҙыусылар союзында В.Н. Ганичев етәкселегендәге Мәскәү ҡунаҡтарын, Сирия Яҙыусылар союзы рәйесе, Барлыҡ ғәрәп яҙыусылар ассоциацияһының генераль секретары Али Арсан һәм уның юлдаш ҡәләмдәштәрен ҡабул иттек. Ике сәғәттән артыҡ барған ихлас һөйләшеүҙә беҙҙән Нәжиб Асанбаев, Ғайса Хөсәйенов, Марат Кәримов, Сафуан Әлибай, Михаил Чванов, Марс Әхмәтшин, Әхмәр Үтәбай булды. Сентябрь айы бына шундай ҙур-ҙур эштәр менән үтеп китте.

Ноғман Мусин минең уға, йәнәһе, үс һаҡлап йөрөүем тураһында әйтһә лә, 2001 йылдың йәйендә һәм көҙөндә үҙенең етмеш йәшлек юбилей тантаналарының нисек үтеүе тураһында ниңәлер бер нәмә лә һөйләмәй. Яҙыусының байрам кисәһе 2001 йылдың июль башында Ишембай ҡалаһының иң ҙур мәҙәниәт һарайында барҙы. Ноғман Мусиндың яҡташтары менән осрашыуҙарға ҙур төркөм яҙыусылар, артистар, министрҙар килгәйне. Ишембайҙан һуң яҙыусының тыуған ауылы Ҡолғонаға барыуыбыҙ, бындағы ҡунаҡсыллыҡ, иҫ киткес матур тәбиғәт ғүмергә хәтерҙә ҡалды. Үҙенең етмеш йәшен Ноғман Мусин Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы булып ҡаршы алды. Октябрь аҙағында филармонияла юбилей кисәһе үтте. Ошо уҡ залда, 2006 йылдың сентябрь аҙағында, Ноғман Мусиндың 75 йәшен билдәләнек. Был осрашыуҙарҙың барыһында ла мин сығыш яһаным, оло ҡәләмдәшемде юбилейҙары менән ихлас ҡотланым. Көндәлектәремдә телмәремдең тезистарын да теркәп ҡуйғанмын. Ишембайҙағы сығышымда Ноғман Мусин ижадында юл образы аша (“Ауылым юлы”, “Өҙәрем юл кешеләре”, “Аҡ юл һиңә”, “Кеше һуҡмағы”, “Таң менән сыҡ юлдарға”) халыҡ яҙмышы, уның ҡатмарлы үҫеш юлы төрлө яҡлап асылыуы, әҙиптең әле лә юлда булыуы хаҡында әйткәйнем. Был юбилейҙарға бәйле яҙмалар радио һәм телевидение архивында һаҡланғандыр. Һәр кемдең хәтере үҙенсә ҡоролған, шулай ҙа кешеләр яҡшылыҡты иҫендә нығыраҡ һаҡлаусан.

“Хәтер шаңдауы” тигән яҙмаларҙы уҡығанда тыуған һорауҙарым күп булһа ла, барыһына ла туҡталыу оҙаҡҡа китер. Шулай ҙа тағы ла бер-икеһенә иғтибар итәйек.

Иҫтәлектәрҙәге “Башкөллө шағир Рәми Ғарипов ысын мәғәнәһендәге журналист була алманы” тигән һүҙҙәрҙе Рәми ағайҙы белеп бөтөрмәгән хәҙерге

йәштәр икеләнеүһеҙ ҡабул итергә лә мөмкин. Әммә журналист була алмаған кеше алтмышынсы йылдар аҙағында нисек итеп "Башҡортостан ҡыҙы" тигән өр-яңы журналды ойоштороуҙа, уның йүнәлешен билдәләүҙә, авторҙар туплауҙа төп көскә әйләнә алыр ине һуң?

Әлеге яҙмаларҙағы "Хәҙер ҡайһы берәүҙәр ул саҡтағы Рәмиҙе гәзит мөхәррире Ғаффан Ғафаров менән сәкәләшеп, бәхәсләшеп йәшәгән итеп күрһәтеп маташа. Йәнәһе, Рәмиҙе ҡыйыу кеше итеп күрһәтмәкселәр". Рәми Ғариповтың студент көндәлегендә: "Редактор Ғафаров уларҙың (шиғырҙарҙың – **Р.Б.**) ҡайһы бер урындары менән килешмәне. Бер төндә беҙ уның менән оҙаҡ бәхәсләшеп ултырҙыҡ", – тип яҙылған. Бындай бәхәс – ижад һәм матбуғат донъяһында бик тәбиғи хәл. Әммә ниндәйҙер сәкәләшеү тураһында бер ни ҙә әйтелмәгән. Ғафаров был һөйләшеүҙә: "Шулай ҙа үҙ һүҙлерәк һин, ҡустым. Бының яҡшыға илтмәүе бар",– тигән ололарса кәңәшен әйткән икән, тимәк, мөнәсәбәттәре бер ҙә киҫкен булмаған.

Рәми Ғарипов үҙен ҡыйыу кеше итеп күрһәтеүҙәргә һис кенә лә мохтаж түгел. Уның һүҙенең үткерлеген, ҡараштарының ҡыйыулығын ижады һәм тормош юлы бик күп миҫалдарҙа асыҡ раҫланы һәм раҫлай. Унан килеп, Рәми ағайҙың тормошондағы ауырлыҡтар, уның ижад юлындағы ҡаршылыҡтар хаҡында һөйләүҙе ниңә шағирҙы ҡыйырһытылған кеше итеп күрһәтергә маташыу тип бороп ебәрергә? Һәр яҙылған әҫәре матбуғатта күренгән, китаптары йыл һайын тиерлек сыҡҡан авторҙар тура һүҙе, ҡыйыу фекере өсөн бигерәк тә ғүмеренең һуңғы осоронда шиғырҙарына юлдар бикле булған Рәми ағайҙың ғазаптарын аңлап бөтөрмәҫкә лә мөмкин, әлбиттә.

Рәми Ғарипов – үҙенең ижади мәктәбен тыуҙырған, нисәмә быуын шағирҙарҙың үҫеүенә көслө йоғонто яһауын әле лә дауам иткән, киләсәктә лә дауам итәсәк оло талант, ир-азамат шәхес. Халыҡ шағиры, халыҡ яҙыусыһы исемен йөрөткән һәр кем ундай ижади мәктәп тыуҙыра алмай.

Рәми Ғарипов китаптарының һуңғы йылдарҙа йыш сығыуына, уның исеме халыҡ теленән төшмәүенә, юбилейҙарының ысын мәғәнәһендә халҡыбыҙҙың рухи байрамына әйләнеүенә ҡыуанырға, әҙәбиәтебеҙҙә ошондай күренештәрҙең йышыраҡ булыуын теләргә кәрәк.

Миңә нахаҡҡа ғәйептәр өйөп, Ноғман Мусин намыҫыма ҡара яғырлыҡ һығымталар яһай. Рәйес Түләк вафат булғандан һуң яҙылған, уның ҡырҡында Яҙыусылар союзындағы йыйында уҡылған минең шиғырымдан өҙөк килтереп, "Хәтер шаңдауы"ның авторы: "Әүәл-әүәлдән мәрхүмдәр алдындағы гонаһтарҙы кисереүҙе һорап, уның ҡәбере эргәһендә доға ҡылғандар…" – тип яҙа. Был һүҙҙәрҙең ҡот осҡос ғәҙелһеҙлеген мин генә түгел, Рәйес Түләккә ҡарата минең ихлас, ярҙамсыл мөнәсәбәтемде белгән бик күп ҡәләмдәштәрем раҫлай ала.

Ноғман Мусин Рәйес Түләк менән бер-ике осрашыуҙа аралашып ҡалһа, мин был талантлы шағир менән егерме йылдан ашыу – уның шиғырҙары "Ленинсы" газетаһында баҫылған саҡтан – ысын ижади бәйләнештә йәшәнем. Ул бәйләнештәрҙең өҙөлөп торғаны, ниндәйҙер ҡаршылыҡтар тыуҙырғаны булманы.

Оҙаҡ йылдар Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһында етәксе булған дәүерҙә миңә байтаҡ йәш шағирҙарҙың тәүге йыйынтыҡтарын тикшереүҙә фекерҙәремде әйтергә, рәйеслек иткән осорҙа республиканың районларында һәм ҡалаларында йыш ҡына күсмә семинарҙар ойошторорға , бик күп ҡулъяҙмалар уҡып, эштәрендә ҡатнашырға насип итте. Шуға, әҙәбиәтебеҙгә ниндәй йылдарҙа ниндәй һәләттәр килгәнен, бигерәк тә шағирҙарҙың быуынға быуын үрелеп үҫешен яҡшы беләм, тип һис тә кәпәренмәйенсә әйтә алам. Һанай башлаһаң, тиҫтәләрсә сағыу-сағыу исемдәрҙе атарға мөмкин.

Әле уҙған быуатта – 1992 йылда – "Заман ағышы, шиғри быуындар яҙмышы" тигән ҙур күләмле мәҡәлә яҙғайным. Төрлө йылдарҙағы шиғриәт үҫешендә

ниндәй көстәрҙең ижадҡа нисек килеүе хаҡындағы был ентекле күҙәтеүҙәремде ҡыҙыҡһыныусылар табып уҡый ала. Шулай ҙа был хеҙмәттең бер абзацын ғына бында килтереп үтәйем: “1986 йылдың башында уҙғарылған ижади йәштәр конференцияһында бер юлы алты шағирҙың ҡулъяҙмаһы нәшриәткә тәҡдим ителде. Беҙҙең шиғриәт тарихында бындай хәлдең булғаны юҡ ине. Рәмил Дәүләтҡолов, Рәйес Түләков, Рафиға Усманова, Зөһрә Кашапова, Финат Шакирйәнов, Әхмәр Үтәбаевтың һәр береһенең тәүге йыйынтығында һәйбәт табыштар менән бергә йомшаҡ шиғырҙар ҙа байтаҡ ине. Әммә уларҙа потенциаль көс һәйбәт төҫмөрләнә ине, һәм күбеһендә ошо көс тиҙ арала асылды. Ҡулъяҙмаларҙың ошолай бер юлы күпләп хупланыуы йәштәр шиғриәтендәге һәйбәт үҙгәрештәрҙең, йәнләнеүҙең һөҙөмтәһе икәнлеген артабанғы үҫеш юлы үҙе күрһәтте”.

Бер юлы алты йәш шағирҙың ҡулъяҙмаһын нәшриәткә тәҡдим итеүгә ҡаршы сығыусылар, мине артыҡ хушкүңеллелектә ғәйепләүселәр ҙә булды. Шул саҡта уртаҡ ыңғай ҡарарға килеү өсөн тырышҡанымды хәҙер ҡыуанып та, ғорурланып та иҫкә алам.

Рәйес Түләктең шиғри оҫталығының, фекер ҡыйыулығының әҫәрҙән әҫәргә үҫә барыуына һәр саҡ шатланып йәшәнем. Уның төрлө редакцияларҙағы эш урындарында ҡатмарлы хәлдәр килеп сыҡҡанда ихлас ярҙам иткән саҡтарым да аҙ булманы. Уның зыяраты эргәһендә берәй көн доға ҡылырға тура килһә, ул доға Рәйес Түләкте юҡһыныуым, оло талантына ихтирамым буласаҡ.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе вазифаһында эшләгән йылдарымда беҙҙең дүрт съезыбыҙ булып үтте. Шуларҙың береһе хаҡында Ноғман Мусин “Съезда әҙәбиәтебеҙ, һуңғы ваҡыттарҙа унда килеп тыуған проблемалар тураһында фекер алышыу булманы тиерлек” тигән һығымта яһай. Мин дүрт съезыбыҙға бер генә юлы ла башҡа кеше тарафынан яҙылмаған (етәкселәргә доклад эшләп биреү – ғәҙәти күренеш) дүрт ҙур доклад әҙерләнем, унда әҙәби күренештәребеҙҙе ентекле анализларға тырыштым. Һәр съезда ҡатнашыусылар докладтарымды, беҙҙең мөхиттә өр-яңы күренеш тип, бик юғары баһалай торғайны. Ошо съезда ла рәйеслеккә яңынан бер тауыштан һайланыуым да минең эшемә ҡәләмдәштәремдең һәйбәт мөнәсәбәтен раҫлай.

2009 йылда, Башҡортостан Яҙыусылар союзының 75 йыллығына арнап(беҙ уны илдә иң беренсе булып үткәрҙек), “Ил яҙмышы – заман һулышы” тигән фундаменталь хеҙмәт әҙерләп сығарҙыҡ. Уның иң ҙур өлөшөн хәҙерге заман әҙәбиәтен сағылдырған материалдар алған. Шулар эсендә минең өс докладым бар. Был китап менән танышҡанда уҡыусыларыбыҙ әҙәби хәрәкәттең асылын үҙҙәре күрерҙәр, ғәҙел һығымталар яһарҙар, тип уйлайым.

Башҡортостан яҙыусыларының быйыл апрель айында үткән XV съезында сығыш яһап, Президент Рөстәм Зәки улы Хәмитов: “Әҙәбиәт – һәр халыҡтың үҙ-үҙен һаҡлаусы иң мөһим инструменты ул… Әҙәбиәте һәм уны барлыҡҡа килтергән теле күпме йәшәһә, халыҡ шул тиклем йәшәйәсәк, ә ҡыйынлыҡтарҙы ул еңәсәк”, – тигәйне. Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ ошо оло яуаплылыҡты тойоп ижад итә. Киләсәктә лә шулай буласағына иманым камил.

XV съезыбыҙҙа үҙемдең йомғаҡлау һүҙемдә ҡәләмдәштәрем менән оҙаҡ йылдар бергә эшләй алыуыма рәхмәттәр әйткәйнем, ун алты йыл – аҙ ғүмер түгел, әгәр хаталарым булһа, ғәфү итегеҙ, тигәйнем. Әле лә шул һүҙҙәремде ҡабатлайым. Ижад донъяһында бәхәстәр аша фекер асыҡлана һәм үҫә. Әммә хәҡиҡәткә тоғро ҡалыу – барыбыҙ өсөн дә зарури талап.

**30 – 31 июль, 2011 йыл.**

## «УҘҒАНДАРҘАН БАШҠА КИЛӘСӘК ЮҠ»

Дүртөйлө ҡалаһының тарихты һәм крайҙы өйрәнеү музейы 1989 йылдың 24 мартында эшләй башланы. Хәҙер ул — БР Милли музейы филиалы. Был тарихи-мәҙәни учреждение КПСС-тың Дүртөйлө район комитетының ул саҡтағы беренсе секретары Рәзил Ситдиҡ улы Мусиндың тырышлығы менән урындағы архитектор Винил Сабир улы Ахунов эшләгән проект буйынса хужалыҡ ысулы менән төҙөлдө. Төҙөлөштә район предприятиелары һәм ойошмалары, колхоздары һәм район халҡы вәкилдәре ҡатнашты.

Тәүге залдарҙың береһе «Райондың физик-географик хәле» тип атала. Унда 260-ҡа яҡын экспонат ҡуйылған. Материалдарҙа Дүртөйлө еренә ҡыҫҡаса характеристика бирелә, йыл фасылдары һүрәтләнә, был яҡтарҙа үҫкән eләк-емеш, йәшелсә муляждары, йыш осраған бөжәктәр коллекцияһы, бөтә төр ағас киҫемдәре ҡуйылған. Бөгөнгө тәбиғәт менән бер рәттән, боронғо тормош та һүрәтләнә. Палеонтологик экспонаттарҙан район ерҙәрендә табылған мөгөҙморондоң баш һөйәге, мамонт һөйәктәре, теште̣ре, һыҡҡы теште̣ре һ.б. бар.

Мәҙәниәт залында мәҙәниәт, спорт үҫеше, был яҡта көн иткән халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары тураһында бик бай материалдар тупланған. Дүртөйлө тарафтарын данға күмгән мәҙәниәт һәм фән әһелдәре залында Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең плащ-палаткаһы, сәғәте, яҙыу ҡара һауыты, бөйөк шәхес, башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич китаптары, күренекле татар шағиры Зыя Мансурҙың яҙыу машинкаһы һ.б. экспонаттар урын алған.

1991 йылда музейҙың икенсе ҡатында тәбиғәт залы эшләй башланы. Уның артҡы планында — ошо яҡ тәбиғәтенең киң панорамаһы. Унда төрлө үҫемлектәр һәм ағастар күренә. Экспозицияла ҡарлы урман эсендә «йүгерешкән» ҡабандар бар, өңөнән бурһыҡ «ҡарап тора», ағас төбөндә төлкө тейенде «һағалай», үләндәр араһында һыу ҡоштары ултыра.

Башҡорт һәм татар халыҡтары этнографияһы залында XIX — XX быуаттағы Дүртөйлө һүрәтләнә. Ҙурайтып эшләнгән фотоһүрәт күсермәһенән аҡрын ғына реаль өй һәм ихата макетына күсәһең. Йорт түбәһе ҡабыҡ менән ябылған. Ағастан буралған өй эсендә һике, мейес, һауыт-һаба, eләк йыйыу өсөн тырыз, ҡулдан һуғылған киндер таҫтамал, йәймә һәм башҡа предметтар бар. Ихатала боронғо арба, кәзә һыны, баҫыу эштәре ҡоралдары урынлашҡан.

Артабан — күп быуын кешеләренең ижади хеҙмәте һалынған милли кейемдәр залы. Шунда уҡ туҡыу станоктары һ.б. ҡорамалдар ҙа ҡуйылған.

Христиандар көнкүреше залында иконалар, иҫке славян телендәге Евангелие, сиркәү календары, тәреләр, Иисус Христостың йөҙө сағылған Пасха йомортҡаһы бар. Был йомортҡаны район кешеләренең береһе байрам иртәһендә аҙбарҙа тауыҡ ояһынан ала.

Дүртөйлө ауылына нигеҙ һалған Трапезниковтар, Дьяконовтар, Чистяковтар, Зубиловтар, Хлестовтар, Маурцевтар, Щекотовтар һ.б. менән сауҙагәрҙәр залында танышырға мөмкин. Зал уҙған быуаттарҙа төшөрөлгән фотоларға һәм шул замандарҙан ҡалған экспонаттарға бай. Улар араһында — төрлө самауырҙар, лампалар, үрелгән изделиелар, 1990 йылда Әңгәсәк ауылында табылған көмөш тәңкәләр, йомшаҡ мебель, «Зингер» тегеү машиналары, патефон һ.б. экспонаттар ҙа күҙгә ташлана.

Революция һәм Граждандар һуғышын сағылдырған залда легендар «Зюйд» пароходы рубкаһының макеты ҡуйылған. Унан алдағы ҙур фотола Ағиҙел яры күренә. Залда шул замандағы мылтыҡ, ҡылыстар, пушка гильзалары бар. Революцияны яҡлап ошо яҡтарҙа һуғышҡан Чеверев отряды тураһында материалдар тупланған.

Бөйөк Ватан һуғышына арналған залда яҡташыбыҙ, Советтар Союзы Геройы Василий Горшковҡа бағышланған панорама бик матур эшләнгән. Ул, ысынлап та, һуғыш яланын хәтерләтә. Түрҙә Ватанын ҡурсалап һәләк булған дүртөйлөләрҙең исемлеге эленгән.

Музейҙа археология залы ла эшләй. Һуғыштан һуңғы йылдар тулы ғына күҙ алдына баҫтырыла. Колхоздарҙың беренсе рәйестәренә, район етәкселәренә арналған экспонаттар ҙа бай. Музей хеҙмәткәрҙәре тырышлығы менән районның һәр предприятиеһы һәм ойошмаһы үҫеш тарихынан фотолар менән альбомдар әҙерләп тапшырҙы.

Экспозиция залдары менән бер рәттән күргәҙмә залдары ла эшләй. Унда балалар ижады, башҡа ҡалаларҙан килгән төрлө күргәҙмәләр үткәрелеп тора. Музейҙы ойоштороуға һәм экспонаттар туплауға учреждениеның беренсе директоры, бөгөн дә шул вазифала әүҙем эшләүсе Римма Бәҙәүи ҡыҙы Имамова ҙур көс һалды. «Уҙғандарҙан башҡа киләсәк юҡ», —ти ул.

Музей хеҙмәткәрҙәре Башҡортостан, тирә-яҡ республикалар һәм өлкәләр ауылдарына экспедицияларға сыға, тарихи әҙәбиәтте өйрәнә. Учреждение фондында бөгөн 15 меңдән ашыу экспонат иҫәпләнә. Бында мәҙәни-ағартыу эше лә киң йәйелдерелгән. Экскурсиялар, осрашыуҙар, башҡа бик күп саралар ойошторолоп тора. Музей залдарын йыл һайын яҡынса 15 — 20 мең кеше ҡарай.

**Илдус ТИМЕРХАНОВ әҙерләне.**
**Дүртөйлө ҡалаһы.**

***

Ҡырмыҫҡалы халҡы һәм йәмәғәтселеге башҡорт мәғрифәте һәм мәҙәниәтендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған мәшһүр яҡташы, мәғрифәтсе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың тыуыуына 170 йыл тулыуҙы киң билдәләне. Районға Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, академик Ғайса Хөсәйенов, профессорҙар Тимерғәле Килмөхәмәтов, Ғиниәт Ҡунафин, шағирҙар Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Рәмил Йәнбәк, Милли әҙәбиәт музейының генераль директоры Гөлдәр Моратова, Ҡырмыҫҡалы яҡташтар ойошмаһы рәйесе, „Тамаша“ журналының баш мөхәррире Фәнил Ҡоҙаҡаев, БДУ доценты Фәнзил Санъяров һәм башҡа ғалимдар, журналистар килгәйне. Ҡунаҡтар бөйөк мәғрифәтсенең тыуған ауылы Ибраһимдағы музей ҡаршыһында М. Өмөтбаевҡа бронза һәйкәл асыуҙа ҡатнашты, ҡәберенә сәскәләр һалды.

Район хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов ауыл клубында М. Өмөтбаев исемендәге премияның яңы лауреаттарына – БДУ профессоры Ғ. Ҡунафинға, Шәрипҡол ауылы клубының художество етәксеһе Г. Моратоваға, М. Өмөтбаевтың рухи мираҫын туплауҙа һәм пропагандалауҙа бихисап эш башҡарыусы Р. Өмөтбаевҡа премиялар тапшырҙы. Район мәҙәниәт һарайында ойоштолған „Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев уҡыуҙары“ ла бик фәһемле һәм тәрән йөкмәткеле булды. Саралар сәхнә оҫталарының концерт номерҙары менән үрелеп барҙы.

***

Дүртөйлөлә барлыҡ әҙәби саралар ҙа Шәйехзада Бабичтың тыуған ауылы Әсәндән башлана... Өфөнән килгән халыҡ шағиры Марат Кәримовты, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаттары Ҡәҙим Аралбай менән Ирек Кинйәбулатовты, шулай уҡ Ҡазан ҡунаҡтарын – Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллинды, Ғабдулла Туҡай исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәдиф Ғаташты Дүртөйлө районы хакимиәте башлығы Ринат Хәйруллин ҡабул итте һәм район хеҙмәтсәндәренең ауыл хужалығы һәм мәҙәниәт өлкәһендәге ҡаҙаныштары, уҡыусыларҙың әҙәбиәткә булған яҡын мөнәсәбәте хаҡында һөйләне.

Шағирҙар Әсән ауылындағы Ш. Бабич һәйкәленә сәскәләр һалды, мәктәп уҡыусылары, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр менән әңгәмә ҡорҙо. Артабан осрашыу Дүртөйлө ҡалаһының Назар Нәжми исемендәге башҡорт гимназияһында дауам итте. Район үҙәк китапханаһында Ҡазанда Роберт Миңнуллин әҙерләп сығарған „Назар Нәжми. Милли йәнем“ китабының исем туйы уҙғарылды.

***

Ишембай ҡалаһы мәҙәниәт һарайында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ноғман Мусиндың 80 йәшен билдәләү оло байрам төҫөн алды. Яҡташтары исеменән юбилярҙы район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гүзәл Шаһиева ихлас ҡотланы һәм уға толпар йүгәнен тотторҙо.

Мәғариф министры Әлфис Ғаязов, Башҡортостан Республикаһы Президентының Указын уҡып ишеттергәс, юбиляр күкрәгенә „Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн“ орденын таҡты. Юбилярҙы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, әҙиптәр Рәшит Шәкүр, Хәсән Назар,

Барый Ноғоманов, Әнисә Таһирова, академик-офтальмолог Марат Аҙнабаев, шулай уҡ гәзит-журналдарҙың баш мөхәррирҙәре Әмир Әминев („Ағиҙел“), Фәрит Әхмәҙиев („Ватандаш“), Салауат Кәримов („Башҡортостан уҡытыусыһы“), Әхмәр Үтәбай („Киске Өфө“ гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары) һ.б. тәбрикләне.

Кисәне Альберт Шаһиев, Ғәзим Ильясов кеүек сәнғәт оҫталары, урындағы таланттар ҙа биҙәне. Һуңынан хөрмәтле юбиляр әҙәбиәт һөйөүселәр менән үҙенең фәһемле уйланыуҙары менән уртаҡлашты.

Ноғман Мусиндың тыуған ауылы Ҡолғонала иһә ҡунаҡтар әҙиптең ижад йорто менән танышты, әҙәби-музыкаль кисәлә „Китап“ нәшриәте директоры Зөфәр Тимербулатов юбилярға һайланма әҫәрҙәренең яңы томын тапшырҙы. Халыҡ яҙыусыһын шулай уҡ Учалы, Ғафури, Бөрйән яҡтарынан килгән вәкилдәр ҡотланы. Ошо уҡ көндө Кирәй-ҡыпсаҡ ырыуының ойоштороу йыйыны уҙҙы, унда „Урал“ халыҡ үҙәге исеменән Риф Иҫәнов, кирәй(т)-гәрә этногенезы хаҡында фәнни хеҙмәт яҙған йәш тарихсы Юлдаш Йосопов сығыш яһаны. Кирәйҙәрҙең ҡор башлығы итеп яҙыусы Сабир Шәрипов, аҡһаҡалдар ҡоро башлығы итеп Ноғман Мусин һайланды.

***

Башҡортостандың Милли әҙәбиәт музейы М. Ғафуриҙың йорт-музейында С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күренекле шағир Ҡәҙим Аралбайға 70 йәш тулыуға арналған әҙәби кисә уҙғарҙы.

Юбилярҙы ҡотлап Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, БДУ профессоры Тимерғәле Килмөхәмәтов, шағир Ирек Кинйәбулатов, яҙыусылар Ринат Камал, Мөҙәрис Мөсифуллин, йәмәғәтселек вәкилдәре сығыш яһаны.

БДУ-ның „Шоңҡар“ әҙәби түңәрәге ағзалары, Ф. Мостафина исемендәге 20-се гимназия уҡыусылары, уҡытыусылары ҡатнашҡан осрашыуҙы Милли әҙәбиәт музейы генераль директоры Гөлдәр Моратова алып барҙы. Сараны халыҡ йырсыһы Тәнзилә Үҙәнбаева башҡарыуында юбиляр һүҙҙәренә яҙылған йырҙар биҙәне.

***

Ырымбур өлкәһе Медногорск ҡалаһында йәшәүсе шағир һәм уҡытыусы Риф Дауытҡа 70 йәш тулды. Ошо айҡанлы ҡаланың мәҙәниәт һарайында уның ижад кисәһе үткәрелде. Байрамды урындағы башҡорт ҡоролтайы ағзалары ойошторҙо (рәйесе – Мансур Ҡыуатов).

Кисәгә Өфөнән шағирҙар Тойғон менән Рәмил Йәнбәк, Ырымбур ҡалаһынан Нәфисә Смаҡова менән Дауыт Амангилдин барғайны. Ҡунаҡтар Риф Дауыттың ижады хаҡында фекер уртаҡлашты, уға ихлас ҡотлауҙарын еткерҙе, үҙҙәренең шиғырҙарын уҡыны. Байрамда ҡатнашыусылар шулай уҡ юбилярҙы „Китап“ нәшриәтендә сыҡҡан „Әле генә яҙ ине...“ исемле шиғри йыйынтығы менән тәбрикләне.

Башҡортостан вәкилдәре Риф Дауытҡа Рәсәй Федерацияһы Әҙәби фонды Башҡортостан бүлексәһенең бүләген һәм „Ағиҙел“ журналы редакцияһының Маҡтау грамотаһын тапшырҙы, мәҙәниәт һарайына китаптар, журналдар, календарҙар бүләк итте.

***

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан „Китап“ нәшриәте директоры, философия фәндәре кандидаты, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин һәм З. Биишева исемендәге премиялар лауреаты Зөфәр Тимербулатовҡа 60 йәш тулыу айҡанлы Өфө полиграфия комбинатының ҙур залында тантана уҙҙы. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың Секретариат етәксеһе Зөфәр Еникеев, Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың комитет рәйесе, халыҡ шағиры Рауил Бикбаев, Республика Хөкүмәте баш белгесе Рәйлә Вахитова, Элемтә һәм киң коммуникациялар министры Борис Мелкоедов, Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Азамат Юлдашбаев, Журналистар союзы идараһы рәйесе Артур Дәүләтбәков, Татарстан китап нәшриәте директоры Дамир Шакиров һәм йәмәғәтселек вәкилдәре, гәзит-журналдар мөхәррирҙәре, ҡәләмдәштәре, хеҙмәттәштәре ҡатнашҡан сарала юбилярға ҡотлауҙар, рәхмәттәр әйтелде.

***

„Башҡорт энциклопедияһы“ ғилми нәшриәте, Рәсәй Балалар фонды Башҡортостан бүлексәһе Ә. Вәлиди исемендәге Милли китапхана менән берлектә „Балаларға китап бүләк ит“ марафоны ойошторҙо. Өфөнөң „Белем“ китап магазинында башланған был сарала республика ваҡытлы матбуғаты вәкилдәре әүҙем ҡатнашты. „Ағиҙел“ редакцияһынан Фәнил Күзбәков журнал исеменән Балалар фондына китаптар бүләк итте.

***

Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, ағас ҡурайҙы уйлап табыусы – башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын эшләүсе күренекле оҫта Вәкил Шакир улы Шөғәйеповҡа август аҙағында 75 йәш тулды. Байрам саралары Салауат районы үҙәге Малаяҙҙағы Салауат Юлаев музейында „Серле ҡурай, моңло ҡурай“ тигән күргәҙмәне ҡарау менән башланды. Бында ағас ҡурайҙы етештереүҙә ҡулланылған эш ҡорамалдары һәм материалдар ҙа ҡуйылғайны. Бер үк ваҡытта район мәҙәниәт йорто фойеһында „Дан һиңә, ҡурай!“ тип исемләнгән китап күргәҙмәһе ойошторолдо. Ошонда уҡ Зәйтүнә Ханова әҙерләп, Малаяҙҙа нәшер ителгән „Башҡорт Страдиварийы“ тип аталған китаптың презентацияһы үткәрелде. Унда Вәкил Шөғәйеповтың ижади эшмәкәрлегенә арналған мәҡәләләр, интервьюлар һ.б. төрлө материалдар тупланған.

Юбилярҙы ҡотларға йыйылған халыҡ ҡурайсыларҙың Вәкил Шөғәйепов исемендәге беренсе зона конкурсын айырыуса ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршы алды. Конкурста Өфөнән, республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш төбәгенән килгән ун алты йәшкә тиклемге, ун алты йәштән өлкәндәр һәм профессиональ музыканттар ҡатнашты. Салауаттар был конкурсты киләсәктә традицияға әйләндерергә ниәтләнеүҙәрен белдерҙе. Юбилярҙы район башлығы Ғәли Хәйретдинов, Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты исеменән яҙыусы һәм ғалим Рәшит Шәкүр, оҫтаның яҡташтары – Әлкә ауыл Советы, райондың йәмәғәт ойошмалары етәкселәре ҡотлап сығыш яһаны.

***

Донъя-ара ТӨРКСОЙ ойошмаһы, Төркиә Республикаһы премьер-министры аппараты янындағы үҫеш һәм хеҙмәттәшлек буйынса төрөк идаралығы, Ялованың мэрияһы Евразия Яҙыусылар союзы менән берлектә Ялова ҡалаһының Раиф Динчкок исемендәге мәҙәни үҙәгендә II Донъя-ара төрки телле тәржемәселәр симпозиумын уҙғарҙы. Сарала Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Төркиә, Төркмәнстан, Үзбәкстан, Украина, Ғағауыз, Башҡортостан (РФ), Татарстан (РФ), Яҡутстан (РФ) тәржемәселәре һәм шағирҙары ҡатнашты.

Симпозиумды асыу тантанаһында ТӨРКСОЙ ойошмаһының генераль секретары Дюсен Касеинов, Ялова ҡалаһының губернатор урынбаҫары Саим Эскироглу, Ялова мэры Яҡуп Бильгин Кочал, Ҡарҡаралы ҡалаһы мэрияһының (Ҡаҙағстан) вәкиле Раушан Жылтыбаева, Евразияның Яҙыусылар союзы рәйесе Яҡуп Делиомероглу һәм Ялова университеты ректоры Ниязи Эруслу рәсми тәбрикләү менән сығыш яһаны.

Дюсен Касеинов, төрки шиғриәтенең үҫешендә Ҡасым Аманжоловтың ролен баһалап, тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы шағирҙың тыуған яғы Ҡаҙағстанда үткәрелгән оло байрам тураһында бәйән итте. Сығышы аҙағында генераль секретарь сараны уҙғарыуға һәм әҙиптең ижадын популярлаштырыуға көс һалған симпозиум ҡатнашыусыларына „Ҡасым Аманжоловҡа 100 йыл“ тип яҙылған иҫтәлекле миҙалдар тапшырҙы.

Рәсми сығыштарҙан һуң төрлө ил вәкилдәре Ҡасым Аманжоловтың шиғырҙарын һәм шағир иҫтәлегенә бағышлауҙарын үҙ телдәрендә уҡып ишеттерҙе. Башҡортостандан симпозиумда фән кандидаттары Ғәйнислам Ибраһимов, Гөлназ Йәғәфәрова, Фәйрүзә Ғарипова, шағирә Лилиә Ҡәйепова ҡатнашты.